Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 1


# АҒИҘЕЛ

Өфө,
ноябрь
2008

11 (1028)


ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ

ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ


Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республика ы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Тамара Ғәниева, Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррирҙәре),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Зилә Йәнбәкова, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республика ының Матбуғат әм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды әм биттәргә алынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.11. 2008. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитура ы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 5 570 экз. атыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0227.08.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакция ы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http:// www. jurnal-agidel. narod.ru.

---

Баҫма Матбуғат әм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республика ының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятие ында баҫылды.
(450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2008 (11, 1028)

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 3

# БЫЛ ҺАНДА: №11

ШИҒРИӘТ

**Рауил Бикбаев.** “Боҙҙарҙа туң да утта беш, имеш...”
Шиғырҙар. ....5
**Тамара Ғәниева.** Йондоҙом. Шиғырҙар. ....16

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Йы ат Солтанов.** Коммунист. Роман-хроника. Башы. ....23

"АҒИҘЕЛ"ДӘ –"КАЗАН УТЛАРЫ"

**Рауил Фәйзуллин.** Рухи йылъяҙма. ....60
**Гәрәй Рәхим.** Илкәйем. Шиғырҙар. ....66
**Рәзил Вәлиев**.“Илай-илай, уғыша- уғыша ерҙә...”
Шиғырҙар. ....68
**Ғәзинур Морат.** Ғаләм өнө. Шиғырҙар. ....71
**Фәйрүзә Мөслимова.** Яҙ. Шиғырҙар. ....74
**Луиза Янсуар.** “Устарыма яуа август йондоҙҙары...”
Шиғырҙар. ....77
**Камил Кәримов.** Ҡом сәғәте. Роман. ....79
**Зәки Зәйнуллин.** Шахматтағы ике ат әм әйкәл-Салауат.
Хикәйә-хәтирә. ....125
**Рифә Рахман.** Сөннәтсе әбей. Хикәйә. ....128
**Рәмзиә Ғәбделхаҡова.** Китмә! Новелла. ....139

“АҒИҘЕЛ” ҠУНАҒЫ

**Гөлназ Ҡотоева.** “Ҡанымда — тыуған ер тойғо о”.
*(Талха Ғиниәтуллин менән осрашыу).* ....148

ПУБЛИЦИСТИКА

**Марат Ғафаров.** Кем ин, Тажетдин Ялсығол әл-Башҡорди? ....154
**Фуат Сөләймәнов.** Лев Толстой Кәрәлек башҡорттары
тура ында. ....157
**Роберт Байымов.** Башҡорттарҙың исламлашыу
баҫҡыстарының әҙәбиәттә сағылышы. ....163

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Салауат Әбүзәр.** Утлы шағир. ....168

ӘҘӘБИ МИРАҪ

**Зиннәт Ғәлимов.** Болоттар ара ында уғыш.
Ҡыҫҡа хикәйәләр. ....172

ЯҢЫ КИТАП СЫҠТЫ

**Мәхмүт Хужин.** Милли азатлыҡ — мәңгелек хыял. ....176
**Миңлеғәли Нәҙерғолов.** Зат-арала ғәм тарала. ....185

МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨ Ө

**Фәнис Янышев.** Белем нуры сәскән йорт. ....187

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 4

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Р. Бикбаев, Т. Ганиева** *(стихи)*.

ПРОЗА

**З. Султанов.** Коммунист *(роман)*. Начало.

*У нас в гостях – "Казан утлары"*

**Р. Файзуллин.** Летопись духовности.
**Гарей Рахим, Р. Валиев, Газинур Мурат, Ф. Муслимова, Луиза Янсуар** *(стихи);* **Камил Каримов.** Песочные часы *(роман)*; **З. Зайнуллин**. Шахматы и памятник Салавату (рассказ-воспоминание); **Рифа Рахман.** Бабка-целительница *(рассказ)*. **Р. Габделхакова.** Не уходи! *(новелла)*.

ГОСТЬ "АГИДЕЛИ"

**Г. Кутуева.** "В душе – чувство родины".
*Встреча с писателем Т. Генатулиным.*

ПУБЛИЦИСТИКА

**М. Гафаров.** Кто ты, Тажетдин Ялчыгул аль-Башкурди?.
**Ф. Сулейманов**. Лев Толстой о Караликских башкирах.
**Р. Баимов.** Отражение исламизации башкир в литературе.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Салават Абузар.** Огненное сердце.

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**З. Галимов** *(рассказы-миниатюры)*.

ВЫШЛА НОВАЯ КНИГА

**М. Хужин.** Вечная мечта – независимость.
**М. Надергулов.** Учение – свет.

МУЗЕИ – ЗЕРКАЛО КУЛЬТУРЫ

**Ф. Янышев.** Светлый дом.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары әм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Шиғриәт әм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтер – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай әм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күр әтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етеш еҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 5





## Рауил
## БИКБАЕВ

***

*Боҙҙарҙа туң да утта беш, имеш,*
*Етмешкә килеп етмешмен, имеш.*
*Ваҡыт, эйәрҙән төш, тимеш, имеш,*
*Үҙем аман да еңмешмен, имеш,*
*әр көн — саф алтын, төн — көмөш, имеш,*
*Үткән ғүмерҙәр тик бер төш, имеш.*

***

*Бынау ҡырыҫ донъяларҙан башҡа*
*Бар ине бит бер ил — хайран ил!*
*Ҡанундары бүтән ул төйәгем*
*Был донъяма булды параллель.*

*Ул параллель илгә хыянат — ят,*
*Юҡ ыҙғыштар унда, юҡ мәкер.*
*Ҡыуаныстар унда тик ихластыр,*
*Теләктәр тик изге теләктер.*

*Сәхрә ендә якты тирмәләргә*
*Ҡара уйлы бер кем кермәҫлек,*
*Ҡурайҙарын көнсөл тыңламаҫлыҡ,*
*Емештәрен атлыҡ тирмәҫлек.*

*Иман ыҙҙар йәнде рәнйеткәндә,*
*Яньял ярған сакта ҡолаҡты,*

---

*Рауил Бикбаев — Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе, Башҡортостан Республика ы Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 6



*Талағанда ҡоторған эт өйөрө,*
*Шул донъяға күпме олаҡтым.*

*Рәхим белмәç ыҙғыш буранында*
*Аҙмы булды көнөм ҡараңғы.*
*Шул параллель илдең шифалары*
*ауыктырҙы ымаҡ ярамды.*

*А , ҡайҙарҙа ҡалды*
*Шул донъяла*
*Йәнемә ял тапкан саҡтарым?..*
*Үткәрмәçкә ҡабат*

*Хайран донъя*
*Минең алда биклəй ҡапка ын.*

*Киçешәме шулай параллелдәр,*
*Яҙмыштарҙан ҡалыр кем ҡасып?*
*Был донъялар хәҙер яп-яланғас,*
*Был донъялар хәҙер ап-асыҡ.*

*Был ғүмерҙең хәҙер йылы түгел,*
*Сәғәтенә тиклем сикләнгән.*
*ыҙырып ала ал ыу хыялдарҙан,*
*Арындыра юҡ-бар шиктәрҙән.*

*Миңә насип хәҙер ҡырыç донъям —*
*Үҙе хайран, үҙе вайран ил.*
*Үҙе йәнде арбап айрар ил дә*
*Үҙе ҡылыс итеп ҡайрар ил.*

***

*Үçентеләр ата ҡатын-ҡыҙҙар,*
*Үçентеләр ер еҙ ереккән.*
*әр бере е:*
*— Мине, мине ал!— тип*
*Атлығалар кеүек иреккә.*

*улый яҙып,*
*Саҡ-саҡ улыш алып,*
*Әйтә кеүек:*
*— Ауыр хәлебеҙ.*
*Ҡасан ғына, ҡасан ғына етер*
*Ергә тамыр йәйер мәлебеҙ.*

*Киттек бергә!*
*Илтәм еҙҙе ергә,*
*Тупраҡ утын ур ын тамырҙар.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd  14.04.2009  0:25  Page 7



*Ҡыҙынығыҙ ҡояш эҫе ендә,*
*Ҡойоноғоҙ шифа ямғырҙа.*
*Ҡанырмы ни тан ыҡ*
*Был донъяла,*
*Күпме ула аң да иҫ китеп.*
*Мин үҙем дә — хас та еҙҙең ымаҡ*
*Ерҙе өйөп туймаҫ үҫенте.*

*Иркәләнер саҡтар елеп үтер,*
*арыларға алып, етер көҙ.*

*Беребеҙ ҙә ерҙән китмәҫбеҙ шул,*
*Бөтәбеҙ ҙә ергә китербеҙ.*

## Ҡышҡы йәйғор

*Үҙәккә үтә ыҙғыр ел,*
*Далам бушлығы ап-аҡ.*
*Был ниндәй яңы тамаша:*
*Ҡыш көнө йәйғор ҡалҡҡан!*

*Йылы йәй нуры бит йәйғор,*
*Туңалыр был ыуыҡта.*
*ынды, ынды туңған дуға,*
*Күңелем өшөп ыҡтай.*

*Ҡышҡы балҡыштың эҙҙәрен*
*Күктән юйып, иҫә ел.*
*Мин — туңған далам күгендә*
*ынған йәйғор киҫәге.*

## Башҡорт йорто, башҡорт китабы

*Алҡымынан золом алғанда ла*
*Китаплы йорт ҡотло юл табыр.*
*Күпме янғындарҙа бергә янған,*
*Хаҡ яҙмышын бергә аҡлап ҡалған*
*Башҡорт йорто, башҡорт китабы.*

*Йотмаҡ булып йырлы башҡорт йортон,*
*Быумаҡ булып башҡорт ауылын,*
*Ябырылмаҫ, тимә, ғәрәсәте,*
*Йолҡколамаҫ, тимә, дауылы.*

*Ҡара көндәрҙә лә изге китап*
*Аҡ нур бөрккән халҡым йортона.*
*Китабының бите йыртылғанда*
*Милләттең дә бите йыртыла.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 8



*Яуыҙлыҡтар нәҫел-затыбыҙҙы*
*Ил еҙ итәм ти ә,*
*Тел еҙ итер,*
*Әлифба ыҙ итер сабыйҙы.*
*Йәме бул ын башҡорт китаптары*
*Башҡорт бишек элгән әр өйҙөң.*

*Китабында яңы биттәр арт а,*
*Башҡорт йорто нығыраҡ яктырыр.*
*Тик шул саҡта ғына*
*Башҡорт илен*
*Киләсәге алға саҡырыр.*

## Балауыҙ эт

*Эт йылында, ҡотлап, дуҫым*
*Балауыҙ эт бүләк итте.*
*Эт йылым да янып бөттө,*
*Балауыҙ эт тора бөтөн.*

***

Мостай Кәримгә

*Яҡты донъяларҙан күсте йәнең,*
*Йылы яҡҡа күскән саҡта ҡоштар.*
*Улҡайынан яҙған әсә кеүек,*
*Башын эйҙе ғорур Башҡортостан.*

*Кем уйлаған, уңғы күреүең, тип,*
*Алтын көҙҙөң алтын балҡыштарын?*
*Был балҡышта — инең йылмайыуың,*
*Был балҡышта — инең ағыштарың.*

*Башҡортостан данын, ерем йәмен,*
*Азамат ир намыҫын, ил хәстәрен*
*Быуындарҙан быуындарға өйләр*
*Уй-хистәрең, бөйөк Мостай Кәрим.*
*Исемең тауҙар-быуаттарҙы ашыр,*
*ин бар замандарҙың замандашы!*

*индәй ирҙәр мең йылға бер тыуа,*
*Шуға мең йыл йәшәр Мостай Кәрим.*

***

Рәшит Иҙрисовҡа

*Арыттырҙы юлдар.*
*Дала еле*
*Арымаған иҫеп.*
*Беҙ киткәндә эҫе ҡалған ҡомдар*
*Шул көйөнсә эҙе.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 9



*Беҙ киткәндә борхоп ҡалған әрем*
*Борхой әле аман.*
*Таный микән Иләк?*
*Ҡомона баҫ аң,*
*Нығыраҡ бешә табан.*
*Ярты быуат үткән.*
*Беҙ ҙә бүтән.*
*Аҡбулаҡ та бүтән.*
*Өйөр булып бынан киткәйнек бит,*
*Килдек бары икәү.*

*Әл дә икәү…*
*Япа-яңғыҙ ҡалған,*

*Нисек килер икән?*
*Килер микән?..*

## ***Көн менән төн***

*Тәңре беҙгә*
*Якты көндәр биргән:*

*Донъяларҙы байҡап,*
*Ҡал аңлап.*

*Көн етмә ә,*
*Серле төнгә сорнай,*
*Уйланырға төндәр тын, аулаҡ.*

*Ҡайҙа уйланыу, ти!*
*Көн тыуғанда*
*Кемгә аунау, кемгә сабыуҙар…*

*Әллә ауҙар,*
*Әллә ауырыуҙар…*

*Күккә ҡарарға ла*
*Ваҡыт тапмай,*
*Ҡара төнгә тағы ауыуҙар.*

## ***Туҡсоран***

(Йыр)

*Туҡсораным – йәйрәп яткан далам,*
*Дала кеүек асыҡ күңелдәр.*
*индә генә изге тамырҙарым,*
*Ҡанаттарым индә кирелгән.*

*Туксораным, сабый саҡтарымда*
*Сыныҡтырҙы дауыл-бураның.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 10



*Көрттәр ярҙыҡ, аман алға барҙыҡ*
*Дауыл-бураныңа уранып.*

*Туҡсораным, күпме юл ураным,*
*ағыныуым иңә осора.*
*Алыҫтарҙан тының тартып ала,*
*Тыуған ерем, ғәзиз Туҡсоран.*

## Осрашайыҡ, дуҫтарым!

*(Йыр)*

*Осрашайыҡ, осрашайыҡ,*
*Күрешәйек, дуҫтарым.*
*Беҙ күрешкәнгә донъяның*
*Кит ен, әйҙә, иҫтәре.*

*ис булмағанда — ай айын,*
*ис юғында — йыл айын.*
*Осрашайыҡ, күрешәйек,*
*Табайыҡ юлын, яйын.*

*Яҡындарым, алыҫтарым,*
*Дуҫтарым, туғандарым,*
*Күрешәйек, көтмәй генә*
*Күңелдең тулғандарын.*

*Беҙ шатланғанда донъяның*
*Кит ен әле иҫтәре.*
*Ҡулдарыбыҙ йылы саҡта*
*Күрешәйек, дуҫтарым!*

***

*Бөгөн ғәйет.*
*Унлы шәмгә*
*Ут алды ҡартатайым.*
*“Тиҙ булығыҙ!”— тип*
*Ауылды*
*Тағы урап ҡайтайым.*

*Әйтелә күпме теләктәр*
*Ҡарттар өйгә тулғанда.*
*Иҙәндә табынды урап*
*Ҡул сайҡатам.*
*ыу ҡойола*
*Еҙ таҫҡа еҙ ҡомғандан.*

*Доғаға доға үрелә*
*Тәсбихтәге төймәләй.*
*Башлана ҡорбан аштары,*
*Иттәр килә өймәләм.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 11



*Ҡартатайым мин белгәндән*
*Ҡалдырмай ҡорбан салды.*
*Намаҙлы уңғы ҡарттарға*
*Таҫтамал оноп ҡалдым.*

*Ғәйеттәр ғәйеп аналды,*
*Моңайҙы доға үрән.*
*Намаҙлы олатайҙарҙы*
*Төштә лә ирәк күрәм.*

*Төшкә инә тик шул малай,*
*Донъяны урай аман.*
*Ҡулына еҙ ҡомған тотҡан,*
*Иңенә алған таҫтамал.*

*Берәй е ҡул сайҡатыр тип,*
*Көтә лә көтә әле.*
*Тик кешеләр, бер ни күрмәй,*
*Үтәләр өтәләнеп.*

***

Виктор Казанцевҡа

*Әйләнгәндә дуҫ-серҙәшкә бажа,*
*Бөгөлмәй ең, килгәндә лә ҡаза.*

*Ниҙәр генә бергә күрелмәне,*
*Тик дуҫлыҡтан күңел үрелмәне.*

*Исемдәр ҙә ҡалмай тик бер килеш:*
*Витя — Виктор — Виктор Иванович…*

*Исем-дәрәжәләр арта ла бит,*
*Ғүмер артмай, ғүмер ҡыҫҡара шул.*
*Өҫкә илткән баҫҡыс аҫҡа тарта,*
*Табылмаҫтыр быға ис сара шул.*

*Яҙмыш кире ҡабатлан а икән:*
*Виктор Иванович — Виктор — Витя.*
*Яңынан егет булып ҡанат ҡаҡ аҡ,*
*Шунан сабый саҡка ҡайт аҡ икән.*

*Виктор Иванович!*
*Виктор!*
*Витя!*
*Етте лә бит бына мәл аҙаҡкы.*

*Табутыңа түгел, тере тәнгә*
*Ҡаға ымаҡ сүкеш әр ҡаҙаҡты.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 12



***

*Көнкүрештең ябай күренеше:*
*Әҙәм аҙаҡ белә хата ын —*
*Болғатмайса сәйен эсеп ҡуя,*
*Белмәй төптә шәкәр ятҡанын.*

*Бушҡа байыу өсөн донъяларҙы*
*Бутау ғына уйы өм өҙҙөң.*
*Ынйы ҡалмаҫ ине,*
*Ярай, ҡом оҙ*
*Аҡтаралмай төбөн диңгеҙҙең.*

***

*Был сабыр ыҙ тормош ҡайҙа саба?*
*Ҡайҙа сама? Ниндәй хәлдә лә*
*Аяғөҫтө ашын ҡаба-ҡаба*
*Ҡабалана ни тип бәндәләр?*

*Этеш-төртөш әл ерәткән кеше*
*Нимә таба? Ниңә юҡ сама?*
*Был ташҡындан саҡ-саҡ урылып сығып,*
*Туҡтап торам. Ваҡыт туҡтамай.*

*Ҡабаланып уңғы ҡабат улап*
*Донъяларҙың моңон, йәм-ҡотон,*
*ыу ындарым ҡанмай, мин туҡтармын.*
*Туҡтар Ваҡыт. Минең Ваҡытым.*

***

*Күсмә рухы нисек күсмә ен —*
*Яҙмышыма яҙған юл сәме.*

*Сәфәр өсөн тыуған хәс тә мин,*
*Нисә йылдар тәгәрмәстәмен.*

*Әйләнмәй тор әле, тәгәрмәс,*
*Юл өҙөлмәҫ, беҙ юл йөрөмәгәс.*

*Инде тынғы табам йәнгә, тим —*
*Юл ҡаршына елә йәнтәслим!*

## ***Балалыҡ хәтирә е***

*Йомаҡ ҡоя өләсәйем,*
*Әсәйем ҡоя ҡоймаҡ.*
*Ҡоймаҡты уйлап,*
*Йомаҡты*
*ис кенә лә булмай уйлап.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 13



## *Яңы йыл теләге*

*Иҫке йыл үтер. Үтмәй ҡалмаҫ ул.*
*Яңы йыл килер. Килмәй ҡалмаҫ ул.*
*Килгән бәләләр китмәй ҡалма ын.*
*Көткән шатлыҡтар килмәй ҡалма ын.*

***

*Түңәрәк күл,*
*Ыҡсым ғына ауыл*
*Машинанан күҙгә салынып китте.*
*Берәүҙең был ғәзиз төйәгелер,*
*Ә мин исемен дә белмәй үттем.*

## *Арыҫлан әйкәле янында*

*Йәшенмәгеҙ әле улай, тауҙар,*
*Аҡ буранға ҡапыл ҡапланып.*
*Аҙ бул а ла ассы йөҙөң, Асы,*
*ыпырып төшөр ҡарлы япманы.*

*Яңы йылды быйыл ҡаршы алам*
*Ир Арыҫлан тыуған төйәктә.*
*Аҙ бул а ла ассы йөҙөң, Асы,*
*Бигерәк йәмле, тиҙәр, был яҡтар.*

*Был ни хикмәт?*
*Асылып китте Асы —*
*Мөғжизәләр юҡ, тип әйт әле!*
*Бурандарҙы йыртып, алға баҫты*
*Мөбәрәков ағай әйкәле.*

*Ауылына әйкәл булып ҡарай*
*Мәш үр Мөбәрәков Арыҫлан.*
*Заманында ошо йәш бөркөттө*
*Ҡойондорған ниндәй ырыҫ-дан!*

*Терелткән дә яңынан Салауатты,*
*Яңғыратҡан батыр оранын.*
*Ике бөйөк башҡорт ҡанатында*
*Башҡорт даны донъя ураны.*

*Күкрәк кирҙе милләт ғорурлығы*
*Ҡушылғандан ике да и көс.*
*Бөйөктәрҙе хыянаттар аңдый,*
*Тоҙаҡтарын ҡора мәкер, үс.*

*Таштар яуа башҡа, дауыл бәрә,*
*Көрәштәрҙән юлдар ғибәрәт.*
*Салауаттың йәне — Арыҫланда,*

Agidel 11:Agidel 11.qxd  14.04.2009  0:25  Page 14



*Арыҫландың йәне — Салауатта,*
*Ҡуш йөрәкле булып,*
*Бәләләрҙе*
*ындырырға тейеш Мөбәрәк.*

*Асыла ла ябыла Асы күге,*
*Бер ишелеп яуа, бер туктай.*
*әйкәл әр саҡ ғорур.*
*Уның йөҙөн*
*Ҡар өшөтмәй,*
*Ҡояш йылытмай.*

*Бары ына хәҙер ҡарай сабыр,*
*Бул ын сыуаҡ, бул ын сатлама.*
*Тере саҡтарында кем атмаған,*
*Ниндәй йылан уны саҡмаған.*

*Йылан менән йылан булыуҙы ул*
*Ирлек намыҫынан кәм күргән.*
*Салауаттар менән Арыҫландар,*
*Атиллалар менән Отеллалар*
*Өйрәнмәгән хәйлә-мәкергә.*

*Ҡатмарлыраҡ икән алышыуҙар*
*Аҫтыртын көс, йәшерен яу менән.*
*Ҡайғыларҙы ҡайғы күргән еңә,*
*Таштар ауырлығын тау белә.*

*Ир яңғыҙы түҙә*
*Ҡайғылары*
*Бәғерҙәрен телгән мәлдәрҙә.*

*әйкәл үҙен саҡ-саҡ тыя ымаҡ,*
*Янда кеше юҡта ыңғырашып,*
*Сатнап ҡына китер хәлдәрҙә.*

***

*Ел иркәләп иҫә ине,*
*Күңелем аман үҫә ине,*
*Әсәйем иҫән ине.*

*Хәҙер таңғы йомшаҡ ел дә*
*Бәғерҙе киҫә инде.*

*Алтыла атай ыҙ ҡалдым,*
*Килде көн йәнде йәнсеп.*
*Әсәйем йәтим итмәне*
*Алтмыш игеҙем үткәнсе.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 15



*Өндәшә ымаҡ аман да:*
*“Балам, башың эймә”,— тип.*

*Саҡ-саҡ тыям күҙ йәшемде —*
*Етмеш йәштәге йәтим!*

***

*Көҙҙөң уңғы көр өнөүе*
*арыла ары ел булып.*

*Ҡағылғанда шул көр өнөү*
*Ҡойола япраҡ урман тулып.*

*Бәүелеп-бәүелеп яуа япраҡ,*
*Килә кисем япраҡ кисеп.*
*Килә кисем мине тағы*
*ағыштарға алыр өсөн.*

*Етмешемдең туп а ына*
*Етеп аяҡ баҫҡанымда*
*Янда булыр кешеләрҙең*
*Күпме е ер аҫтарында.*

*Йөрөр ымаҡ инең аман*
*Өҙә баҫып, ер елкетеп.*
*Өҙә тәҡдир үҙебеҙҙең*
*Үҙәктәрҙе:*
*Ниндәй заттар*
*Был ерҙәрҙән үтеп китте.*

*Ҡайҙа бергә уттар яғып,*
*Бергә ҡанат ҡаҡҡандарым,*

*Бергә батҡан, ҡалҡҡандарым?*
*Арта бара дуҫтарымдың*
*Ер өҫтөндә йөрөгәненән*
*Ер аҫтында ятҡандары.*

*Эй, яҙмыштар!*
*Кемдәр әйтер*
*Ҡасан уңғы көн үнерен?*
*Ҡыштың тәүге тынын бөркә*
*Көҙҙөң уңғы көр өнөүе.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 16





**Тамара**
**ҒӘНИЕВА**

## *Йондоҙом*

Гори, гори, моя звезда…

*Йондоҙом!*
*ин үнмә,*
*Балҡы үрҙә,*
*Күҙ йәштәрем там а битеңә,*
*Рәнйемә ис,*
*Никтер ғүмер кәмәм*
*Был арала ҡомға төртөлә.*

*Йондоҙом!*
*Беҙ тик икебеҙ белгән*
*Нурҙар менән тоғро тоташҡан.*
*ыуындым мин ниндәйерәк йәрҙән,*
*Тик айырылыр сәбәп тапҡаным юҡ*
*Нур көлтә е –*
*инең ҡосаҡтан.*

*Күктә түгел ең ин –*
*Күкрәгемдә.*
*Сәйерерәк, эйе, булмышым.*
*Тик ин генә*
*Ергә ҡаҙаҡлаған,*
*Үргә сөйгән – асыл,*
*Сер-тылсым.*

---

*Тамара Ғәниева – “Ағиҙел” журналының бүлек мөхәррире. Шиғырҙар, публицистик мәҡәләләр, драма әҫәрҙәре яҙа.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd  14.04.2009  0:25  Page 17



*Эй, йондоҙом!*
*Зи енем, күңелем ҡуҙы!*
*Яралдыҡмы әллә иртәрәк?*
*Шуға әйтәм:*
*Ғәм еҙ был донъяла*
*ин  үнмә ен өсөн –*
*Мин кәрәк.*
*Миңә и ә*
*Аҡыл юймаç өсөн*
*Саф яҡтылыҡ бөркөр –*
*ин кәрәк.*

4.07.07

## ***андал***

*Егет-елән мәрмәр аçтарында…*
*Аҡыл ултырмаçтан,*
*Тас салкан*
*Тәгәрәгән нәфсе ҡорбандары.*
*Аҡса, алтын өсөн алыштан*
*Туйып китте микән донъя ынан?..*
*Киттеләрме гона  шомлоҡтан?..*

*Ята теҙелешеп йәш бандиттар,*
*Алҡымында ҡаны ойошкан.*
*Ҡалғандарға таш  ын – терәкме?..*
*Сәсе ап-аҡ әсәләргә, тием,*
*Ул ҙурлығым  әйкәл кәрәкме?*

*Теҙелешеп ята буйҙан-буйға*
*Ирлек бурысын да аңларға*
*Өлгөрмәгән,*
*Әммә уй ыҙ башын*
*Үҙе теләп  алған  андалға.*

*Егет-елән мәрмәр аçтарында…*
*Хужалары шунда, яндарында…*
*Ихтыяры яңы буржуйҙарҙың,*
*Ирҙәр, ана, әжәл ҡамауында…*

*Бәғзе бисә илай улын юйып,*
*Бәғзеләрҙең…*
*Сик еҙ түл ҡыçтауҙан,*
*Укмашкан ҡан төйөлөп тамағына…*

1. 11.06

## ***Ашыҡтым***

*Әйттең:*
*Ашыҡма!*
*Үкенес –*
*ыҙланыуҙың иң ҙуры.*
*Ҡайҙа!*
*Мин ҡыҙғайным ул саҡ:*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 18



*ин – аҙғын ың!*
*Мин – тоғро!*

*Үҙемә ғәзиз, йәл ине*
*Инаныулы иманым.*
*Ғәрләндем,*
*Күктәр иңендә*
*Бәрелә- уғыла иланым.*

*Әйттең:*
*Ашыҡма!*
*Ашыҡтым!*
*Боҙ кисеп үрҙәр аштым.*
*Йәшендем тау аръяғына,*
*Үҙемдән, инән ҡастым.*

*Әйттең:*
*Ашыҡма!*
*Гона ҡа*
*Тиңләмә аҙашыуҙы.*
*… Тартырғамы ине үргә,*
*Үлергәме төшөп гүргә,–*
*Хәл итеп булмай шуны…*

2.02.07

## Мөгәрәп

*Мин мөгәрәп ҡаҙҙым күңелемә.*
*Күҙ-йәш,*
*Уйҙан алдым диуарын.*
*Йәшенеп көлдөм, ағышландым шунда,*
*Сәғәҙәтле булды иманым.*

*Мөгәрәптә ғәмдән яҡтым усаҡ,*
*Уй уйланым.*
*Күктең кәнсә е*
*Мөнбәрендә*
*Мин бар әле, тиеп*
*Тамға ҡуйҙым.*
*Йәнем көҫәүен*

*Берәүгә лә өйләп яҡлау табыр*
*Сарам булмағанды аңлауҙан,*
*Үҙем алған диуарымда ғына*
*Дауа таптым*
*Нахаҡ, ғәҙел еҙлек*
*Йөрәгемә ҡаҡҡан ҡаҙауҙан.*

*Окоп кеүек минең мөгәрәбем,*
*Иркен, аулаҡ, йылы,*
*Тып-тыныс.*
*Унда ҡайсаҡ берәү инеп сыға…*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 19



*Ниҙәр өйләшкәнде уның менән*
*Әйтәйемме икән?..*
*Юҡ, тыйылам!*
*Ышанмаҫтар.*
*Шуны ы ҡурҡыныс...*

13.06.08

## Төнгө уйҙар

*Утты үндер әм дә,*
*Бүлмә яҡты...*
*Стенаның орғолт экранын*
*Сәхнә тине микән?*
*Сәйер ҡоштар*
*Ҡанат ҡаға...*
*Сырамытмаҡ булып,*
*Шул кинолы оҙаҡ ҡараным.*

*Күҙҙе йомдом.*
*Йы ан киңлегенең*
*Миңә генә таныш сөңгөлөн*
*Саҡырырға?*
*Үҙемә барырғамы?*
*Ҡайырып асып табу өлгө өн?*

*Хәйер, унда минең булғаным бар...*
*Ҡағылғаным да бар ул сергә.*
*Төбәп кенә әйтмәнеләр, әммә*
*Иҫкәрттеләр:*
*Әлегә күр ҙә борол,*
*Эш етерлек*
*ин торған ерҙә.*

*...Шундай рәхәт.*
*Эңер иллегенең*
*Хакимә е лә мин, ҡоло ла.*
*Гона лы уй уйла аң да була,*
*Тәүфиҡ ора ам да улыма.*

*Гона тигәнемдән...*
*Гона микән,*
*Бер-берәүҙең төнгө иллектә*
*Яратканын хәтерләйем әле...*
*...А , был ҡараңғылыҡ –*
*Сер ҡәлғә е,*
*Алдашмаулыҡ,*
*Сәфәр – тиңлеккә.*

*...Ҡараңғыла уйҙар шундай ҡыйыу!*
*Теләни аң – ярат,*
*Күрә алма!*
*...Кош ҡанатын әйтәм экрандағы...*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 20



*Үртәү, үсәү микән?*
*Саҡырыуымы?*
*Бәндәләрҙән йәшерен*
*Үҙаңға?..*

1.07.08

## Остом!..

*Уф-ф!..*
*Остом!*
*ин ҡайҙа?*
*Күҙеңдә ике ен кинәнә.*
*Белә ең:*
*Мин – ҡәлғә.*
*Вата ың!*
*Тирәлә*
*Ярсыҡтар әйләнә...*

*Күҙеңдә,*
*Зәп-зәңгәр күҙеңдә*
*Ике нур бойора,*
*Инәлә.*
*Уф-ф!*
*Остом!*
*ин ҡайҙа?*
*Нишләргә?*
*уңдыр бит*
*Тер әкте тешләргә?*

*Бер ыуға ике рәт инмәйҙәр.*
*Шулай ҙа,*
*Шулай ҙа...*
*Көсләүгә*
*Ҡағиҙә хаҡына үҙеңде*
*Юҡ сара!*
*Юҡ сара*
*Әҙәпле түҙемде бикләргә...*

*ин хаҡлы!..*
*Юҡ, хаҡ ыҙ!..*
*Ә миңә нишләргә?*
*Нишләргә?!*
*Ҡатының инем мин бит элек.*
*Ә хәҙер?*
*иңәме –*
*өйәркә?*
*Ышанма!*
*атылмай минең тән!*
*Буй она ни бары*
*Тәкәт еҙ теләккә.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 21



*Ҡайырып яулауға ниәтме*
*Тышау ыҙ халәтен болоттоң?*
*Яула  уң!*
*Мин и ә…*
*Мин остом!*
*Мин – остом!!*
*…Тик ялын…*
*Оҙаҡмы*
*Матҡыр ың болоттоң?*

4.07.08

## ылыу, килендәр…

*Ҡәбер ҡаҙыусыға –*
*Эш тубыктан,*
*Табут оҫта ына – муйындан.*
*Йыл эсендә генә ауылыбыҙҙа*
*Дүрт ир-егет ергә  ыйынған.*

*ылыуҙарым,*
*Йәп- йәш килендәрем*
*Ҡалай көтөр икән донъя ын.*
*Эй, Раббыбыҙ!*
*Ирҙәр ҡырылып ята,*
*Ҡатын-ҡыҙың бирешеп ҡуйма ын.*

*Бармы аҡ аҡалдар,*
*Йәтимдәрҙең*
*Рухын күтәрәм, тип  үҙ әйтер?*
*Ат егергә әсә е өйрәтер ҙә,*
*Балта эшенә, трактор, техникаға,*
*Мал салырға кемдәр өйрәтер?*

*– Атайыма әйтәм! –*
*Тип  өрәнләп,*
*Кемгә  ыйыныр күңеле кителгән?*
*Нишләп халҡыбыҙ, тим, ихтыярҙан,*
*Ер өҫтөнөң ҡәҙерен белеүҙәрҙән,*
*Уйсанлыктан мәхрүм ителгән?*

*Ҡәбер ҡаҙыусыға –*
*Эш тубыктан,*
*Табут оҫта ына – муйындан.*
*Аҙан әйтер ир юҡ ауылыбыҙҙа,*
*Ҡатын-ҡыҙға был эш тыйылған.*

*Әммә тыйылмаған*
*ары таңдан,*
*Ҡара төнгә саҡлым көсәнеү.*
*Утын ярыу, тиҙәк таҙартыуҙар,*
*Яратыуға зарығып таң атыуҙар,*
*Ялан-ялан сабыу бесәнен?*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 22



*ылыуҙарым,*
*Йәп- йәш килендәрем,*
*Милләт хәсрәттәрен күтәреп,*
*Яйлап ирегән май шәмеләй арҡып,*
*Замананың күҫәгенән шаңҡып,*
*Урҡына ын сәйнәй үртәлеп.*

5.05.07

## ***Ауаз***

*Тик мин белгән ауаз!*
*Нисәнсе төн*
*Тын иллектән көтәм өн-тауышың.*
*Минең Айҙың йәшенеп аръяғына*
*Йә ыйынып көмөш балдағыма*
*Ни күҙләй ең?*
*Ғәмдәш аңлайышым?*

*Тик мин белгән ауаз!*
*Бар гона ым…*
*Ғазабым да тәрән,*
*Ҙур дәүмәлле.*
*Эйе, тоғро Айым – йән аҡсы ы,*
*Кемебеҙ, әйт, кемдең алдаҡсы ы?*
*ин бит маяҡ инең әүәле.*

*Шымтайған ың…*
*Тик бел,*
*Ай – минеке.*
*Ул да мохтаж ихлас яратыуға.*
*Тик үрелеү – үнеү түгел әле!*
*Ул рухташлыҡ, күңелдәшлек мәле.*
*ин мохтажмы шуны аңлатыуға?*

*Тик мин белгән ауаз!*
*Ҡай тарафҡа*
*Юл тоторға миңә?*
*Ишарала.*
*Йәнем тарткан юлмы?*
*Ул… ғазаплы…*
*Бер үткәйнем инде…*
*Йәнәме ни?*
*ынауҙарың сик еҙ…*
*Инша Алла…*

30.11.07



Йы ат
СОЛТАНОВ

# КОММУНИСТ

РОМАН-ХРОНИКА

## I киҫәк: Быуаттың тәүге ун йыллығында

1

Гүзәлдәрҙән гүзәл аҡмар- ыуҙың ҡандай ҡыҙыл ҡаяташлы яр башында ергә төшкән аҡкоштарҙай аҡ өйҙәре теҙелгән, урталыҡта мө абәт ямиғ[1] мәсете әм мәҙрәсә е күңелдәрҙе елкендереп ҡалҡынған сал тарихлы Сәнкем-Биктимер ауылы... алам, таҡта, ҡалай түбәләре иртәнге тос ысыҡтан дымғылтланып, таңды тәбрикләп асылған асмалы тәҙрәләре, шағор-шоғор тауышланған солан ишектәре ҡаршы тауҙарҙан ағылмыш йәйге алҡынса сафлыҡты тере йәндәрҙәй улап, йылға буйы әрәмәлегендәге ебәк елгә бәүелеүсе бихисап төрлө сәскәләрҙең, хуш еҫле күгәремдәрҙең танау ярып керер татлы аңҡышына еңелсә иҫәнгерәгән... 1908 йылдың йәмле июлененң сут-сут иткән, кәкүкләгән, саңҡылдаған, баҡаҡайлаған, сырылдаған әр төрлө ҡош-ҡорт, тәлмәрйен, сиңерткә-бөжәк, тағы әллә нисәмәлер әкәмәтйән ауаздарының боламығы эркелепме-эркелә ҡолаҡтарға. Мәғрур мәсеттең күккә энәләй сәнселгән манара суҡайында – аҫҡы донъянан өҫкө өнә яҡынлап килгән ҡояштың беренсе сатҡы ына шат ҡойонған көмөш ярымайының нәҡ осонда, төп өҙ йы андың күҙгә күренмәҫ саз ҡылына сирткәндәй, ҡыҙыл түшле бер ҡошсоҡҡай талпынып-талпынып сыңраны...

**РЕДАКЦИЯНАН**: *әр әҫәрҙең, әр китаптың – үҙ яҙмышы. Бөйөктәрҙән берәү юҡҡа ғына әйтмәгәндер: “Ҡулъяҙмалар янмай...” Әлеге әҫәр ҙә 1971 йылдың 5 февралендә Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең проза секция ында Ф.Иҫәнғолов, Ә.Мирза итов, Ә. Вахитов, Рәйес Низамов, Ш.Янбаев, А.Клюшкин, Х.Зарипов ҡатнашлығында тикшерелеп, “... эшкәрткәндән уң китап нәшриәтенә тәҡдим итергә” тигән ҡарар ҡабул ҡылын а ла, шул замандың ҡатмарлы сәйәси шарттары арҡа ында был бойомға ашмай. 1920 йылда Автономиялы Башҡорт Совет Социалистик Республика ын аҡлап ҡалыу өсөн башҡорт халҡының дә шәтле әм ҡанлы көрәшен (әйе, был ваҡиғалар ябай ғына ихтилал түгел; фетнә ун бер кантонлы ил-дәүләттең игеҙендә уттай дөрләгәнлектән, ис тә “локаль бәрелеш” тип кенә аналмаҫҡа тейеш: асылда ул йәш, тәүге автономияны юҡ итеүҙән ҡурсалап ҡалыусы милли хәрәкәт була) тасуирлаған ошо ҡулъяҙма ын автор быйыл, өр-яңынан яҙып, сәйәси повестан документаль юҫыҡтағы ярай ы ыҡсым роман кимәленә еткергәс, уны “Ағиҙел” уҡыусылары хөкөмөнә сығарабыҙ.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 24



аҡмар- ыуҙың төҙ ҡамышлы, итләс-ҡусҡыл томбойоҡло, йәшел ылымыҡлы тонйорау ҡолаҡ-ҡултыҡтарынан, күгәрем төплө йәйен ятыуҙарынан ҡуйы-дымғылт өлөк еҫе, ыуылдырыҡ еҫе, балыҡ еҫе ағыла аңҡауҙарға...

Сыраҡ яғып төндә йәйенгә ултырған Солтановтар сата ы — антый Хәлил үҙенең ҡәҙимге уҡмағынан көндәгесә улъя ын йөкмәп уҙҙы — арыҡ башлы балығының бесәй ҡойроғолай оҙон ҡуш мыйығы, йәбешкәк лайлаланып, ирҙең әрекмән япраҡтары ҡыҫтырған яҫы яурын башынан түше тәңгәленә әлпелдәй, был ажар “ ыу эйә е”нең бүрәнәләй мыҡты буйы, ялпаҡ ҡойроҡ осо менән ян-яҡтағы буйға үҫкән үләндәрҙе әүшәреп, ергә өйрәлеп килә. Ят еҫ тойоп эттәр бошонҡо абалай, иртүк тороп ыйыр ауған ҡатын-ҡыҙҙың, егәрле эшен бүлеп, ситән аша тызырайып ҡарауы, ут күршеләренә өндәшеүе ишетелә:

— Әстәғәфирулла тәүбә, ажда амы тип торам! антый Хәлил тағы йәйен алған даба а!

— Улъя ти әң дә улъя — ауыҙы арандай асылған!

— Ил-ғәләмде туйҙырырлыҡ!

Баҙыҡ ағасҡа сабылған ғәм еҙ балта туҡранлауы ошо әҙәми тауыштарға таҡмаҡланып өҫтәлә: дыңҡ! дыңҡ! дыңҡ! — Сәнкем-Биктимер ауылының тирә-яҡтарға ифрат мәш үр мәҙрәсә биналары тарафынан бимазалай был балта. Ауыл имамы Мөхәммәткамал ахун хәҙрәт Дәүләтшиндың тынғы ыҙлығы инде: башҡорт әм ҡаҙаҡ бүлектәренән ғибәрәт шанлы мәҙрәсәнең ҡаҙаҡ өлөшөн йәнә лә бер төкөмәгә киңәйтә, сөнки бында, Үҫәргән төбәгенә, терәлеп үк торған ҡанҡәрҙәш ҡаҙаҡ далаларында мәғрифәт нурҙарына ыу ау көсәйеп, хәлфәләргә ихтыяж артты, шуларҙы халыҡтың үҙ улдарынан әҙерләп биреү зарур. Дәүләтшиндар шәжәрә е борондан уҡ Урал — Иҙел арауығындағы ауылдарҙа имам әм ахун булыу, илдең мәғрифәт теҙгенен ҡулда бөрөп тотоу менән ма ир, шулай уҡ сардарлыҡ юлында аҡ батшаның генералдары дәрәжә енә етешкәндәре лә бар, шуға күрә Рәсәй күләмендә абруйҙары ныҡ, үҙҙәре үтемле уларҙың. Мөхәммәткамал хәҙрәт тә бит ахун булмаҫы элек үк, Ырымбурҙың баяғы ҡаҙаҡ далаларында шәп алышбиреш ҡылған атаҡлы татар байы Әхмәт Хөсәйенов менән уртаҡ тел табып, аҡмар башынан ауыл аша ағыҙылған алдың шаңғырлауыҡ ҡарағай, ҡарағастарынан дүрт-биш ауыл йома намаҙы уҡырлыҡ ямиғ мәсете алдыртты, атаҡлы мәҙрәсәне бина ҡылдыртты. Сисенгән ыуҙан таймай тип, инде килеп яңы төкәтмәгә лә Әхмәт бай ҡаҙанынан ҡолаҡ сығартҡан (ҡаҙансының ҡулында, ҡайҙан ҡолаҡ сығар а, тигән мәҡәл бар). Бүрәнәләрҙе өмә ярҙамында күмәк көс менән өйрәтеп мендергәйнеләр, ә хәҙер ишетә егеҙ: ары таңдан уҡ тынғы ыҙ балта дыңҡылдай... Аслан үҫәргән башҡортоноң оҙонса-түңәрәк йөҙлө, шыма күлдәй киң асыҡ ҡара күҙле, ихтыяр көсөн белдереп ҡыҫылмыш бүртек ирендәре өҫтөнән ыҙылып ҡына сыҡҡан сөм-ҡара мыйыҡлы, өҫтөндәге хөллә е[2] лә, таушалған ғына бул а ла, үҙенә хайран килешле ун игеҙ йәшлек егет уйната ҡулындағы тапҡыр оҫталыҡ ҡоралын: шыма саған абын ерекмәндең[3] ҡатып-ҡалсайған устарына ҡаты матҡып, тәҙрә үренәсә үркегән бура арҡа ына ыбайланып. Мөхәммәткамал хәҙрәт уны, шәкерттәре ара ынан иң егәрле е лә эшлекле е булараҡ, әртил башлығы итеп ҡуйған, көҙгә тиклем бинаны ҡороп еткереү бурысын йөкмәткән. Егеттәре кистән теүәлләргә өлгөрмәгән мөйөш уртламаларын үҙе уйып еткерә, күмәк көс килеү менән үк, тотҡарлыҡ ыҙ, яңыларын өҫтәргә. Әртил тигәндәре лә шул күбе - енсә өлкән шәкерттәр ҡоро: быйылғы ын йәйгелеккә еперелеп илдәренә йәки ҡаҙаҡ далаларына мулдәкәлеккә[4] таралмайынса, Әхмәт байҙың ҡалта ы[5] ла мәхәллә халҡының хәйер-саҙаҡа ы иҫәбенә балта оҫта ы булмаҡҡа ҡалған... Егет мөйөш уртлама ын уйып йәтешләй, бер ыңғайҙан ауыл ыртындағы зыярат ҡырынан тартылмыш Кершәнник[6] юлында суҡаңлаған яңғыҙ-ялпы йәйәүлене абайлай —

биштәр[7] артмаҡлаған серле мосафир. Ҡыҙыҡ, кем булыр? Тау битләүенән үрмәләүсе ауыл көтөүенә боролоп ҡарап торҙо. Шул мәлдә мәсет манара ынан йәш мәзиндең әсе нескә ауазлы аҙаны таралды – иртәнге намаҙ бөтә ығы-зығыларҙан өҫтөнлөгөн белдерҙе. Ғәрәп телен ыуҙай эскән был ике йәнгә, балтасы әм мосафирға, аҙан үҙҙәре әсә телендәгеләй аңлашыл а, наҙандарға и ә тәржемәләгәндә ошолай яңғырар ине: *"Алла бөйөк. Бер Алланан башҡа хоҙай юҡлығын раҫлайым. Мөхәммәттең Алла илсе е булыуын раҫлайым. Намаҙға ашығығыҙ. Имен булырға ашығығыҙ. Намаҙ йоҡонан хәйерлерәк!"* Юлаусы йә этләп биштәренән намаҙлығын сығарҙы, ә оҫтабыҙ үткер балта ағағын, ыңҡылдатып, имеҙ бүрәнәгә батырҙы. Ауыл ҡуҙғалды: тә әрәттәрен алып өлгөргән көллө ир-ат тыҡрыҡтарҙан, урамдарҙан ағылды мәсеткә табан. Аҙан әйтелеп бөттө, мәхәллә мәсеткә тулды. Юлаусы юл намаҙлығын йәшкелт бүтәгәгә[8] түшәп бөксәйҙе, балтасы и ә бура өҫтөндә ултырғаны килеш укынды. Мосафир, намаҙын теүәлләп, зыяраттың иң боронғо өлөшөн ҡыҙырҙы, ярты биленән ергә еңеп мүк ҡаплаған ядкәрташтарҙың тамғаларын, яҙыуҙарын тикшерергә, ентекләргә кереште. Балта оҫта ының күңелендә был сит кешегә ҡарата хөрмәт моронлап, берәй изге заттыр был, Хызыр-Ильяс үҙе түгелме икән, тип тә уйланы. Бисмилла ын әйтеп ҡабат балта саба башлағас, мосафирҙың ҡай арала янына килеп еткәнлеген абайламай ҙа ҡалды: тәбәнәгерәк тарамыш буйлы, ҡарсығараҡ танаулы, нәҙек-оҙонса йөҙлө, ике күҙе уйға сумған, уңынан мәғлүм булыуынса, тап уның менән бер йәштәге тау башҡорто ине ул. Юғары ҡалҡынып ҡарап:

– Әссәләмәғәләйкүм, эштәр уң бул ын, оҫта! – тине.

– Вәғәләйкүмәссәләм, ауыҙыңа бал да май, юламан! – Балта ын бүрәнәгә кәнзәп ҡалдырып, ырғып төштө лә ҡуш ҡуллап күреште: әр мосафир изге бит. – Сәлимйән шәкерт Шә әргәрәй улы Мырҙағолатов буламын, урыҫсалатыбыраҡ әйткәндә, – тип "урыҫса" ы өсөн уңай ыҙланыбыраҡ өҫтәне.

– Әләй ә мин Әхмәтзәкир Ишмөхәммәт хәҙрәт улы Йәлитов булам, – тине юламан, көлөп.

– Кем? Ишмөхәммәт хәҙрәт?! – Сәлимйәндең маңлайы бураҙналанды. – Мәш үр Күҙән мәҙрәсә ен нигеҙләгән хажимы?

– Тап үҙе була инде.

– Ғәфү ит, тәксир, аҙ ғына ултырып торайыҡсы бынауы шаңғыр бүрәнәгә, Мөхәммәткамал хәҙрәт намаҙҙан сыҡҡылағансы. Аяҡтарың талғандыр.

– Ә үҙең ниңә йәмәғәттән ситтә ҡалдың, әллә ҡиблаң ҡыйышмы? – Көлөүен йәшермәй ынай бирҙе юламан, шулай ҙа йәштәше ҡатарынан бүрәнәгә уңайлы йәпләшеп.

– Әстәғәфирулла тәүбә, тәғәйен үҙең кеүек үк, рәсүлалла Мөхәммәт ғәли өссәлләм ҡибла ына тура ҡарайҙыр йөҙөм. Үҙең дә изге бурысынды анауҙа атҡарҙың бит, мин дә шулай – бура арҡа ына ыбайланып ултырғаным килеш мөкиббән үтәнем. Ҡөрьән-Кәримдә сөнки ҙә, ыбайлы яугир йәки сәфәр ә еле, ҡабалан эш бәндә е булараҡ, ошо изге бурысын, хатта ҡибла тарафына боролмайынса ла, эйәрендә барышлай атҡара ала, тип әшкәртелгән түгелме?!. Мин дә ҡабалан эш кеше е – иманыбыҙҙың яҡты усағы мәҙрәсәгә бина ҡорам.

– Дөрөҫ. – Әхмәтзәкир юламан етдиләнде. – Гәрсә үҙем биш намаҙымды ҡалдырмаҫ йән бул ам да, динилекте диуаналыҡҡа алмаштырыу тарафында түгелмен. Изге йола ла донъяуилыҡҡа аяҡ салмай ярашырға, мәсьәләнең ике яғы ла бизмәнләнеп тигеҙләнергә тейеш. Юғи ә бит, тәүарихтарҙан белә еңдер, Урта Азиялағы ислам мәмләкәттәренең Рәсәйгә әсир төшөүҙәренең төп сәбәбе лә уларҙың, бабабыҙ Сыңғыҙ ҡанундарынан айырылып, ылғый шәриғәт ҡанундарына йөгөнөүҙәренән тора. а-а-ай, төрки-ислам донъя ының бәкәленә ныҡ укты был торғонлоҡ, йәғни ҡатып ҡалғанлыҡ...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 26



– Эйе, мәғзүм[9], тап шулай...

– Ә имамығыҙ ниндәй? Таш мәсеткә ағас мулла түгелме? Мәҙрәсәгеҙҙә “яңы ысул” елдәре туламаймы?

– Юҡ, беҙҙең Мөхәммәткамал хәҙрәтте ҡатҡан тип әйтеп булмай, әммә “яңы ысул”ға ла бик иҫе китеп бармай: мәҙрәсәбеҙҙәге ҡәҙимге дәрестәргә йәнә килеп күк есемдәрен танып белеү, хисап, жәғрәфиә фәндәренән абаҡ өҫтәп ҡотолдо. Шуға күрә Ырымбур шәкерттәренең йәдитселек бола ы ла болартманы беҙҙәрҙе.

– Инш-Алла, тап атайым мәҙрәсә ендәгеләй икән дә... Ә ин, тәҡсир, ошо ояңда ҡаҡлана ыңмы инде аман? Әллә юҡ а яңы ғилемдәр эстәргә минең ымаҡ баш ҡараған яҡка юҫыҡлана ыңмы?

– Аллаға шөкөр, мин бындағы уҡыуымды осланым. Әммә аяҡ тартҡан яҡка ғилем эстәп китер өсөн кеҫә төбөм шомтор. Атай ҡарттың ҡура ында ла бер Ҡантурат менән ыйырҙан ғәйре капитал юҡ. – Ҡантурат тигәндән егеттең сырайы яҡтырып, тауышы ҡалтыраны. – Әммә малҡай ис бер алтынға бирге еҙ – елдәй елеп йөрөмәле йор юрға, Шүлгән күлдән сыҡҡан аҫыл йылҡыларҙың тоҡомо! Белә еңме?

– Беләм, минең бөрйән башҡорттары ара ындағы Ибра им тигән йән дуҫымдың да тап шундайын юрға ы бар – шул Шүлгән тоҡомонан. – Ике е тиң берталай уйға талды, моғайын, Күктәге Көндәй (урыҫса Коньдай) нур балҡытып елеп барған ҡантурат (конь-турат) юрғаларҙы күҙ алдына килтерҙе. Күңелдәре йомшарып, бер үк башҡорт йөрәге менән йәшәүҙәрен тойҙолар.

– Ә мин бына, атайымдың малдары ишле бул а ла, Ырымбур тиклем Ырымбурға йәйәүләп китеп барышым – Әхмәт байҙың “Хөсәйениә” мәҙрәсә енә морон төртөргә иҫәп...

– Инер ең, Инш-Алла. Яҡшы уҡып, байҙың махсус хәстәрлегенә лә ирешер ең. Ҡаршындағы бына был мәсет-мәҙрәсәләр ҙә бит уныҡы. Йомарт бәндә ул Әхмәт бай. Йылына бер нисә тапҡыр, изге байрамдарыбыҙға арнап, шәкерттәргә хәйерсаҙаҡалары ла килеп тора, йыртыҡка ямаулыҡ, тигәндәй... Татар аҡылы төштән уң, ти әләр ҙә, быныҡы теүәл: биргәнгә – бирермен, аҡланғанды – аҡлармын, тигән бит Алла ы Тәғәлә. Ә инең тик ятмауың да хәйерле. Мин дә хәлдән килгәнсә ҡыбырлайым – көҙгә тиклем кеҫә ҡалынайтырға ҡалдым. Алла ы бир ә, ҡырпаҡ ҡарҙан берәй ауылға мөғәллим йәки ҡаҙаҡ далаларына мулдәкә булып сығып китергә ниәт.

– Амин, ниәтеңде ҡабул ҡыла күр ен Алла ы Тәғәлә. – Әхмәтзәкир, уҡынып, бит ыпырҙы.

– Ә ин, ҡорҙаш, Өфөгәҙҙән Ырымбурға туралаған таш юлды белмәнеңме ни – был бөгәрем яҡка алыулатып китеп бара ың?

– Беләм мин уны, әммә бында боролоуыма сәбәп бар: юл буйынса ҡараңғы башҡорт ауылдарында атайымдың элекке шәриҡтәштәренә[10] уғылып, күп михнәтле халҡымдың тын алышын өйрәнеп киләм (өҫтәүенә, мөхтәрәм Мөхәммәткамал хәҙрәтегеҙ – атайымдың ҡорҙашы, шәриҡтәше). Йәнә килеп, тарихи Перовский юлы тап ошонда ослана, тигәйнеләр, шуны ла күрергә ине, хәҙрәтегеҙ фатиха бир ә...

– Киттек үҙенә, тап иртәнге сәйенә “тып!” итергә! – Сәлимйән мут йылмайҙы. – Перовский утары и ә ана анауы күгәреп торған Артышлы тауҙың артында ғына – нәҡ мин тыуған Мырҙағолат ауылы төбәгендә. Насип ит ә, унда ла етеп әйләнер ең, Инш-Алла. Сеү, хәҙрәт мәсеттән сыҡты, беҙ ҙә ҡуҙғалышайыҡ.

Урам буйлап ирәүән генә аҙымлаған ахун хәҙрәттең таҡта ҡапҡалы ихата ына инеп китеүен көтөп, мәҙрәсәнең төп бина ы алдындағы яңғыҙ ағас төбөнә ышыҡландылар. Әлеге мәҙрәсә булмаған замандарҙа уҡ, Ырымбурҙағы Каруан арай

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 27



баҡса ына ултыртырға йәш сығындар тейәп алып китеп барышлай, ошонда ҡуналҡалаған Йылайыр башҡорттарының иҫтәлеге ине был ҡола ялан яғы өсөн ят күренгән ҡарт ҡарағай; тәүҙә улар ишле булып, йылдар үтеү менән башҡалары ҡороп, яңғыҙы ерәйеп ҡалғайны (уны ы ла утыҙынсы йылдарҙа юҡҡа сыҡты). Уйсан ҡарағай төбөндә ошо хаҡта өйләшкәс, фекерҙәрен боронғолоҡ биләне.

— Дәүләтшиндар нәҫеле гел указлы муллалар булып, бөтә аҡмар буйҙарына Ырымбурҙан Орскиғаса таралған... — тине Сәлимйән.

— Алыҫҡараҡ алдырт, туған, — Силәбегәсә, ти әңсе!

— Ул яҡта ла бармы ни орлоҡтары?

— Мөхәммәткамал хәҙрәт үҙе әйтмәнеме ни әллә? — Әхмәтзәкир тағы ла мут йылмайҙы. — Мәҫәлән, шө рәтле батша чиновнигы Ғабдулла ахун Дәүләтшин хәҙрәттәре, 1865 йылда кантонлыҡтар бөтөрөлгәс, билендәге чиновник ҡылысын алып, өйөклө аҡ картузын кире-ҡабат аҡ сәлләгә алмаштырып, тап шул яҡтағы Ишкинда ҡылыс ыҙ ғына имам булып торҙо, тип...

— Ул әйтмә ә лә беләм: беҙҙең Мөхәммәткамал хәҙрәт менән ике е бер туған. аҡмар түбәнендәрәк Себенле ауылы мәҙрәсә ен нигеҙләүсе Дәүләтша ишан улдары ла а улар.

— Дөп-дөрөҫ, ауыҙыңа бал да май!

— Был яҡтарҙа Абдулла мулла, хатта Апуш мулла тип тә йөрөтәләр уны, ин әйткән “ҡылыслы ахун”ды. Беҙҙең ауылдың Мәнди ҡурайсы ы йыр сығарып шәп данлаған бит уны, “Абдулла ахун” көйө... белә еңдер?

— а-аай, башҡортомдоң көйҙәре лә йырҙары — күктәге йондоҙҙар анынса бихисап, бары ын да нисек белеп йә иҫләп бөтмәк кәрәк?.. Әле барғас хәҙрәт ҡашында йырлап бирер ең, бәлки?

— Еренә еткерепме? — Сәлимйән хәйләкәрләнде.

— Әлбиттә!

— Уны ы булмай, ҡорҙаш... — Егет кеткелдәп көлдө. — Бесәй арҡа ын ҡаршы ыпырыуға тиң булыр ине был.

— Бәй, аңламайым. Ошонда ғына бәхетле ит, әләй ә, ҡыҫҡаса ғына бул а ла.

— Риза. Шаҡтай оҙон ҡиссаның асылы шул: Ғабдулла ахун, имеш, “ҡылыслы кантон” булмышында Ырымбур өйәҙенең кантондар попечителе Филатовҡа ҡуштанланып, башҡортоноң елек майҙарын урҙыртыусы ямандың яманы икән... Мәнди ҡурайсының Абдулла ахунды яманлап йыр сығарыуын, шуның илгә таралыуын ишетеп, ғәйепләне кантон идара ына килтертәләр. “Йә, кантонға сығарған йырыңды ишеттер әле!” — ти Филатов. Мәнди әйтә: “Яманлап йырлайыммы, маҡтапмы?” — “Яманлағанын йырла”. Мәнди ҡурайсы, күҙен дә йоммайынса:

*Кантон булып алғандан уң,*
*Башҡорт башын ашаның.*
*Атаң абағын онотоп,*
*Урыҫлаша башланың.*

*Кантон булғас, картуз кейеп,*
*Салмаңды ла ташланың, —*

тип ыҙҙырып ебәргән, ти. Шунан Филатов әйтә: “Инде кантонды маҡтап йырла”, — ти. Мәнди тәрән тын ала ла, бер нәмә лә булмағандай:

*Абдулла ахун Дәүләтшиндың әр бер үҙе тоғоро,*
*Абдулла ахун кантон булғас, ҡалманы бит оғоро.*
*Урай-урай ат сабырға Тирәклеләй ер ҡайҙа?*
*әр хөкөмдө ғәҙел бирә, Дәүләтшиндай ир ҡайҙа?! —*

тип маҡтарға керешә. Аймылышланған Абдулла ахун Мәндигә ун ум аҡса биреп

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 28



ҡайтарып ебәргән, имеш...

— әй маладис, тапҡан бит яйын! — Шарҡылдап көлдө Әхмәтзәкир.

— Шуға күрә “Абдулла ахун” йыры ла беҙҙә ике төрлө: бере е хәҙрәт ҡолағына салынмаҫтай ҡасып-боҫоп тирел ә, икенсе е Дәүләтшиндар табынында кинәнеп башҡарыла. Ә еренә еткереп башҡарыу тигәнем — беренсе ен дә йырлап, Дәүләтшиндар бесәйенең ыртарҡа ын ҡабартыу була инде ул. Әммә елгә ҡаршы төкөрмәүҙе хәйерле анаусы, Мәнди ҡурайсы алымы менән йәшәүселәр күберәк...

— Их, был беҙҙең башҡортто!.. — Етдиләнде Әхмәтзәкир. — Түрә-ҡара алдында и а айлап, уның мыйыҡ осо елкенгән тарафҡа тайғаҡланырға әҙер тора... Киттек, төкөр танауына! — Ҡарт ҡарағай төбөн ҡалдырып, хәҙрәт йортона ыңғайланылар. — Шулай ҙа Мәнди ҡурайсы зирәк икән, әй: аҡ батшаның тоғро ялсы ы бул аң, үҙ халҡыңдың башын ашар ың, тигән. Ҡылыслы ахундың, был яҡтарҙан киткәс, Урал аръяғындағы тәржемәи хәле быны дөрөҫләй.

— Унда ни ҡылған тағы?

— Мәш үрҙәрҙән мәш үр шағирыбыҙ Аҡмулланы, хөсөтләп, төрмәгә яптыртыусы, мөхтәрәм Зәйнулла ишанды, тәфтишләп, кафырлыҡ оя ы Вологдаға өрҙөртөүсе лә шул уҡ Абдулла мулла Дәүләтшин да а!

Сәлимйән шөб әләнде:

— Был мөхтәрәм Дәүләтшиндарҙы әйтәм, сығыштары оторо татар нәҫеленәнме икән әллә?

— Ниңә, бул а ни? Барыбер түгелме ни?

— Түгелдер шул: татар ултырып киткән ерҙе ҡырҡ ҡат ҡырсып ултыр, тигәндәр бит...

— Беләм, татар барҙа хәтәр бар, тип тә әйткәндәр, донъя бит... Ә шулай ҙа мәҡәл бында урын ыҙ. Шө рәтле Дәүләтшиндар шәжәрә е менән ҡыҙыҡ ынып, төпсөнөп ҡарағаным бар. Бабалары Ғәҙелша ишандың үткән быуат башында уҡ мәҙрәсә е менән дан тотҡан Эстәрлебашта имам әм шәйех булғанлығын, ә сығышы буйынса Бөрө аҫаба башҡорто — тап үҙегеҙҙең боронғо Үҫәргән ырыуынан икәнлеген асыҡланым. Әйткәндәй, — әшнә енең бөйөрөнә төрттө, — ул хәҙерге Бөрө ҡала ы ла мәжүсилек замандарында Бүре-әсәгә табыныусы үҫәргәндәр нигеҙләгән Бүре ҡала ы икәнлеген беләенме?

— Уны ы беҙгә мәғлүм, шул риүәйәт эт тире енә ядкәрләнмеш сал-боронғо шәжәрәбеҙҙең аҡ ҡағыҙға күсермә ендә яҙылған.

— Эт тире енә?! — Мосафирҙың күҙҙәрендә ут ҡабынды. — Күрергә ине ул шәжәрәне.

— Үкенескә ҡаршы, был инде мөмкин түгел. Эт тире енә яҙылғанын баш яҡка[11] кейәүгә оҙатылмыш йәш киленсәк ата ынан мал урынына ялбарып алып киткән, ә ҡағыҙға күсермә ен... ошо ауылдың антый Хәлиле тәмәке төрөп тартҡан...

— Ҡыҙғаныс... Ауыҙынан төтәтеүселәр ҙә бар икән был ауылда...

— Бер антый Хәлил генә, ҡасып-боҫоп тигәндәй... Кершәнниккә балыҡ атырға йөрөгәнендә урыҫ ызнакумдарынан аҙып ҡайтҡан...

— Ауыҙынан ел алғыры! Ошондай күркәм, сал тарихлы ауылда...

— Сал тарихлы, тигәндән, ошо ауыл торған ерҙә, Ҡаҫмарт йылға ы тамағында, борон-борон замандарҙа үҙебеҙҙең Муйтән хандың байтәхетле баш ҡала ы булған имеш, тип тә ядкәрләнгәйне баяғы шәжәрәлә...

— Бына бит! — Шуның менән әңгәмә өҙөлдө — ахун хәҙрәт ҡапҡа ынан инделәр. Мосафирҙың ата ы Ишмөхәммәт хажи ысынлап та Мөхәммәткамал хәҙрәттең иң яҡын ҡорҙаштарының бере е икән — Әхмәтзәкир мәғзүм үҙенә лайыҡлы хөрмәт менән ҡаршыланды, түр башына ҡәҙерләп ултыртылды. Эш кеше е Сәлимйән ни, үҙ бурысы үтәлеүен самалап, остазынан рөхсәт орап ҡара а ла, уны ла

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 29



ебәрмәнеләр; йорт хужа ы тире көртә е өҫтөнән тәнен ҡаштор-ҡоштор ҡашып (тимрәүҙән интегә ине, буғай):

— Бер юлға эшенде ҡуйып тор, кем, Сәлимйән мырҙа, оло ҡунағыбыҙ булған йәштәшеңә серҙәш әм арҡадаш бул, — тине. Аяҡ бөкләп табын түңәрәкләтеп ултырышҡас, йорт хужа ы Сәлимйәнде мосафирға төптәнерәк танытыуҙы мәғкул күрҙе: — Иң әләтле шәкерттәремдең бере е — милләт өсөн утка- ыуға инерҙәй; киләсәге камил әм бөйөк, илгә игелек ҡылыр бурыстары ла ҙур, — тип өҫтәне. Өн өҙ-тын ыҙ сәй я аусы абыстайына боролдо. — Фатих мәғзүм эт уғарып йөрөймө, сәйе ыуына ла а?

— Бер нәмә лә уғармай. Балта оҫталарынды ашатырға ҡымыҙ, аш биреп, мәҙрәсә ашнаҡхана ына ебәрҙем. Бына-бына ҡайтып етер.

Ишек шығырлап асылды, ҡауыр ыны яңы ғына ҡата башлаған шыйыҡ үҫмер туп анан ырғып менде; йыйын әҙәм көн эҫе енә түҙә алмай елпенгәндә, өҫтөнә ул еңел генә төлкөтун, башына төлкөбүрек кейгәйне. Йәй урта ында ошолай ҙа көпләнеүҙең серен төшөнә алмаған ҡунаҡ менән алсаҡ-ҡыйыу сәләмләшеп, табынға теркәлде үҫмер.

— Кинйәм — алтын ҡаҙығым, Фатихым[12] ошо инде. Ике туған аға ы Ғөбәйҙулла[13] мәғзүм кисә генә Ырымбурға киткәйне, мәҙрәсә йомошо менән. Алла бойор а, унын менән дә күрешер егеҙ әле, амин, Әхмәтзәкир мәғзүм. — Сыҙай алмай, шағор-шоғор ҡашынды. "Их, медицина фәненән ма ир табиптар етешмәй илгә! Артта ҡалғанбыҙ шул..." — тип көйөнөп уйланды мосафир. Фатих мәғзүм, ырғып тороп, асыҡ тәҙрәне япты:

— Күпме әйтәм, әсәй, иңә, өйҙә ел уйнатма, тип!

Абыстай ыуаланды:

— Уй балаҡай ғынам, биртенмә әң генә ярар ине бер үк, онотоп ебәргәнмен!

— Төлкөтун менән төлкөбүрек тә ел үткәрәме ни, Фатих ҡусты? — Сәлимйән шаярып төрттөрҙө. — Йүтәлләй ең дә йүтәлләй ең, күкрәгеңә хут[14] еле уҡкан кеүек...

— Минең урында бул аң, белер инең нимә еле икәнен.

— е- е, төлкөтуным юҡ шул минең, төлкөтунлыларҙы ғына ҡалтырата бит ул ел.

Фатих мәғзүм дә тел төбөнән тумбытырға уйланы:

— Ысынлап та, серен әйт әле, ағай: ни өсөн мин, йылы тун кейә тороп та, ел у-ғылып сирләйем, ә ин үҙең, йәйен-ҡышын тишек-тошоҡ кейенеп тә, ауырыуҙың ни икәнен белмәй ең?

Үҫмерҙең башынан ыйпаны:

— Бының сере бик ябай: ел минең сәкмәндең бер тишегенән жыйылдап кереп, шунда уҡ икенсе тишегенән сыйылдап сығып ыҙа — ыуыҡлығы тәнгә теймәй ҙә ҡала. Ә инең тундың ул салғый аҫтынан ҡыҫыла-ҡыҫыла үрмәләй ҙә, сығыр юл таба алмай, арҡа буйыңа тарала... Тунынды минең йыртыҡ сәкмәнгә алмаштырып кей, ҡустым.

— е, аҡылың алтын икән! — Ирендәрен тур айтты мәғзүм. Ауыҙ йырып тынлаған хәҙрәт сәй емереүен белде, абыстай и ә кинйә енең арҡа ынан ыйпап өйҙө:

— Көлмәгеҙ әле, көлмәгеҙ! Ябаға тайҙы хурлама — яҙға сыҡ а ат булыр, тигәндәй, минең улым да мыҡтыланып буйға етер, күрер егеҙ!

— Амин, абыстай, амин! — Бер тауыштан хупланылар. Күңелле хиссиәтләнеп, табынды ҡалдырҙылар. Фатих мәғзүм, ата ы ҡарт әйткәнсә, "эт уғарырға" йүгерҙе, ҡалғандары ишек алдына сығып, бер аҙ баш-күҙ алғас, лапаҡ ҡарама төбөндә ҡуйы күләгәгә түшәлгән сағыу-айбарлы балаҫтағы ҡабарынҡы мендәрҙәргә ирәүән янтайҙылар. Уртаға ашъяулыҡ йәйелгән, ҡымыҙлы көрәгә

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 30



ҡуйылған.

– Их, гүзәл аҡмар менән Ҡаҫмарт буйҙарының аумалы[15] ла аумалы! – Аяҡсылыҡты Сәлимйән үҙенә алып, балауыҙҙай ары ағас ижау менән апыра- апыра, шундай уҡ ағас туҫтаҡтарға ала торҙо, ирәүән генә емереп бушата торҙолар. Оҙаҡламай Фатих мәғзүм дә пәйҙә булып, уҙамандар ҡатарына теҙ сүкте:

– Тәҡсир, болдорҙағы юлтоҡсайыңа күҙем төштө: тышынан ҡарағанда, китап ымаҡ нәмәләр ятҡандай унда. Ниндәй китаптар икәнен белергә мөмкинме?

– Әлбиттә, баш өҫтө. Ҡыйын булма а, килтер әле бында тоҡсайҙы, ҡустым.

– Хәҙер! – Үҫмерҙең бер аяғы – бында, икенсе е – тегендә; хәҙрәт үҙе лә ҡыҙыҡ ынып шәйләй ине, буғай. Ҡулдан-ҡулға күсте серле китаптар: Әбүғл Әлә-әл Мааризың “Әл-лүзүмиәт”е, урыҫ ғалимы Н.М. Ядринцевтың “Положение инородцев Сибири” тигәне, Аттарҙың “Пенднамә” е[16]... Егеттең атаҡлы ғәрәп авторҙарын ыуҙай эсеү генә түгел, урыҫсаға ла ма ирлығы көслө тәьҫир итте бары ына ла, ә Ядринцев әҫәрендә урыҫ түгел милләттәргә ҡарата ла тәрән ихтирам, яҡлау хисе алынғанлығы күҙҙәренә йәш эркелдереп, күңелдәрен бермә-бер хушландырҙы, хатта ағайған ахун хәҙрәт тә ҡорҙашының улы тарыған “йәдитлек”тән рыя таба алманы. үҙгә үҙ ялғанып, христиан дине менән ислам дине ара ындағы айырманы билдәләргә тотонғас, китаптарҙың йәш хужа ы оҙон телмәргә күсеп: “Христианлыларҙың таянысы “Тәүрат”, хикәйәләр йыйынтығынан ғибәрәт булараҡ, инсандың эске рухи булмышын әм тышҡы тормошон бер-бере енә тап килтереүсе мәжбүри тәғлимәт ролен үтәй алмай. Инсандың эске әм тышҡы тормошон үҙ-ара яраштыртмайынса, кире енсә, ҡапма-ҡаршы ҡуйған бер дин ул, – тип алды ла, көтмәгәндә икенсе йүнәлеш алып: – Бының менән бер ҡатарҙан исламиәт тә, ҡасандыр бер тәүәккәл ғәскәри йәмғиәттең дине бул а ла, ваҡыт үтеү менән кешенең ихтыярын йомшартыусы, шәхсәнә фекерен тарҡатыусы бәхәстәр өҙөмтә ендә фанатизмға дусар ҡылыусы ыҙаттары өҫтөлөк алған бер дингә әүерелгән...” – тип тә өҫтәгәс, хәҙрәттең эсендә көсөк юрта башлағаны иҙелде:

– Әстәғәфирулла тәүбә, бер юлы ике динде лә гүа [17] ҡылмағандай, Аллаға инанмағандай вәғәзләнең, мәғзүм...

– Тәүбә-тәүбә, фекерҙәремде камил аңлата алмағаным өсөн ғәфү үтенәм... Ҡиблабыҙҙан йөҙ ҡайырғаным юҡ, Инш-Алла. Алла әм дин кешелек донъя ына хакимлыҡ ҡылған бер хәҡиҡәттер. Быны инҡар иткән әр кем милләтенән айырылып, яңғыҙ башы ҡаңғырыуға дусар ителә... Әммә дин кешенең донъя ҡороу эштәренең алдына сығырға, ихтыярын артыҡ сикләргә, уның аяҡтарына тышау булырға тейеш түгел, тип кенә әйтмәксемен. Исламиәтте лә бер тәрән рухи дин тип ҡабул ҡылырға кәрәк, Ҡөрьәндәге: “Әгәр донъялағы диңгеҙҙәр яҙыу ҡара ы булып, Алла менән бәйле ғаләмдең серҙәрен ҡағыҙға яҙырға кәрәк бул а, был диңгеҙҙәр бөтәр, әммә ғаләмдең серҙәре бөтмәҫ-төкәнмәҫ”, – тигән фекер хаҡ. Минең дин менән мөнәсәбәтем деисы[18] доктор Дрейперҙыҡы кеүек, ә мосолманлығым Ҡөрьәндең ижад ителеүен белгән аббасид хәлифе Мәмүндеке әм либерал мутазилсыларҙыҡы ҡәҙәр[19]...

Өн өҙ бирелеп тыңлаған хәҙрәт хәүефләнеп баш сайҡаны; әңгәмәгә ҡолаҡ алып, табынға ниғмәттәр өҫтәүсе абыстайы эскер еҙ ҡыҫылды:

– Абау, көфөр өйләп, тамуҡ киҫәүе була күрмә, балаҡайым! Атайың Ишмөхәммәт хажи, олатайың Хәбибназар хажи белеп ҡал а, ни әйтер? Мөхтәрәмә Өммөлхаят абыстай, әсәйең, тим, күҙ йәштәренә төйөлмәҫме бер юлы? Әгәр дөрөҫ аңла ам, әстәғәфирулла тәүбә, Алла ы Тәғәләнең ерҙәге әр бәндә е менән, уларҙың эске уйҙары, тышҡы ҡылыҡтары менән идара иткәнлеген шөб ә[20] ҡыла ыңмы?..

– ин, әсә е, юҡ өсөн көйәләнмә. – Йорт хужа ы тыныслығын аҡланы. – әммәбеҙҙән уҙҙырырлыҡ ныҡ уҡымышлы бул а ла, башы йәш әм иҫәр әле –

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 31



донъя ының әсе ен-сөсө өн татып ултырыр ҡалыпҡа. Беҙ ҙә сапсына инек...

— Ә шулай ҙа Әхмәтзәкир йәштәшемдең үҙҙәрендә мәғәнә бар кеүек, тәҡсир[21]! — тип баҙнат итте Сәлимйән.

— Белмәйем, белмәйем...

аумал ҡымыҙ сихәтенән ҡыҙышып алған Әхмәтзәкир үҙенекен туҡыны:

— Алла ы Тәғәләнең ҡөҙрәтенең киңлегенә шигем юҡ. Әммә күстәге бал ҡортолай миллиардлаған күп төрлө мәхлүҡтәрҙе, иҫәп еҙ ғаләмдәрҙе яралтҡан Алланың эше — йәшәү ҡанундарын әм тәбиғәт зандарын булдырыу тип беләмен. Әммә ҡырмыҫҡа иләүендәге ғауға йә и ә был Әхмәттең, теге Мәхмүттең эштәре менән махсус шөғөлләнеү Алла эше түгел, улар Алла тарафынан барлыҡҡа килтерелгән тәбиғәт тәртибенә бәйле. Тормоштоң әм ысынбарлыҡтың башланғысын әм ахырын, әхлаҡ әм киләсәк тормош мәсьәләләрен яҡшы аңлауҙары, тәжрибәле булыуҙары, башҡалар белмәгән күп нәмәләрҙе белеүҙәре өҙөмтә ендә донъяның серҙәренә төшөнгән әм Хоҙай Тәғәләгә яҡын булған күренекле шәхестәр кеше араында пәйғәмбәр булып танылыр... Күбе е уҡый-яҙа белмәгән әм ябай ҡатлам кешеләре ара ынан сыҡҡан, мәҙәни кимәле буйынса ябай халыҡҡа бик яҡын булған был пәйғәмбәрҙәр кешеләргә үҙҙәренең фекерҙәрен әм идеяларын төшөндөрөү өсөн тарихи дастандарҙы халыҡ аңына барып етерлек әм инанырлыҡ рәүештә аңлаталар... Бына шулай.

Ауыҙ асып әр үҙҙе йотоп тыңлаған Фатих мәғзүм, ҡапыл тәрән тын алып:

— Ҡөрьән-Кәримдең әр бер үҙе Алла ы Тәғәләнең үҙ ауыҙынан сыҡмаған буламы әләй ә? — тип ҡалҡына биреп ҡуйғайны, ата ының ҡулы төртөп торғоҙҙо:

— Ауыҙыңдан ел ал ын, шайтан малай, бар, арысай менән Турысайҙы уғарып, эйәр-ипсенде иплә: ағайҙарың тирә-яҡты сәхрә ҡылып ҡайтырҙар, өйлә намаҙына тиклем.

— Хәҙер, атай. Ә шулай ҙа орауыма яуап алып китәйем — күңелдә төйөр ҡалмаын. — Аяғөҫтө көтөп торҙо. Хәҙрәт быға ис тә ҡаршы түгеллеген белдереп аҡал ыйпағас, Әхмәтзәкир, йәш мәғзүмдең төлкөбүрек аҫтынан сағыу баҙырлаған сөмҡара күҙҙәренә төбәлеп, фекерен дәлилләне:

— Ҡөрьәндә бит, бөйөк маҡсатҡа ынтылыусы инсандар үҙ ихтыярына өлгәшеү өсөн ниҙәр генә эшләмәй, тигән фекерҙе аңлатып, “ике мөгөҙлө” йы ангир Зөлҡәрнәйҙең[22] ҡисса ы килтерелә. Мәғрип менән мәшриҡты берләштергән был фатих[23] ғәмәлдә Македония батша ы Филиптың улы... Ҡөрьәндә унын ҡа арманлыҡтарына бағышланған дастандарҙың ғәрәптәр ара ында таралған риүәйәте бирелә. Ҡөрьәндең тәрән мәғәнәле бер ни тиклем фекер-әйтемдәрҙән тороуы унын үҙендә үк Баҡара сүрә ендә әм башҡа урындарҙа егерме дүрт тапҡыр әйтелә. Пәйғәмбәр үҙе йәшәгән заманда әм унан бер быуат элгәре Йәмәндең вәлие[24] булған Ебре игә (сығышы буйынса Абиссиния кеше е) бағышланған мәғлүмәт, шулай уҡ Ғайса пәйғәмбәр хаҡында “уны йә үдтәр үлтермә ә лә, аҫма а ла, хәдистәрҙә был ваҡиға уларға бәйле ҡалды” тип әйтелеүе, әлбиттә, тарихи ваҡиғаларҙы сағылдыра. Алла ы Тәғәлә Ҡөрьәнде бөтә хәрефтәре, үҙҙәре менән ошо килеш барлыҡҡа килтергәнме, әллә тик мәғәнә енме? Был хаҡта ғалимдар төрлө фекер йөрөтә...

— Ә хәҡиҡәт?

— Хәҡиҡәт шул: Ҡөрьәндәге хәреф әм үҙҙәр генә түгел, ундағы ҡисса әм фекерҙәр ҙә пәйғәмбәр шул замандағы ғәрәптәргә аңлатыу эшен уларҙың аңына ярашлы рәүештә башҡарғанлығын дәлилләй, үтә күренеп тора был. Йәғни пәйғәмбәрҙең фекере ғәрәптәргә уларҙың үҙҙәре инанған ҡисса, дастан әм әйтемдәр ярҙамында еткерелә. Ҡөрьәндәге ҡиссаларҙың ҡай ы берҙәренең аңлатыу нигеҙҙәрен ғәрәп әйтемдәре тәшкил итеүе, ҡай ы берҙәренең тарихта булған ваҡиғаларҙы та-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 32



суирлауы хәҙерге фәндә иҫбат ителгән инде...

— Бар, улым, бар — етер инә! — тигәйне хәҙрәт, Фатих йылп итеп тайҙы. — Изге Ҡөрьән-Кәримде лә дастан итеп күрә башламағайы!

— е, үҙебеҙҙең сәсәндәр ижады ымаҡ икән, — тине Сәлимйән, тамағы кибеп сарсаған телмәрсегә ҡымыҙлы туҫтаҡ оноп.

— Рәхмәт! — Төп күтәрә эсте мосафир. — Эйе, әгәр беҙҙең төркиҙәрҙән дә пәйғәмбәрҙәр үҫеп сыға ҡал а, улар ҙа теге йәки был ила и төшөнсәне аңлатыу өсөн төрки дастандарына, мәҫәлән, хыянатсыл тәбиғәтле бәндәне тасуир итеү өсөн Уғыҙ дастанындағы Көлләркин Ябғуның ҡатыны хаҡындағы ҡиссаларға, ғәҙеллекте аңлатыу өсөн “Иҙеүкәй” дастанындағы “Иҙеүкәйҙең дөйә е” кеүек ҡиссаларға таянырҙар ине лә фекерҙәрен төркиҙәр ышанырлыҡ формала аңлатырҙар ине. — Әллә ҡымыҙ сихәтенән иҙерәгән, әллә ҡатмарлы телмәрҙең талғын ағылышынан ойоғандай күҙҙәрен йомоп ҡалғыған хәҙрәткә ҡарап, ҡартлыҡ баҫа башлаған, ахыры, быны, тип уйлап та өлгөрмәне, теге е күҙҙәрен тултырып баҡты ла көтмәгәндә әйтә алды:

— Йә, хуш... Ишмөхәммәт ҡорҙашымдың улы булма аң әгәр, ике ҡолағымды ҡаплап тыңлар инем быларҙы... хәйер, йәштәр үҫә, ҡарттар сүгә, тигәндәре ошолор... заман заңын аңламай башлағанбыҙҙыр...

— Улай тимә, остазым, беҙҙең еҙгә тиңләшә е бар әле.

— Тәҡсир, үҙем дә икеләнәм, — тине Әхмәтзәкир. — Уйымдағын түгелдерҙем.

— әй, йәштәр, йәштәр, ошо ҡасабаның хаҡ диндән табан тайҙыра яҙған Хәсәне менән Лотошо булып ҡуйма ағыҙ ярар ине лә, тәүбә-тәүбә... Ярай, үҙҙәрен Хоҙайым араланы. Мәжүсилеккә абына яҙғандарҙы, тим... — Ҡунаҡтың ис ни аңлай алмай йөҙәгәнен абайлап, ҡул елтәне. — Сәлимйән шәкертем илтеп күр әтер үҙеңә шул ике бәндә хаҡ юлдан тая яҙған тәңгәлде — ауыл осонда ғына ул. Алла ы Тәғәлә тамға ҡылып ике енең йөҙөнә алған мө өрҙө лә баҡтыртыр, тура кил әләр.

— Булыр, хәҙрәт.

— Ә хәҙерен, оҙон үҙҙең ҡыҫҡа ы, сыңратып ебәр әңсе, шәкертем, аҫыл көйкәйҙәребеҙҙе!

Ҡунаҡ та тапҡыр икән:

— еҙҙең яҡта “Абдулла ахун” тигән шәп йыр барлығын ишеткәйнем... — тип әйтергә лә өлгөрмәне, Сәлимйән, туҫтағын йә әт ҡуйып, күкрәгән күреклəндерҙе лә Мәнди йырының оторо он ыҙҙырҙы ла ебәрҙе:

*Кисә генә ахун ине,*
*Ниңә ситкә ауышҡан?*
*Ырымбурға бара-бара,*
*Түрәләргә танышҡан.*

*Башындағы аҡ сәллә ен*
*Аҡ картусҡа алышҡан.*
*Абдулла ахун кантон булғас,*
*Ҡолаҡ тынмай тауыштан...*

Абыстайҙың ҡымыҙ апырған ижауы ҡулынан төшөп китте, аҡалын услап ҡыҫып тотҡан хәҙрәттең дә өм өрө ҡойолдо, ә аттар янында маташҡан үҫмер шарҡылдап көлдө.

— Фатих, нишләй ең, ишет ен ҡолағың! — тип киҫәтте абыстай.

— ай әттәгенә е, телемә шайтан төкөрөпмө, кәрәкмәгәнен йырлаған да ташлағанмын — ғәфү итә күрегеҙ! — тип өлгөрҙө Сәлимйән. — Кәрәккәнен йырлайыммы инде лә?

— Әлбиттә, яҡшы ын йырлау фарыз, ниңә бында ылғый ялған мөнәжәтте көйләргә! — тине абыстай, хәләл ефетенә хәүефле ҡарап. Уны ының ауыҙ йырып ултырыуын күргәс, тынысланып, аласығына йүгерҙе. — Уй, эркетем ташып баралыр!

— Ярай, әсә е, бар, үҙ юлыңда бул! — Хәҙрәт ҡул елтәне. — Йырҙың ни уның йыртығы юҡ, тигәндәй, яҡшы ы ла, яманы ла бер сама инде уның — халыҡтыҡы. Халыҡтан оло булып булмай, эйе... Икенсе ен йырлама аң да ярай, кем, Сәлимйән шәкертем. Бер үк кешене маҡтап та, яманлап та йырлағас, халыҡ яңылышмағандыр — бизмәндең ике яғы ла тиң тартҡандыр, шулаймы?

— Хәтәрҙер — ике йөҙлө хәнйәрҙер... — тине ҡунаҡ.

— Эйе, шундай кеше ине Ғабдулла ахун, ауыр тупрағы еңел булғыры минең бер туған ағайым... Сөнки үҙе ғүмере буйына аҡ батшабыҙҙың ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер салауат күперенән йөрөнө, күҙәтеү аҫтында булды... Хәйер, урыны ожмахта булғыры атай бахырҙың шойҡаны Әхмәтша әм Ғабдулла ағайҙарыма ла, минең үҙемә лә тейешенсә ҡағылды, өсөбөҙгә лә аҡ батша ярандары ара ында үҙҙе уйлап өйләргә, аҙымды үлсәп баҫырға тура килде...

— Ә шулай ҙа ахун итеп ҡуйғандар бит үҙенде?

— Әйттем бит: аҡ өйләргә, үлсәп баҫырға...

— Быны нисек аңларға икән, тәҡсир?

— Заманында Эстәрлебашта имам әм шәйех булған ҡартатайыбыҙ Ғәҙелша ишан кеүек үк, ғәзиз атайыбыҙ Дәүләтша ишан да Бохарала уҡыған, төркисә лә, фарсыса ла әҫәрҙәр яҙған әм ошо Ырымбур виләйәте Себенле ауылында мәҙрәсә аҫҡан ил зыялы ы ине. Француз яуында үҙебеҙҙең башҡорт ғәскәренең полк мулла ы булған, Мәскәү янындағы Бородино уғышынан алып Парижғаса яу юлы үтеп әйләнеп ҡайтҡан, Инш-Алла. Француз илбаҫарҙарын еңгәндән уң аҡ батша, башҡорттарға рәхмәт әйтә е урынға, Уралға күпләп ябырылмыш урыҫ заводчиктарына башҡорт ерҙәрен ҡырҡып бирә башлаған. Илебеҙҙең таланыуына йәне әрнегән атайыбыҙ түҙмәгән — аҡ батша сәйәсәтенә ҡаршы аҫтыртын көрәшкә ылыҡҡан. Әммә, күпме йәшер әң дә, беҙ ҡапсыҡта ятмай бит: батша ярандары эште иҙеп ҡалып, алтынсы кантондың йорт старшина ы Буранбай Ҡотосов менән уның сәркәтибе Ибра им Айсыуаҡовты Себер ҡатырына өрәләр, ә уларҙың арҡадашы атайым Дәүләтша ҡаҙаҡ ара ына ҡасып ҡотола, Бискүрәк тигән тарафтарҙа мулдәкә булып, ҡаҙаҡ балаларына изге исламиәт нурын таратып йөрөй. Әммә аҡ батшаның ҡулы оҙон: күп тә үтмәй, атайымды ла тотоп алып, бығаулап Себергә өрәләр — ул шундағы ҡатырҙа ҡатып ҡала... Бына шул ҡатырйән балаларына йәшәү өсөн ни ҡылмаҡ кәрәк ине, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ... Шул мөхиттең бәлә елер ул әле йырланған йырҙағы Абдулла ахун... йәғни минең ағайым...

— Тәҡсир, шуны ын да орамай булдыра алмайым, еп осон үҙегеҙ сығарғас. Шул Ғабдулла мулланы, Рәсәй хөкүмәтенә ярам аҡланып, мәш үр шағир Аҡмулланы әм шанлы Зәйнулла ишанды эҙәрләгән, тәүге енең үлтерелеүенә, икенсе енең өргөнгә ебәрелеүенә сәбәпсе булған, тип ишеткәйнем — ысынмы?

— Ысын да, түгел дә, тип әйтерлек. Сөнки ғәйеп атта ла, тәртәлә лә бар, буғай, бында... Мәш үр шағирыбыҙ Мифтахетдин Аҡмулланың, бер урында ултырып сыҙай алмай, ғүмере буйына ҡыҙырынып йөрөгәнен, хатта вафатына тиклем фажиғәле юл өҫтөндә булыуын белә егеҙ. Шулай бер заман беҙҙең яҡтарға ла килеп сығып, тәрән аҡылы, шағирәнә тапҡырлығы, сәсәнлеге менән барса халайыҡтарҙы хайран ҡылып, бер ыңғайҙан Латифа исемле бик ылыу бер ҡыҙыбыҙҙың йөрәген әсир итеп, ҡыҙҙың ата ы Сәғитдинде лә тылсымлап, яғыбыҙҙың кейәүе булып алғайны ла кәләше менән ҡушарлап ҡуян арба ына ултырып киткәйне башы ҡараған Троицкий өйәҙе тарафына. Артабан мәғлүм булды: кейәүебеҙ йәш

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 34



кәләшен Ҡайынлы тигән бер ауылда ҡышлатырға ҡалдырып, йәйгә тиклем кәсеп итеп мал табырға ҡаҙаҡ далаларына олаҡҡан – иҫке ғәҙәте буйынса инде. Кәбеҫтәне ҡарауылларға кәзәгә ҡалдырған ымағыраҡ була был... Бер заман Аҡмулла ҡаҙаҡтан әйләнеп ҡайтыуға, ысынлап та, татлы кәбеҫтә кәзә ҡарынында була – йәғни ҙә баяғы Ғабдулла ағайымдың төпсөк улы Сибәғәтулла мулланың хәләл ефете рәүешендә... Китә ыҙғыш, талаш-тартыш. Хәләл никахлы кеше ҡатынына никахланып, шәриғәт ҡанунын тупаҫ боҙоуҙа ғәйепләй Аҡмулла беҙҙең Сибәғәтулланы; ә уны ы и ә Латифаның ирҙән айырылған тол ҡатын икәнен дәлилләй – Мифтахетдиндең Латифаға “талаҡ!” әйтеп киткәнлеген үҙ ҡолағы менән ишеткән ша иттарын килтерә. Ахыры ы булмай, Өфөгә юллана Аҡмулла – Диниә назаратының ҡазыйы Ризаитдин бән Фәхритдингә шикәйәт күндерә, хәләл ефетен үҙенә кире ҡайтарыуҙарын даулай. Ризаитдин ҡазый уны аҡыллы кәңәше менән бороп ҡайтара: “Баш бирмәҫ ул байталыңды кире ҡайтартып ал аң да, ис ундыртмаҫ. Иң хәйерле е, нуҡта ының теҙгенен муйынына ура ла башы тартҡан яҡҡа ебәр ин уны!” Ләкин “баш бирмәҫ байтал” өсөн низағ баҫылмай, Аҡмулланың мөхтәрәм остазы Зәйнулла ишан Рәсүлев тә ҡатнашлыҡ ҡыла, буғай. Шау-шыу ҡабат Өфөгә ишетелеп, мөфтөйөбөҙ Мөхәммәтйәр хәҙрәт Солтановтың үҙенә мәғлүм булып, Сибәғәтуллабыҙҙың муллалыҡ указы тартып алына. Шунан уң ул нәҫелебеҙ ғүмерлеккә теркәлгән атлы казак[25] хәленә ҡайтып, үҙебеҙҙең Орски өйәҙенең Яңы Орски атлы казак ыҫтанында[26] вафат булды, нигеҙенә Ғабдулла[27] тигән алтын ҡаҙығын ҡалдырҙы.

– Беләм мин ул Ғабдулланы, арғылт сәсле башҡорт малайын, – тип иҫенә төшөрҙө Сәлимйән. – Бер йылды әсә е менән бергә хәлегеҙҙе белергә килеп, аҙнаун көн ҡунаҡ булып киткәйне бит.

– Атас үҙе.

– Урыҫса ла, төркисә лә шатырлатып уҡый ҙа, яҙа ла торған отҡорйән. инең менән минән, йәштәш, – ҡунаҡҡа эйәк ҡаҡты, – дүрт йәшкә кесерәк ул, 1894 йылғы.

– Бөйөк шағирыбыҙ Мифтахетдин Аҡмулланың вафатына бер йыл ҡалараҡ тыуған икән... – Әхмәтзәкир башын баҫып уйланды.

– Эйе, еҙҙәрҙе ҡыуалатып үҫеп килмеше... етемлектә, – тине хәҙрәт. Абыстай ҙа үкенесен белдерҙе:

– Ата ыҙ ҡалғас, ҡыйындыр, үҙебеҙгә килеп тор, олатайыңдың мәҙрәсә ендә уҡы, тип тә өгөтләп ҡараным, ләкин риза булманы. Әсәйемде, еңлемде ҡарарға кеше юҡ, унан килеп, еҙҙең мәҙрәсәлә урыҫса ла уҡытмайҙар, тип янтайҙы.

– Хәйерле бул ын, юҡҡа бошонма, әсә е, ауыртмаған ҡабырға ына ят ын. – аҡалын услап уйланды. – Көслөк менән еңеп булмай был замандағыларҙы. Ни ти әң дә, атлы казак бит: урыҫса уҡалауы файҙаға ла ашыр, бәлки. Ғәбделғәзиз янарал[28] олата ы кеүек үк, аҡ батшаның сәрғәскәре[29] булып китеүе ихтимал, Дәүләтшиндарҙың бары ына ла имам хатиб булырға тимәгәндер бит инде. Мөхтәрәмдәрем, беҙҙең Ғәбделғәзиз Дәүләтшин янаралды ишеткәнегеҙ бармы?

– Ҡолаҡ осо менән генә.

– Әле әйтелмеш Сибәғәтулланың бер туған ҡусты ы ул, баяғы Абдулла ахун тип йырланған ағайым мәрхүмдең кесе малайы. Әлхасил, Ғабдулла ағайым шул Ғәбделғәзизен, мәҙрәсә тамамлатҡас, Сибәғәтулла ы хәленә ҡалма ын типме инде, урыҫ ғәскәри мәктәпкә бирҙе. Шунан уң Ғәбделғәзиз штабта хеҙмәт итте, Төркөстанда Куропаткин янарал яҡындарының бере е сифатында юғары ғәскәри хеҙмәттә булды. Ошо көндәрҙә Петербурҙа Янаральный штабта Азия бүлеге менән идара итә... Бына шул олата ылай, дәүләтебеҙҙең берәй та ыллы эшмәкәре булырға яҙманымы икән, тим, әлеге уланға ла. Сәлимйән шәкертем хаҡлы: ифрат зирәк

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 35



тә отҡор ул. Күҙе тонған милләтебеҙҙе яҡтылыҡҡа сығарыуҙа бына еҙҙең икегеҙгә лә ҙур өмөт бағлағандай, уны ла мин илебеҙҙең күҙ терәге итеп күрәм. Хәйер, ғүмер юлдарыбыҙ оҙон да ҡатмарлы, уның берәй боролошонда шул Ғабдулла Дәүләтшин менән дә, бәлки, бер булмаһа бер осрашыр ығыҙ әле... – Мөхәммәткамал хәҙрәт, вәғәздең оҙонға уҙылғанын самалап, буғай, теҙгенде ҡыҫҡарта бирҙе – мөлдөрәгән тыҫтаҡтарҙы бушатырға ҡыҫтаны. Үҙе тоҫмаллаған шул юлда уҙамандар осрашыуына теүәл ун йыл ҡалғанлығына – 1918 йылда әлеге Ғабдулла Дәүләтшин да ошолар ҡатарынан Башҡортостандың күренекле бер дәүләт эшмәкәре булараҡ тарихҡа керәсәгенә күрәҙәлек ҡылғандай ине ул..

Мәжлес әңгәмәһе икенсе юҫыҡҡа боролдо, сөнки лапаҡ ҡарама төбөндә ҡаршыларына көтөлмәгән яңы ҡунаҡ пәйҙә булды. Ярһыу йөрәктән уйнаҡлап-бейеп торған сыбай ҡашҡа ының казак эйәрендә шәмдәй төп-төҙ ултырған, оҙон-мыҡты кәүҙәһен орсоҡтай уйнатып ырғып төшкән һәм мәжлес эйәләре менән ҡуш ҡуллап күрешкән асыҡ йөҙлө, яҫы маңлайлы, ҡуңыр сәс аҫтынан алсаҡ ҡараған ҙур ҡуңыр күҙле егет ине ул.

– Ғәбделәхәт Сәйетбатталов[30] тигән казачий затлы фәҡирегеҙ буламын, – тине, таныш түгел ҡунаҡтың белдереүен иғтибар менән көтөп.

– Әхмәтзәкир Йәлитов, баш өҫтө.

– Баш яҡ башҡортлоғоң күренеп тора: төҫөңдән дә, телеңдән дә. – Ат өҫтөндә сарсап килгәндер, буғай, тын да алмай ике тыҫтаҡты түңкәрҙе.

– Әһин үҙең, әйтмәһәң дә, дала яҡҡа оҡшай һың, – тине Әхмәтзәкир, ирәүән көлөп. – Телеңдең осо, үҫәргәнлектән уҙып, нуғайлыҡҡа тартым.

– Ғәжәп түгел: тыуған ауылымдың бер осо нуғай, күрше Суртанлы ауылы ла – нуғай затлы атлы казактар...

– Нуғайҙың кемлеген беләһегеҙме һуң? – Әхмәтзәкир, өсөһөнә лә ҡарашын әйләндерҙе.

– Белмәй ни. Әлеге лә баяғы шул аҡ батшаның ҡылығы: даулы-яулы башҡорт халҡын ҡан ҡәрҙәшебеҙ ҡаҙаҡ халҡынан айырыу өсөн Яйыҡ, аҡмар буйҙарына хәрби ҡәлғәләр, редуттар ҡорҙортоп, урыҫтан, башҡорттан, нуғайҙан да мордванан атлы казак ғәскәрлеген хасил ҡылған. Тәғәйен был ҡандауыр нуғайҙарын Ҡаф тауының төньяғынан күсереп килтереп ултыртҡан, тиҙәр. – Аңлатып биргәйне Сәлимйән, Ғәбделәхәт элеп алды:

– Милли кейемдәре, биҙәктәре, аш- ыуҙары, риүәйәттәре, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәре тап беҙҙең үҫәргәндәрсә, тик телдәре генә үҙгәйерәк – сусылдап та чәчелдәп өйләшәләр.

– Ҡыҙыҡ... шулай булырға тейеш тә. – Әхмәтзәкир мәғлүмәтте ҡуйын дәфтәренә теркәй алды. – Сөнки боронғо үҫәргәндәрҙең, юрматыларҙың ярсығы бит улар – ун бишенсе быуатта ошонан Ҡубан йылғаһы буйына күсенеп киткәндәр.

– Әниңә үҫәргән түгел, ә нуғай аталалар?

– Сыңғыҙ хан бабабыҙ ғәскәрендә был яҡтарға ябырылмыш монгол татарҙары телендә "нуғай" – эт-бүре тигән үҙҙер... – Абыстай кеткелдәп көлдө.

– Ауыҙыңды йырма әле, әсәһе. – Хәҙрәт ирәүән киҫәтте. – Белә-бел әң, боронғо үҫәргән бабаларыбыҙ үҙҙәрен "бүре-эт" тип атағандар, шул хаҡта күп риүәйәттәр, хатта ырыуыбыҙҙың, имеш, бүре-әсәнән таралған бүреләр араһы бар. Үҫәргәндең бер сатаһынан, имеш, "бүре йән" – Бөрйән ырыуы хасил...

– Эйе, "нуғай" атамаһының ул замандағы ислам динле сит халайыҡтар тарафынан ул саҡтағы мәжүси дин тотҡан, бүре-эткә табынған үҫәргәндәргә тап шул атама йәбештерелеүен мәшһүр ҡаҙаҡ ғалимы Чоҡан Вәлиханов дәлилләп яҙа. Үҫәргән һәм Юрматы шәжәрәләре лә иң боронғо нөсхәләрендә "Нуғай шәжәрәһе" тип ата-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 36



ла. Ә Төркөстан арттары ошо көндәргәсә Уралда “башҡорт” тигән ҡәүем барлығын белмәй – беҙ-башҡорттарҙы “нуғай” тип йөрөтәләр. Әлхасил, ярсыҡланып Ҡубанға киткән ҡан ҡәрҙәштәребеҙ үҙҙәренең шул замандарҙағы сит атрафтар тарафынан тағылған ҡушаматын халыҡ исеме итеп ҡабул ҡылған...

– Бына шулай ул, атлы нуғай казагы Сәйетбатталов! – Тегенең бөйөрөнә төрттө Сәлимйән.

– е, үҙеңдең дә кемлегеңде онотма!

Егеттәрҙең тел сарлауын көлөм өрәп күҙәткән хәҙрәт талған тубыҡтарын уҙыбыраҡ ултырҙы:

– Йә Раббым, рәхмәтеңдән ташлама! Әхмәтзәкир мәғзүм, мәртәбәле шағирыбыҙ ибәтулла Сәлиховты беләһеңме?

– Әлбиттә, әлбиттә!

– Тап бына шуның дүртенсе быуын вариҫы инде был атлы казак. Баба ы кеүек уҡымышлы булыуы өҫтәүенә – оҙон көйҙәребеҙҙе лә ил киңәндереп уҙа.

– Афарин! Беҙҙәргә лә ишеттерсе, уҙаман!

Мәҙрәсә бура ы яғында байтаҡтан уҡ балта туҡылдауҙарына түҙем еҙләнеп ҡолаҡ алған Сәлимйән:

– Мин китәйем инде, йәмәғәт, – тип ҡалҡынырға иткәйне лә, хәҙрәт яурынбашынан баҫып туҡтатты:

– Балтаң ҡасмаҫ – йырҙы тыңлайыҡ, мырҙам. Шунан уң ҡунаҡты ауыл тирәяғы менән таныштырып, Перовский янаралдың утарынаса ер- ыу гиҙҙертеп, бауыры аҫтынан ел үткәртеп ҡайтыр ығыҙ.

Буй-буй юлаҡланған ҡытыршы ҡарама олонона өйкәлеп ултырған Ғәбделәхәт башын салҡайта биреберәк тәрән улыш алды, ерҙе-күкте сихриәткә тулыштырып ыҙылды ғәзиз моңобоҙ:

*Иҙел буйҡайҙары, ай, ҡаялыҡ –*
*Полковник Тәфтиләү яу урыны.*
*Башҡорт илкәйҙәрен утҡа тотҡас,*
*Алтынланды я ил яурыны.*

*Тәфтиләүҙең меңгән, ай, аттары*
*Саптар ҙа ғына менән тимер күк.*
*Тәфтиләүҙәй ҡан ыҙ булыр микән –*
*уйҙы илде ҡырағай йәнлек күк.*

*Аҫтындағы эйәр атҡа тейер,*
*Эйәре лә белмәҫ, ат белә.*
*Тәфтиләүҙең ҡылған, ай, ҡә әрен*
*Үҙе белмә ә лә, ил белә.*

*Ҡайнап ҡына сыҡҡан Иҙел аша*
*Тәфтиләүҙәр кисеү таба алмаҫ.*
*Ир-егеткәйҙәрҙең өмөткәйен*
*Тәфтиләүҙәр мәңге быуа алмаҫ.*
*Ҡара ла ғына урман ҡая бите –*
*Шаулайҙыр ҙа кисен ел саҡта.*
*Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,*
*Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.*

Түбә е ҡарлы тауҙай салланған хәҙрәттең, ҡыҙыл ебәк ҡулъяулығын ҡулында әлендереп, күҙ йәштәрен өртөп алыуын күргәс, иҫкелеккә ҡуш ҡуллап йәбешеп

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 37



ятыусы фанатик ымағыраҡ тойолған был дин ә еленең дә күңелендә эйәрлейүгәнле ат барлығы хайран ҡалдырҙы ситтән килгән ҡунаҡты. игеҙ йылдан уң ҡарттың донъя ҡуясағын, ә шуның икенсе йылында уҡ бөтә Рәсәй күләмендә тетрәткес зил-зилә ҡубып, донъяларҙың айҡал-сайҡал киләсәген, мең туғыҙ йөҙ ун игеҙенсе йылда халайыҡтар аҡтарға әм ҡыҙылдарға бүленеп, йыр-моң өйөүсе был уландар шул ике яҡтан бер-бере енә әжәл уҡтары атасағын, Рәсәйҙә иң беренсе булып Башҡортостанға автономия яулап аласаҡтарын, моғайын, табындаштарҙың бере е лә башына килтермәгәндер...

2

Башҡортоноң ҡайғы- ағышы менән, фиҙакәрлек рухы менән уғарылмыш йырына тәрән әҫәрләнеп ҡатып ҡалған абыстай ҡапыл, алыҫ яҡтан килгән ҡунаҡты аптыратып, тамағына әсе төтән тығылғандай йүтәлләп сәсәй башланы:

– Алла, Алла, үләм, башыма еҫ ҡапты, улышым томаланды! Анауы яҡтан килә, фуф! – Бармағы менән бер тарафҡа төртөп күр әтеп, быуылып сәсәй-сәсәй танауын баҫып йүгерҙе.

– әй әттәгенә е, әҫпең[31] ҡалҡҡандыр, әсә е, әҫпе еләгенән төнәтмәнде эсә ал! – Өтәләнеп торҙо хәҙрәт, бары ы ла ҡуҙғалды.

– Бер еҫ тә юҡ бит, ни ғәжәп!? – Аптыраны Әхмәтзәкир.

– Бар шул, бар! Хәлил дуңғыҙҙың касафаты: көпә-көндөҙ, әҙәмдән оялмайынса, ауыҙына иблистең шул торомбашын тыҡҡандыр, хәшәрәт!

– Төтөн-фәлән күренмәй ҙә ә?

Сәлимйән аңлатып бирҙе:

– Ауылдың арғы осонда – ярты саҡрым арауыҡта ул тәмәке тартыусының өйө.

Хәҙрәт үҙе әсе тауыштан өрәнләне:

– Фатих, тим, күрмәй еңме ни әбсәндең хәлен?! Елеп барып томалап кил дуңғыҙҙың ыҫлы томшоғон!

Ҡуранан сығарылған аттарҙың бере енә яйҙаҡ ҡына менә алған мәғзүм тиҙ үк барып әйләнеп килде:

– Булды, атай, махра ын табаны аҫтына алып үндерҙе лә яр аҫтына әрәмәлеккә тайҙы. Әрекмән төбөнә боҫоп ҡына быҫҡытып ултыра инде.

– әй мөстән!

– Ажда алай йәйен алған бит тағы, ихата ы тулы халыҡ. арыҡтыҡылай билдәмә ен Хәнифә еңгәм миңә тотторорға иткәйне лә, туҡталып тора алманым.

– Дөрөҫ иткән ең, улым. Биш ваҡыт намаҙын үтәмәгән я ил бәндә ҡулынан мал алыу харам.

Ғәбделәхәт, ыбайланып, үҙ юлына елдерҙе, мәғзүм ике аға ына шыбырланы:

– Хәнифә еңгәм әйтә, алыҫтан килгән ҡунаҡ бар икән еҙҙә, Сәлимйән шәкерт менән ике ен йәйен итенән ауыҙ итергә алып кил, ти...

– Юрғалар, ана, әҙер, кем, мырҙалар. ә-әәй, үҙемдең йәшерәк саҡ бул а... Барығыҙ, донъя гиҙеп ҡайтығыҙ.

Ике ыбайлы ҡушарлап юрттырҙы. Саҡма тояҡтар елдән шәберәк елде – күҙ асып йомғансы тауҙы ла артылдылар.

– Остоҡ Перовский утарына!

– Остоҡ!

Йәшел үҙәндән уҙылған Әселеүҙәк йылға ын буйлап барып, ҡаршылағы Оҙонҡырлалар яғынан уға килеп ҡушылған аҙлыйылғаны кисеп, ул яры буйынан бара-бара, шуға ҡойған нәҙек кенә Манҡыс ыуын да артта ҡалдырып, был тирәләге иң бейек үр Артышлытау моронондағы Ҡапҡанташ тарлауығына керҙеләр. Уңдан – шаҙра ҡаяташ, улдан текә түң аҫтындағы ҡара шырлыҡ ҡосағынан аҙлыйылғаның улығып ҡына сылтырауы ишетелә; юл түтә е – бер арба ла ы-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 38



байлы ғына йәнәшә ҡыҫылып уҙмалы. Ҡапыл алда дөбөр-шатор тәгәрмәстәр, еҙ ҡыңғырау сыңлауы иҫкәндерҙе, аҡ күбеккә батҡан ҡара айғырҙың ауыҙын ауыҙлыҡ йырыуҙан күҙҙәре аҡайып, ҡуш ҡолағын шешләндереп, муйыны дуғалай бөгөлгән яр ыу башы йәшен тиҙлегендә ҡаршы ырғылды, дилбегәсе енең юлбаҫарҙай ҡолаҡ ярып ыҙғырыуы я илланып өрәнләүенә әүерелде:

– Көшшш, ыбыр-сыбыр ҡырҡаяҡ, көшшш! Кит юлдан, Зәхмәт бай үҙе килә! – ыбайлылар шаҙра ҡаяға аттарын саҡ ырныҡтырып өлгөрҙө – арҡа ына ялҡ-йолҡ итмеш ҡыҙыл атлас бөркәтелгән ҡара айғыр аҡ кейеҙле ары ситән кырандасты өйөрмәләй дө өрләтеп үтеп китте. Әхмәтзәкир мосафирҙы иң хайран ҡылғаны шул ине: аҡ кейеҙгә баярҙарса ларҡайған мыҡты әфәнденең ситән ҡырынан әлберәгән аяғында, йәйге эҫе сула булыуға ҡарамаҫтан, ҡыҙыл буҫтау биҙәкләнгән оҙон ҡуныслы ҡышҡы бийма, өҫтөндә ҡышҡы бүре толоп, башында күк төлкө ҡолаҡсын, ә ҡуш тәртәләй алға оноп ҡайыш дилбегә йомарлаған ҡулдарында тер әктәренә тиклем еткән оҙон ҡуныслы ап-аҡ сафъян бирсәткәләр – аристократ мәрйә ханымдарҙың затлы кейеме.

– Зәхмәт әшнә, бер ауыҙ үҙ бар ине!

– Тр-рр! – Атының ауыҙын йыра тартып туҡтатты. – Йә, ләңкелдә, ваҡыт юҡ!

Сәлимйән, юлдашына күҙ ҡыҫып, “ләңкелдәне”:

– Фокан урыҫҡа әсәйеңде атып ҡайтып килә еңме?

– Көш-шш! Осраған бер хәйерсегә телемде әрәм итмәйем! – Сыбыртҡы ын шартлатып, дөбөр-шатор олаҡты.

– Вай-вай-вай, был ни хәл, кем булды?! – Баш сайҡаны Әхмәтзәкир.

– Ләҡәбе Зәхмәт бул а ла, асылында Әхмәт тигән шәриҡтәшем, мәҙрәсәне быйыл бергә тамамланыҡ.

– Аҡылдан шашҡанмы, ти әм...

– Столыпин алды унын барлы-юҡлы аҡылын.

– Батша министрҙарының башлығымы?

– Тап үҙе. Шуның “ер атыуға хөрриәт” тигән законы сыҡҡас, ата ы бахырҙан ҡалған уңғы байлығын – йәйләү ерен Фокан-урыҫҡа осороп, үҙенсә, йәнә е, серегән байға әүерелеп, шө рәтенә түҙмәйенсә, урыҫтан ер хаҡына алған ҡыш кейә е бай кейемдәрен йәй кейеп ма айып йөрөй... Фокан ҡарт та хәйләкәр: ылыу ҡыҙына Зәхмәт ызнакумының күҙе төшөүен шәйләгәс, ер хаҡын бер нисә өлөшкә бүлеп түләргә үҙ ҡуйышҡан: килгәнең айын ҡәҙерле ҡунағым булыр ың, табын ҡороп, рәхәтләнеп өйләшеп ултырырбыҙ, тигән. Тик мәғәнә е шунда: килгәне айын эсереп иҫертеп, кәрт уйнап, аҡса ын отоп алып ҡала Зәхмәттең...

– а-аай, был беҙҙең ҡара башҡортто! – Әсенеп көлөштөләр.

Ҡыҫыҡты уҙып, түңәрәк аҡланда йылғаны ҡабат кискәс, аптырашып ҡалдылар: юлға кәртә ҡоролған, ә уйыл күҫәк услаған мыҡты өс урыҫ, күҙҙәре менән ашарҙай, ажырайып торалар.

– Фокан ҡарттың Зәхмәттән сәлдергән ер сиге – ары уҙҙыртмаҫ, яуыз. – Йылғаны кире кисеп, алыҫтан уратып бата-сума үтергә тура килде.

– Их, ҡуҙға алған ҡойҡалай сөрөшөп тарая башҡорт ерҙәре...

– Столыпин реформа ы ошолай уңышлы бар а, аяҡ баҫыр ғына түгел, ҡәберлек тә еребеҙ ҡалмаясаҡ... – “Перовский юлы”, “Перовский утары” тип тарихҡа кергән урындарға ана шулай ғәмләнеп барып еттеләр.

– Ана анауы тауҙы аш аң – минең тыуған Мырҙағолат ауылы...

– еҙҙең аша йөрөгәнме атаҡлы гөбөрнәтер?

– Эйе. Йәйҙәрен ошонда башҡорт ҡымыҙын эсеп, ҡалъяларын оғоноп, ҡурайын тыңлап рәхәт ял итер булған. Ат бәйге е, милли көрәш, ғәскәри та ыллыҡ, ҡурай, йыр, сәсәнлек буйынса ярыштар ойошторол, еңеүселәргә аҫыл бүләктәр тапшырған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан бейә ауып ҡымыҙ бешеүсе, ашнаҡсы, туҡыма туҡып

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 39



киндер, балаç уғыусы, дебет шəл бəйлəүсе, кейеҙ баçыусы, тире тун əм ҡаты күндəн тарамыш еплəп итек-ҡата, ауыт- аба тегеүсе, шулай уҡ оҙон көйгə йырлаусы, ҡумыҙҙа уйнаусы əм бейеүсе иң унғандарға затлы бүлəктəр бирелгəн. Ошо Перовский утарынан Ырымбурҙың гөбөрнəтер арайынаса йөҙ егерме биш саҡрым арауыҡта əр биш-алты саҡрым айын атсапҡын ҡуйылып, гөбөрнəтерҙең ҡыҙыл урғыс мө өрлө пакет-хəбəрнамəлəре утарҙан Ырымбурғаса əм кире енсə ҡулдан ҡулға тапшырылып, ҙур тиҙлек менəн алып барып еткерелгəн...

— Бағана ыҙ-сым ыҙ “тере телеграф” йəғни!

Перовский утарынан тороп ҡалған ҡара күмерҙəрҙе ҡарағас, Перовский юлы буйлап Эйек тамағы йүнəлешенə бара-бара, əйлəнеп ҡайтыр яҡка улға — үçəргəндəрҙең элекке Бейлоғош йəйлəүенə тартылдылар. Элекке, сөнки ул да урыçтар ҡулына күскəн, башҡортҡа уҙмаға берлəм юлы ғына тыйылмай ҡалғайны. Элеккелəрҙе ағыныуҙан моңло-зарлы Бейлоғош йылға ы тирəгенə ат бəйлəп, алҡынса ыуҙа тə əрəт алып, өйлə намаҙын уҡығас, ҡусҡыл үлəнгə янтайып саҡ ҡына хəл алдылар.

— Шулай итеп хозур йəйлəүҙəребеҙ ҡулдан ысҡынып китте, мал йөрөтөр ҙə урын юҡ, ауылдарыбыҙҙа биклəнеп ултырып ҡалдыҡ... Эй-йй! — Төп өҙ зəңгəр күккə ҡарап салҡан ятҡаны килеш, ыҡтанып көйлəне Сəлимйəн:

*Башҡорт йəйлəүҙəрен атып эскəс,*
*Елкə соҡорон башҡорт ҡашына.*
*Батша анаунигы Столыпин етте*
*Башҡорт ерҙəренең башына... —*

— Үҙебеҙҙең мəҙрəсəлə сығарылған яңы йыр — “ атылған йəйлəү” көйө...

— атып та, атылып та бөтөп бара шул башҡорт...

— Əйтсе миңə шуны, уҙаман: бына ин, күп уҡыған, ғəрəпсə менəн фарсысаны ғына түгел, урыççаны ла ыуҙай эскəн ғалим кеше, нисек уйлай ың, ҡасан да бул а йырып сыға алырмы икəн бахыр башҡорт ошо ҡоллоҡ, фəҡирлек, ҡара наҙанлыҡ аҙлығын? Килерме ергə дөйөм хөрриəт[32] əм тигеҙлек?

— Үҙебеҙҙəн тора инде бары ы ла.

— Ик еҙ-сик еҙ кафыр-урыç донъя ында кескəй утрау ғына булып ҡалған башҡорт үҙе генə нишлə ен?

— Улай тип əйтмə, ҡорҙаш. Кескəй генə ҡырмыçҡа ла үҙенең кəүҙə енəн ун тапҡырға ҙурыраҡ əм ауырыраҡ йөктө өйрəп илтə ала. Бабаларыбыҙ ике быуат буйынса бит ятбауырҙар талауына ҡаршы ҡылыс айҡап ҡарышҡан, фəҡəт шуның арҡа ында Башҡортостан тигəн аçаба ерен, башҡорт тигəн исемен, телен, динен кафыр тəре енəн таптатмай ҡурсалап ҡалдыра алған.

— Əммə халҡыбыҙҙың хəҙер ҡылыс айҡар хəле юҡ...

— Ни өсөн? Сөнки я ил аҡ батшаның ике башлы сəмреғошо нисəмə быуат буйынса уның бауырын суҡып, ҡанын эсеп, елек майҙарын ҡороҡҡан, хатта Алла ы Тəғəлə биргəн зирəк аҡылын да зəғифлəтеп бөүел еҙлəндергəн. Бая ғына эргəбеҙҙəн яндырайланып уҙып киткəн Зəхмəтегеҙҙе генə ҡара... Йəки ислам нурына ҡойонған ауылыгыҙҙың ауа ын ыçлап беренсе башлап тəмəке тартҡан, араҡы эскəн Хəлилегеҙҙе генə ал... Ысынлап та, зəхмəтҡə абыша башҡорт... Бына ниңə ул үҙенең тыуған əсə ен — йəғни таланыуҙан, тартып алыныуҙан тороп ҡалған аҡтыҡ ерен атып ебəрə килмешəккə. Мылтыҡ əм туп атып та ала алмағандарын башҡортто аңғыралатып ялмайҙар. Əлхасил[33], үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға ал - аҡ ҡына балҡыясаҡ беҙҙəргə тигəн яҡты хөрриəт таңы. Ə тигеҙлек мəсьəлə енə килгəндə, ҡулыбыҙҙағы бармаҡтар ҙа тигеҙ түгелен белə ең, əммə уларҙы тигеҙлəп ҡырҡып булмай. Егəрлейəн əм ялҡау, йылғырйəн əм бөлтерəгəн, əлəтле əм

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 40



әләт еҙ, талантлы әм талант ыҙ, аҡыллы әм томана, мәғрифәтле әм наҙан, тәүәккәл әм ихтыяр ыҙ, батыр әм ҡурҡаҡ ара ындағы айырма мәңге булған әм буласаҡ.

— Мәңге-мәңге уларҙың беренсе е — байыраҡ, икенсе е фәҡирерәк ҡалырмы?

— Уны ы ла әр кемдең үҙенә бәйле.

— ем... Тимәк, бына мин, баяғы Фатих мәғзүм әйтмешләй, тишек сәкмәнле йән, әлеге шул ялҡаулығым йә наҙанлығым, ҡурҡаҡлығым арҡа ында ғына фәҡирлектән сыға алмай аҙапланам, инеңсә?

— Шулар арҡа ында ғына түгел шул, бына ҡайҙа төп мәсьәлә! Бәндәнең шәхси әләтлектәренә юл ҡуйыусы, уны быуып тотмаусы сәйәси мөхит булырға тейеш донъяла, шунда ғына йәмғиәттең барлыҡ ағзаларына ла ҡояш яҡты ы төшә, яҡтылыҡтан файҙаланыу мөмкинлеге асыла, алҡын күләгәлә ҡалыусылар аны аҙая. Бер-бере енән Күк менән Ерҙәй айырмалы серегән бай әм ҡаҡҡа таянған ярлы булмаç ине шул саҡта; ә сағыштырмаса байыраҡ та фәҡирерәк, әммә әммә е Хоҙай ҡушҡан әҙәмдәрсә йәшәү сарыфына эйә азат инсандар булыр.

— Шулайҙыр ҙа бит... әммә илебеҙҙә, аçабаларҙан тыш, ер еҙ йәки аҙ ерле килмешәктәр ҙә бихисап, уларҙың да ауыҙҙары уçлаптай...

— Алла ы Тәғәлә башҡорт ерен Ирәм бағылай бай ҡылып яралтҡан әм ул тик бер башҡорт халҡын ғына түгел, бәғзеләрен дә бәхетле, ырыçлы итерлек, әгәр ҙә ки еребеҙҙә заманса мәғрифәтле, ғәҙел хакимиәт урынлаштыр аҡ. Алдынғы урыç зыялылары ла уйлана ошо хаҡта.

— Бая ғына “Тәфтиләү”ҙе йырлаған егет, йәшереп кенә, Ырымбурҙан бер урыç гәзите алып ҡайтып уҡығайны: аңлауымса, коммунистар фирҡә енең етәксе е Ульянов-Ленин тигән берәү бишенсе йыл болғанышын яңынан ҡабатларға, йәшәп килгән хакимиәтте түңкәрергә саҡыра.

— Беләм. Өфө, Силәбе яҡтарынан иçкән елдәр беҙгә лә уғылғылай. Шундай мөхит тыуа ҡал а, беҙгә лә йоҡлап ятмаçҡа, файҙаланырға кәрәкле, тип анайым.

— Тарҡаубыҙ, сәйәси фирҡәбеҙ ҙә юҡ...

— Ойошорбоҙ. Ойошторорбоҙ. Башҡортҡа ла уяныр ваҡыт етер!

— Бир ен Хоҙай, бир ен Хоҙай!

Дәртләнеп атландылар. уғарылып, юшанып алған аттар йылдам елдерҙе. Кершәнник юлынан ҡайтып еттек тигәндә, ауыл осондағы ҡылғанлы убала ишек бейеклек ике яçы таш ҡара-ҡаршы ҡаушарылған зыяратҡа туҡталдылар. Әхмәтзәкир, ғәҙәтенсә, яҙыу-фәлән эҙләп тә таба алмағас, юлдашына ҡараны:

— Нимә был?

— Баяғынаҡ хәҙрәтебеҙ шомланыбыраҡ телгә алған Хәсән менән Лотоштоң ҡылмышы был. Ә асылында боронғо әүлиә зыяраты — Үçәргәндең ун алтынсы быуат ахырындараҡ барымтасы ҡаҙаҡ ханы Ҡасимдан яуҙа еңелеп, язалап үлтерелгән Урмәмбәт хан ҡәбере. Әммә эш унда түгел.

— Эш ниҙә уң?

— Эш шунда ки, ата-баба мәжүсилегенән ҡалған йола бар беҙҙә: боронғонан күмелеп ятмыш алтын хазина ы, имеш, төндә ҡыҙыл ялҡын рәүешле ләүкей. Шуны күргән кеше әгәр кейеменең тиçкәре ен әйләндереп кейеп, ипләп кенә усы менән уҡ а, ләүкеү ялҡын шау алтынға әйләнә... Хәсән менән Лотош — игеҙәк ирҙәр — шул тылсымлы ялҡынды ошонда күреп, антый Хәлил андыҡташтан уғып алған хазина беҙгә лә харам түгелдер, тип, уғып алырға итәләр, әммә кескенә яңылышлыҡ ебәрәләр — бейәләйҙәрен әйләндереп кейергә онотҡандар... өҙөмтәлә ялҡын кире ер аçтына умырылып, ер өçтөндә ип- ил төндә ел-дауыл, зил-зилә ҡубып, ике яҡҡа быраҡтыра ике ен, шул зәхмәттән Хәсәненең күҙе салшайып, Лотошоноң ауыҙы ҡыйшайып ҡала... Ҡәбер өçтөндәге ике яçы ташты,

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 41



башҡаларға асы  абаҡ итеп, имеш, боронғо суҡай таш өҫтөнә шул икәү килтереп ҡаушара...

—  абаҡ ти әң дә  абаҡ... Ә анауы уй ыулыҡта ниндәй ике ташбура  ерәйә тағы?

— Уны ы ла әүлиә зыяраты, Аҡ аҡтимер заманынан ҡалған, тиҙәр.

— Абба, барып күрәйек аны ын да!

 улау (мал  ыулауы) тип аталған  аҡмар ҡырсынлығының яр яҡа ында бер-бере- енән йөҙ аҙымдай алыҫлыҡта боронғо бер яугирыбыҙҙың кәүҙә е  әм башы айы- рым-айырым ерләнгән, имеш. Эйек тамағынан яҡынлап килеүсе Аҡ аҡтимер яу- ының көсөн белергә тип, Туҡтамыш ханыбыҙ тарафынан ебәрелгән темеҫкен[34] башҡорт, имеш, үҙенең шунда башы сабылып өҙөлөрөн алдан уҡ белгән; башым- ды — сабылып төшкән еренә, кәүҙәмде  эйәрҙән ҡолаған урынына күмегеҙ, тип әйтеп ҡалдырған,  әм шулай иткәндәр ҙә.

— Туҡтамыш  әм Аҡ аҡтимер эҙҙәре... тарихи ер икән шул, ысынлап та.

— Ошоғаса ер  өргәндә тимер уҡ,  өңгө башаҡтары, тимер күлдәктәр килеп сы- ға төрәндәргә эләгеп.

— Башҡорт ерен илбаҫарҙарҙан ҡурсалап шә ит киткәнгә күрә, быуаттар буйы- на онотмай зыярат ҡылып, әүлиә тип ҙурлағандар, изгеләштергәндәр мәрхүмде, урыны ожмахталыр... — Ҡыҫҡа аят уҡып доға ҡылдылар ҙа эйәрҙәренә менделәр. Ҡырсынлыҡ кисеүенән бесән тейәп сығып килгән, пар ат егеүле бейек урыҫ арба- ы — ридван ыңғайланы ауылға; бесән башында, арба артынан атлаҡкан  ыбайлы- ларға әленән-әле теклəп, ҡуш бағаналай  ерәйеп, ҡара кейеҙ эшләпәле ике ирекәй ултыра, бере енең күҙе салыш, икенсе енең ауыҙы ҡыйыш, әстәғәфирулла тәүбә!..

— Ошо икәү була инде Хәсән менән Лотош ҡарттар...

Бесән таулы ридвандың алдына сығып, ауылға елдерҙеләр. Ер кеше е яныпбе- шеп бесән әҙерләгән мәл, бөтә халыҡ сабында, ҡарт-ҡоро ла бала-саға ғына салы- на күҙгә.  ыуалғысҡа ҡайырылып, оҙон юлдан  уң туҡталышта тамам  ыуынған ат- тарын  ыҙғырып эсерҙеләр ҙә, етәкләп, йылға үрендәрәк Ҡаҫмарт тамағында ҡу- сҡылланған әрәмәлек буйынан атланылар. Әлерәк кенә Әхмәт байҙың йылдағыса Йылайырҙан ҡыуҙырҡан  уңғы  алдары үткән, имеш, ағылып; ташлы морон яр ҡырында  өрлөгөп ҡалған бүрәнәләр асы сайыр еҫтәре аңҡытып ята тырым-ты- раҡай. Бөгәлдәге өйкөм-өйкөм тал артындағы ҡомлоҡта мөңгөр-мөңгөр үҙ алды- на  өйләнеүсе сәйер телмәр йәлеп итте иғтибарҙы, туҡтап шым күҙәттеләр. Ғәҙәти киндер күлдәк-ыштан, башына урыҫ картузы кейгән тирәктәй нәҙек-оҙон буйлы, матур сөм-ҡара мыйыҡлы утыҙ йәштәрҙәге әҙәм, яланаяҡтары менән дымлы ҡом- ға бата-сума, башы йылғаға ҡаратып ҡармаҡ ҡыуалы сәнселгән  ыу ситенә тиңәлә лә әллә ниндәй күҙгә күренмәҫ тиңдәшеме, дуҫымы менән сәләмләшә:

— Дахил[35] -Шарап туғаным,  аумы,  аумы!

Үҙе үк үҙенә яуаплай:

—  аумы, Хәлил туғаным,  аумы,  аумы!

— Иҫән-имен генә торҙоңмо урыныңда?

— Үҙең иҫән-имен килеп еттеңме?

— Иҫән, иҫән, туғаным! — Балаларҙай сүгәләп, усы менән ҡомдо көрәп, ка- фырҙың ҡыҙыл  урғыс башлы, яртылаш бүҫкәртелгән эсемлек шешә ен йолҡоп сығарҙы. Юғары тотоп күҙәләмә кимәлен билдәләгәс, бөкө өн тешләй асып, тама- ғын ғорҡолдатып бер талай йотто; бөкө өн ҡабат тығып, баяғы ҡом келәтенә күмде лә ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып ҡалҡынды. —  ау булып тор, Дахил-Шарап туға- ным, мин килгәнсе,  ау бул,  ау бул!

—  ау бул, Хәлил туғаным,  ау бул! — Йәйен балығын ҡармаҡлау ма ыры яр ҡы- рыйынан әкрен генә күтәрелеп, әҙәм буйына тиңәлеп үркегән күкшелт әремдәргә ышыҡланғас, шарҡылдап көлөштөләр.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 42



— Баяғы антый Хәлил ағабыҙ ошо үҙе була инде! — тине Сәлимйән.
— Ысынлап та антый икән, әй. Араҡы ын эт эсмә ә ярар ине.
— Дүрт аяҡлы ын белмәйем, әммә ике аяҡлылары эскеләй, тигән хәбәр бар...

Арткапҡала ҡаршылаған Фатих ҡусты ярҙамында аттарҙы ҡураға ҡуйып, баяғы ҡарама төбөнә янтайҙылар. Хәҙрәт уларҙы өйлә сәйенә көтөп ала алмағас, артабанғы ын абыстай менән мәғзүменә тапшырып, мәсет иғәнә енә бесән сабыусы өмәселәре эргә енә ашыҡҡан. Самауырҙан баш тартып, ҡымыҙ менән ыу ын ҡандырҙылар ҙа, Фатих мәғзүм ҡотҡо она бирелеп, баяғы саҡырыу ебәргән йортҡа йәйен ите ашарға йүнәлделәр, сөнки антый Хәлилде яҡынданыраҡ күрергә тип сәмләнде ҡунағыбыҙ. Тишек-тошоҡ серек алам түбәле, ус ая ындай ни бары ике ҡарындыҡ тәҙрәле, көмөрәйгән ситән соланлы йоҙроҡтай ғына өйҙөң асыҡ ишегенән ыҙылған моңло ҡурай артынса уҡ шундай уҡ моңло ир әм ҡатын йырлауынан әҫәрләнеп, соланда туҡталдылар.

— Хәлил ағай менән Хәнифә еңгәй! — тип шыбырланы Сәлимйән. Бирелеп тыңланылар:

Хәлил:
*Ирәм*[36] *бағында сән үҫтең,*
*Йөрәгем парә ен киҫтең,*
*Саба еле булып иҫтең,*
*Хәнифәм, ау, хәләл йәрем.*

Хәнифә:
*Күгемдең күк шоңҡары сән,*
*Даламдың буҙ толпары сән,*
*Бәғеремдең ыңары сән,*
*Хәлилем, ау, ярты йәнем.*

Хәлил:
*Сәсрәп кит ен донъя малы,*
*Алтын-көмөш — дуңғыҙ ҡаны.*
*Төнөмдөң ин үнмәҫ таңы,*
*Хәнифәм, ау, ҡояш-айым.*

Хәнифә:
*Тәңрем сәме йөҙҙәреңдә,*
*Йондоҙ шәме күҙҙәреңдә,*
*Кәүсәр тәме телдәреңдә,*
*Хәлилем, ау, бар йыаным.*

*Ҡушарлап:*
*Ожмах түре — ҡыуышыбыҙ,*
*Дахил-шарап — улышыбыҙ,*
*Былбыл булып ҡауышығыҙ*
*Хәлил менән Хәнифәләй.*

Ете йәштәрҙәге ауыл аҫырауы[37] — шарылдаҡ бер ҡыҙ бала ҡайтып инеп, тамаша маҙа ына тейгәс, ипле генә сәләм биреп инделәр, йөҙҙәре ҡояш менән айҙай балҡыған бәхетле хужалар и ә тар өйҙәренә ыйғы ыҙ киң күңел менән ифрат ихлас ҡаршыланы; буй икегә йә әт ашъяулыҡ йәйеп, ҡара ҡомғанда ҡаты итеп бешерелгән өрөклө сәй, ҡалын көлсә ҡатарында оло батмусҡа алынған көрәк яҫылыҡ имеҙ йәйен ҡойроғо менән ыйланылар. Урындарында тышлыҡтары тап-таҙа бер юрған менән яҫтыҡтан башҡа ис ни күренмә ә лә, аштары — тирәсе сым менән тарттырылған ярыҡ ҡаҙанда, сәйҙәре суйын ҡомғанда бешерел ә лә, иҙәндәре әм

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 43



бөтә ағас әйберҙәре балауыҙҙай ары итеп ҡырсып йыуылған, көллө өй эсе паклыҡҡа уғарылған, ә үҙҙәре былбылдай айрашҡан был антый йәндәр ысынлап та бәхетле, иҫ китмәле бәхетле ине. Йөҙҙәренән түгелгән әм ҡарындыҡ тәҙрә үтә кергән нурҙарҙы аҙ ынғандай, көпә-көндөҙ унлы шәм яғып түр башына аҫҡандар, мейес ҡашаға ында ла етеле шәм нур сәсә... Ошо уңғылары ифрат таң ҡалдырҙы алыҫтан килгән ҡунаҡты. Әйтеүҙәре буйынса, ғүмерендә мал-тыуар аҫырамай, иген икмәй, бесән сапмай, йәйен-ҡышын балыҡ тотоп, кейек аулап, Кершәнник баҙарында шуларын атып, улъя төшмәгән саҡтарында туған йәнле ағай-энеләре хәйеренә таянып саҡлы-соҡло көн күрә ул антый Хәлил, тигәйнеләр ҙә ә, ә ниңә уң көпә-көндөҙ сыраҡ яндыра? Уны ы ғына ла етмә ә, тар өйөндә аҫырауҙы айҙар буйына ҡундыра, услап-услап табынға өрөк, йөҙөм емеше сәсә?.. Аҫырауы ла мишәрсәләп тәтелдәй, өҫтәүенә:

— Менүәрәләргә кергәнием, өрөксөз-нисез семерәләр ачы мәтрүшкә чәйен, аҡтүтәйем. Сездә эчкән чәйләрем исемә төшөп, күңелем болғанып чығып киттем, ясап биргәнен дә эчмичә. Аҡтүтәйем, әйт әле: өрөксөз дә чәй эчеп буламы икән ни?!. Өйләре ҡап-ҡараңғы, бездәгедәй көнө-төнө шәм дә янмый, ичмасам!

— Балаҡайым, күрә еләрең бар икән!.. — тип хафаланды, ҡыҙҙың арҡа ынан өйөп, өйҙөң хужабикә е. Аптыраҡ тотҡан Әхмәтзәкирҙе ни аралалыр әлеге шул Сәлимйән әшнә е йәшертен генә әшкәртте: баҡти әң, Столыпин законына ярашлы, был өй ҙә ҡапыл байыған: антый Хәлил, Селек бөгәленә китәм — аҡмар яты-уына яҡын утар алып ултырам, тип, йәмғиәт еренән үҙ өлөшөн киҫтертеп, Рязань яғынан килгән ҡалталы урыҫ мужигына осорған гүзәл тәбиғәтле төбәкте; бер мужик килеп ултырғандан донъя үҙгәрмәҫ әле, тип, ауылдаштар быға ҡул елтәгәндәр, мужик төпләнгән утарҙы Селек Мужигы тип исемләгәндәр. Ләкин бер-ике йылдан уҡ Селек Мужигының биләмәләре ныҡ киңәйгән — Ырымбурҙан гөбөрнәтер землямерҙары килеп, хәт еҙ башҡорт ерҙәрен ҡырҡып биргәс, утар алтмыш йортло урыҫ ауылына әүерелгән, башҡорт аяҡ баҫмаҫ ергә әйләнгән... Бына ниңә көпә-көндөҙ шәм яғып ултыралар, өрөкләп сәй эсәләр, ә Хәнифә ханымдың урта бармағында аҫыл ташлы алтын балдаҡ ялҡылдай... Дөрөҫ, антый Хәлил баяғы Селек Мужигына илтер юлдың Ҡаҫмарт кисеүенә етер-етмәҫ ул яғында Әбейүлгән тауҙың дүрткелләнеп ятҡан андыҡташында төн урта ында ҡыҙарып ләүкегән ялҡын күреп (унда Муйтән бейҙең хазина ы бикләнеп ята, тиҙәр...), баяғыса, усы менән уғып алған, имеш, ул алтын балдаҡты; шулай ҙа мужик аҡса ына бәйләп аңлатыусылар ҙа етерлек...

Әпәр итеп аш ҡайтарғас, изге йола буйынса, алыҫтан килгән ғалим мосафир Ҡөрьән аяты уҡыны, йортта бәхет шулай тулып-ташып тороуын теләне. Ҡунаҡтарҙың өсө өнә, шулай уҡ етем-еҫер мишәр ҡыҙына ла , ваҡ көмөштән саҙаҡа тараттылар. Әхмәтзәкир, доға ҡылып алғас, усында тос тартымлы тәңкәнең алтын икәнен абайлап, был фәҡирҙәрҙән шунса хәйер алырға ауыр ыныптыр, тәңкәне өй хужа ына хәйер ҡылып кире бирҙе; Хәлил уны доға ҡылып алды ла үҙ сиратында Әхмәтзәкиргә хәйерҙән кире ҡайтарҙы:

— Изге мосафир, әгәр ҙә алмай кит әң, ҡанлы йәштәр менән ҡаты рәнйермен; инең ымаҡ хаҡ юлдан йөрөгән йәш ғалимыбыҙға ауыр сәфәрен саҡ ҡына бул а ла еңеләйтергә насип ҡыл ын ине Хоҙай! — Бәхетле ир менән ҡатын, ҡунаҡтарҙы урамғаса оҙатып, ингә иң терәшкән хәлдә сөңгөрләшеп тороп ҡалдылар...

3

аҡмар ыуында ҡойоноп, ыуынып алырға ла аҡшам намаҙына тиклем игелекле шөғөлгә ылығырға — мәҙрәсә бураусы оҫталарға ярҙамлашырға ниәтләнгәйне улар. Йөҙә-сума кинәнеп өйрәк ҡыуыш уйнағанда, арғы ярҙан, йомарлаған кейемдәрен ыңар ҡулында юғары күтәреп тотоп, түбә енә ут ҡапҡандай ерән сәсле,

йәше яғынан Фатих мәғзүмгә тиңләшерәк татар малайы йөҙөп сыҡты ла, йөгөн ярға атып-бәреп, былар уйынына ихлас ҡушылды. Йөҙгәнендә ыу өҫтөндә туҙ-баш йыландыҡылай ерән башы бер әкәмәт бул а, өйрәкләнеп күкте тибеп сумғанында яҫылығы ҡуш аялай, оҙонлоғо аршиндай дәү тәпәйҙәре хайран ҡалдыра ине. Башҡаларҙың иҫе китмәгәнен күргән Әхмәтзәкир:

– Исемең кем инең, мырҙам? – тип ҡыҙыҡ ынғайны, ә тигәнсе таҡмаҡлатып яуапланы:

*Нияз минем исемем,*
*Яланаяҡ кешемен,*
*Ҡарға бассам ҡызамын,*
*Пич башында өшимен.*

– Беҙҙең яҡта быңдай иммәтле инсандарҙы тайыш аяҡ тиҙәр ине, еҙҙә Нияз аяҡ тип әйтерлек елле өлгө бар, имеш. Әллә, тимен, ысынлап та ҡарға баҫып уңдымы был табан бәрәкәттәрең?

*Бәрәкәтем – бәрәкәт,*
*Табан жылым – хәрәкәт.*
*Көчләп пойма кидерсәгез,*
*Салып ташлыйм, жамәгәт!*

– Ҡайҙа шытып унды икән был шанлы татар бала ы?

*Шытҡан аулым Чишмәдер,*
*Ҡызлар ыштан чишәдер.*
*Жигетләре, жинләнеп,*
*Суын бушлай эчәдер!*

Көлөшә-көлөшә ҡороға сығып кейенә башлағайнылар, ерән башлының өҫ кейеме үҙенән дә сәйерерәк күренде: татарҙың бай шәкерттәре кеймәлекле фыртый ҡала фасонында аҫыл буҫтау туҡыманан бесеп тегелгән салбар-кәзәкей, кәләпүш; тик улар бары ы тиң ҡырҡ йыртыҡ әм ямауға ҡалып кеймәлек еҙ туҙған, әммә аман ошо “ҡала фасоны”нан айырылырға теләмәгәндәй күренә. Хәллә эйә енең үҙенең әйтеүенсә, ошбу килеш ул Ырымбурға барырға, Әхмәт байҙың үҙенә йә приказчигына “явиться” булырға тейеш – өҫтөндәге иҫкеләрен өр-яңыға алмаштырырға бушлай. Буштың ата ы үлгән, тип, уңғы сәйер мәғлүмәткә Әхмәтзәкир тамсы ла ышанмағас, быны ы ла тап ана шулай яланаяҡлап ҡарҙа йөрөү бәрәкәте икәнлеген тарихи йә әттән Сәлимйән менән икәүләшеп төшөндөрөп бирҙеләр. Баҡти әң, Нияз бынан өс йыл элек шартлап торған ҡышҡы селләлә ата ы менән Тоҙтүбәнән тоҙ тейәп ҡайтып килешләй, Татар Ҡарғалы ында ҡуналҡаға туҡталғас, донъяға билдәле Әхмәт байҙы үҙ күҙҙәре менән күрергә теләп сәмләнгән Нияз, түҙә алмай, “бынауы торған Ырымбурға эт арығансы барып әйләнергә” ата ын ныҡый башлағас, бала ының оҙон юлда ғына кеймәле тишек табанлы быймаларын йәшереп ҡуйған, ти ҡарт. Әммә... таң тишегенән Ырымбурҙың ҡар көрәүселәре ауыҙынан хәтәр хәбәр еләҫ ҡолаҡтан ҡолаҡҡа: “Ҡала буйлап сасҡау ҡарҙан яланаяҡ Хызыр Ильяс китеп бара Әхмәт байға!..” Мәғлүмәт йәшен тиҙлегендә Әхмәт бай йортона үтеп инеп, ысынлап та яланаяҡ Хызыр Ильясты ҡаршы сығып алалар ҙа байҙың йылы түренә мендерәләр. Изге йәндең аслан кем икәнлеген, ниңә бында килгәнлеген төшөнгәс, Әхмәт бай, күҙҙәренән эскер еҙ йәше мөлдөрәп, изге әмерен бирә: “Баштан-аяҡ өр-яңынан ҡаласа кейендерергә, кеҫә енә ун ум аҡса алырға. Ошонан уң да был инсанды күҙҙән яҙҙырмайынса, ошбу беҙҙәр ибә[38] ҡылғандың иҙерәп туҙғаны айын, ул Ырымбурға килгәнендә йылына бер өр-яңыға алмаштырып торорға. Милләтебеҙҙең сыныҡҡанлыҡ әм ғалилыҡ үрнәге бул ын өсөн, үҙҙәренә күрше ауыл Сәнкем-Биктимерҙең

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 45



Мөхәммәткамал хәҙрәт Дәүләтшиндың мәҙрәсә енә уҡырға урынлаштырып, йылына бер мәртәбә аҡсалата ибә ҡылып торорға”... Шунан бирле Сәнкем-Биктимер ауылының әр өйөндә яланаяҡ Нияз шәкертте хөрмәтләп ҡаршы алалар, йор таҡмаҡтарын тыңлап, ыйлап сығаралар, имеш...

Нияз мырҙаның бөгөн ниңә бында пәйҙә булыуының сәбәбе лә аңлашылды: баш яҡтан үтәсәк уңғы алға әләгеп, Ырымбурға барырға, Әхмәт байҙың ҡаҙна ына аламаларын тапшырып, өр-яңынан бөтәйеп ҡайтырға юлланған.

Сәйер енеүен баҫа алмаған Әхмәтзәкир, азаматтың хөлләләренең бер йыл эсендә ошондай ҙа иҙерәп туҙыуының сәбәбен орағас, иҫе китмәй яуапланы:

– Беҙ бит уларҙы, буштың рәхәтен күреп, бөтә ағай-эне индән төшөрмәй алмашлап кейәбеҙ. Нияз сисенеп йоҡлай, әммә Әхмәт бай иғәнә е йоҡламай – кемдендер иңендә кейелеп йөрөй бирә!..

– Аяғыңа бирмәнеләрме ни?

– Биргәйнеләр ҙә – алманым, сөнки биргән әр беренә аяғым ыйманы.

– Аяҡ ти әң дә аяҡ, тап килтереү ҡыйындыр шул. Батша үҙенде алдат итеп алғас нишләр ең икән?

– Яланаяҡ йөрөрмөн, бына былай иттереп! – Тәпәйҙәрен өҫкә ғорур сорғолтоп, хәрбиҙәрҙең парад маршын белеүен тамаша ҡылдыртты – Ырымбурҙа гөбөрнәтер арайы алдында ҡарауыл алдаттарынан күргән икән.

– Батшаның бөтә ғәскәрҙәре ошо Нияз алдаттай яланаяҡ йөрө әсе! – тине Сәлимйән. – Итектәре ярлы халыҡҡа тәтер ине, исма ам. Шулаймы, Фатих мәғзүм?

– Бына үҙең алдат булғас ни әйтер ең? Риза булыр ыңмы икән?

– Мин риза! – тине Нияз.

– ай, афарин! Борон заман татар халҡының Нияз кеүек яланаяҡ алдатлы ғәскәре бул а, Яуыз Иванға Ҡазанды бирмәҫ ине!

– Ниңә, әле лә уң түгел! – Нияздың бөйөрөнә төртөп ҡеүәтләне Сәлимйән.

Үр яҡтағы бөҙрә таллы бөгәл артынан ҡапыл ғына ҡурай моңо ыҙылып, әңгәмә ебе өҙөлдө лә бар иғтибар шул тарафҡа төбәлде: тымыҡ ыуҙа талғын ғына ал йөҙә; ең ыҙғанып, балаҡ төрөп үрә ҡатҡан мыйыҡлы бер мыҡты ағай ал башында ишкәкләп юл алдырта; ун ике йәштәр самалы бер ҡарпыш ҡолаҡ тарамыш үҫмер артҡы ишкәкте тотҡан; урталыҡтағы буралы өй башында и ә ҡарпыш ҡолаҡҡа тиҫтерерәк икенсе улан, ап-аҡ киндер күлдәк иҙеүенең үңер бауын сисеп ебәреп, ирәүән ҡурай шыжылдатып ултыра – быйылғы уңғы ал килә! Өймәкләшеп тамаша ҡылған ярҙағыларға салт иғтибар иттеләр: ҡурай моңо оҙон көйҙән дәртле таҡмаҡҡа күсеп, ишкәкселәр алмаш-тилмәш мөнәжәт атты ярға:

*Данлы Сәнкем-Биктимергә*
*Тартты аяҡ килергә.*
*Хәҙрәтегеҙ рәнйемә ә,*
*Туҡталырбыҙ был ергә.*

ал килеү хәбәре күҙ асып йомғансы өйберенсә таралып, ыуалғысҡа телгәр халыҡ эркелде – йыр әйтешеү ма ирҙары был форсатты ҡулдан ысҡындырмай ине.

Ярҙан:

*Ауылыбыҙ ҡоймалы,*
*Ҡапҡа асып ҡумалы.*
*Хәҙрәтебеҙ фатиха ы*
*Зәм-зәм[39] кеүек шифалы.*

Аңшайып килеп, ал башын таш моронға бәрҙертә яҙғайнылар, әсе телле Нияз сәнсеп өлгөрҙө:

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 46



*Кәшмәгең ник ишмәдең,*
*Исердеме ишкәгең?*
*Башың тотоп уфтанасың,*
*Башҡорт абый, нишләдең?*

алдан:

*Мал ағыҙам далаға,*
*аҡмарский ҡалаға.*
*еңлең алып ҡас ам, татар,*
*Булыр ың, тим, ҡайнаға!*

Ярҙан:

*Ике ҡулың чөйәлле,*
*Исем-атың кем әле?*

алдан:

*Сөйәлемдән килеп белеш,*
*Миңә ораy бирмәле!*

Ҡашлаҡтағы кешеләрҙе яр буйлатып үҙ артынан ылыҡтырған кәшмәкле ал ыуалғыс таш морон шаршы ын имен уҙып, ауыл осондағы Борам тауы тәңгәлендә әлмәкләнгән киң ятыуҙың таллы ярына ырныҡты, ике осо тирәктәргә арҡанлап нығытылды. Яр башына ырғып менгән алсылар менән әр кем ихлас күреште: Иркәбай исемле мыйыҡлы мыҡты ағай ҙа, уның Ғәбделхәй[40] атлы ҡурайсы әм мөнәжәтсе улы ла таныш ине ал ағыҙмалы аҡмар- ыу буйы халҡына; ҡарпыш ҡолаҡлы улан и ә, бик теремек ҡул биреп иҫәнләшеп, Ша изада Бәпесовмын, ҡаршығыҙҙағы олоғ шағир әм ҡурайсы Ғәбделхәй Иркәбаевтың мәҙрәсәләге шәриҡтәше, йән дуҫымын, йәйге форсат барҙа бергәләшеп йәмле аҡмар буйҙарын ҡыҙырырға, ил күрергә йүнәлдек, тип танытты ла, еҙҙең Үҫәргәндә лә, тап беҙҙең Бүләрҙәгеләй, ларылдап (“юллар” тип) өйләшәләр икән (“ өйҙәшәләр” түгел), ә Ғәбделхәй дуҫымдың Ҡыуаҡан яғында и ә дарылдап (“юлдар” тип) алдыралар, хәйер, минең кеүек әлбер ҡолаҡҡа уларҙың ике е лә бер, тип көлдөрҙө.

— Дуҫым Ша изада үҙе миңә ҡарағанда ла талантлы олоғ шағир, думбырала, мандолинала уйнау ма ирлығы и ә шундай юғары кимәлгә ирешкән ки, хатта аяҡ бармаҡтары менән еҙ ҡылдарҙан көй сиртә! — тип шапырткайны Ғәбделхәй, быны ына ышанмайыраҡ торҙолар: ҡул менән бул а — бер хәл, аяҡ менән булмаҫ, тинеләр. Әммә ләкин Ша изада, мандолина килтерегеҙ, ошонда уҡ ма ирҙарығыҙҙы аяҡ менән уйнарға ярышҡа саҡырам, тип өрәнләгәс, ундайҙар табылманы. Үҫмерҙәрҙең кемуҙарҙан ауаланыуын мыйыҡ бороп тыңлаған Иркәбай ағай ҙа Ша изаданың ма ирлығын күҙ ҙә йоммай раҫланы, өҫтәүенә, улар ике е лә Аҡмуллабыҙ булырҙай: юл буйы дәфтәргә мөнәжәт яҙышып ярыштылар, әммә бере ен бере е уҙа алманы, тигәс, Әхмәтзәкир уларҙың ярыш дәфтәрен аҡтарып ҡарап, ысынлап та шағирәнә йәнле уландар икән, киләсәктә милләтебеҙҙең ғорурлығы дәрәжә ендәге ижадсылар булмаҡсы, тип күңелдәрен күтәрҙе.

Шул арала яр башына Кершәнник юлы тарафынан ике улан йүгереп килеп етте, бере е, ялтыратып сәсен ҡырғаны, ых-бых улап:

— Сәлем Солтанов[41] тигән шәкерт буламын, Хәлил йәйенсенең улы, — тип таныштырҙы ситтән килеүселәрҙе. — Хәҙрәткә бесән сапҡан ерҙән, ауылға ал туҡталған, тип ишеттек тә Төхфи әшнәм менән күҙ йомоп дондоҡ.

— Төхфәт Ченәкәй[42], — тип төҙәтте ебәктәй йомшаҡ ары сәсле, аяҙ күктәй зәңгәр күҙле ( ыңары сәсәк сиренән аҡлағайны), талдай омғол буйлы үҫмер егет. — Шушы Саҡмар түбәнендә Сарыҡташтан арыраҡ Рәдүт дигән казачий ауылдан-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 47



мын, шушындағы мәдрәсәдә башланғыч сабаҡ алдым, йәренгә Ҡарғалы мәдрәсәсенең сасы-мососон иснәргә иде ниәт.

— Бир ен Хоҙай! — Бит ыпырҙы Әхмәтзәкир.

— Анауы Нияз шәкерттән дә уҙҙырырлыҡ бынамын тигән бәйетсе, яҙғандарының аҫтына “Төхфәт Сенәкәй-Рәдүди” тип тә ҡул ҡуя! — Аңлатырға ашыҡты Сәлем тигәне. — Бик тә белгегеҙ кил ә, баш яҡ бәйетсе е менән әйтешергә килде ул.

— Аб-ба-аа! — алсыларҙың ҡарпыш ҡолаҡлы ы алға сыҡты. — Йә, әйтеп ебәр, әләй ә. Кешнәшепме, тешләшепме алайыҡ.

Төхфәт шәкерт, тамаҡ ҡырып, алдыра ла башланы — ҡара-ҡаршы әйтеш китте:

Төхфәт:

*Диндер-диндер-диндерәү,*
*Чабатамда киндерәү.*
*Киндерәүе төшөп ҡалғач,*
*Ыштанбаулап жилтерәү.*

Ша изада:

*Синекендә — сабата,*
*Минекендә — күн ҡата.*
*Икесе тиң тишек-тошоҡ,*
*Шулай да ярап ята.*

Төхфәт:

*Сөйләмеңдә татар бар,*
*Татарлыҡҡа ҡатар бар.*
*Шуны әллә белмисең —*
*Үзем башҡыртмын, дисең?*

Ша изада:

*Ҡойоп ҡуйған башҡортмон,*
*Башҡортлоҡҡа баш йортмон.*
*Телем минең — ирәкте,*
*Телеп керә йөрәкте.*

Төхфәт:

*Син — ирәкте, мин — татар,*
*Юлларыбыз, дим, ҡатар.*
*Башҡыртмы, дим, баш тартыр?*
*Әллә татармы сатар?*

Ша изада:

*Татар барҙа — хәтәр бар,*
*Хәтәрлегә бөтәр бар.*
*Йәшә, башҡорт Бәпесев,*
*Йәшә, Сенәкәй татар!*

Бәйетселәр ихлас ҡул ҡыҫыштылар ҙа ҡайнар ҡосаҡлаштылар, ә тамаша ҡылыусылар ҡеүәтләп алҡышланы.

— Афарин! Дус булыйҡ!

— Булдыҡ! — Ун йылдан уң илгә билдәле ике шағир Ырымбурҙа осрашып, ысынлап та дуҫ булышып, бер талай бер бүлмәлә йәшәйәсәген; большевиктар Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәгә япҡас, төрмәнән ҡасҡан Ша изада ошо

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 48



Сәнкем-Биктимер аша Бөрйәндең Таулыҡай төбәгенә үтәсәген, киләсәктә Башҡортостан гимны булып яңғыраясаҡ атаҡлы “Башҡортостан” шиғырын шунда, Таулыҡайҙа, яҙасағын бере е лә шәйләмәгәндер, әлбиттә. Егерменсе йылдарҙа Өфөлә эшләгән Төхфәт Сенәкәй, дуҫлығына тоғро ҡалып, шағир ижадын килер быуындарға илтеп еткереү өсөн тос өлөш индерәсәген; 1919 йылда ҡанлы Йылайыр ерендә яуыздарса үлтереп ташланған дуҫының ҡәберен эҙләп табып, уны ҡабат тантаналы ерләүҙә ҡатнашасағын да, әлбиттә, бындағыларҙың бере е лә башына индермәгәндер... Мосафир ҡунаҡ Әхмәтзәкир Йәлитов и ә үҙенән-үҙе килеп сыҡҡан шиғри әйтештән оҡланыуын белдерҙе:

— Күрә егеҙме, йәмәғәт: күҙ алдыбыҙҙа яңы быуын шағирҙарыбыҙ тыуа, афарин! Киләсәктә был балапандар ҡанаттарын киң кирер, милләтебеҙҙең яңы Аҡмуллалары, Туҡайҙары етешер!

Ауылдың торғон тормошона кескәй генә күңелле ял килтергән ал, йор таҡмаҡсы Ниязды ла арҡа ына ҡундырып, аҡмарҙы түбәнләп Ырымбур яғына ыҙҙы, тамашасы ауылдаштар әр бере үҙ мәшәкәттәренә таралды. Көнө буйы ығы-зығынан талыҡҡан Әхмәтзәкир мәғзүм киң күңелле хәҙрәт йортонда төнәп ҡалды.

Мөхәммәткамал хәҙрәт иртәгә ен кырандасҡа ҡуш юрға ын ектертеп, Сәлимйән шәкертен күсер итеп ултыртып, бер туған аға ы Әхмәтша имамлығындағы Себенле ауылынаса илттертеп ҡуйҙыртты, ун йылдан уң Ырымбурҙа аҡтар менән ҡыҙылдарҙың киҫкен көрәше осоронда Каруан арайҙа ҡабат юлдары киҫешәсәген был икәүҙең бере е лә шәйләмәне; Себенленән мосафирҙы Ырымбурғаса имам хәҙрәттең уланы Ғәбделғәлләм мәғзүм йә әт алып барып еткерҙе; ун йылдан уң был инсан да, Сәнкем-Биктимергә яҡын аҡмар аръяғында арыяр (Жултый) ҡасаба ының имам хәҙрәте булып етешкән Ғәбделғәлләм Дәүләтшин, ошо уҡ Әхмәтзәкир етәкләгән автономиялы Башҡортостан хөкүмәтенең ялҡынлы бер таянысына әүерелеп, 1918 йылда үҙ мәсете ҡаршы ында уҡ большевиктар тарафынан вәхшиҙәрсә үлтереләсәк ине, ике туған аға ы Мөхәммәткамалдың ятаҡҡан элекке шәкерте большевик Мырҙағолатовтың ҡоралдаш-ҡорҙашы ҡыҙыл Каширин ҡулынан...

## II киҫәк: Ун йылдан уң

1

Әйе, елдәй елеп, ыуҙай үлеп үтте лә китте йылдар... Мәкерле әм яуыз батша анаунигы Столыпин тарафынан башҡорт иленә яңы баҫҡын-килмешәктәр өстөрөлөп, аҫаба ерҙәренең шаҡтай өлөшө оят ыҙ алдап-йолдап та, көсләп тә тартып алынған, ос оҙ-ҡырый ыҙ Рәсәй киңлегендә бер-бер артлы ҡупҡан боласыларға ҡаршы абаҡ өсөн атлы казак ҡамсылары, ҡылыстары сыжлаған, алдат пүләләре гөр өлдәп атылған, йөҙәрләгән “Столыпин галстуктары”н[43] әрнеткес ел сайҡаған дә шәтле ун йыл...

Ҡанлы Герман уғышының башынан уҡ алдат шинеле кейеп, өҙлөк өҙ фронтта йөрөгән, 1916 йылдан алып үҙен инанған коммунист итеп анаған, алдат массалары ара ында большевиктар партия ының рассыльныйы[44] рәүешендә йәшерен эш башҡарған Сәлимйәнде яҙмышы алай ҙа аяны, әжәлдән араланы. Мөғәллим булғаны өсөндөр, алдағы көндәрҙә лә туған халҡының йәш быуынының күҙҙәрен яҡтыға асып, игелек итеү хаҡыналыр был, бәлки. Ә урыҫ мөғәллимдәрен бит батша хөкүмәте үҙе аҡ билет биреп тылда торғоҙоп ҡалдырҙы — үҙ халҡына мәғрифәт сәсеү эштәрен дауамларға. Сәлимйән кеүек мосолман мөғәллимдәренә тәтемәне был бәхет, сөнки рәсми мөғәллимлек хоҡуғы биреүсе ҡаҙна мәктәптәрен тамамлау тура ындағы уларҙа юҡ танытма талап ителде, ә мосолман мәҙрәсәләре танытма ы иҫәпкә алынманы. Шулай итеп, урыҫ мәктәптәре мөғәллимдәре әүәлгесә

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 49



мөғәллимлек итте, ә мосолман мөғәллимдәре, мәктәптәребеҙҙе мөғәллимдәр еҙ ҡалдырып, фронттарға китте, ут эсенә инде. Ошо хәл үҙе үк мәжбүр ҡылды алдат шинелле меңәрләгән Сәлимйәндәрҙе империя сәйәсәте әм милләттәрҙең яҙмышы хаҡында баш ватып уйланырға, ғәзиз халҡын үлемесле бәләләрҙән ҡотҡарыу юлдарын эҙләргә. Ҡанлы окоптарҙа хис менән аң уғата көсөргәнеш кисерҙе лә аҡ әм ҡараны айырырға, алдат массалары аңын яулау хаҡына хәҡиҡәттәрен оранлаған әр төрлө фирҡә-партияларҙың ҡай ы ы тәғәйен кемгә хеҙмәт иткәнлеген танып белергә өйрәтте. өҙөмтәлә Сәлимйәнде большевиктар партия ының төп өс маҡсаты арбаны: уғышты кисекмәҫтән туҡтатыу, ерҙе уның эшкәртеүселәренә тапшырыу, милләттәрҙең үҙ билдәләнешенә ирек ҡуйыу. Бына ошо төп өс сара үтәл ә, ер йөҙөндә ысын ғәҙеллек урынлашыр, Рәсәйҙең бөтә милләттәре лә тигеҙ хоҡуҡлы әм бәхетле булыр. Өс маҡсаттың бигерәк тә уңғы ы, милләттәрҙең үҙ билдәләнеше тура ындағы ы, нығ йәлеп итте урыҫ булмаған милләт кешеләрен большевиктар ҡорона. Окоптарға таратылған йәшерен әҙәбиәт ара ынан РСДРП-ның икенсе йыйынында ҡабул ҡылынған программа ын, Ульянов-Лениндың “Милләттәрҙең үҙ билдәләнешкә хоҡуғы тура ында” хеҙмәтен, шулай уҡ Маркс менән Энгельстың “Коммунистар партия ы манифесы”н ентекле уҡып сыҡҡас, үҙе үк шундағы идеяларҙы ялҡынланып яҡлаусыға, окоптарҙа шуларҙы фиҙакәр таратыусыға әүерелеп, хатта Петербургтағы Сталин әм Троцкийға ла мәғлүм булды үҙҙәренең фронт курьеры Сәлимйән Мырҙағолатов алдаттың исеме. Февраль революция ынан уң уғыш ҡырҙарында аслан большевиктар ҡотҡо о уғата көсәйеп, батша офицерҙарына ышанысын юйған алдаттар шулар өҫтөнән күҙ-ҡолаҡҡа үҙ кешеләрен айлап ҡуя башлағас, Сәлимйәнде бер тауыштан полк комитеты рәйесе итеп күтәрҙеләр. Петроград менән тығыҙ элемтә тотоп, партия ҡарарҙарын окопта бойомға ашырырға, ҡан ҡойошло уғышты аман дауамлаусы буржуаз Ваҡытлы хөкүмәткә ҡаршы көрәшергә, “Бөт өн уғыш! Бөтә хакимиәт — Советтарға!” тигән шиғар ҡорона туплярға керештеләр ғәскәрҙе. 1917 йылдың көҙөнә табан ваҡиғалар ифрат ҡырҡыулашып, Петроградтағы большевиктар штабы Смольный менән тура бәйләнеш тоторға тип, полк исеменән вәкәләтлектәр биреп, Сәлимйәнде делегат итеп баш ҡалаға оҙаттылар.

Хәтәр юлдарҙы үтеп, октябрь аҙаҡтарында саҡ килеп етте ул умарта күселәй ҡайнаған Смольныйға: ҡыҫыҡ-оҙон коридорҙары йөҙәрләгән, меңәрләгән уның ымаҡ уҡ алдаттар әм матростар, завод еҫенә ыҫланған эшселәр менән мыжғып тора — Советтарҙың ошо көндәрҙә асыласаҡ икенсе йыйынында хәл иткес сәйәси алышҡа әҙерлек бара, бары ы менән ба адирҙай мыҡты ынлы Троцкий иптәш бойора. Ульянов-Ленин иптәш, ҡулға алырға темеҫкенгән буржуаз хөкүмәт шымсыларынан боҫоп, йәшерен хәлдә етәкселек ҡыла, имеш. Керенский әфәнденең шул Ваҡытлы хөкүмәтен түңкәрергә, хакимиәтте тулы ынса эшсе, крәҫтиән, алдат депутаттары Советына алып бирергә Лев Давидович Троцкий иптәш етәкселегендә бына-бына ҡораллы ҡуҙғалыш буласаҡ, Иосиф Джугашвили-Сталин иптәш и ә уның менән Ульянов-Ленин ара ында элемтәсе булып йөрөй әм Ульянов-Ленин уны үҙенең иң ышаныслы кеше е, милләттәр белгесе итеп анай, тинеләр. Баштан-аяҡ әсе дарыға ыҫланған окопсыны ана шул икәү ҡабул ҡылды ла инде. Дөрөҫөрәге, йөҙөн ҡап-ҡара шырт ҡыл баҫҡан Джугашвили-Сталин тигәндәре бүлмәлә баштан уҡ булма а ла, көтмәгәндә, йомшаҡ табанлы кавказ итеге менән бесәй ымаҡ шыпыртын баҫа килеп инеп ылыҡты Троцкий башлаған әҙер әңгәмәгә. Быны ы, уның барлығынан ҡәнәғәт еҙләнгәндәй, йөҙөн сытырайтып:

— Бына Сталин иптәш тә пәйҙә булды, танышмы? — тине, инеүсене күр әтеп.

— Таныш, таныш — беҙҙең шәп рассыльный бит ул, әллә оноттоғоҙмо? — Троцкийға ынаулы ҡарап, күҙҙәрен йырсайтып көлдө теге е.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 50



– Мырҙағолатов иптәш фронттан яҡшы хәбәр килтергән: беҙгә мәғлүм дивизия ҡуҙғалырға әҙер, бынан сигнал ғына көтә.

– Беләм, бик яҡшы.

– Күпте белә ең, Коба... Смольныйҙан сыҡмай ултырып. Хәл иткес сәғәт укты – Владимир Ильичтың тиҙерәк бында булыуы мө им.

– Беләбеҙ.

– Был моментта тәрән тылды иғтибар үҙәгендә тоторға, түңкәрелеште бөтә Россия күләмендә тәьмин итергә кәрәк. Беҙҙән хәбәр еткәс тә, урындағы Советтар бөтә хакимиәтте үҙ ҡулдарына ал ын. Быны ы еҙгә лә ҡағыла, Мырҙағолатов иптәш.

– Аңланым, Лев Давидович.

– Мырҙағолатов иптәштең, алдат депутаты булараҡ, съезда ҡатнашыуы ифрат ә әмиәтле бул а ла, стратегик маҡсатыбыҙ унын Уралда – үҙ халҡы ара ында ҡайнашыуын талап итә.

– Мин дә тап шул хаҡта уйлап тора инем әле.

– Башҡалар уйлап бөткәндән уң ғына уйлай ың ин, Иосиф.

– Волга – Урал арауығындағы революцион мөхитте ҡуйыртыр өсөн, борондан уҡ уғышсан-яугир халыҡ – башҡорт ярлы массалары бөгөн дә мө им роль уйнай... әгәр ҙә дөрөҫ файҙалан аҡ.

– Коба, эш ниҙә уң? Милләттәр белгесе ин бит?

– Силәбенән килгән делегат Цвиллинг иптәш хәбәр итеүенсә, Өфө әм Ырымбур ҡалаларында бөтә башҡорт халҡының бер-бер артлы йыйындары булып үткән, башҡорттар ерле автономия яуларға юҫыҡланған.

– Ҡыҙыуында уғырға кәрәк тимерҙе! – Троцкий, урынынан ҡалҡынып, мыҡты-олпат кәүҙә е менән бүлмә күләмен ҡыҫырыҡлап аҙымланы. – Милләттәрҙең үҙ билдәләнешен танымаған Керенский хөкүмәте идеяны томалау сара ын күрәсәк, хатта штыкка аласаҡ. Шуның менән бер башҡорттарҙы ғына түгел, ә рус булмаған бөтә милләттәрҙе лә үҙенә ҡаршы аяҡландырасаҡ. Беҙ и ә бөтә милләттәрҙең мәнфәғәттәрен күҙәтәбеҙ. – Мырҙағолатовҡа әйләнеп ҡараны. – Ҡәҙерле башҡорт иптәш, аңланығыҙмы шуны?

– Әлбиттә, Лев Давидович.

– Тимәк, хәйерле юл! Коба, Ырымбурға телеграмма уғығыҙ: Мырҙағолатов иптәште эшкә ек ендәр. Юҡ а, Коростелев иптәш тигәндәре, милли кадрҙар етешмәй, тип зарлана ине.

Бүлмәнән ҡушарлап сыҡкас, Сталин алдаттың яурынбашына ауыр усын яттҡырҙы:

– Әйҙә, минең янға инеп сыҡ әле, фронтовик.

Төрлө гәзиттәр өйөп алынған ҡаҡ өҫтәлдә буяуы ҡубып иҫкергән телефон аппараты ла янда лапаҡ тимер сейф, өҫтәлде ике яҡлап берәр ултырғыс, ишек төбөндәрәк стена буйында арҡа ының күне йыртылып ярпыланған тар диван. Әсе тәмәке төтөнө терәй түшәмде. Ултырғыстың бере ен алдатҡа күр әтеп, үҙе өҫтәл артындағы ына төпләнде, күҙҙәрен хәйләле ҡыҫып:

– Йә, оҡшанымы еҙгә Лев Давидович? – тине.

– Ҡыҙ түгел бит ул оҡшарға йә оҡшамаҫҡа.

– Ҡорораҡ тота инде ул, нишләтә ең... Мин инмәҫ борон минең хаҡта берәй нәмә әйттеме?

Ике юлбашсы ара ында ҡара бесәй йүгергәнлеген шәйләгән Сәлимйән хәлде йомшарта төштө:

– Ниңә баштан уҡ Сталин иптәшкә инмәнең, милләттәр мәсьәлә ен ул яҡшы

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 51



белә, тип киҫәтте.

Сталин, ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып, янға ҡайырылды ла сейфты шалтыратып асты; ҡыйырсыҡ ҡара икмәк, ҡағыҙ ярпы ына төрөлгән тоҙло балыҡ, сиректәйгә төшөп бүҫкәргән шешә алып, туҙрап ятҡан гәзиттәрҙең бере енә алды. Икмәк ҡыйырсығын ҡап-урталай бүлеп, өҫтәл тартма ындағы абрек хәнйәре менән балыҡты ҡырҡҡылап, шешәнең барлыҡ мөлкәтен ҡалай көрөшкәләргә тигеҙ бүлә ҡойоп, ғәҙәтенсә, күҙҙәрен хәйләле ҡыҫа биреп ынаны:

— Әгәр ҙә яңылышма ам, еҙ — мосолман, шулаймы? Хәмергә ҡаршы түгелме?

— Дүрт йыл буйы окоптарҙа үҙебеҙҙең кем икәнлекте лә онотторҡ, алға килгәндән тартынмаҫҡа өйрәндек...

— Бына быны ы яҡшы. Хәҙер инде бөтәбеҙ ҙә бер туған — ысын пролетариат. Күтәрҙек!

Асығып йөрөгән Сәлимйәндең башы ҡапыл зыңланы, икмәк менән балыҡты кинәнеп тумырҙы.

— Буржуйҙарҙан власты тартып ал аҡ, бөтә Россияла Совет власы урынлаштыр - аҡ, яҡшы йәшәй башларбыҙ, — тигәне томан артындағылай баҫлығып ишетелде.

— Фронтта беҙ яҡшы эшләнек — армия ҡоралды буржуйҙарға ҡаршы борорға әҙер. Керенскийҙы ҡасан бырақтырабыҙ?

— Бик тиҙҙән. Быйыл ук. Ләкин, Владимир Ильич (Ульянов-Ленин иптәш) бөтәбеҙгә ҡат-ҡат киҫәтеүенсә, эш Петроград менән генә осланмай. Бер үк ваҡытта Россияның бөтә төбәктәрендә лә берҙәм ҡуҙғалып, быға бөтә милләттәрҙе ылыҡтырып, урындарҙа эшсе-крәҫтиән, алдат депутаттарының Совет власын урынлаштырырға кәрәк. еҙҙең башҡорт халҡы быға әҙерме?

— Әҙерләрбеҙ, ең ыҙғанып керешербеҙ. Әммә быуаттар буйына ҡаты иҙелгән, асыуҙан күҙе томаланған ярлы башҡортто ысынлап большевиклаштырыу өсөн, Ульянов-Ленин иптәш яҙған баяғы мөҡәддәс өс шарттың, бигерәк тә уңғы ының, тайпылыш ыҙ үтәлеше гарантияланырға тейеш. уңғы ы, тигәнем, белә егеҙ, милләттәрҙең ирекле рәүештә үҙ билдәләнешен тәьмин итеү.

Сталин шешәне, ризыҡ ҡалдығын сейфына кире йәшереп, төрөпкә ен ҡабыҙҙы ла иҙән буйынса йөрөштөрҙө, ҡалҡынырға иткән Сәлимйәнде яурынынан баҫып ултыртты.

— Бары ы ла булыр, уға ис шикләнмәйбеҙ. Бының өсөн, Владимир Ильич әйтмешләй, эшләргә, эшләргә әм тағы ла эшләргә кәрәк... Белә егеҙҙер, Керенский әфәнде беҙҙе, хаҡ революционерҙарҙы, “большевистик зараза” тип ләғнәтләй. еҙҙең бурыс — үҙ яғығыҙға ҡайтып, шул “зараза”ны бөтә илгә таратыу.

— Эшләрбеҙ, иптәш Сталин.

— Вәт быны ы — минеңсә. еҙ — ысын коммунист.

— Хушығыҙ, иптәш Сталин.

— Сабыр итегеҙ. — Телефондың ҡуласа ын шағырлатып әйләндерҙе, сымдың арғы осондағыға өндәште. — Иптәш Диманштейн, Силәбенән килгән Цвиллинг индәме? Йә әт кенә икәүләшеп инегеҙ әле. — Трубканы урынына ҡаптырып, аңлатты: — Россияның милләттәр мәсьәлә ендә соҡсоноп күҙе сыҡҡан, буғашаған ярҙамсым Диманштейн иптәште әйтәм.

Саҡырылғандар эйәртенешеп килеп инде — бая күргән Троцкий иптәш кеүек үк ҙур кәкере танаулы, ҡалын бөҙрә сәсле урта йәштәрҙәге кешеләр ине. Тик Диманштейн тигәненең түбә е сынаяҡ аҫты яҫылыҡ ялтырай.

— Самуил Моисеевич, Соломон Моисеевич, таныш булығыҙ. — Тороп баҫҡан Сәлимйәнгә күр әтте. — Мырҙағолатов иптәш, фронттан; Урал зона ында эшләй башлаясаҡ окоп большевигы.

— Башҡортмо, татармы? — Диманштейн күҙгә текләне.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 52



– Башҡорт.
– ем... автономист икәнең күренеп тора.
– Совет автономисы.
– Аңлашыла, аңлашыла. Ләкин унда автономизм идея ын коммунистар түгел, ә буржуазия эйәрләгән.
– Сөнки башҡорт коммунистары бармаҡ менән генә анарлыҡ.
– Ә еҙ нисек уйлай ығыҙ, Самуил Моисеевич? – Сталин төтөн бормаслатҡан төрөпкә енең осон Цвиллингка тоҫҡаны.
– Беҙҙә 1910 йылдан бирле партия ағза ы Шәмиғолов, унын шәкерте Нуриманов бар, тәүге е минең ышанысли ярҙамсым. Беҙ ундай хәрәкәтте, кем генә етәклә ә лә, пролетариат революция ы өсөн ифрат зыянлыҡлы анайбыҙ.
– Ләкин ул хәрәкәт еҙҙән башҡа йәйелә, башҡорт буржуазия ы, танырға кәрәк, гегемонға әүерелеп, башҡорт массаларының башында бара, – тип тынис ҡына киҫәтте ялтас түбәле.
–Беҙ уны бер елтәнеүҙә киҫеп ташларбыҙ.
– Бик ҡимммәткә төшмәҫме?
– Әйткәндәй, еҙ киҫәсәк ул баштар ара ында тап беҙҙең партия ағза ы... кем әле...
– Манатов, Иосиф Виссарионович. – Диманштейн ярҙамға килде.
– Эйе, Манатов та бар, тиҙәр түгелме?
Цвиллингтың сикәләре ҡыҙышты:
– Шул уҡ йәшерен буржуаз милләтсе-автономист – арыҡ тире е ябынған бүре ул. Бүреләрҙе арыҡтарға яҡын юлатмаҫҡа кәрәк – башына етеп бул а ла арынырға! Был мәсьәләлә Бухарин иптәш яҡлыбыҙ.
Сталин, төрөпкә ен сытырлатҡансы емереп, ыҫын түшәмгә өрҙө:
– Бухаринды беләбеҙ. Ләкин еҙҙең үҙ башығыҙ ҡайҙа уң? Ә, Самуил Моисеевич?
– ағыҙаҡ оя ылай ҡайнаған Башҡортостан мөхитендә ҡаты ҡул ғына кәрәк.
– Тотҡан тоштан үк ындырып бармағыҙ әле, Самуил Моисеевич! – Диманштейн ҡорҙашының иңбашына әшнәләрсә ҡулын алды. Сталин төтөнлө төрөпкә ен усында йомған килеш иҙән буйлап йөрөштөрөп алды ла ҡырт боролоп өндәште:
– Ә бына алдат шинеле кейгән башҡорт коммунисы ни әйтер әле? Мырҙағолатов иптәш, үҙ – еҙгә.
Сәлимйән тулҡынланыуын йәшермәне:
– Цвиллинг иптәштең үтә ҡырҡыулығы менән килешеп етмәйем. Дүрт йыл буйы окоптарҙа ҡаңғыр ам да, илдән айырылманым, улышын тойоп йөрөнөм. Цвиллинг иптәш атаған буржуазия бүреләре артында бөгөн оло көс тора – ғәййәрлеге ҡанына еңгән ике миллионлыҡ халыҡ масса ы. Ул, үҙегеҙ үк таныуығыҙса, автономия орай, милли буржуазия шул идеяны бик оҫта файҙалана. Ләкин был идея улар тарафынан түгел, ә беҙҙең аша бойомға ашырылырға тейеш ине, сөнки партиябыҙ йыйындарында ҡабул ҡылынған резолюцияларҙа милләттәрҙең үҙ билдәләнешкә хоҡуғы асыҡ раҫланған, быны халыҡҡа арымай-талмай илтеп еткереү лазым. Бына мине, ябай башҡорт бала ын, арбаған коммунизм идеялары башҡаларҙы ла бик тиҙ яулар. Самуил Моисеевичҡа мин шуны әйткем килә: бүрене үлтер әк тә, милләтте үлтереп булмай, яман ҡанҡойош китәсәк. Иң яҡшы-ы – массаларҙы үҙ идеяларыбыҙға инандырып, буржуазияны хәрәкәт башынан тынис сәйәси саралар ярҙамында олаҡтырырға; етәкселек теҙгенен үҙ ҡулыбыҙға көрмәп алып, Совет Рәсәйе эсендәге Совет автономия ын төҙөргә. Башҡортостандағы хәҙерге юлбашсылыҡ, минеңсә, әгәр белеп эш ит әк, Керенский артынса

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 53



уҡ ауасаҡ.

– Логично. Бухаринсылар күпме генә маташма ын, беләбеҙ: хәҙерге әм яҡын алдағы шарттарҙа иң оптималь сара был, – тине Диманштейн. – Күп милләтле Россияла башҡаса мөмкин түгел. Цвиллинг иптәш тә, бәлки, үҙ ҡарашын үҙгәртер...

– Артына ут ҡапҡас... – тип хихылданы Сталин. Цвиллинг ишеккә ыңғайланы:

– Ҡапмаç, үндерербеҙ!

– үндерешергә ҡал а, Шәмиғоловты ғына түгел, Мырҙағолатовты ла саҡырығыҙ. Ул Ырымбурға китә.

– Уны ына ҡаршы түгелмен.

Сталинға шуны ы мәғлүм: Иҙел – Урал төбәгендәге башҡорт автономия ы мәсьәлә е көн үҙәгенә ҡалҡып, уның тирә ендә ҡапма-ҡаршы ике көс тартҡылаша, шуларҙың теҙген остарын бер ҡулда ныҡ бөрөп уйнатырға...

Иҙел – Урал мосолмандары ара ында революцион эште бергәләшеп ни рәүешле йәйелдерергә Цвиллинг иптәш менән арыу ғына килешеп, Мырҙағолатов Ҡазан вокзалына төштө – йөрәк өҙгөс ағынылған тыуған илгә йәне-тәне менән тартыла ине. Вагонда аслы-туҡлы йоҡлап барғанында беренсе төндә үк ағынyслы төш күрҙе: оҙон- ары ҡуш толомло, көндәй яҡты йөҙлө, аяҙ күктәй зәңгәр күҙле мөғәллимә Гөлсәсәге...

2

Дүрт йыл буйына тубыҡтан ҡан кисеп йөрөп тыуған илен, яҡындарын күрергә өмөтө өҙөлә яҙған егерме алты йәшлек егет ошо 1917 йылдың ҡырыç көҙөндә поездары тейешенсә йөрөмәгән аҙаплы тимер юлдан, Ырымбурға туҡталмайынса үтеп, арыҡташ станция ы аша Воздвиженский (Эйек тамағы) разъезына килеп төштө. Тоҙланып әм уңып бөткән алдат биштәрен (арҡа ҡапсығын) арҡан килеш аҡмар күперенән сығып, баш яҡ башҡорттары әм дә Перовский атсапҡындары гиҙеп йөрөп таҡырайтҡан түтә юлдан Петровское (Кершәнник) яғына ыңғайлағас, арттан ылау ҡыуып етеп, арбаға ултыртып алды – үҙҙәренең ауыл ҡарты; кескәй генә кибет асҡан да Тоҙтүбәнән киçәкле тоҙ тейәп ҡайтып бара икән. Ил хәлдәрен орашҡас:

– Бөтмәçтәй ҙә уғыш булды – күҙ терәр ир-ат ҡалманы. Көнкүрештә көрсөккә терәлдек тамам: тоҙ ҙа, шырпы ла, кәрәсин дә, абын да юҡ – ҡарама көлөнән елте я ап йыуынабыҙ. Ә ситса-маҙар тура ында әйтеп тә тормайым. Баçыуҙарҙы ҡарағура баçты, тере мал аны кәмене, сөнки ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро, бала-сағанан ғәйре эшләр кеше юҡ... – тип зарланып барҙы. – уғыштың тәүге йылдарында батша хәҙрәттәре алдатҡа алынғандарҙың " алдатка" тип исемләнмеш ҡатындарына айҙыҡын-айға аҙ бул а ла аҡсалата өлөш сығара ине, был и ә йәш алдаткаларыбыҙҙы аҙҙырҙы: аҡса алған айын, Кершәнниктән урыç хәмере ҡайтартып, йыйылышып эсәләр ҙә:

*Кершәнниктең баҡса ы,*
*Баҡса ында мунса ы.*
*Үлмә ен дә, ҡайтма ын да –*
*Килеп тор он аҡса ы! –*

тип таҡмаҡлап бейейҙәр ҙә илайҙар...

– Ирҙәрен ағыналарҙыр... – Сәлимйәндең, ҡанға батып үлеп ҡалыусы окопташтарын хәтерләп, йөрәге сымырланы.

– Уны ы шулай инде. Күптәре тол ҡалып илаша, алдатка аҡса ы түләүҙәре лә әллә ҡасан уҡ онотолдо. уғыштан фәҡәт йә аяҡ ыҙ, йә ҡул ыҙ булып ҡайталар.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 54



Йәнвәлидтәр күбәйҙе... Хәйер, быйыл февраль селлә ендә ниндәйҙер оро сәкмәнлеләр Петербурҙа Николай батшаны тәхетенән ҡолатҡандар икән, тип ишеткәйнек...

– Ул оро сәкмәнлеләр – бына беҙ булабыҙ кәнде, – тип көлдө Сәлимйән, шиненә төртөп.

– Шулайҙыр, сөнки шунан уң донъялар тағы буталып, Рәсәйҙә тәртип бөтөп, ошо инең ымаҡ уҡ фронттан дезертир ҡайтыусылар йышайҙы, хатта ҡоралдары менән...

– е! Ундайҙар ни ҡыла уң?

– Болғаталар. Керенский тигән яңы батшаны ла түңкәрергә, уғышты туҡтатырға, сөйәлле ҡулдар хөкүмәте төҙөргә, тип тамаҡ яралар. Уны ы ла булмаç тимә – Петербурҙы әллә ниндәй ҡара сәкмәнлеләр айҡай, ти, бит тағы.

– Хаҡ үҙ. Ҡара сәкмәнлеләр тигәнең – ҡара бушлатлы матростар ул, олатай.

– Керенскийҙы ла ауҙар алар, тәхетендә ниндәй сөйәлле ҡул ҡалыр?

– Ҡапҡас табылыр – силәге генә бул ын!

– Сөйәлле ҡул урынына герман кайзеры ултырма а ярай ҙа...

– Ҡайғырма, Рәсәйҙең үҙ кайзерҙары етерлек.

– Ләхәүәллә-ҡеүәтә! Беҙҙә лә донъялар болғансыҡ: урыçтар – бер яҡҡа, татарҙар – икенсе яҡҡа, ә беҙ үҙебеҙҙең яҡҡа тартабыҙ.

– уңғы ын нисек аңларға?

– Батырға ла йән кәрәк, килмешәктәр касафатына күпме түҙергә була? Баҡса эйә е – түтәл еҙ, үгеҙ эйә е – күтән еҙ, тигәндәй, аçаба ерҙәребеҙ таланып бөтөп, ус яçы ындай тау-таш ара ында ултырып ҡалдыҡ. Башҡорт мәнфәғәттәрен ҡайғыртырға тип, быйыл йәйге ен Ырымбурҙа йыйылған Икенсе ҡоролтайға мине лә делегат итеп ебәргәйнеләр, шунда мәсьәлә ҡабырға ы менән ҡуйылып, Башҡортостан тупрағында үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙебеҙ хәл итерлек милли-тупраҡлы мөхтәриәт төҙөү өсөн ең ыҙғанып эш башларға ҡарар ҡабул ҡылынды, барлығы ун ике инсандан хасил идаралыҡ – Башҡорт Мәркәз Шура ы айланды, унының рәйесе – ялан-ҡатай Шәриф Манатов, урынбаçары – юрматы Әхмәтзәкир Йәлитов, малиә эштәре бүлеге мөдире – мәрхүм Мөхәммәткамал ахун хәҙрәттең кинйә е Фатих Дәүләтшин, сәркәтибе – Ша изада Бәпес тигән мәш үр шағирҙыр.

– Ҡыҙыҡ! – Сәлимйән хатта устарын ыуып сәмләнде.

– Нимә е ҡыҙыҡ – әллә таныштарыңмы?

– Шулайыраҡ, олатай. Шәриф Манатовтан башҡаларын бик яҡындан күреп беләм, ә Манатовты минең менән фирҡәләш тип ишеттем.

– Әләй ә, улым, анауы арҡандағылай буш ҡапсыҡ түгел икән ең – ауылға берәй файҙаң тейер?..

– Эй, олатай, файҙа әр кемдең үҙенән тора ла а ул.

Бөтә е лә йөрәк ыҙлатҡыс таныш та әм таныш түгел дә ауыл...

Буралары ҡыйшайып, нигеҙҙәре сүгә төшкән атай йортона ҡара таңда арт ҡапҡанан барып керҙе. Йөрәккәйен сығып китерҙәй ырғылдыртып ҡыуандырғаны – ситән ҡура ышығында уны аяҡ атлауынан уҡ танып улығып кешнәгән Шүлгән йылҡы ы тоҡомло Ҡантураттың ихлас тәбриге булды. Биштәрен бағана тарбағына элеп ҡалдырып, ҡураға атлығып инде лә ҡараңғыла ике күҙе ҡуҙҙай мөлдөрәп торған өйөклө өн тығыҙ яллы ҡайнар муйынынан ҡуш ҡуллап ҡосаҡланы, сикәләрен яндырып йәштәре ағылыуын да иҙмәне:

– Йән киçәгем – Ҡантуратым, Ҡантураткайым минең! – Кеçә төбөндә тумарлап йөрөп шымарған, ҡарайып ҡатҡан шәкәр ярсығын иҙгер бәрхәт иренле ат ауыҙына ҡаптырҙы, теге е, башын сайҡап, шаҡырлатып сәйнәне. – Иçән- ау ғына торҙоңмо, мине онотманыңмы ни, Ҡантураткайым минең, туйҙырыусым минең,

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 55



тоғро дусҡайым минең! – Яңғыҙ атлы ерекмән йортоноң бар яҙмышын үҙ муйынына йөкмәгән иҙгер йөрәкле әм аҡыллы йән эйә енең эҫе сикә енә сикә ен баҫты, ат менән ерекмән күҙ йәштәре ике е бергә буталды; бер йыл үтер-үтмәҫтән ат эйәрләнеп, ир-егет ҡоралланып, граждандар уғышына ҡыҙыл ғәскәр булып китәсәктәрен, чехословак фетнәселәренә ҡаршы уғышта Ҡантураттың, яр ыу йөрәген йәҙрә ярсығы тишеп үтеп, ҡоҙғондарға аҙыҡ булып йығылып ҡаласағын, яраланған ир-егеттең госпиталдә шул ғәзиз Ҡантураты менән яман аташып ятасағын ике енең бере е лә белмәне ...

Ата ы Шә әргәрәй ярты ҡарышҡа сүгеп, күҫе аҡалы әм сәсе ҡарҙай ағарған, кәүҙә е лә ҡорошоп ҡатҡандай күренде. Әсә е Шәрифә лә шаҡтай ҡаҡша а ла, әүәлгесә бирешмәҫ тәбиғәтле, төҙ ынлы, ныҡ-баҙыҡ аҙымлы ине. Яуҙа юғалған яңғыҙ улдарының ҡәҙимгесә аяҡ-ҡуллы ҡайтып инеүенә ҡыуанып бөтә алмай, ҡайҙа ғына ултыртырға, ҡай ылай ыйларға белмәй өтәләнделәр.

– Башкөлләйгәме инде, балаҡайым?

– Белмәйем әле, әсәй, донъялар ҡай ы яҡҡа әйләнеп китер...

– Ҡантуратың ағынып көттө үҙенде – атайыңдың абанға сығыр хәле юҡ...

– Шулай ҙа бесән әҙерләй алған ығыҙ.

– Уны ын өмә итеп алдырттыҡ инде.

– Инш-Алла, яғыр утыныбыҙ ҙа бар. – аҡалын ыпырғылап өҫтәне атай ҡарт. – Артабанғы ын Алла белә...

– Баш ау бул а, башҡа бүрек табылыр – әҙәмсә йәшәп китербеҙ. Орлоҡ бармы бурала?

– Аҙыраҡ ҡына бар ҙа ул...

– Күберәген дә табырбыҙ. Яҙ ғына ет ен: Ҡантуратты егеп сығып, яланаяҡланып бураҙналар ярырбыҙ. Өймәләмә тубалды муйынға аҫып, ҡолас киреп тос орлоҡтар сәсербеҙ.

Әсә е зарланып алды:

– Ҡартайҙыҡ, өй эштәре лә ҡыйын. Егәрле генә киленсәк алып ҡайтып, башлы-күҙле бул аң, ҡот ҡуныр ине йортҡа. – Яулығының мөйөшө менән күҙҙәрен өрттө. – Үҙебеҙ күҙәтеп йөрөгән, бик уңған бер ҡыҙ ҙа бар – арыу нәҫелдән.

– Хәҙер ҡыҙ-ҡырҡын аҙҙы; бик яҡшы ҡарап йөрөп, әсәйең әйтмешләй, нәҫелнәсәбен тикшереп алырға кәрәк.

уңғы үҙҙәр Сәлимйәнгә боҙ аҫтынан аҡҡан ыуҙай тоноҡланып ишетелде, сөнки зәңгәр күҙле Гөлсәсәген иҫләүҙән улышы ҡыҫылып, бер аҙ өн өҙ ҡалғандан уң ораны:

– Заманында мин уҡытып киткән мәктәп аман гөрләп торамы, кемдәр эшләй?

– Кемдәр, тип ни, аҡ ап ҡайтҡан ыңар күҙле алдат ҡына тырыштырған була шунда – үҙебеҙҙә кеше юҡлыҡтан, земствонан ебәргәйнеләр. Мәктәбебеҙ ҙә, түбә е сереп, емерелергә тора. Мөғәллимә Гөлсәсәк менән ин эшләгән заманалар ҡайҙа инде ул хәҙер...

Сәлимйән, зи енен кем үреп иҫәнгерәтеүен белдерергә ҡыймайынса, башын эйеп тәрән уйға батҡан килеш тыңланы, ата-әсә енең үҙҙәре аман әллә ҡайҙан алыҫтан килде:

– Бала-сағаа тома наҙан ҡалма а ярар ине...

– Земствоға күпме генә мөрәжәғәт ҡыл аҡ та, мөғәллимдәр уғышҡа китеп бөттө, ә мөғәллимәләр етешмәй; Орскиҙа курс астыҡ, шунда уҡытып сығарғас, берәй ен ебәрербеҙ, тип яуап ҡайтаралар.

– Гөлсәсәк кеүек мөғәллимә булмаҫ инде ул...

Сәлимйән, тертләп, башын ҡалҡытты:

– Гөлсәсәккә ни булған? Ҡайҙа ул?

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 56



— Күпме көт өн... ыуға батҡандай китеп юғалдың бит, балам...

— Бынан ике йыл элек, ҡайҙалыр бөрйән башҡорттары ара ында уҡыта, кейәүгә сыҡҡан, тип ишеткәйнек...

Сәлимйәндең улышы киҫелде, йөрәге өҙөлөп төшөрҙәй ыҙланы — Гөлсәсәге мәңгелеккә юҡ, тимәк...

Ләкин өйөклө ө уға шул тәүлектең төнөндә үк төшөнә килеп керҙе.

Бер ниндәй ҙә уғыш та, айырылышыуҙар ҙа булмаған. Ике енең, күҙҙәре күҙҙәрҙән китмәй, йөрәктәре ҡанатланып, мәктәптә балалар уҡытып йөрөгән саҒы. Яҙғы ялт-ауаҙ ял көнө. Яңы заман мәғарифы ҡушҡанса, уҡыусыларын жағрафия дәресе буйынса йәмле тәбиғәт ҡосағына экскурсияға алып сыҡҡандар.

Кәкүк саҡрыуҙары тынмай күкелдәп ғүмер анаған хуш еҫле әрәмәлектә ҡарҙай ап-аҡ муйыл сәскәләре ботаҡтарын күбекләнеп япҡан мәл... Сәскәнән-сәскәгә ҡунып осҡан наҙлы күбәләктәрҙәй, ҡусҡыл үлән ара ында балалар сыр-сыу ҡубып ырғып- икерә, шуларҙы ҡарап хозурланып торалар. Йөрәктәрҙә быуып тыйылғыыҙ дәрт, күңел тулы әйтеп бөткө өҙ наҙ ғына... Ике е хас та сабыйҙарҙай етәкләшеп, көлөшә-көлөшә үлән кисеп барҙылар ҙа ҡояш ары ы мылҡып торған түңәрәк аҡланға сыҡтылар, шәкәр кеүек ап-аҡ олонло ҡайын төбөндә туҡталдылар. Сәлимйән ҡыҙҙы кинәт ҡосағына ҡыҫты; Гөлсәсәк, күкелдәүсе бер кәкүкте тирбәлдергән ботағынан өшкөтөп, ауа сыңратып көлдө, яғымлы-йомшаҡ беләктәрен уның муйынына уралтты, төп өҙ зәңгәр күҙҙәрен күҙҙәренә төбәне; шаян ел ҡыҙҙың арыш аламылай ары маңлай сәсен бороп килтереп, егеттең сөмҡара маңлай сәсенә симәлдерҙе, ике енең дә биттәрен ҡытыҡлап иркәләне; ә ялҡынлы ирендәре, бик тә аҡ, бик тә яй, бик тә ләззәтле көйҙөрөп, бер-бере енә яҡынланы... Тик шул уштан ҡалырҙай татлы мәлдә генә Сәлимйәндең ирендәре көтмәгәндә боҙло-тәм еҙ тимер алҡынлығы тойоп, башы артҡа салҡайҙы, Гөлсәсәк тә осҡандай юҡҡа сыҡты; алҡын уҫаллығы менән ҡара янған яҫы ағаҡлы балта, ике енең ара ынан жыйлап үтеп, аҡ ҡайынға сабылды... әм әсенеп, йөрәге ярылып ҡысҡырған Сәлимйән төшөнән тертләп уянып, күҙҙәрен асты, үҙенең ҡаҡ икелә — ата йортонда ятҡанлығын көскә шәйләне. Араларын киҫкән я ил балта уның күҙҙәрендә мө өрләнеп ҡалғайны...

Иртәнге сәй эскәндә лә ата ы ҡарт кисәге бүленеп ҡалғандарын дауамланы:

— Мәғрифәт усағы үнгән ауыл — ул, улым, киләсәге үнгән ауыл. Ә ин бит атаҡлы Дәүләтшин мәҙрәсә ен бөткән зыялы...

— Ярар, уҡытырмын, саҡ ҡына баш-күҙ алайым. Ил төкөр ә күл була, тигәндәй, күмәкләшеп бура күтәреп, бина ын да яңыртырбыҙ.

— Инш-Алла, бир ен Хоҙай.

— Тик тәүҙә Ырымбурға, шунан өйәҙ ҡалабыҙ Орскиға барып йомошлай ым бар.

— Тағы китә еңме ни инде? — тип ыҡтанды әсә е.

— Етәр, шыңшыма! — Ҡоро тотто атай ҡарт. — алдаттың явитсә итеү бурысы барҙыр — башҡалар кеүек дезертир булып ҡайтмаған бит. Ни ти әң дә, уғыш ваҡыты.

— Хоҙайым, был донъя ҡасан күсәренә ултырыр? Илдә иген ҡалманы, мал бөттө. Өҫтәүенә, анауы Столыпин тигәндәренең шойҡаны...

— Үлде бит инде ул, әсәй, үлтерҙеләр...

— Тик суртан үҙе үл ә лә, теше үлмәй: тирә-яҡ урыҫтары оторо я илланды.

— Дөрөҫ әйтә әсәйең. Воронеж, Рязань яҡтарынан күсереп килтереп, тәнебеҙгә шырау итеп ҡаҙаған бәғзе ҡәүемдәр, “тәпир нам слобода!” тип, сабынлыҡтарыбыҙҙы талап саба, урмандарыбыҙҙы ҡырҡып ҡорота, баҫыуҙарыбыҙҙы малдан та-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 57



пата. Ҡортомға биргән ерҙәребеҙ өсөн уҡыр тин дә түләмәй. “Башҡорт бөтөргә тейеш!” – тип лаф оралар.

– Шулай шул. Шөкәрә утарындағы Василий ызнакумыбыҙҙы белә еңдер бит, улым?

– Белмәй ни, ат ыҙ урыҫ ине. Ҡышҡы ын Рождество байрамдарында бала-саға ын санаға тейәп йөрөтөп күңел астыртырға беҙҙең Ҡантуратты орап алып ҡайтып китә торғайны.

– Бына шуның ҡарсығын осратҡайным Кершәнник баҙарында. Башы-күҙе аҡырайып я илланған: “ ин, ҡәҙерле ызнакумка, эш уҙмаҫ борон суҡынып, урыҫҡа яҙылып ҡал. Башҡорт тиҙҙән бөтәсәк, бөтмә ә – бөтөрәсәкбеҙ; ер- ыуҙары беҙгә, христиандарға, ҡаласаҡ, килде свобода!” – ти. Йылайыр урыҫтары башҡорт ауылдарына барымта я ай башлаған. Барымтаға ҡарымта кит ә – нишләрбеҙ?

– Уны ы булмаҫ та ул, әсәй. Урыҫтың да башы бар, үҙ башы үҙенә ғәзиз.

– ин, әсә е, шаштырма! Башҡорттоң тамыры тәрән. 1912 йыл Туҡай ҙа, Өфөгә килеп киткәс, суҡынырға ҡушма а ла, тап ана шулай яҙғайны. Әммә башҡорт йәшәне, йәшәй, йәшәр!

– Ошо болғансыҡ ваҡытта баш ыҙҙар күбәйҙе шул.

– Ләкин башлылар ҙа етерлек, әсә е. – Улына әйләнеп ҡарап әшкәртте. – Бөгөн берҙән-бер төп таяныс – Ырымбур, Каруан арайҙан эш йөрөткән Башҡорт Мәркәз Шура ы, ишеткән еңдер. Ысын уҙамандар айланған унда, араларында үҙеңдең уғыштағы дуҫың Ғәлиәхмәт Айытбаев та бар.

– Бына нисек! Уны ын ҡайҙан белдең?

– Ауылына ҡайтышлайы беҙгә уғылып, бер кис ҡунып, хәлдәреңде өйләп киткәйне. Икебеҙ тиң коммунистар фирҡә енә ылығып, ысын бөлшәүик булдыҡ, аҡ батшаны ауҙарыштыҡ, тигәйне. Шул ысынмы?

– Ғәлиәхмәт юкты өйләмәҫ, атай.

– Әләй ә, бөлшәүик кем дә коммунист кем ул?

– Ике е лә бер тип әйтерлек, атай. Иҙелгән халыҡ мәнфәғәттәренә зерә тоғро, ҡыйыуыраҡ көрәшсе була ул большевик.

– Башҡорт Мәркәз Шура ының рәйесе Шәриф Манатов кеүекме?

– Уны мин яҡындан белмәйем, әммә Петербурҙа Ульянов-Ленин иптәш етәкләгән яугир фирҡәнең ағза ымын, шуға күрә большевикмын, тип әйт әм дөрөҫ булыр. Бөтә Рәсәй халыҡтарын, шул иҫәптән башҡортто ла, бөгөнгө афәтле тормоштан шул фирҡә генә ҡотҡарасаҡ.

Атай ҡарт елкә ен тырнаны:

– Ай- ай, алыҫ Битирбурҙан тороп белерҙәрме беҙҙең хәлде? Аҡ батша ла белмәне. Бабалары ҡул ҡуйған шартнамәләрҙе боҙоп, ярлы башҡортто үлем хәленә килтереп еткерҙе.

– Ярлы башҡорт хәлен беҙ, бындағы башҡорт большевиктары, яҡшы белә. әм беҙ бөтә Башҡортостанда башҡорт ярлы-ялпыларының Совет хакимиәтен урынлаштырып, халыҡҡа ысын хөрриәт бирәсәкбеҙ.

– Ни тигән үҙ ул Совет?

– Шул уҡ Шура ул.

– Әләйгәс, Каруан арайҙағы Шәриф Манатов ин әйткән ул Ульянов-Ленин менән фекерҙәш икән – ул да башҡорт шуралары төҙөй ҙә.

– Ләкин беҙҙең шуралар бер башҡорттоко ғына түгел, ә Башҡортостанда йәшәгән барлыҡ милләттәрҙеке буласаҡ.

– Ай- ай, улым, ҡырҡҡа бүленгән бөтөн икмәкте ҡабат йәбештереп-бөтөнәйтеп булырмы икән?..

Сәлимйән өндәшмәне. Өй беренсә йөрөп ауылдаштарының хәлен белгәс, Ҡантуратын эйәрләп, тирә-яҡты, шул иҫәптән урыҫ араларын, көнкүреш әм сәйәси улыш йә әтенән барлап ҡыҙырҙы – ҡайҙа ла шул бер тын алыш... амҫып ятмаҫҡа кәрәк!

арыҡташ тимер юл станция ынаса илтеп ҡуйырға ылаусы яллап (атай ҡарт сирләп тора), таң ары ынан биштәрен тотоп сыҡҡас, Ҡантураты янына инеп хушлашыуҙан тыйылды – китеүе оҙаҡҡа булма ын. Ләкин оҙаҡ юғалып тороп пәйҙә булмыш йәш хужа ын күреп туймаған арғымаҡ ситән аҙбарҙан оҙон итеп кешнәп ҡалды.

*(Дауамы бар.)*

**ЫЛТАНМАЛАР:**

*[1] Ямиғ – йыйыусы (соборный), бөтә мәхәллә йыйылып йома намаҙы уҡыла торған ҙур мәсет.*

*[2] Хөллә е – кейеме.*

*[3] Ерекмәндең – ер (ауыл) кеше енең .*

*[4] Мулдәкәлеккә – уҡытыусылыҡҡа, ҡаҙаҡ балаларын уҡытырға.*

*[5] Ҡалта ы – аҡса ауыты.*

*[6] Кершәнник – атаҡлы урыҫ яҙыусы ы Н.А. Крашенниковтың баба ы Петр Крашенников беҙҙең бабаларҙан атып алынған ерҙә нигеҙләнгән баҙарлы ҡасаба, хәҙерге Петровское (Сәнкем-Биктимергә 18 саҡрым).*

*[7] Биштәр – юл тоҡсайы.*

*[8] Бүтәгә – даланың ер йөҙөн япҡан нескә йомшаҡ абаҡлы үлән (ковыль), ә уның көмөштәй ҡылсәскә е – ҡылған.*

*[9] Мәғзүм (эскер еҙ) – мулла улдарына хөрмәтләп өндәшеү.*

*[10] Шәриҡтәштәренә – бергә уҡыусыларына.*

*[11] Баш яҡҡа – йылғаларыбыҙ (йәғни Ҡаҫмарт, аҡмар) башланған яҡҡа – ыу үренә.*

*[12] Фатих Дәүләтшин 1917 йылдың 29 авгусындағы II Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт Мәркәз Шура ының (Башҡорт Үҙәк Советының) малиә (финанс) эштәре бүлеге мөдире итеп айлана.*

*[13] Ғөбәйҙулла Тажи улы Уразов (Мөхәммәткамал Дәүләтшиндың ҡыҙының улы) 1918 йылда –ҡыйыу ҡыҙыл партизан, 1919-20 йылдарҙа – Муса Мортазин бригада ының полк комиссары; 1920 йылдың июнендә Совет Башҡорт Ваҡытлы Хөкүмәте ағзалары эш урындарын ташлап киткәс, Шәмиғолов режимындағы яңы хөкүмәттең секретары итеп айлана.*

*[14] Хут – ҡышҡы селлә аҙағындағы шартлама ыуыҡ.*

*[15] аумал – яңы ғына өлгөргән, ҡырҡыуланмаған йәш ҡымыҙ.*

*[16] Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың “Хәтирәләр”енән алынды.*

*[17] Гүа – таныу.*

*[18] Деисылыҡ тәғлимәте буйынса, Алла ы Тәғәлә ғаләмде яралта ла, уңынан донъя эштәренә ҡыҫылмай, тәбиғәт үҙ ҡанундарынса хәрәкәт итә, ә кеше и ә үҙ ихтыярында.*

*[19] Мәмүн (813–833) – был хәлиф ваҡытында исламдың мутазилсы ағымы рәсми төҫ ала. Мутазилсылар Ҡөрьәндең Алла тарафынан бирелеүен танымай, уны боронғо грек фәлсәфә енә яҡынайтырға тырыша.*

*[20] Шөб ә – шик, икеләнеү.*

*[21] Тәҡсир – “ғәйеплемен” мәғәнә ендә.*

*[22] Зөлҡәрнәйҙең – Александр Македонскийҙың.*

*[23] Фатих – асыусы, башлап ебәреүсе, яулап алыусы.*

*[24] Вәлие – эйә е, хужа ы.*

*[25] Атлы казак – башҡорт казачийҙары.*

*[26] Ыҫтанынында – станица ында.*

*[27] Ғабдулла (Абдулла) Дәүләтшин – 1918 йылда Ырымбурҙа Автономиялы Башҡорт Хөкүмәте большевиктар тарафынан ҡулға алынғас, уның урынына (халыҡ күҙен буяр өсөндөр) шулар ойоштороған Ваҡытлы Башҡорт Революцион Комитеты рәйесе.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 59



*[28] Янарал — генерал.*

*[29] Сәрғәскәр — ғәскәр башлығы, командующий.*

*[30] Ғәбделәхәт Сибәғәт улы Сәйетбатталов — боронғо шағирыбыҙ ибәтулла Сәлиховтың дүртенсе быуын тоҡомо (шәжәрә е: Сәлих — ибәтулла — Сәйетбаттал — Сибәғәтулла — Ғәбделәхәт), 1917 йылдан — большевик; 1918 йылда Ырымбур казактары йыйынында йыйын президиумына ағза, йыйын сәркәтибе итеп айлана; Сәнкем-Биктимер төбәгендә ҡыҙыл гвардия ойоштороп, уның командиры була, аҡтар ҡамалышында ҡалған Орскиҙа — ҡаланың оборона башлығы; Ҡыҙыл Армия сафтарында төрлө фронттарҙа уғыша; 1920 йылда, Башчека рәйесе урынбаçары булараҡ, Башҡорт автономия ының дошмандарын шәмиғоловсыларҙы рәсми рәүештә ҡыйыу фашлай; шунан уң Баш-главмилиция башлығы вазифа ында 1921 йылдың 6 февралендә ҡапыл үлә.*

*[31] Әçпе — аллергия йәки астма, әçпе еләге төнәтмә ен эсеп дауаланалар.*

*[32] Хөрриәт — азатлыҡ.*

*[33] Әлхасил — ҡыçҡа ы.*

*[34] Темеçкен — разведчик.*

*[35] Дахил — эскелек.*

*[36] Ирәм (Имир) — шул исемле гермафродит тәүбабабыҙ Дәү Хоҙайҙың (“Урал батыр” эпосындағы Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең) гүзәл баҡса ы — атабыҙ Әҙәм (Урал), әсәбеҙ ауа (Шүлгән) яралған ожмах.*

*[37] Ауыл аçыраучы — аҙна айын сиратлап өйберенсә йәшәп тамаҡ туйҙырыусы үк еҙ етем бала.*

*[38] ибә — бүләк, бушлай биреү (спонсорлыҡ).*

*[39] Мөхәммәт пәйғәмбәр еренә хаж ҡылып, Зәм-зәм шишмә енән алып ҡайтмалы изге ыу.*

*[40] Ғәбделхәй Иркәбаев, буласаҡ шағир, 1919 йылда большевиктар тарафынан яуыздарса үлтерелә.*

*[41] Сәлем Солтанов — 1918 йылда Ғәбделәхәт Сәйетбатталов әтрәтенең ҡыҙыл гвардиясы ы; 1919 йылда аҡ башҡорт ғәскәре алдаттары ара ында уларҙы ҡыҙылдар яғына сығырға өндәп йөрөүсе өгөтсө-агитатор, шул йылдың февралендә Темәстә башҡорт ғәскәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын ҡарарлаған ғәскәри йыйын делегаты.*

*[42] Төхфәт Сенәкәй — буласаҡ шағир, Ша изада Бәпесовтың Ырымбур осор дуçы, ул әләк ителгәс, уның түгелеп-сәселеп ҡалған әçәрҙәрен ил буйынса йөрөп йыйыусы, шағир хаҡында хәтирәләр авторы.*

*[43] “Столыпин галстуктары” — батша самодержавие ына ҡаршы көрәшеүселәрҙең аçыулы кәүҙәләре эленеп торған дар бағаналарын халыҡ шулай атаған.*

*[44] Рассыльный — курьер, йомошҡа йөрөүсе.*

3

Каруан арайлы ҡалабыҙҙа Әхмәт бай ҡунаҡхана ының аçҡы ҡаттағы арзан бүлмә енә урынлашып, саҡ ҡына баш-күҙ алғас, Сәлимйән тимер юл мастерской-ҙарында эшселәр ара ында юллап тапты партия ының урындағы етәксе е Александр Алексеевич Коростелев иптәште. Үҙенән күп бул а ике-өс йәшкә өлкәнерәк, ләкин 1905 йылдан уҡ партия ағза ы, 1905 — 1907 йылдарҙа Самарала-ғы ҡоралы көрәштә әүҙем ҡатнашҡан; ҡуҙғалыш баçтырылғандан уң батша жандар-мерия ынан оҙаҡ ҡына боçоп йөрөп, 1910 йылда ялған исем менән ошон-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 60



# «Ағиҙел»дә — «Казан утлары»



**Рауил ФӘЙЗУЛЛИН,**
**“Казан утлары” журналының баш мөхәррире,**
**Татарстандың халыҡ шағиры**

## РУХИ ЙЫЛЪЯҘМА

Бөгөнгө уҡыусы белгән “Казан утлары”ның башланғысын совет осоронан — 1922 йылда сыҡҡан “Безнең юл” журналынан иҫәпләү ғәҙәткә ингән. Журнал беренсе анда уҡ үҙенең ҡоласлы ҙур баҫма — айырым йөм үриәт сиктәре менән генә сикләнмәгән киң даирә баҫма икәнлеген ыҙыҡ өҫтөнә алған. “Безнең юл” идара ынан әҙиптәргә, шағирҙарға, ғилем-әҙәбиәт мөхибтәренә ( өйөүселәргә — **Р. Ф.**) мөрәжәғәт” тигән яҙмала былай тиелгән: “Хәлдәрҙең ғәҙәттән тыш ауыр булыуына ҡарамаҫтан, “Безнең юл” журналын сығара башланыҡ. “Безнең юл”дың сығыуы Татар йөм үриәтенең мәркәзендә — Ҡазанда бул а ла, был мәжмүғә Рәсәйҙең төрлө яҡтарында йәшәгән әммә татар-башҡорт халыҡтарына хеҙмәт итеүҙе үҙенә маҡсат итеп ала. Бына шул ауыр, ҙур бурысты үтәүҙә беҙ, эске Волга-Урал, Сибирияның төрлө мөйөштәрендә эшләүсе әҙиптәр, шағирҙар, барлыҡ ғилем-әҙәбиәт мөхибтәренең ярҙамына ышанып эшкә керештек. Үтенәбеҙ: бер яҡтан, был журналдың таралыуына, икенсе яҡтан, ғилми-сәйәси, әҙәби материалдар, мәҡәләләр ебәреү менән был журналға булыш ындар ине”.

Эйе, оҙон, ҡатмарлы юл үтелгән. Осор-дәүере лә үтә сетерекле, фажиғәле төҫмөрҙәргә бик тә бай. Халыҡ ниҙәр генә кисермәгән дә ниндәй генә ынауҙар үтмәгән был йылдар эсендә! Инҡилаб-революция зилзиләләре лә; аҡ-ҡыҙылдарға айырылып бысаҡҡа бысаҡ килеүҙәр ҙә; аслыҡтан йәки үләт сирҙәренән нәҫел-ырыу менән ҡырылыуҙар ҙа; яңыны төҙөйөм тип булғанды юҡ итеүҙәр ҙә; синыф-кластарға бүленә-бүленә, дин ҡанундары менән көрәшә-көрәшә, алфавит-яҙмаларҙы ҡат-ҡат алмаштыра-алмаштыра ҡибла ыҙ, иманыҙ ҡалыуҙар ҙа; диктаторҙарҙан, сәйәси авантюристарҙан культ я ап, үҙҙәре “шөрөп-винт” хәленә ҡалып, миллиондарҙың яуҙарҙа, өргөн-лагерҙарҙа әләк булыуҙары ла; тәбиғәт ҡанундары әм халыҡ мәнфәғәте менән иҫәпләшмәйенсә, ер- ыуҙы мәсхәрә итеп “бөйөк-бөйөк” төҙөлөштәр, хәрби сәнәғәт комплекстары ҡороуҙар ҙа; ғәмәлгә ашмаҫ хыял — коммунизмға

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 61



фанатиктарса ихлас ышанып, хәҡиҡәткә хилафлыҡ ҡыла-ҡыла, беләк көсөн әм аҡыл әләтен кәрәкмәгәнгә исраф итеүҙәр ҙә — әммә е булған был дәүерҙә!

Йылъяҙма ында үҙ осоро идеология ы шаҡтай уҡ сағылыш тап а ла, ул, сәйәсиҙән бигерәк, беренсе сиратта ижтимағи-әҙәби журнал; икенсенән, журналды тормош йылъяҙма ын ғәҙел теркәй алырлыҡ талант эйәләре — яҙыусылар, әҙиптәр сығарған; өсөнсөнән, журнал быуат дауамында тиерлек бер өҙләк өҙ, туҡтамайынса (ҡай ы саҡ тиҫтә йылдар буйы сыҡмаған осорҙо ла барға анап, ҙур анлы юбилей байрамдары үткәреп йөрөгән баҫмалар ҙа осрай) сығып килгән.

Журнал 1922 йылдан алып 1930 йылғаса ғәрәп шрифтында “Безнең юл” исеме менән сыҡҡан. (1930 йылдарға тиклем үк шул уҡ исемдә ун көнгә бер сыға торған йәнә бер баҫма булыуын да иҫкәртәйек.) Утыҙынсы йылдан “Безнең юл” икегә бүленеп, “Яңалиф” (Татарстан Мәғариф халыҡ комиссариаты әм Совет яҙыусылар ойошма ы органы) әм “Атака” (Татарстан пролетариат яҙыусылары ассоциация ы органы) исемдәре менән баҫылған. Ә 1933 йылдан 1965 йылға тиклем — “Совет әдәбияты”, ә уңғы дәүерҙә “Казан утлары” атама ы менән донъяға сығып килә. Заман сәйәсәте әм уның шауҡымдарына бәйле рәүештә журналдың ойоштороусылары ла (Татар социаль Шуралар йөм үриәтенең Мәркәз башҡарма комитеты әм Халыҡ Комиссарҙары Советы; Татарстан Халыҡ мәғарифы комиссариаты, РКП(б)ның Татарстан өлкә комитеты, Совет яҙыусылары ойошма ы; ТАПП әм Ҡыҙыл Армия-Флот яҙыусыларының Татарстан ойошма ы; Татарстан Яҙыусылар берлеге, Татарстан Министрҙар Кабинеты, редакцияның хеҙмәт коллективы...), титул билгеләмәләре лә (ғилми-сәйәси, әҙәби-ижтимағи журнал; сәйәсәт, сәнғәт, иҡтисад әм әҙәби тәнҡит журналы; әҙәби-ғилми, ижтимағи баҫма; әҙәбиәт, сәнғәт әм тәнҡит журналы; әҙәби әм ижтимағи-сәйәси журнал; әҙәби-нәфис әм ижтимағи-сәйәси журнал), структура ы ла, редакцияның эш урындары ла үҙгәреп, алмашынып торған. Исем-атамалар төрлө осорҙа төрлө үҙ теҙмәләрендә бирел ә лә, уларҙа төп ике төшөнсә әр саҡ аҡланып килде — “әҙәби” әм “ижтимағи”.

Журналдың “Безнең юл”, “Яңалиф”, “Атака” исемдәре менән сыҡҡан осоро 1922—1932 йылдарға ҡарай. Сағыштырмаса ҡыҫҡа бул а ла, ил тормошоноң үҙенсә ҡатмарлы осоро. Революциянан әм Граждандар уғышынан уңғы ауыр тормош, Сталин диктатура ының нығый башлауы, интеллигенцияның аптыраулы хәләте, диндәргә ҡаршы актив өжүм, солтанғәлиевсылыҡты фаш итеү шауҡымы, күмәк хужалыҡтар төҙөү хәрәкәте, әҙәби даирәләге сыбарлыҡ әм тарҡаулыҡ... Тәбиғи, журнал биттәрендә бик асыҡ сағыла был хәлдәр. Ысын әҙәби әҫәрҙәргә ҡарағанда көндәлек сәйәсәткә бәйле материалдар күберәк урын алған заман был. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, әҙәбиәттең алтын фондына инерлек әҫәрҙәр мул түгел был йылдарҙа. Шулай ҙа журнал биттәрен оло исемдәр биҙәп тора: Ғ. Ибра имов, . Таҡташ, Ш. Камал, Ш. Усманов, Х. Туфан, Ҡ. Нәжми, Ғ. Ҡотой, Ф. Хөсни... Ниндәй генә осор, ниндәй генә сәйәси тетрәнеүҙәр булма ын, ысын талантлы ҡәләм эйә енең әҫәрендә, өлөшләтә бул а ла, хәҡиҡәткә тоғролоҡ аҡланып ҡала ул...

Журналдың “Совет әдәбияты” осоро 1933—1965 йылдарға ҡарай. Ил тормошоноң йәнә бер ҡатмарлы, драматик осоро. Хәйер, Рәсәйҙә ҡатмарлы булмаған осор юҡ та, буғай... Халыҡ хәтерендә тетрәндергес фажиғә булып ҡалған этаплы ваҡиғаларҙы иҫкәртеү ҙә етә: золом дәүере... Ватан уғышы...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 62



Халыҡтың икмәккә туймаған йылдары... уңыраҡ бер аҙ еңеллек — “Хрущев йылымыслығы”, демократия өлгөләренең тормошта сағыла башлауы... Мәғлүм булғанса, золом әм уғыш йылдарында күп баҫмалар сығыуҙан туҡтай йәки ябыла. Әммә татарҙың әҙәби журналы йәшәүен дауам итә. Яҙмыш тарафынан нәҫелде аҡлап ҡалырға тейешле сәләмәт күҙәнәкле зат кеүек, ул, сәйәси катаклизмдарға бирешмәйенсә, күпмелер ташламаларға барып, исемдәрен алмаштыра-алмаштыра бул а ла, есемен-рухын аҡлап ҡала. уңыраҡ мәш үр Ғәли Аҡыш был хаҡта тикмәгә генә былай тип яҙмағандыр: “Социаль-мәҙәни тетрәнеүҙәр фажиғә ен башынан кисергәндә лә бирешмәгән, ау-сәләмәт йәшәргә тырышҡан әм шаҡтай дәрәжәлә шуға ирешкән журналыбыҙҙың эшсәнлеген ҙур ҡа арманлыҡ, мөғжизә анайым”. Был үҙҙәр журналдың төрлө исемдәрҙә сыҡҡан бөтә осорҙарына ла ҡағыла, тип уйлайыҡ.

Журнал әр ваҡыт халыҡ тормошо мәнфәғәттәрен ҡайғыртып йәшәне, ил яҙмышы — унып яҙмышы булды. Журнал авторҙарының күбе е уғышта ҡатнашты, байтағы яу ҡырҙарында ятып ҡалды.

Ошо урында Ғ. Әбсәләмов үҙенең фронттан яҙған мәҡәлә ендә иҫкә алған бер алдат хатынан өҙөк килтереп уҙайыҡ: “Бөгөн самолеттарҙан почта ташланылар... Еүеш ҡапсыҡтан минең исемгә еҙ ебәргән “Совет әдәбияты” журналы килеп сыҡты. Мин унып әр битен усаҡ йылы ында киптереп сыҡтым, шунан иптәштәр менән бергә йыйылышып уҡый башланыҡ”.

уғыш тамамланғас, тыныс тормошҡа ыу аған яҙыусылар киләсәктә яҡты тормош буласағына ныҡ ышанып, рухланып яңы әҫәрҙәр ижад итә. Ғ. Әбсәләмовтың “Аҡ төндәр”е (1974), “Алтын йондоҙ”о (1949), “Ғазинур”ы (1951), М. Йәлилдең “Моабит дәфтәре” циклына ингән шиғырҙары (1953), Н. Дәүлиҙең “Йәшәү менән үлем ара ында” (1957), Ш. Маннурҙың “Муса” (1965) романдары, С. Баттал, С. Хәким, З. Нури, Ә. Маликов .б. поэмалары әм шиғырҙары журнал уҡыусыларына еткерелә.

Илде төҙөкләндереү осоронда журнал сәхифәләрендә халыҡтың күркәм әхлаҡи сифаттарын, тарихи үткәнен, хеҙмәт өйөүсәнлеген сағылдырыусы яңы әҫәрҙәр — Г. Бәшировтың “Намыҫ” (1948), Ҡ. Нәжмиҙең “Яҙғы елдәр” (1948), И. Ғазиҙың “Онотолмаҫ йылдар” (1949), М. Әмирҙең “Ялантау кешеләре” (1953), “Саф күңел” (1959), Ғ. Әбсәләмовтың “ үнмәҫ уттар” (1959), Ф. Хөсниҙең “Йәйәүле кеше уҡмағы” (1961), Ғ. Ғөбәйҙең “Беҙ үҫкәндә” (1963), Ә. Еникиҙең “Йөрәк сере” (1958), “Рәшә” (1963), Г. Ахуновтың “Хазина” (1962), А. Расихтың “Ике буйҙаҡ” (1964) романдары; Н. Иҫәнбәт, Р. Ишморат, Ш. Хөсәйенов, Х. Вахит, Ю. Әминев пьесалары, Х. Туфан, Н. Арыҫланов, С. Хәким, Ә. Давидов, З. Мансур поэмалары әм шиғырҙары журнал аша үҙ уҡыусыларын тапты.

“Казан утлары” — ысын мәғәнә ендә халыҡ журналы — игенселәр, уҡытыусылар, уҡыусы йәштәр, зыялылар баҫма ы. Унып рухы ысын мәғәнә ендә халыҡ тормошон сағылдыра, яҙмышы халыҡ яҙмышы менән тәңгәл бара. Юҡ а, аслы-туҡлы йылдарҙа ла, илде “боҙ уҡҡан” осорҙарҙа ла ул аҡланып ҡалына алыр инеме? уғыш ҡырҙарында иң ҡәҙерле хаттар менән бергә поход сумкаларында йөрөтөрҙәр инеме? Ҡотоп тарафтарында йәки сүлле Ҡараҡом яҡтарында, шахта барактарында йәки тайга киңлектәрендә күп анлы милләттәштәребеҙ уны тыуған яҡ сәләме, телебеҙ а әңе итеп зарығып көтөп алырҙар инеме? Ә инде бала саҡта уҡ үҙен әҙәбиәткә бағышларға, гәзиттә

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 63



йәки журналда беренсе кескәй генә мәҡәлә ен йәки шиғырын баҫтырырға хыялланған йәштәр өсөн “Казан утлары”ның ба а ын әйтеп тора ы ла юҡ...

Журналыбыҙҙың абруйын ни ҡәҙәр генә күтәрергә тырыш аҡ та, ғәҙел булайыҡ. Танырға кәрәк: әҙәм хатанан азат булмаған кеүек, заман баҫымы аҫтында хаҡлыҡ юлынан тайпылыуҙары ла булғылаған. Гуманизм иммәттәренә, эстетик идеалдарға хыянат иткән сәхифәләр ҙә осраштырғылай. Оло талант эйәләрен “буржуа ялсылары” тип ба алауҙар ҙа, ысын милләт ә елдәрен “халыҡ дошмандары” итеп фаш итеүҙәр ҙә, “оборона әҙәбиәтенең магнитостройҙары өсөн көрәш”тәр ҙә, коммунизмға алып барыусы “юлбашсы”ларға мәҙхиә уҡыуҙар ҙа, ерле халыҡ киләсәге өсөн шикле әм ҡурҡыныс АЭС-тарға дан йырлауҙар ҙа... Әммә ошо йылдар эсендә әр бере е шаҡтай ҡалын (йыйылма бер том!) баҫма булып донъя күргән 1000 андың (барлыҡ тиражын йыйаң, үҙе бер ғәләмәт ҙур тау булыр ине!) дәрәжә ен әм ҡиммәтен әле әйтеп уҙған аташыуҙар билдәләйме уң? Юҡ, әлбиттә. уңғы 80 йыл эсендә бар булған иң күренекле әҫәрҙәребеҙ тап бына ошо журналда донъя күрҙе, уҡыусыларға, халыҡҡа барып етте. уғыштан уңғы әҙәби хазинабыҙға ҡарата бигерәк тә раҫ килә был. Йә, ошо журналға мөнәсәбәте булмаған йәки әҫәрен унда баҫтырыуҙы дәрәжә анамаған берәр татар әҙибен табып буламы икән? Йәки “Казан утлары” тигән Әҙәбиәт ҡапҡа ын үтмәйенсә ҙур ижад майҙанында танылыу алған берәй яҙыусы булдымы икән? Шуны ын да иҫкәртеп уҙыу урынлы булыр: журнал, иң әүәл әҙиптәр баҫма ы булараҡ, байтаҡ яҙыусыларыбыҙ әҫәрҙәрен бында баҫтырып, гонорар алып, күпмелер дәрәжәлә матди яҡтан да файҙа күреп йәшәй алдылар; журнал үҙенә күрә бер социаль яҡлау үҙәге лә була алды.

Журнал — әҙәби-мәҙәни тормошобоҙҙоң тарихи йылъяҙма ы. Эйе, был ысынлап та шулай. Журнал, беренсе нәүбәттә, татар яҙыусыларының иң яҡшы яңы әҫәрҙәрен киң ҡатлам уҡыусыларға еткерә. Был — уның тарихи традиция ы әм бөгөнгө статусы буйынса ҡуйылған бурысы. Әммә рухи тормошобоҙ әҙәбиәт менән генә сикләнмәй, шуға күрә лә журналға төрлө тармаҡтарға “таралып егелергә” тура килә. Нәфис әҙәбиәттән тыш, миҫалға, фән донъя ын ғына алайыҡ: гуманитар өлкәлә, бигерәк тә әҙәбиәт, тарих, тел белеме фәндәрендә академиктарыбыҙ, йөҙләгән фән кандидаттары әм докторҙарыбыҙ бар икән, быға ҡәҙәр уларҙың күбе е ошо журналда яҙышып, хеҙмәттәрен баҫтырып ғилем үрҙәрен яуланы. Аяныс, әле бығаса театр, көй, рәсем сәнғәте, ғөмүмән, мәҙәниәт тарихы буйынса махсус баҫмаларыбыҙ булманы тиерлек. Шуға күрә рәссамдар, композиторҙар, артистар, ғөмүмән, сәнғәт кешеләре ижадына журналда шаҡтай мул урын бирелә. Беҙҙең республика шарттарында был вазифаны журнал үҙенең бурысы тип ананы әм хәҙер ҙә шул фекерҙә тора.

Тәбиғи ки, бер генә халыҡ та фәҡәт үҙ ҡабығында, үҙ биләмә ендә генә йәшәп тәрәҡҡиәткә ирешә алмай. Шуны иҫтә тотоп, журнал сит ил әм күршетирә ҡәрҙәш халыҡтар әҙәбиәтенең дөйөм кешелеккә, гуманизмға хеҙмәт итә торған иң яҡшы өлгөләрен дә мөмкин тиклем яҡтыртып килә. Беҙҙә сыҡҡан Жоржи Амаду, Гарсиа Маркес, Акутагава .б. әҫәрҙәре — шуға миҫал. Совет әҙәбиәте классиктары аналған Я. Купала, И. Эренбург, К. Симонов, Ҡ. Кулиев, М.Кәрим, Д. Көгөлтинов, Р. Ғамзатов, С. Айытматовтарҙың да ҡай ы бер әҫәрҙәре менән уҡыусыларыбыҙ иң элек беҙҙең журнал аша танышты.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 64



1000 андың ярты ы сама ы (489) уңғы 40 йылда сыҡҡан “Казан утлары” өлөшөнә тура килә. Йылдар буйынса иҫәпләгәндә, 1965 йылдан бөгөнгә ҡәҙәр. Был инде — беҙҙең заман, күптәребеҙ ша ит булған заман, үҙенсә ҡыҙыҡлы, ғибрәтле, хатта бер ни тиклем аңлайыш ыҙ заман. Нимә менән характерлы уң был осор? Сағыштырмаса тыныс осор: локаль бәрелештәр ( уғыштың тынып торғаны юҡ унының!) туҡтама а ла, ил буйынса ғәрәсәт — ҙур уғыш афәте булманы; торғонлоҡ әм үҙгәртеп ҡороу йылдары кисерелде; СССР тарҡалды; совет хакимиәте ваҡытында тупланған байлыҡ бер тар даирә ҡулына күсте, “ҡырағай баҙар” мөнәсәбәттәре тамыр йәйҙе, социализм осоронда шаҡтай уҡ ныҡ булған әхлаҡ принциптары емерелде... Яңы быуатҡа күселде... Осор йылъяҙмасылары аналыусы яҙыусы халҡы өсөн материалға бай, иҫ китмәле ҡыҙыҡ осор. Иң мө име — үҙ азатлығы бар, күңелеңдәген ҡурҡмайынса әйтеп була, яҙып була.

Был ҡырҡ йыл эсендә яҙыусылар ғаилә е эсендә лә тәбиғи алмашыныу-яңырыу процесы барҙы. Быуат башында тыуып, Ватан уғыштарын кисергән быуын (ғәжәп колоритлы быуын!) ғүмер әм ижад юлдарын тамамлап, фани донъялыҡтан күсте, улар урынын уғыш осоронда үҫмер булған быуын алып, үтә бер үлпәнлек менән ижад итте (инде улар ҙа ирәгәйеп бара). Төп майҙанды 60-сы йылдар башында әҙәбиәткә килгән быуын тота хәҙер, инде үксәләренә баҫып, яңы быуын уларҙы ла алыштырып килә...

Әйткәнемсә, әҙәбиәтебеҙ өсөн ифрат бәрәкәтле осор. Был ҡырҡ йылдың беренсе ярты ында, шул осор идеология ы, социалистик реализм алымы сиктәре (хәйер, талант сиктәргә ыя алмай!) ирек биргән ҡәҙәр, үҙҙәренең иң яҡшы әҫәрҙәрен ижад итте, ә уңғы 15—20 йыл эсендә, демократик азатлыҡтар киңәйгәс, төрлө жанрҙарҙа байтаҡ әҙәби гәү әрҙәр тыуа алды. Уларҙың бары ы ла тиерлек иң элек “Казан утлары”нда донъя күрҙе.

Журналыбыҙҙың “Казан утлары” осоро баш мөхәррирҙәре – Р.Мостафин, Ғариф Ахунов, З. Нури, Р. Харис, Р. Фәйзуллин.

Бөгөнгө көндә лә журналыбыҙ редакция ында танылған яҙыусылар эшләй: Р. Ғаташ, Р. Низамиев, Мансур Вәлиев, К. Кәримов, А. Ғимаҙиев, Р. Юныс, М. Закир, Р. Мәрҙәнов, Р. Сәғҙи... Шуларға өҫтәп, йәнә ете кешелек тәжрибәле ғәмәли хеҙмәткәребеҙ бар. Шуны ы характерлы: “Казан утлары”нда бер эшләй башлаған кеше хеҙмәт урынын алмаштырырға йыйынмай тиерлек, йылдар буйы баҫылып эшләй бирә. Арабыҙҙа утыҙ-егерме йылдар эшләгән хеҙмәттәштәребеҙ бар. Шуны ы ла иғтибарға лайыҡ: заманында ғәмәли хеҙмәткәр — машинистка йәки корректор булып эшләгән әләтле ҡай ы бер йәштәр үҙҙәре үк яҙыусылар булып китте. Мәҫәлән, Ф. Байрамова, С. Саубанова ана шундайҙарҙан. Үҙем дә, шаҡтай йылдар был журналда хеҙмәт итеп, әлеге 1000 андың 200-нә баш мөхәррир сифатында ҡул ҡуйып сығарғанмын икән. Йәшермәйем, эске бер ғорурлыҡ хисе уята торған ан был минең өсөн. Ошо ҙур китап сығыу уңайынан, ҡыҫҡа ы, кем булып эшлә ә лә — типографияла йәки компьютерҙа хәреф йыйыусымы, әллә баш мөхәррирме, бүлек мөдиреме йәки коррекտормы, сәркәтип йәки хисапсымы, редколлегия ағза ы йәки шофермы, бөгөнгө йәш хеҙмәттәшебеҙ йәки ветеранмы, иҫәнме, әллә гүр эйә еме — әммә енә рәхмәт әйтке, иҫкә алғы килә.

Тыйылған йәки онотолған әҙәби мираҫты халыҡҡа кире ҡайтарыуҙа журнал эшсәнлеген әйтмәй уҙ аҡ, яҙмабыҙ тулы булмаҫ ине. Бер генә исемде айырып әйтеү ҙә күп нәмәне аңлата булыр: бөйөк әҙип Ғаяз Исхаҡи. Унын төп

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 65



ҙур әҫәрҙәре бөгөнгө уҡыусыларға иң элек журналыбыҙ аша еткерелде. Был бөйөк исемгә өҫтәп — С.Маҡсуди, Й. Аҡсура, Г. Баттал, Ғ. Ғәзиз, С. Йәләл кеүек олуғ заттарҙың ижад өлгөләре. Боронғо мираҫтан — “Йософ ҡисса ы”, “Иҙеүкәй” дастаны... анай кит әң, улар күп томлыҡтарға йыйылыр...

Ҡай ы саҡ күңелгә шундай уй килә: журналыбыҙ тура ында тәфсилләп өйләп тороуҙың хәжәте лә юҡ, уны бөтә татар донъя ы белә! Эйе, был — дөрөҫкә яҡын хәҡиҡәт. Ысынлап та, үҙен зыялы, мәғрифәтле тип анаған, милли йәнле әр татар ғаилә енә барып етә торған баҫмаға әүерелгәйне ул. Йөҙәр мең тираж менән сыҡкан саҡтары булды, донъяның татарҙар йәшәгән бөтә ҡитға-төбәктәрендә алдырҙылар уны, уҡыусылары ла миллионлап иҫәпләнде. Әммә был күр әткестәр, ниндәй ҡыҙғаныс, инде үткән быуатҡа ҡарай. Объектив тип әйтерлек етди сәбәптәр ҙә етерлек. Күреп торабыҙ: уңғы тиҫтә йылдар эсендә Кешелек донъя ы иҫ китмәле үҙгәрештәр кисерҙе. Фән әм әхлаҡ өлкә ендә был үҙгәрештәр бигерәк тә ныҡ иҙелә. Уларҙың ыңғайы ла, кире е лә әммәбеҙгә — тулы бер халыҡҡа ла, айырым кешегә лә ҡағылмай ҡалманы, билдәле. Компьютер заманы китапты, баҫма үҙҙе ҡыҫырыҡлай башланы, ижтимағи тормошта әҙәби үҙ көсөнә ихтыяж кәмей төштө... Өҫтәүенә, СССР тарҡалғас, геополитик хәл ныҡ үҙгәреп, татарҙар күпләп йәшәй торған региондар республикаларҙан айырым мөстәҡил дәүләттәргә әүерелгәс, мәҙәни бағланыштар кәмене, татар телендәге баҫмалар ул ерҙәргә етә алмай башланы... Шулай ҙа бирешергә иҫәп юҡ (ярамай ҙа!), бөгөнгө көндәге тиражыбыҙ Рәсәйҙә сығып килгән ҡалын әҙәби журналдар менән сағыштырғанда шаҡтай юғары әле. Әммә... “беҙҙең журналды бөтә татар донъяы белә!” тип өрән алыу бер ҡатлылыҡ булыр ине. Шуға күрә, был яҙмамда беҙҙең баҫманы электән белгәндәрҙең хәтерен яңыртып, яңы быуындарға абаҡ-ғибрәт бул ын тип, журналыбыҙ тарихы тура ында бер ни тиклем өйләп китеүҙе кәрәк ананым.

Эйе, оҙон-оҙаҡ йылдар алыҫлығынан ҡарағанда халыҡ тормошонда журнал үҙенең аҫыл функция ын үтәгән. Әммә “яңы заман, яңы йырҙар” тигәндәй, әр осор әр кем алдында яңы бурыстар, яңы талаптар ҡуя. Ижтимағи тере организм булараҡ, журнал алдында ла тора ул бурыстар. Глобалләшеү киң ҡолас алған дәүерҙә халҡыбыҙҙың ҡабатланмаҫ йөҙөн, рухи мираҫын аҡлау, уны цивилизациялы ил-халыҡтар рәтендә киләсәккә алып барыу, телде, әҙәбиәт-сәнғәтте үҫтереү,— әлбиттә, журналдың төп бурыстарының бере е. Шуға күрә лә Татарстандың дәүләтселеген яҡлау, нығытыу әм уны тормошҡа ашырыуҙа ярҙам итеүҙе “Казан утлары” иң яуаплы бурыстарҙың бере е тип анай. Әгәр Ҡазан бөтә донъяға ибелгән татарҙарҙың тартылыу ҡибла ы бул а, “Казан утлары” ла – туған телде хөрмәт иткән барлыҡ милләттәштәребеҙ өсөн мәғрифәт, ғилем усағы. Шуға күрә лә милли берҙәмлек ыналған, “кеше йәне өсөн көрәш барған” заманда, китап үҙенә иғтибар кәмей төшкән дәүерҙә беҙ — яҙыусылар был журналда осорҙоң юғары талаптарына яуап бирә торған әҫәрҙәр яҙырға бурыслыбыҙ.

---

Agidel 11:Agidel 11.qxd  14.04.2009  0:25  Page 66





**Гәрәй**
**РӘХИМ**

## *Илкәйем*

*Яҙ яҙлаған... Йәй йәйләгән...*
*Көҙ көҙләгән Илкәйем!*
*Ҡыш ҡышлаған... Ҡышын туңғас,*
*ин йылытҡан Илкәйем!*

*Таңым атҡан... Көнөм тыуған...*
*Шәфәҡ батҡан Илкәйем!*
*Төнө буйы инең уйҙы*
*Уйлап ятҡан Илкәйем!*

*Сәғәттәрем, минуттарым,*
*Миҙгелдәрем — инеке...*
*“ ин кемдеке?..”— тип орама...*
*... Мин — тик тыуған Илдеке!..*

## *Беренсе күкрәү*

*Бик йырлағым килә*
*Бөгөн минең*
*Бар тауышҡа,*
*Көслө иттереп;*
*Бөгөн минең*
*Яҙғы күкрәү менән*
*Бер күкрәгем килә,*
*Гөр килеп.*
*Ямғыр болоттары*
*ыймай күккә,*
*Бер-беренә килеп бәрелә.*

*Гәрәй Рәхим 1941 йылда тыуған. Ғ. Туҡай исемендәге Татарстан дәүләт премия ы лауреаты. Татар, рус, башҡорт телдәрендә сыҡҡан күп китаптар авторы.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 67



*Бәреләләр, сәсеп ут-осҡондар,*
*Күктәр күкрәй, тауҙар дер килә.*
*Иң беренсе күкрәү…*
*Бураҙнала,*
*Маңлайына ҡуйып ҡулдарын,*
*Атай ҡарап тора болоттарға,*
*Ул белә шул унда ни барын.*
*Ул белә шул: иң беренсе ямғыр*
*Ергә йәшәү, йәшлек килтерә,*
*Морон төрткән йәп-йәш үләндәрҙе*
*Ҡолағынан тартып үҫтерә.*
*Ул белә шул:*
*Иң беренсе күкрәү*
*Ирек бирмәй ергә кибергә.*
*Ямғыр көтөп көн дә бүртә торған*
*Бөрөләрҙе асып ебәрә.*
*Маңлайына ике ҡулын ҡуйып,*
*Атай ҡарап тора юғары.*
*аҡалынан ташҡын аҡты инде.*
*Нигеҙенә,*
*Баҫҡан тупрағына*
*Иң беренсе күкрәү көс биргәс,*
*Ул шыбырлап:*
*—Булды,*
*Икмәк булды,— тине,—*
*Ил интекмәҫ быйыл,*
*Интекмәҫ!*

*Бына шуға*
*Яҙғы күкрәү кеүек*
*Бер күкрәгем килә,*
*Гөр килеп;*
*Минең бөгөн*
*Бик йырлағым килә*
*Бар тауышҡа,*
*Көслө иттереп!*

## Донъя миңә

*Мин бишектә сағымда уҡ*
*Донъя миңә ғашиҡ булған.*
*Шуға миңә зәңгәр күҙҙәр*
*Насип булған.*

*Ерҙе күреп оҡлан ын тип,*
*Ҡояшының нурын биргән.*
*Шағир бул ын тигәндер ул,*
*Йырын биргән.*

*ағыш биреп, күңелемде*
*Тынғы ыҙ бер диңгеҙ иткән.*
*Шатлыҡ биреп, шул диңгеҙҙе*
*Сик еҙ иткән.*

*Ғүмерем оҙон бул ын өсөн,*
*Ашарыма икмәк биргән.*
*Икмәк тәмен бел ен тиеп,*
*Хеҙмәт биргән.*

*Аҡыл биреп, донъялағы*
*әр нәмәнән көслө иткән.*
*әм шуларҙың бары ы менән*
*Кеше иткән.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd  14.04.2009  0:25  Page 68





**Рәзил**
**ВӘЛИЕВ**

***

… Эйе, минең көслө рухымдан
Ер үә күктәр ҡалтырар.

*. Таҡташ.*

*Илай-илай, уғыша- уғыша ерҙә*
*Аҡыл күпме яуап эҙләгән…*
*Йә донъяны үҙгәртәм мин бөгөн,*
*Йә булма а, үҙем үҙгәрәм.*

*Аңламайҙар, елде, зәңгәр, ти әң,*
*Тормошобоҙ — абантуй, ти әң.*
*әр нәмәгә минең үҙ атамам:*
*Айҙы Ҡояш тием, теләә м.*

*Сәскәләргә үҙ исемем бирәм,*
*Мең тереләм көнгә, мең үләм.*
*… Үлем менән яғалашҡанда ла*
*Аҡты ҡара тиеп өйләмәм.*

*Ысын дуҫлыҡҡа ла дан йырлайым…*
*Был донъяла йәшәү — мең рәхәт!*
*Аҙашыпмы, ҡайсаҡ килеп сыға*
*Беҙҙең йөрәккә лә мөхәббәт.*

*Уңды- улды була бутағаным,*
*Булғылай шул инде, булғылай…*

---

*Рәзил Вәлиев 1947 йылғы. Шағир, прозаик, публицист, йәмғәт әм дәүләт эшмәкәре. Күп анлы китаптар, шул иҫәптән ике тапҡыр донъя күргән дүрт томлыҡ “айланма әҫәрҙәр” авторы. Ғ. Туҡай исемендәге Татарстан дәүләт премия ы лауреаты.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 69



*Кешеләрҙән гел яҡшылыҡ көтәм,*
*Мин хыялый, буғай, хыялый.*

*Хаҡ ыҙлыҡты күреп янам, шашам,*
*Матурлыҡты күреп теҙләнәм.*
*Йә донъяны үҙгәртәм мин бөгөн,*
*Йә булма а,*
*Үҙем үҙгәрәм.*

## Ауылда туй

*Ҡайырып ас урыҫ ҡапҡаларын!*
*Кер ен ҡунаҡ беҙҙең өйгә лә!*
*Ауылда туй. Тракторсы егет*
*ыйыр ауыусыға өйләнә.*

*Урамдар тар бөгөн егеттәргә,*
*Йыр ағыла баҫыу яғына.*
*Бейей бабай. “Кеше көлдөрмә” тип,*
*Илам ырап әбей ялына.*

*Ҡойоларҙың ыуы эселеп бөткән,*
*Колхоз аты батҡан күбеккә,*
*Иҫке йырҙар яңы булып яңғырай,—*
*Турғай ҡунғанмы ни күреккә!*

*Ауылда туй. Ябай ғына егет*
*Ябай ғына ҡыҙға өйләнә.*
*Машиналар тынып ҡалған бөгөн…*
*Аттар саба, саба… әл-лә-лә!*

*Ҡалым да бар, бирнә лә бар туйҙа…*
*Ниндәй иҫкелек был?— тимә лә.*
*Егет батырлығы ҡалым бул а,*
*Ҡыҙҙың мөхәббәте — бирнәгә.*

*Саба-саба теҙгендәрҙе өҙҙөк,*
*Тик аман да йырҙар өҙөлмәй!*
*Быуаттарҙан күсә-күсә килгән*
*Ҡыңғырауҙар яр ып зеңгелдәй.*

*Урамдарҙы иңләп шатлыҡ килә,*
*Дуҫ өйөнә, дошман көйөнә.*
*Ҡайырып ас урыҫ ҡапҡаларын!*
*Кер ен байрам татар өйөнә.*

***

*Мажаралар донъя ында*
*Мажаралар бөтөрмө?*
*Мажара ыҙ ҡартлығымды*
*Был йөрәгем көтөрмө?*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 70



*Донъя тулы күҙҙәремдән*
*Был йүләрлек китерме?*
*Зәңгәр тулҡын, ап-аҡ бәхет*
*Миңә ҡағылып үтерме?*

*Зө рәләрҙән ҡалған серҙе*
*Ул уң миңә үтәрме?*
*Күлгә төшкән Ай шикелле*
*Әллә уң тик үртәрме?*

*Мажаралар донъя ында*
*Мажаралар бөтөрмө?*
*Бер мөхәббәт табыр өсөн*
*Бер йәшлегем етерме?..*

## Бәхет

*Ҡая ташҡа менеп шиғыр яҙҙым —*
*Был шиғырым бәхет турында.*
*Хозурланып тауҙа баҫып торам,*
*Болоттарға башым орона.*

*Шундай яҡын миңә бар кешеләр,*
*Тыуған яғым кеүек киң йы ан.*
*Ташлап киткән йәрем кире ҡайтты —*
*Ҡулдарына ал ыу гөл йыйған.*

*Иңдәренә шатлыҡ йөгө тейәп,*
*иҙелмәй ҙә үтә ай, йылдар...*
*Үҙәндәрҙә илдәр уғышмайҙар —*
*уғыш уйнай бары малайҙар.*

*Уйынсыҡтар теҙеп, шуҡ малайҙар*
*Майҙандарҙа я ай парадтар...*
*Диңгеҙҙәре — яҙғы ташҡын ыуы,*
*Бата унда ҡағыҙ караптар.*

*Кистәр ет ә, ҡулға-ҡул тотошоп,*
*Әйлән-бәйлән уйнай дәүләттәр...*
*Бар кешеләр шундай киң күңелле,*
*Бар кешеләр шундай әйбәттәр.*

*Хозурланып тауҙа баҫып торам —*
*Болоттарға башым орона.*
*Ҡаяларға менмәй аңламаҫ ың —*
*Был шиғырым бәхет турында.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 71





**Ғәзинур**
**МОРАТ**

## *Ғаләм өнө*

*Айҙа, тиҙәр, сәйер өн бар,*
*Айҙа, тиҙәр, шундай хәлдәр.*
*Әгәр Күктәр өн өҙ тор а,*
*Сәйер булыр ине мәгәр.*

*Әгәр Күктәр өн өҙ ҡал а,*
*Туфан ҡубыр ине күптән.*
*Беҙгә аҙан маҡәме лә,*
*Ҡайтауаздай,  ингән Күктән.*

*Ҡайтауаздай,  әр ярым ай*
*Ҡуныр ҡалған манараға...*
*Ғаләм өнө маҡәменән*
*Хоҙай бирмеш таң ярала.*

*Ғаләм өнө маҡәменән*
*Яралалыр ила и моң.*
*Моң сүрә е булып ингән*
*әр бер  үҙе Ила ының.*

*Айҙа аҙан ишетелгән...—*
*Ерҙә йөрөй шундай хәбәр.*
*Әгәр Күктәр өн өҙ тор а,*
*Сәйер булыр ине мәгәр...*

*Ғәзинур Морат 1959 йылғы. Шағир, публицист. “Мәҙәни йома” гәзитенең баш мөхәррир урынбаҫары.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 72



## Сусанин

Тарихтарҙы кисә-кисә
Хәлдән тайҙыҡ. ыу анык.
Юл оранык шишмәләргә —
Юл күр әтте… Сусанин.

Эҙләп киттек шишмәләрҙе —
Шишмәләрҙе тапманыҡ…
Дәүерҙәр ҡуйған ҡапканға
Кемдәр генә ҡапманык та,
Кемдәр генә ҡапманык.
Ҡапканда ла Тәңре хаҡын,
Алла хаҡын аҡланыҡ.

Беҙ ҙә сығырбыҙ хаҡ юлға —
Быуаттарҙы кисербеҙ.
Ирек тигән шишмәләрҙең
Ятып ыуын эсербеҙ.

Беҙ ҙә сығырбыҙ хаҡ юлға.
Юлдар уң бул ын!
Амин!
Ҡаршыла — ете юл саты,
Юл сатында — Сусанин(!)

Килбәте шул ук. Иҫкесә.
Ниәте, бәлки, үҙгә?
Белмәйбеҙ: әллә аҙашкан,
Әллә юл айлай беҙгә.

## ынсыбағар*

Үҙ ба а ын ул бик якшы белә,
Шуға ла ул али әләй тыныс.
оҡланырға хатта хәтәр уға,
оҡланырға хатта ҡурҡыныс.

Ҡараштарың менән ҡағыл аң да,
Әүерелер кеүек таш ынға.
Юҡ, юҡ, ынсы ҡарашынан түгел —
Ғәрип донъялыктан ят ына.

Юҡ, юҡ, ынсы ҡарашынан түгел —
Үҙ-үҙенән йәшерә ул тәнен.
Мәңгелеккә күсәсәк был миҙгел!—
Гүзәллеккә сабырлыҡ бир, Тәңрем.

Сабырлыҡ бир, Тәңрем, был миҙгелгә —
Фәрештәңә ынсың ҡуя ҡанат.

---

* ынсыбағар — натурщица.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 73



*Ирендәрең менән ҡағыл аң да,*
*Али әгә әйләнер ын ҡабат.*

*ынсы китер…*
*Оҫтахана ында*
*Хужа булып ҡалыр бер үкенес:*
*Яратыуы хатта хәтәр уны,*
*Яратыуы хатта ҡурҡыныс.*

## ***Яңғыҙлыҡ исемле ҡыҙ***

*Эҙләмәгеҙ мине бөгөн,*
*Мин юҡ бөгөн донъяғыҙҙа.*
*Күңелдең ыңар асҡысы*
*Яңғыҙлыҡ исемле ҡыҙҙа.*

*Ул ҡыҙ мине тотҡон итте,*
*арылды ла иңдәремә.*
*Тәмәкемдең күк төтөнө*
*Ҡосаҡланы билдәренән.*

*Ул ҡыҙ мине ғашиҡ итте,*
*Тағатты ла толомдарын,*
*Бышылданы… Ишеттем мин*
*Күҙҙәр күҙгә ябылғанын.*

*Теҙҙәр теҙгә ҡағылғанын*
*Ишеттем мин, ишеттем мин.*
*ыңар асҡысын күңелдең*
*орарға, а , кисектем мин,*
*Кисектем мин.*

*Яңғыҙлыҡ атлы ҡыҙ менән*
*Ҡалырмындай мин мәңгегә.*
*Ул ҡыҙ миңә шундай яҡын —*
*еңә барам пак тәненә.*

*Ул ҡыҙ миңә шундай яҡын:*
*Гүйә, ҡатын — мин яңғыҙға.*
*Эҙләмәгеҙ мине бөгөн —*
*Мин юҡ бөгөн донъяғыҙҙа.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 74





**Фәйрүзә**
**МӨСЛИМОВА**

## *Яҙ*

*Аҡ ҡайындар ялан аяҡ*
*ыуға кереп баҫҡандар…*
*Әллә инде, ҡыҙҙар ымаҡ,*
*Яратыуҙан шашҡандар!*

*Сайҡайҙармы яулыҡтарын*
*Ҡар ыуҙарына алып?*
*Сихырланып ҡалғандармы*
*Күл-көҙгөләргә бағып?*

*Үҙҙәренең гүзәллеген*
*Беренсе күргәндәрме?*
*оҡлан ындар беҙгә тиеп,*
*ыуҙарға кергәндәрме?*

*Ҡар ыуында аҡ ҡайындар…*
*өймәҫ ерҙән өйөр өң.*
*Ҡояш-егет көлә генә —*
*Тигеҙ күрә әммә ен.*

## *Мин уғышта булдым*

*Мин уғышта йөрөнөм атай менән,*
*Атай менән еңеү яулаштым.*
*Волхов аҙлыҡтарын кисеп сыҡтым,*
*Ҡамалышта ҡалып, аҙаштым.*

---

*Фәйрүзә Мөслимова — ике шиғыр китабы авторы. “Ялҡын” журналының әҙәби бүлеге мөдире. Татарстан Республика ы Яҙыусылар союзы ағза ы.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 75



*Әсирлектең тойҙом әселәрен,*
*Юҡ а, ҡайҙан миндә былдай моң?*
*Шул хаҡтарҙа китап уҡы ам да,*
*Ана шундай кино ҡара ам да,*
*Йәнем менән әрнеп илаймын.*

*Атай менән әсирлектән ҡастым,*
*Иҫән ҡайттым мин дә уғыштан.*
*“Мин иҫән!”— тип атай өйөнгәнгә,*
*Мин тормошто өйҙөм тыумыштан.*

*уғыш бөткәс, Сталиндар киткәс,*
*Мин тыуғанмын ергә, мин —дауам.*
*Әсәй еҙ ҙә, атай ыҙ ҙа күптән,*
*Нисә үлгән, нисә яралған!*

*Мин уғышта йөрөнөм атай менән,*
*Күр әгеҙсе, әле мин иҫән!*
*Тыныслыҡҡа йыр мәҙхиә әйтеп,*
*Яҙғы елдәр булып мин иҫәм.*

## Апрель ҡары

*Ятып аунарғамы апрель ҡарҙарына?*
*Апрель ҡарҙарылай әллә ҡаралырға?*
*Ҡар ыуҙары кеүек яҙғы ергә еңеп,*
*Умырзая булып ҡабат яралырға?*

*Бына ниндәй хыял, ниндәй яр ыу!*
*Ҡуңыр ҡарҙы ябынып, йәйрәп ята баҫыу…*
*Орлоҡ төшөр көндө көтөргәме оҙаҡ,*
*Ҡасан ҡуҙғалыр, тип, йылғаларҙа ташыу?*

*Ҡасан япраҡ ярам, ти, ҡайында бөрө.*
*Ҡояш нурҙарында бүрткән инде үҙе.*
*Ә ин, имеш, шул саҡ, көҙҙәреңә китеп,*
*Яман ыулап йөрө, илам ырап йөрө…*

*Аунар инем, тиеп, апрель ҡарҙарында…*
*Йүләр хыял бер тейештер таралырға.*
*Бөрө ымаҡ бүрткән хистәреңде тыйып,*
*Бик аҡыллы кеше булып аналырға.*

*Ана шундай хыял!*
*Апрель ҡары ирей…*
*Шытып сығасағын умырзая булып*
*Апрель ҡары әле төшөндә лә күрмәй…*

Agidel 11:Agidel 11.qxd  14.04.2009  0:25  Page 76



## Япраҡ хәлендә

*Бик  ағынды  ине баҡсам,*
*Гөлдәрем көтә, тимә.*
*Үҙем  ағындым, тип әйт ул  ин.*
*Ғорур башыңды эй ҙә.*

*Күңелеңдә ниҙәр барын*
*Күреп булмай үтәләй.*
*Хистәреңде йәшермәйсә*
*Әйтеү ҡыйын микән ни?*

*изәм дә,   иҙмәйем кеүек*
*Тартыныу сәбәптәрен.*
*Япраҡ кеүек  арғайта ың —*
*Их, ошо ғәҙәттәрең.*

*үҙ йәшереп, тел йәшереп*
*Күпме була йөрөргә?*
*Кил баҡсаға, көтәм, тиең,*
*Гөлдәрем көтә, тимә.*

*Килермен дә, япраҡ итеп*
*Өҙөп алыр ел генә...*
*Әйт тиҙерәк, көтәм, тиең!*
*Баҡсам  ағынды, тимә!*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 77





**Луиза**
**ЯНСУАР**

***

*Устарыма яуа август йондоҙҙары...*
*Болон түрҙәрендә ағышлана гөлдәр.*
*Гөлдәр керпегенә ятҡан ҡырау төсләө,*
*Күңел баҡса ына инә көҙгө өндәр.*

*Устарымда бейей август йондоҙҙары...*
*Беҙ уң Ер ҡатында, Күк ҡаршында кемдәр?!*
*Аяҙ күҙе менән баға төп өҙ Киңлек...*
*Юҡ, йыуатмай йәнде, тик ағайта төндәр.*

*Ниндәй сик еҙлектәр елкендерә, әйҙәй,*
*Ниндәй бығауҙарҙы өҙмәк була ҡулдар?*
*Тыпырсына уста бәхет йондоҙҙары,*
*Ә табанды өтә ер туҙаны... юлдар...*

## *ыу ау*

*ыу ауымды баҫмай ут та, ыу ҙа,*
*Саф шишмәләр, елдәр, тупраҡ — бер ни!*
*Йөрәк, ахыры, дымға ер еп түгел,*
*Офоктарға ҡанат төбәп иңрәй.*

*Тып-тын шишмәләрҙе ҡалдырам да*
*Дауылдарға тамырланам, түҙмәй.*
*Йөрәк, ахыры, үҙҙәр, күҙҙәр аша*
*Тәү бишеген, уңғы ватан эҙләй.*

*Луиза Янсуар — шағирә, “Күҙен аса умырзая”, “Мин күктәргә ҡайтам”, “Болан ҡыҙы” .б. китаптар авторы. Филология фәндәре кандидаты, Татарстан Республика ы Яҙыусылар союзында әҙәби консультант.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 78



## *Толом-толом…*

*Толом-толом ат ялдары…*
*Телем-телем беҙҙең моңдар…*
*Сөйөмбикә — ыбай ҡыҙҙан*
*Йөрәгемә ингән өн бар.*

*“ айлап ал да ҡанатлы ын,*
*Ут ипкәнен тояғынан,*
*Мин баҫмаған ыу ауҙарҙы*
*Баҫ,— тип,— етеп Хыялыңа!..”*

*Толом-толом ай нурҙары…*
*Телем-телем беҙҙең йәндәр…*
*Сөйөмбикә — еткән ҡыҙҙың*
*Йәштәреләй — бер көн тамған.*

*Ул да айға ҡарағандыр,*
*Юрағандыр ниҙер тып-тын,*
*Ил йүгәне күскән саҡта*
*Ҡулдарына ,— Иҙел-Йорттоң.*

*Юҡ ынғандыр атҡайының*
*Дымлы күҙен, тоғролоғон,*
*Тойғас бер көн бәгерендә*
*Дошман түгел, “дуҫ”тың уғын.*

*Толом-толом Төн ҡара ы…*
*Телем-телем — аман илең…*
*Тик моңдары, йәне иҫән,*
*Сөйөмбикә — аҫыл килен!*

*әм… ат менер ҡыҙҙары бар,*
*өйөр — хисен Йырға түгеп,*
*аҡлар, яҡлар Ил хәтерен,*
*Толом-толом итеп үреп!*

## *Беҙ*

*Күҙгә йоҡо кермәҫ Төн был…*
*Ел дә йоҡлай, ел дә тынған.*
*Шиғыр менән күҙгә-күҙ беҙ —*
*Яуға сыҡҡан ирҙәр ымаҡ.*

*Хис ҡылдары йәйә булып*
*Тартыла әр ҡараш-ымдан…*
*Шиғыр менән йәнгә-йән беҙ,—*
*Парын тапҡан йәрҙәр ымаҡ.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 79





**Камил**
**КӘРИМОВ**

# ҠОМ СӘҒӘТЕ

**РОМАН***

## I. Зөмәйрә

“Инештән ыу эсмәйҙәр...” Ғүмер юлының икенсе ярты ына еткәс, кешенең фәлсәфә е үҙгәрә. Килә бер көн: йәшлек вайым ыҙлығы менән үтеп киткән манзараны, мөхитте, ваҡиғаларҙы, йылдарҙы бөтә ҡатнашыусылары менән иҫкә төшөрә башлай ың, иғтибар итергә лә ярамаған, ҡасандыр яп-ябай ялтырауыҡ бер быяла ғына булып күренеп ҡалған минуттарҙан алтын дәрәжә е биреп тәрән мәғәнә, оло өҙөмтә, изге төшөнсә, ә, бәлки, уңғы йыуанысыңды эҙләй башлай ың. Юлдың беренсе ярты ындағы юғалтыуҙар иҫеңә төшөп, ине тәүбәгә килтерә.

Вәғәҙәләр, йәшерен өмөттәр, иләҫ хыялдар менән тағы яҙ килә! Яҙҙың яр ыу ташҡыны яу булып донъяны буй ондорорға ынтыла.

Өйө булғандарҙың түбә енән тамсы тама.

Ҡурсаҡ өйө ымаҡ биҙәкләп эшләнгән ояларҙа ете диңгеҙ, ете сик ыҙығын иҫән-имен үтеп ҡайтҡан замана сыйырсыҡтары, сит илдәрҙә ишеткән-күргәндәрен өйләргә теләгәндәй, төрлө телдәрҙә оҡан өн-ижектәрҙе көйләп айраштыра.

Аҡҡан ыуҙар кире ҡайта... Үҙ күҙҙәре менән күрә е килгән кеше, Мишә йылғаының яр ситенә килеп, яҙғы ташҡынды күҙәт ен...

Килендәрҙең көйәнтә енә эленгән Ҡазан силәктәренән ташып сыҡҡан ыуҙары гөрләүектәргә әйәреп инешкә төшә, инеш уны Мишәгә илтеп тапшыра, ә Мишә ыуын Иҙел әр ваҡыт өйөнөп ҡаршы ала; ни айәт, Шәленең ун шишмә е Иҙелдең бер тулҡынына әүерелә лә Каспий диңгеҙенә ашҡына. Диңгеҙҙәрҙең холҡон беләбеҙ — ул беҙҙең шишмәләрҙе мәңгегә тоҙлап ҡуя. Ләкин Шәле шишмәләре Сафура, Сыйырсыҡ, атлы-йәйәүле әм дауыллы бурандар булып кире үҙ ауылына әйләнеп ҡайта. Беҙ уларҙы танымайбыҙ ғына...

Шәленең йылдар буйы ситкә ағып яткан шишмәләре йыраҡ юлдар үткәс,

*Камил Кәримов – билдәле татар прозаигы. “Казан утлары” журналының бүлек мөхәррире.*

---

** Әҫәрҙең ҡыҫҡартылған варианты.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 80



ғашиҡтарҙы уғарырҙай сафлығын, күҙ йыуырҙай кәүсәрлеген юғалтҡан болғансыҡ, сирҡансыҡ шыҡ ыҙ әм хәтәр ташҡынға алышынған хәҙер. Бәлки, Шәленеке генә түгелдер, тик барыбер заманында кем өсөндөр изге булған шишмәләр бөгөн килеп гона шомлоғона әүерелгән. Улар, яҙ еткән айын кире әйләнеп ҡайтып, йәндәрҙе әрнетә, бәғерҙәрҙе аҡтара, хистәрҙе ыҙлата.

Яҙ — тәбиғәттең тыуған мәле.

Фазыл ғүмер оҙонлоғон яҙҙар менән анай. Кеше яҙы кешегә кәрәкмәй. Сит кешенең яҙын да, шатлығын-ҡайғы ын да ташлап китеп була. Дүрт миллиард кеше йәшәгән Ер шарында, баҡти әң, әр кем үҙе генә көн итә: үҙе генә тыуа, үҙ донъяында үҫә, башҡаларға иҙҙермәҫкә тырышып ҡына ярата, үҙ йөрәгенә таянып көрәшә, күҙен йомоп яңғыҙлыҡта бәхилләшә әм япа-яңғыҙ ер ҡуйынына керә...

Фазыл яңғыҙы ғына ташҡындан ташҡынға күсте, ыуҙан ыуға керҙе, юлдан юлға икерҙе. Ҡайҙа ғына бар а ла, уға ыу эйәрҙе, аҡҡан ыуҙарҙың кире ҡайтырына самими ышаныу менән өмөтләнеп йәшәне.

Тыуған ауылындан бер кит әң, торған ауылдар күбәйә икән...

Савин биҫтә енә яҙ үҙенсә килә.

Ҡала хакимиәте күҙенән ҡаса-боҫа, бер төн эсендә хәрәмләшеп алынған таҡта йорттарҙың ашыҡ-бошоҡ өйөлгән нигеҙҙәре ыу эсендә ҡала. Биҫтә ватыҡ караптар килеп батҡан диңгеҙ ҡултығын хәтерләтә...

Утыҙ йылдар сама ы элек Ҡазан- ыуҙың Кремлгә ҡаршы яры буйлап бейек дамба уҙғандар ине. Савин биҫтә ен ел-дауыллы тулҡындарҙан аҡланы ул аҡлаауын. Ләкин ыу хәүефе тулҡын булып ҡына килмәй. Ҡазан- ыу Иҙел менән ҡушылған ерҙә ҙур көскә эйә... Дамба аша сыға алмағас, тымыҡ тулҡындар ҡала халҡы ҡыҙына торған ҡомлоҡҡа еңеп, ер аҫтынан биҫтә урамдарына арҡып сыға тора. Яҙғы ташҡындарҙа Иҙелдә ыу күтәрел ә, шуның өҫтөнә ҡар башына етерҙәй ләйсән ямғырҙар оҙаҡҡа кит ә, Савин халҡының күҙендә нур үнә. Бар тереклек ағынып көтөп алған яҙ Фазыл бөгөн йәшәп маташҡан биҫтә өсөн йылдың иң мәрхәмәт еҙ миҙгеленә әүерелә. Тубыҡтан ыу эсендә ҡалған өйҙөң хужа ына килеп: "Ни хәл йәшәп ята ығыҙ?"— тип ора аң, бөттөң — йән дошманнына әүерелә ең. Тауыҡтарының ун көндән бирле ҡунасанан төшә алмауын, баҙ тулы картуфының ыу эсендә ҡалыуын, мейес аҫтының ебеп емерелеүен ин былай ҙа белергә тейеш!

Бында яҙ көнө күн итек кейеп йоҡлай торған халыҡ йәшәй.

Фазыл трамвайға килеп кер ә, йәнәшәләге пассажирҙар танау сира башлай, көйөк еҫе иҙеп түгел инде, еүеш ер еҫен иҙеп! Тәҙрәнән үрелеп кенә екән ҡамыш өҙөрҙәй өйҙәрҙә йәшәүселәрҙең кейеменә ер еҫе еңә. Бейек йорттарҙа йәшәүсе ҡоро кейемле ҡылтымбый түтәйҙәр Савин халҡын еҫенән таный.

Власть өйөүсе түрәләребеҙ, сәйәси көрәштәрҙә беренселекте яулар өсөн, бер файҙалы эш башлап ебәрҙеләр: емерек йорттарҙа йәшәүселәрҙе унар ҡатлы тимер-бетон ояларға күсерергә керештеләр...

"Маҡтап арығас, яманла аң да була". Бер, ике, өс, дүрт, биш, алты... Әгәр иллегә ҡәҙәр анап кит әк, уҡыусының сабырлығы етмәҫ, ис шик еҙ, бүлдерер. Ә анай ы ине әр анға айырым-айырым туҡталып, анай ы ине. ыу бытраулаусы Фазылға бөгөн — илле йәш.

Уны, штат ҡыҫҡарыу арҡа ында, аулығын да сәбәп итеп, ваҡытынан алда пенсияға оҙаттылар. Утыҙ йыл эсендә ауыл халҡына өс йөҙҙән артыҡ артезиан ҡойо о ҡаҙған оҫтаға маҡтау үҙҙәре әйтелеп, икегә өс метрлы келәм тапшырылды. Заказсыларҙың бере е, ҡулаҡса ы булмағас, бытрауланған скважиналар өсөн келәм

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 81



партия ы менән түләгән. Хәҙер был монгол келәмдәрен, айырым осраҡ өсөн тип, “Аҡ шишмә” ыу быраулау йәмғиәтенең ҡыҙыл мөйөшөндә аҡлайҙар. Фазылға иртәрәк эләкте был келәм...

ик әненсе йылдарҙа “Аҡ шишмә”лә ун биш бригаданың әр ҡай ы ы көнө-төнө колхоз-совхоздар өсөн ыу скважиналары быраулай ине. Ҡаланы ашатҡан әм уның йөҙәрләгән ойошма ын эшле иткән ауылдар инде бөлгөнлөккә төшөп, заказсылар исемлегенән тамам юҡка сыҡты. Бензин-солярканы үтескә алып яҙ-ғы сәсеүгә сыға торған, тапшырған икмәге, ауған өтө өсөн услап вексель тотоп ҡалған ауыл әр бере е комбайн ба а ына төшкән артезиан ҡойо о быраулата ала-мы уң? Бер миллион ум аҡса ын янға ҡалдырыу өсөн ферма малдарына ыуҙы инештән мискәләп ташырға, янғын сыға ҡал а: “Эх, ыу бул а”,— тип бишәр йорт-тоң рәттән көл булғанын ҡарап торорға, мунса кергәндә йыуына торған ыуын сүмесләп анарға тура килә ауыл халҡына. Шуға ла “Аҡ шишмә”нең эше кәмей, бригадалар аны алтыға ғына ҡалды. Етенсе е — Фазыл бригада ы — ул да бына та-ратылды. Әле кисә генә 120 килолы быраулау торбаларын елтерәтеп өйрәп йөрөткән оҫтаның бөгөн иҫке арба кеүек ғәмәлдән сыҡҡан көнө.

Урыны йылыла, аяғы ыуҙа Фазылдың пенсия келәме, социалистик ярыштың еңеүсе енә мәңгегә бирелгән күсмә Ҡыҙыл байраҡ кеүек, мөйөштә тора — тө-рөлгән килеш... Ике таҡта ара ына шлак ҡатыш бысҡы вағы тултырып ҡына ҡо-ролған был йортта келәм элерҙәй төҙөк стена юҡ. Дүртәр метрлы өйҙөң ике яғын-да тәҙрә, бере енә ишек уйылған, бер яҡҡа мейес терәлгән... Хәйер, өйө лә Фазыл-дыҡы түгел әле. Хужалары дүрт кешелек ғаилә е менән свайлы өйгә күскәндәр, ә кейәүгә сығып ҡайтҡан ҡыҙҙары ошонда теркәлгән, шуға күрә “сыпушка”ға буль-дозерҙар яҡын килмәй тора.

уңғы биш йылын ошо өйҙә үткәргәс, күрше-күлән күҙе лә эйәләште Фазылға; квартирант тотоп аҡса эшләп яталар, тип йорт хужа ы өҫтөнән ялыу яҙыуҙан туҡ-танылар. Бәлки, ныҡлабыраҡ тотоноп, таныш-белештәр ара ында орашып йөрө әң, ҡороораҡ биҫтәләрҙән тынысыраҡ мөйөш тә табып булыр ине инде...

ыу ни өсөн аға? Ул үҙенә эш эҙләй...

Йүгерек ыуға ҡара аң, кәйеф күтәрелә. Тымыҡ ыу ағышҡа күмә. Ағым ыу үҙен кеше туҡтатҡанды өймәй.

Фазылда — ыу холҡо. Ул юлдан төш ә, йәшәүҙән туҡтай. Нервы ептәре, ҡан тамыры кеүек селтәрләнеп ауылдарҙы-ҡалаларҙы үреп ҡуйған, тәгәрмәсле вагон менән утыҙ йыл буйы гиҙгән туҙанлы юлдар аҫтында беҙгә күренмәгән тәрәнлектә ята ул ыу! Ер аҫтынан сыҡҡан ыу ғына саф. Өҫкә сыҡмай ҡалған шишмәләр тын-ғы бирмәй Фазылға. Уларҙың тауышын ишетә, сөңгөлдәр, йырғанаҡтарға ҡарап ер аҫтындағы ыу юлдарын тоя ул. Ер аҫтында ла ыуҙар шаулап аға...

Йылғаны кинәт туҡтат аң — ярҙарҙы ярғылай. Сабыш атын кинәт туҡтат аң — йөрәге ярыла. Фазыл да бөгөн йөк тейәлгән арба ынан туғарылып, болонға ҡы-уылған ат кеүегерәк... Суртан менән ҡыуышҡанда, ыуҙан атылып сығып, Шәүәли ҡомлоғона килеп төшкән сабаҡ кеүегерәк, ти әң, тағы ла дөрөҫөрәк. Фазылға ыу кәрәк. Уның ҡолаҡ төбөндә үҙе тапҡан шишмәләр шаулап торорға тейеш...

ыу Фазылға йән индергән...

Ҡышҡы оҙон кистәрҙә әсә е Динә үткән ғүмерен улына шул тиклем тәфсилләп өйләй торғайны, хатта Фазыл был фани донъяны инде үҙе тыуғансы уҡ күреп белгән кеүек итеп тоя ине...

Селлә. Ҡояш Ергә сама ыҙ артыҡ яҡынайҙы. Бөтә тәбиғәттән көйөк еҫе килә.

Арыш аламы киҫелмәй, шартлап ына ғына. Хәйер, урағы ла бигерәк тиҙ

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 82



үтмәҫләнә, гелән үткерләп торорға ирҙәрҙең ваҡыты юҡ. Ирҙәре лә, ташҡа үлсәйем, — ап ыҙ, ыныҡ, теш еҙ ураҡ ымаҡ — уғыштан ярты-йорто ҡайтып, биш йыл эсендә тормош-көнкүреште үҙ иңенә алған ҡатындар янында өйрәнсек малайҙар ише генә. Мырый Мөхәммәтйән бабай, ҡул арба ына алып алып килгән андалды баҫыу урта ына ҡуйып, иртәнән кискә тиклем ураҡ тешәй. Тимерсе түгел ул, уғышҡа китеп эҙ еҙ юғалған тимерсе Шәйехтең ҡул аҫтында күрек баҫып ҡартайған кеше генә.

Көлтәләрҙе хатта ике паровой ҙа уҡтырып өлгөрмәне. уғыш йылдарында, урылған игенде сүмәләлә ике-өс көн тоҡтас, кәбәндәргә өйөп ҡуйыла ине. Иген уңған йылды, ямғырҙар ашыҡтыр а, ул кәбәндәрҙән эҫкерт алына. Эҫкерттәге ашлыҡ боҙолмай — күгәрмәй, үрмәй. Ҡыр өҫтөнә беренсе туң ятыуға, Шәле халҡы күмәкләшеп сыға ла эҫкерт төбөндә ырҙын табағы аса. Кеше айын берәр шыбағас менән туҡмай торғас, эҫкерт тиҙ ишелә — иген көшөлө күтәрелә...

Быйыл и ә көндәрҙең ҡоро тороуы игенде эҫкерткә өйөргә ирек бирмәне, кәбәндә саҡта уҡ ҡойола ине ул. Шуға күрә эш тотош ялғанды: урта йәштәгеләр, буй еткәндәр, үҫмер малайҙар ураҡ урҙы; бөлиғ булмағандар, сырхау ҡатындар сүмәләгә ултыртты; әбей-бабайҙар көлтә бауы ишеп торҙо; бала-саға көлтә ташыны, ҡойолған башаҡтарҙы сүпләне; иҫән ҡайтҡан ирҙәр, ғәййәр ҡатындарға ҡушылып, кисәге көлтәләрҙе уғып иген елгәрҙе. Бары тик йәш арыш менән шәкәр сәйнәп, имеҙлек ҡаптырылған сабыйҙарҙың ҡабыҡ бишектәре генә сүмәлә күләгә ендә...

Бригадир Мәрйәмниса: “Танауыңа еткән ҡор ағың менән ураҡ урыу ҡыйындыр, сүмәләгә өйөп тор аң да бик еткән!” — тип күпме генә өгөтлә ә лә, Динә ҡулындағы урағын бирмәне. Кеше рәтендә көнөнә унышар сутый иген урҙы. Күберәк тә ура ала... Тик, гона бул а ла әйтәйек, ураҙа хәлде ала. Ураҡ өҫтөнә тура килеүе... Ашамайса түҙә ең түҙеүен, сарсауға түҙер хәл юҡ! Ҡояштың ҡыҙыуында, иртәнән кискә тиклем бер йотом ыу ҡапмайынса ураҡ урыр өсөн Хоҙай Тәғәләне нисек яратырға кәрәк булғандыр?! Ураҙанды боҙ аң, Алланан бигерәк — Ғабдулла мулла йәбере. Дөрөҫ, мулла үҙе баҫыуҙа юҡ. Ул ауылда. Ураҡсылар иҫәнлегенә бағышлап көнө буйы изге теләктә ултыра, тиҙәр... Уның ҡарауы, ике мәхдүме*, көлтә ташыған булып, аяҡ аҫтында, буталып йөрөй.

Йөҙ аҙымдар ситтә, яр аҫтында, “Ҡояшҡа ҡаршы шишмә” аға. ыуының сылтырап ағышы турғай тауыштарын еңеп, ыу аған өмөттө ым ындыра, үҙенә тарта. Шишмә тәңгәленә еткәндә ураҡтар ауырая, ярға табан ҡайырылып, муйындар арый...

Әҙәм был донъяға түҙер өсөн тыуған... Динә лә түҙер ине, үҙе түгел —ҡарынындағы сабыйы, тибенә-тибенә, ыу орай. Туҡтай, бер аҙ көтөп тора ла тағы тибенә. Тамағы кипкәнгә илауы микән үҙенсә?! Ә бер мәл ул бөтөнләй туҡтаны, уның менән бергә Динәнең дә йөрәк тибеше туҡталған кеүек булды. Ураҡ ыҙ ҡулы менән эсен ыйпап күпме генә өмөтлән ә лә, бала бүтән ҡымшанманы. Сабый йәне менән Динә ғүмере лә үнә башланы... Динә “Ҡояшҡа ҡаршы шишмә” яғына ҡарап турайып баҫты. Ләкин ыу яғына ашығырға йөрьәт итмәне. Икеләнеүен еңер өсөн тағын бер аҙ ғына ваҡыт кәрәк ине, ахры ы, ул урағын Мөхәммәтйән бабай ҡаршы ындағы андалға килтереп ҡуйҙы әм, бер үҙ ҙә әйтмәйенсә, башта әкрен генә, унан ҡыҙыулап, уңынан бөтә ҡеуәтенә йүгереп, шишмә янына килде. Ул унда мәхдүмдәрҙе лә, бүтәндәрҙе лә күрмәне, килә-килешләй үк йән алырҙай мәлде юғалтмайынса, ҡуш услап шишмә йөҙөнә үрелде. Бер мәлгә шишмәнең

---

* *дин ә еленең улы.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 83



сылтырауы бүленде, айрар турғайҙарҙың йыры өҙөлдө. Шишмәнең бүре өңөләй ҡыуышланып торған ауыҙынан еләҫ дым бөркөлдө, алҡын ағым тамаҡ төбөнән үтеп, ҡарынға енде. Динә ыу йота-йота иланы, илай-илай таҡмаҡланы: “Хоҙайым, йән индер, йәнен алма сабыйымдың, Хоҙайым! Йән бир, йән! Баламды алма!..” ыу алҡынынан әсә ҡарыны иҫкәнеп ҡуйҙы, әм был иҫкәнеү йөрәк тибешенә ҡушылды.

“Ҡояшҡа ҡаршы шишмә”не башҡа ҡатындар ҙа ырып алды. Динәнең ыуға сыланған битендә тәгәрәшкән шатлыҡлы күҙ йәштәрен күреп, улар ҙа шишмә йөҙөнә үрелде.

Мәхдүмдәр ауылға йүгерҙе.

“Атай, ҡатындар ауыҙ асты. Бары ы ла ыу эсә!”

Ғабдулла мулла утыҙ өйрәк мамығынан тултырылған яҫтығында йоҡом орап ята ине. Был хәүефле хәбәрҙән уң урынынан ауып ҡына төштө. Башҡа ваҡытта, калуштар ҡайҙа, тип мәхдүмдәрҙең ярҙамын көтөп ултыра торған мулла ике аҫтындағы калуштарҙы ҡулындағы таяғы менән өйрәп сығарҙы, салма ын урай-урай ишеккә ташланды. Ике яҡҡа асылмалы имән ишек, гүйә, урталай шартлап ярылды...

Ҡатындарҙың ыу эсеү шатлығы Ғабдулла мулланың ҡарғышынан көслөрәк ине. Хәл алып көс кергән, ҡандары шыйығайған, ыу ауҙы көрлөккә алыштырған төркөм бәддоғаны ишетмәне.

Шул кисте үк баҫыуҙа Динәнең тулғағы тотто. уғышҡа саҡлы Сәләхиҙән ике бала тапҡан ҡатын беренсе тапҡыр тулғаҡ кисергәндәй ҡурҡынып ҡалды.

— Хоҙайым, мулла ҡарғышы тоттомо әллә?

— Ҡарғышы түгел, ваҡыты еткән,— тип йыуаттылар уны.

— Бәхет еҙ бала бирмә ен.

— Ни өйләй ең, Динә! Был баланың тыумаҫ борон ата ы бар. Ә беҙҙекеләр тыуып-үҫкән килеш... атай ыҙҙар!

Йәтимдәрҙең бигерәк күбәйгән сағы шул. Атайҙар етмәй, ике-өс йортҡа бер атай тура килә. Улары ла ярты-йорто. Йома намаҙынан уң мулла абзыйҙың нәсихәттәрен тормошҡа ашырып, “Ҡояшҡа ҡаршы шишмә” буйында гона ҡылған ҡатындарҙы өйгә ҡайтҡас тотоп туҡмарҙай ирҙәре лә юҡ...

Динәне, шәфәҡ нурынан йәшереп, кәбән күләгә енә алдылар, уны өйөнә алып ҡайтҡансы йә и ә ауылдан кендек әбейен ҡырға алып килгәнсе, күп ваҡыт үтер ҙә тыуҙырыуы ҡатмарлашыр тип, кәбән төбөндә тәүәккәлләп, паровойҙан ҡайнар ыу килтерҙеләр. Паровой ыуын шишмә ыуы ҡушып таманлағас, Духтыр ҡушаматлы бригадир Мәрйәмниса кендек әбейе мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөнә алды.

Динәнең тулғаҡта көсәнергә әллә ни хәле ҡалма а ла, баланы еңел тапты. Мәрйәмниса кендекте ураҡ менән киҫеп, ебәк епле төйөндө баланың эсенә ыйпаштырғас:

— Малай!— тип бер генә үҙ әйтте.

Динәнең ҡыҙы кәбән артында мыш-мыш илап ултыр а ла, оло улының, ауылға йүгереп, ата ын алып килергә башы еткән.

Сәләхи, ҡул арба ына ултыртып, өсөнсө бала менән Динәне ҡапҡанан алып кергәндә, өй эсендә майшәм яндырырлыҡ ҡараңғы ине инде.

Динә бик тиҙ аяҡҡа баҫты. Ураҡ бөткәнсе, ҡул ара ына кереп, сүмәлә өйөшөрлөк хәл йыйҙы.

Ураҡ бөткәс, исем ҡуштырып, бәпес сәйе үткәреп алайым тип, Ғабдулла мулланы ашҡа алмаға ебәргәйнеләр, мулла тигәнең, яҫтығынан да төшмәй, икенсе яғына боролоп ятҡан. “Гона лы ыу менән йән ингән иблис тоҡомона әҙәм исеме ҡушып сапаныма тап төшөрөр хәлем юҡ”,— тип әйткән, ти.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 84



Бәләкәсен киндер биләүгә ураны ла ауыл Советына китте Динә. Уға Сәләхи эйәрмәне, ниңәлер йәрәхәттәрем ыҙлаштырып тора, тип буҫағала ултырып ҡалды. Понамарь Разыя ын секретарь итеп ҡуйғандар, йәш кенә бул а ла – тырыш, сибәр бул а ла – аҡыллы икән үҙе... Динәне көтөп алған ҡунағы кеүек хөрмәтләп түргә ултыртты, биләүҙе үтеп, малайҙы өйҙө, күҙ теймә ен тип, уҡа ына төкөргәндәй итте. Шунан уң, кем итеп беләйек быны, Динә еңгәй, тип, әсә кешегә өндәште.

— Сәләхи улы Фазылйән булыр. Төп кенәгәлә Шәмсетдинов тип теркәлгәнбеҙҙер.

— Маладис, Динә еңгә, илгә ирҙәр бик кәрәк!

Беренсе айҙарында Фазылйән, Фазылйән тип өҙгөләнә әләр ҙә, үҫеп, урамдарҙа уйнап йөрөй башлағас, Фазылйәндең "йән"е төшөп ҡалды. Инде лә бөтөнләй ҙур үҫеп, метрикаларын ҡараштырғанда Фазыл үҙенә үҙе шаҡ ҡатып ултыра ине: "Ҡара ана! Фазылйән икәнмен дә мин!.."

***

Кисә яраған... бөгөн ярамай. Мәскәү көй өҙләнгән айын ҡалалар, ауылдар, колхоз-совхоздар, ойошмалар, гәзит-журналдар ҙа исем алыштыра. Фазыл эшләй торған ойошма утыҙ йыл эсендә дүрт-биш тапҡыр исем үҙгәртте. Ләкин ойошма ҡапҡа ындағы яҙыулы таҡта йыш алышын а ла, уның начальнигы булып аман да шул Наил Ҡадирович ҡалды. Улар эшкә Фазыл менән бер йылды килделәр. Фазыл бураулау мастеры булып үҙенә айырым бригада йыйғанда, Наил баш инженер вазифа ына керешкәйне. Ҡалған йылдарҙа Фазыл – гел мастер, Наил гел уның начальнигы булды. Шуны ы хаҡ: Фазылдың уға бер ҡасан да "Наил Ҡадирович" тип ауыҙ тултырып өндәшә алғаны юҡ. Пенсияға сыҡҡан көндә генә үҙгәрә алмаҫ инде...

— Мин инең приказың менән риза түгел,— тип әйтеп өлгөрҙө Фазыл начальник менән ҡул бирешеп күрешкән арала.

Наил Ҡадировичтың бүлмә е ни тиклем генә иркен булма ын — интерьеры ҡыҙыл мөйөшкә ярарҙай ҙур әм иҫке вагон эсен хәтерләтә ине. Начальнигы ла иҫке шул. Иҫке, әммә аман да шул уҡ егерме йәштәрҙәге кеүек. Батырып кейгән бүреге ҡаплай алмаҫлыҡ киң маңлай, асыуланған саҡтарҙа ла йылмайыу бөркөп торған зәңгәр күҙҙәр, аҡал-мыйығы ҡайыҙлап ҡырылған шат сырай... аман да үҙгәреш еҙ Наил.

— иңә хәтлем дә күпме кешене шулай оҙаттыҡ. Пенсияға сығыуҙың беҙҙәге тәртибе бер...

— Илле тулғас артҡа тибеүме?

— Врачтар икенсе группа инвалиды тип ҡарар сығарғас, мин нишләй алам? иңә кит тип әйткән кеше юҡ. Гаражда слесарь булып ҡалыр ың.

— Гаражда?! Көн айын инең күҙ алдында эшләп йөрөргә дуракмы әллә мин? уғышып бөтәм бит мин бында еҙҙең менән...

— Өйрәндегеҙ... Конторҙан йыраҡта, начальство күҙенән ситтә үҙегеҙ ни теләә әгеҙ, шуны эшләп ҡотороп... Башҡалар ғүмер буйы етәкселәрҙең күҙ алдында эшләп йөрөй.

— инең аяҡ аҫтында ем сүпләп йөрөр бул ам, утыҙ йыл түҙер инемме ни? Кешенең бөтә бәхете — үҙ иркендә эшләү. Баш өҫтөндә начальство тормағанға өйөнөп, игеҙ сәғәт урынына тәүлекләп эшләй инек.

— әйбәт эшләнең, үҙ юҡ. Ну "Пенсионерҙарҙы буровойға ебәрмәҫкә!" тигән закон бар! Еңелерәк эшкә — рәхим ит!

— Кисә яраған — бөгөн ярамай. Бер көн эсендә мин нишләгән? Илле генә йәш

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 85



бит әле миңә. Кешеләр, ана, алтмыштан китә.

— Иптәштәренден алтмыш йыл йәшәрен ин инде иллелә үк йәшәп бөтөргән - ең, тимәк. Түшәккә менеп ят та бәхетле ҡартлығыңды ҡаршыла!

— Ғазраилды көтөп ят, ти еңме? Лутсы эштә үл ен инде ул ир кеше.

— Тел өйәк еҙ, өйләй ҙә ҡаса! Эштә үлгән кешенең йөгө беҙгә ҡала. Судтан судҡа йөрөп, бала-сағалары, ҡатындары алдында яуап тотоуҙары еңел ти еңме?

— Артымдан илап ҡалыусы кешем юҡ.

— Бик үлә ең кил ә, ирҙәрсә үл инде, йәме! Аҡкүҙ ауылында ҡойоға икергән кеүек.

— икермәнем ҡойоға, скважина ине ул.

— Мәгәрискә быраулаңған ыу скважина ымы?

— уҡыр бер тин дә алманым мин. Ғүмер буйы ҡыҙын яратып йөрөгән кешенән нисек итеп аҡса алмаҡ кәрәк.

— Самат ағай ҡыҙынмы?

— Ҡайҙан белә ең ин быларҙы?

— Начальствоның күҙ алдында эшләмәйбеҙ, тигәс тә... Беҙ еҙҙең ундағы ҡыланыштарҙы йыраҡтан күреп торабыҙ. Йә, өйләп бөтөр инде. Уҙған эшкә — салауат! Документтарың таҙа. Йәшлектәге гона тарыңды өйләп, эсеңде бушат, пенсионер иптәш!

— Ниткән гона бул ын! Самат ағайға “өй түреңә ҡойо быраулап бирәм” тип үҙ биргәйнем. Ул минең вәғәҙәне утыҙ йыл буйы көттө.

— Ҡыҙын утыҙ йыл буйы өйҙөңмө?

— Ул ҡыҙҙы күргән кеше утыҙ йылды күп енмәҫ.

— Яттарға ҡалған ҡыҙҙарыбыҙ гел ағындырып ғазаплай инде беҙҙе.

— Улай а, өйләмәйем.

— Йә, ярар инде, бигерәк еркәң ыу күтәрмәй. өйләп бөтөр, әйҙә.

— Иң ҙур долото менән бырауланым ҡойоно. Ун метр төшкәс, уйырташ башланды. Ну, шәп ыу сыҡты. Асбест торба төшөрөп, эште теүәлләйбеҙ тигәндә, Самат ағай ҡойо төбөнә үрелеп ҡарарға итте, ну... ыуы күпме, йәнә е... Ҡарауын ҡараны, тел сартлатып ыу төбөндәге шәүлә е менән дә сәләмләшеп өлгөрҙө үҙе.

— әм ин уны, ҡыҙын бирмәгән өсөн, шул скважинаға төртөп төшөрмәксе булдың.

— Диуана!

— Йә, йә, ин минең начальник икәнлегемде онотма!

— Бәй, еҙҙең арала ла диуаналар күп инде.

— Быны ы — икенсе тема. өйләп бөтөр, нишләттең Самат ағайҙы?

— Нишләтте, ти! Үрелеп, ыуға ҡарап оҡланып торғанда ... кеҫә ендәге бумажнигы ҡойоға осто. Ҡарауыл ҡысҡырҙы ағай: аҡсаларым чурт с ним, мотоцикл права ы әрәм була, ти.

— Шунан ин скважинаға икерҙеңме?

— икермәнем, икер әң, бумажникты алып булмай. Ҡойоноң диаметры миңә таман ғына. Аяҡ менән төшөп ҡараным, ыуҙан үрелеп әйбер алырлыҡ түгел, ни теҙҙәр бөгөлмәй — стена тар, ни ҡул етмәй. Шунан бауҙы аяҡҡа бәйләнек тә скважинаға баш менән төштөм. Бумажникты алдым алыуын! “Вира!” тип ҡысҡырам. Ҡойо стена ының еүеш алҡыны тәнгә үтмә ен тип, телогрейка кейгән инем, ике мужик мине күтәрә башлағас, ырмам ыпырылып, мине ҡойоға ҡыҫты.

— Ә инең — аяҡ өҫтә, баш — түбән...

— Ну!.. Самат ағай ярҙамға тағы ике кешене саҡырҙы, дүртәүләп тарталар — аяҡты урып алалар инде, мәйтәм. Ауырта, тип ҡысҡырғас, бер аҙ аҫка төшөрәләр — ыуға тейәм. Башҡа ҡан ауа башлағас, оҙаҡ түҙеп булмай икән. Бөтә күсөмдө

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 86



йыйҙым да ҡысҡырам аҫтан:”Ҡыҙғанмағыҙ, тартығыҙ, былай барыбер үләм...” Аңыма килгәндә, бесән түшәлгән арбала ятам, дүрт яғымдан дүрт кеше аптырап ҡарап тора.

—Телогрейкаң иҫәнме уң?— Наил Ҡадирович ни әрләргә, ни көлөргә белмәне.

— Юҡ, ул ҡойоға төшөп киткән, уны уңынан пожарный багоры менән сығарҙылар. Кеҫә ендәге ҡом сәғәте шунда ҡалды, ҡойо төбөндә... Скважинаның ҡеүәтен шуның менән үлсәй инек тә ә.

— Ә Самат ағай ни ти?

— Улмы?! Иҫән- ау икәнемде күргәс, ауыҙ ситен ҡыйшайтып йылмайған булды. Әл дә, ярай, ин диуанаға Әлфинәмде бирмәгәнмен... Матай права ының яңыын алып була ине бит, ти.

—Ул ҡойонан ыу эсмәҫтәр инде.

— Ниңә эсмә ен. Шәп сыҡты ул. ыуы ла тәмле. Әлфинә ҡунаҡҡа ҡайтып, самауыр ҡуйған айын мине ағынып илайҙыр әле.

— Илар... бәлки! Берәр ай ял итеп кил әле ин, Фазыл. Пенсия алғас, беренсе айындыҡын йыуырбыҙ. Ул арала гараждан еңелерәк эш эҙләй торорбоҙ.

— Кәрәкмәй миңә гараж. Шәхси машина юҡ.

— Бөтә слесарҙарыбыҙ ҙа инең кеүек пенсионерҙар.

— Хәйер...— тип үрелә төштө Фазыл,— ҡыйын булма а, уңғы бер үтенесемде генә үтә.

— Әйҙә, бәхилләшкән кеше ымаҡ ни. Әйт үтенесеңде!

— Бригаданы тарата ың, агрегатты металлоломға тапшырыр ың... Вагонға теймәй тор. Кешегә бирмә! Бәлки, үҙем атып алырмын... хосусилаштырыу ти егеҙме әле еҙ уны?! еҙ “Волга”ларҙы сүпләгән кеүек, арзанға ғына... Ситтә эшләгәс, бырау лаусыларҙы ла, бер ни күрмәй, ишетмәйҙәр, тип уйлама, беҙ ҙә йыраҡтан күреп торабыҙ.

— Иҫке “Волга” өсөн ауыҙ сайҡап торма әле!

— Иҫкергәндер инде. Биш йылдан бирле...

— Руль артына унитаз ҡуйып, гаражда туалет итергә генә ярай ул хәҙер.

— Ниңә гаражға?! Ниңә Залесныйҙағы коттеджға түгел? Ә мин... ғүмер буйы эшләгән ойошманан иҫкереп бөткән йәшел вагонымды ғына орайым. Нигеҙем дә, өйөм дә, ауылым да, илем дә шул йәшел вагон минең. Тағы алып китәм мин уны. Үҙең беләең бит, кеше ара ында эшләп тә, йәшәп тә күнекмәгән... Вагонымды бир әгеҙ, бөгөн — Савинда, иртәгә — Шәлелә... Унан ҡыу алар, КамАЗ юлы буйлап китермен. Элегерәк ҡаҙылған шишмәләремдең бере е янында туҡтап яңынан йәшәп ҡалырға кәрәк.

— Аҡтанышҡа китәм, тип өйләш.

— Эйе, Аҡҡүҙ ауылына барып етәм дә вагондың тәгәрмәстәрен үтеп ташлайым. Шунда йәшәп ҡалам.

— Әлфинәне көтөпмө?

— Ул баланы көтөргә була.

— Бала, имеш. иңә илле булғас, уға ла ҡырҡ ете йәш тигән үҙ бит.

— Үлгәнсе, ис юғында бер-ике генә йыл парлашып йәшәргә ине үҙе менән...

— инең холҡоң менән вагонда йәшә әң — күс тә кит, күс тә кит инде. Урман — күршең, ел — туғаның... Әҙәмсә ҡала фатирында йәшәй алмай ың ин.

— орамайым да.

— орарлығың юҡ. Беҙ иңә Киндерле биҫтә енең иң гүзәл еренән ике бүлмәле фатир биргәйнек.

— Егерме йыл элек. Химия заводының сүплегенән.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 87



— Уның ҡарауы, эшкә килгән йылды уҡ бирҙек. Башҡалар кеүек сиратта торманың. Тағы бир әк — быны ын да ҡалдырып китә ең. Ҡатын айын фатир өләшеп йөрөгәс, ҡартлыҡта вагонда йәшәргә ҡала, шәт.

— Мин йәшлектә яңылышҡанмын, ә ин, бәлки, ҡартлыҡта... Яҙмыштың ниндәй емәйткес икәнен башыңа төшкәс кенә беләең уны.

— Ты че, былайға киткәс, мин ине гаражда ла ҡалдырмайым, астан үлмәҫлек пенсиянды услап тот та вагонында ултыр — дүрт яғың ҡибла!..

— Әйттем бит: күҙ алдында ҡал ам, әрләшеп, уғышып бөтәбеҙ, тип. Гел ҡырҙа эшләп ҡырағайландым мин. Кеше өймәйем, бигерәк тә начальствоны. Власты ҡулда тоторға ярата ығыҙ, ә халыҡ вагонға тейәлгән...

Наил, өҫтәлдәге япон телефонының селекторы аша бөтә бүлмәгә ишетерлек итеп, кадрҙар бүлеге мөдире Зөмәйрәне саҡырҙы.

Зөмәйрә, үҙен саҡырғандарын көтөп торғандай, кинәт килеп керҙе.

Наил дуҫтарса өйләшеүҙән рәсми тонға күсер өсөн тәҙрәгә ҡапланып бер аҙ үҙ еҙ ҡалды. Ул арала Зөмәйрә Фазылға текәлеп, эйәк ҡағып ҡуйҙы, ни бүлешә алманығыҙ, тип ораны, йәғни. Фазыл ҡулын “х” хәрефенә оҡшатып ҡаушырып, яуап бирҙе. “Хана!” Тимәк, бары ы ла селпәрәмә килде. Еңел өйәкле Зөмәйрә кинәт ауырайып ҡалды... Мәңгелек Зөмәйрә!.. Етен сәсен түбә енә әрҙәнәләп өйөп ҡуйған да уны үрмәкес ебеләй күҙгә күренмәҫ йәтмә менән төргән. Ул инде утыҙ йыл буйы ошолай үҙгәреш еҙ. Сәс толомдарын туҙҙырып елкә енә төшөр әң, “Аҡ шишмә” эшселәре, ҡыла ы ғәмәлдәрен онотоп, юҡ-бар хәйлә менән кадрҙар бүлегенә кереп тулыр ине. Уның оҙон муйынлы шәмәхә төҫөндәге кофта ы ла гел шул уҡ, әйтер ең дә, бер үк төҫтәге әлеге кофталарҙы утыҙ йылға етерлек итеп алған да алмаш-тилмәш кейә. Зөмәйрә ниңәлер үҙгәрергә теләмәй. Үҙгәреүҙе ҡартлыҡ тип белеп ҡурҡамы — аңламаҫ ың...

— Зөмәйрә ханым,— тине Наил, өҫтәл артына ултырып, ҡырыҫ етәксе рәүешенә кергәс,— Фазылдың документтары тәртиптәме? Китә ул... бөтөнләй! Барығыҙ, ҡул ҡуя ы ҡағыҙҙары бул а, әҙерләгеҙ — әлегә мин бында. Бригаданың вагонын орай. Списать итеп, бушлай ғына тоттор аҡ, ГАИ ул вагонды юлда йөрөтөргә рөхсәт бирмәҫ, ҡалдыҡ хаҡын ҡуйып, ҡағыҙ тултырығыҙ. Уны ын минең исемдән бухгалтерға үҙе кереп аңлат ын.

— Эштән киткәс, тәгәрмәсле вагон менән нимә эшләмәксе ең ин?— Зөмәйрә аптырап орашмаҡсы ине лә, Наил ҡырт киҫте.

— Фатир өсөн ауыл айын тартып йөрөйөм, ти.

Зөмәйрә, Фазылды эйәртеп, үҙ бүлмә енә сыҡҡас, ролен алыштырған артист кеүек, кинәт үҙгәрҙе: йөҙөндәге йылмайыуын юғалтмаҫҡа тырышты, баяғы ханым яңынан еңел өйәкле туташҡа әйләнеп, аҡ пластик сәйнүккә графиндан ыу тултырҙы. Юлбашсы башы төшөрөлгән маҡтау ҡағыҙҙарын аҡ яғы менән әйләндереп, уның өҫтөнә ике кәсә ҡуйылғас ҡына, Фазыл ике кешелек сәй әҙерләнгәнде аңланы.

— Ут эсенән сыҡҡас тамағы бик кипкәндер, тип уйла аң — яңылыша ың, Зөмәйрә. Пенсионер тигәс тә... Аяғым-ҡулым иҫән, ау-таҙа, шөкөр. Бына күрер - ең, мин әле икенсе профессия үҙләштереп, яңынан йәшәй башлайым...

— иңә бүләк ителгән келәмде миңә лә бирҙеләр.

— ин дә пенсияламы?! Бәй, Зөмәйрә...

— Эшләйем әлегә... Әйҙә, “йыуайыҡ” келәмдәребеҙҙе?

— Ресторандамы?

— Өйөмә саҡырам, әйҙә!

— Ярар уң...

Ҡасандыр ыу хужалығы ойошмалары ҡарамағында иҫәпләнеп, күп төрлө кодекстар менән эшселәрҙе ошо йорт хужаларына ғына эшләргә мәжбүр иткән осорҙарҙа алынған урам был. Исеменә ҡәҙәр инең ҡайҙа эшләгәненде ҡысҡырып тора. Паспортыңа "Водострой урамында йәшәй" тип тамға уғыл а, тимәк, ғүмер буйы ин үҙең, үҙеңдән тыуған балаларың да бары тик ошонда ғына йәшәргә тейеш тигән үҙ. Водострой йорттарын башҡаларға атып ебәрә алмай ың, ҡаланың башҡа биҫтәләренә алыштырырға рөхсәт юҡ. Бер урамда — ике ҡатлы игеҙ йорт, игеҙ йортта – йәмғе е 188 ғаилә, әр ғаиләнең кәм тигәндә бер кеше е ыу тирә ендә эшләй. Бына шундайыраҡ йомаҡ эсендә утыҙ йыл элек Фазыл өсөн үҙ ҡыуышы булған тағы бер бүлмә бар. Шул бүлмәлә Фазылдың элекке ҡатыны Йәзилә йәшәй. Зөмәйрә беләме быны — әлбиттә! игеҙ йортло урамда әр кемдең биография ы, яҙмышы, ҡылған ғәмәле, уйланған уйы телдә йөрөй. Әгәр Фазылдың Зөмәйрәлә кискә тиклем ултырып, ни айәт, ҡайтырға тип урамға сыҡҡанын ишек төбөндә төркөм-төркөм апайҙар көтөп тор а әм: "Булдымы? Ул ғүмерҙән бирле яңғыҙ йәшәп, яңынан ҡыҙға әүерелгәндер ул!.. Бында тиклем килеп еткәс, үҙ өйөңә инеп сыҡ аң да ярайҙыр. Малайың өйләнергә йөрөй унда!" — тип телләшеп ҡал алар, ғәжәпләнмәҫ ағайығыҙ. Водострой урамының ҡанундары ҡоро. Бәлки, Фазылдың Зөмәйрәгә эйәреп килеүенә Йәзиләнең бөгөнгө тормошона ҡарата аҫтыртын ҡыҙыҡ ыныу ҙа сәбәп булғандыр... Зөмәйрәнең бер бүлмәле фатиры эстән келәмгә төрөлгән.

— Әйҙә, түргә, ауыҙ тултырып, тауышыңды тыймайынса, үҙ өйөңдәгесә өйләшә ала ың, мин был келәмдәрҙе матурлыҡ өсөн элмәнем — күршеләрҙең әрләшкәнен тыңлап туйғас, келәм тауыш-ғауғаны йота ул...

Фазыл, мәҙәк ишеткәндәй, тыйыла алмайынса көлә башланы. Зөмәйрәнең ғәжәпләнеп текәлеп ҡалыуын күргәс, кенә мәжбүри туҡтап ҡалды.

— Ниңә көлә ең?

— Үҙ өйөңдәгесә, тигәс... Савинда беҙ урамдан йөрөп керәбеҙ ҙә иҙәндә итек кейеп йөрөйбөҙ, юрған аҫтында йөн ойоҡтан ҡалабыҙ.

— Итек тә бар, йөн ойоҡ та бирә алам.

— Әллә ин дә туңа ыңмы?

— Юҡ, кейгәнем юҡ. Әсәйҙеке ул йылы кейемдәр.

Фазыл яҡ-яғына ҡаранып алды ла бышылдауға күсте.

— Әсәйең өйҙәме?

— Юҡ. Биш йыл инде вафатына. Урыны ожмахта бул ын. Хәҙер бына бер кемем дә юҡ... инең хет, Фазыл, күкрәк ҡағып маҡтанырға малайың бар. Мин, йәшлегемдә бер "фашист" ҡулынан ҡотолғанға өйөнөп, ғүмергә яңғыҙ ҡалдым.

Ошо мәлдә, Зөмәйрәнең йылмайыуы үрелгәс, Фазыл әйтә ҡуйҙы:

— Ҡарале, Зөмәйрә, киттек ресторанға! Икебеҙҙең йөҙ йылыбыҙҙы берәмләп анап ултырырбыҙ. үндер шул француз сәйнүген, татар өҫтәлендә ултырма ын кәпәйеп...

Йәш бөртөгөнөң керпегендә эленеп ҡалыуына өйөнөп, Зөмәйрә, танауын тартып ҡуйҙы.

— Мин гараж ҡапҡа ынан сыға торам,— тине Фазыл, үҙен ғәйепле иҙеп. — Миңә эйәргәненде күр әләр, икенсе көндө конторанда ҡыйын булыр.

— инең әле кадрҙар бүлеге начальнигына эйәреп йөрөр көндәрең, эштән китеү бик мәшәҡәтле нәмә ул...

— Репутацияһ боҙолор, тип ҡурҡмай ың инде, улай а.

— Фазыл килеп боҙмаҫ микән репутациямды тип, ошо йәшкә еттем инде...

Өйҙәге кәңәш урамға сыҡҡас үҙгәрҙе, тиҙәрме әле?.. Гараж ҡапҡа ынан сығыу менән, Зөмәйрә туҡтап ҡалды.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 89



— Ә белә еңме, ресторандың иң яҡын тигәне лә бынан ун саҡрымда.

— Беҙҙең Шәлелә илле ете йәшлек ҡәйнә килене менән бер көндө бала тапты. Ә Насип ағай үҙенән ун ете йәшкә оло ҡатынға өйләнеп, ете бала үҫтерҙеләр. Насип ағай күптән мәрхүм инде, ә хәләле иҫән әле, ейәндәр үҫтерә. әнүзәттәй Мөхәммәтйән бабайға етмеш йәшендә кейәүгә сыҡты, ә Хәлисә әбей күрше ауылдан етмеш игеҙ йәшендә айырылып ҡайтты.

— еҙҙең ауыл ҙур бит ул, әллә кемдәре барҙыр. Мин ыңар урамда йәшәйем. Иртәнге етелә махсус автобус эшселәр менән тейәп алып китә, киске алтыла килтереп бушата. Көн айын шулай... Өйгә ҡайтам да бикләнәм. Араҡы орап килгән ирҙәргә ишек асҡаным юҡ. Ял көндәре баҙарға сығып, келәм таҙартып үтә лә китә.

— Контор ҡомаҡтары йәнеңә теймәйме? Яңғыҙ ҡатынға начальство тынғы бирмәй торған.

— Баштараҡ телдәренә алыныусылар күп ине... Шунан тымдылар. Урамда ла, эштә лә шул уҡ кешеләр ара ында булғас, кемдең ауыҙын нисек ябырға кәрәген беләм инде. Йөрөмтәл ирҙәргә йәштәр етерлек бит, бик өгөтләнеп тормайҙар.

Чистай шешә е әкрен буша а ла, ике ҡанатына йәйелгән китап ымаҡ өҫтәлдәге ризыҡ күҙгә күренеп кәмене. Уның айын Зөмәйрә: “Мин ирҙәрҙе ҡыҫтай белмәйем, ялындырмай ғына аша”,— тип иҫкәртеп торҙо. Ул был үҙҙәрҙе айырыуса баҫым я ап, аңлайышлы итеп ҡабатлай ине.

— Яуап биргең килмә ә, өндәшмәй ҡалыр ың, Фазыл, орайым әле: улыңды йыш күрә еңме?

Фазыл дүрт ҡырлы өҫтәлдең бишенсе мөйөшөн эҙләгәндәй борғолана башлағас, Зөмәйрә үҙҙе ялт икенсегә бороп ебәрҙе:

— Телевизор ҡабыҙайыммы?

— Кәрәкмәй, ваҡытты әрәм итмәйек.

— Берәй е янына ашыға ыңмы?

— Ҡайҙа?! Килеп еттем инде.

— Асыуланма берүк.

— Анау орауың йәнде зиңкетте. Күргәнем юҡ улымды. Ташлап киткәндән уң бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ. Күренмә ә генә ярар ине, тип йәшәнем. Уны күр әм, яңынан теге тоҙаҡҡа үҙ иркем менән әйләнеп ҡайтырмын, тип ҡурҡам. Әле иңә эйәреп килгәндә лә ҡаршыма килеп сығырҙар кеүек ине.

— Әйтәм, килгәндә яғаң эсенә сумдың... Мин бит ине, ғәйбәттән ҡаса ың тип уйлап, өйгә йүгертеп кенә алып керҙем... Юҡ инең улың бында. Өйләнде лә ҡалаға күсте. Ҡатыны яғынан туғандары фатир атып алған үҙенә. ыу министрлығының “крепостное право” ынан ҡотолдо ул. Юҡ а, бында тыуған балаларҙың балалары ла ыу хужалығында эшләргә мәжбүр. Ә инең улың Алабуғалағы милиция мәктәбен бөтөрҙө, капитан, ти, ул хәҙер. ГАИ система ына күскән, тип тә өйләнеләр. ин мине шаҡ ҡатып тыңлап тора ың — юрый белмәмешкә алышып, ҡыланып ултырыуыңмы, әллә ысынлап та улың тура ында бер ни ишеткәнең юҡмы?

— Ысынлап та... Айырылышҡандың тәүге йылдарында: “Улың баҡсаға йөрөй”, “Улың уҡырға керҙе — әйбәт уҡый”, “Бөтә килеш-килбәте, ҡыланышы менән уйған да ҡаплаған — ин инде” тип, гел үҙ ташып торҙолар. Әкренләп телдән төштөк. Минең ише айырылыусылар күбәйҙеме, үҙем ҡыҙыҡ ынмағас, килеп әйтеүсе юҡмы — белмәйем.

— ағынмай ыңмы?

— ағынырға ҡурҡам. Күҙ алдымда үҫмәгәс, үҙе лә мине эҙләмәне, буғай.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 90



Бәлки, әсә е миңә ҡаршы тәрбиәләгәндер. Ташлап киткән атайҙы кем ярат ын?!

— Атай кеше балаға үҫкәндә түгел, күбе енсә үҫеп еткәс кәрәк, Фазыл. Проблемалар күбәйгәс: атай, тегене эшлә, атай, быны тап! Теге кәрәк, быны ы юҡ. Атай кеше ул гел снабженец кеүегерәк. Ул барҙа бары ы ла бар. Юҡ икән — бер нимә лә юҡ.

— Зөмәйрә, ин дә атай ыҙ үҫтеңме әллә?

— Кире енсә, атай менән үҫтем. Ул әле лә иҫән. Ауылда, төп нигеҙебеҙҙә яңғыҙы ғына йәшәп ята. Ҡасан ҡайтып кер әм дә, мин үҙ өйөмә ҡайтам. Атай — ул нигеҙ!

— Әсәйҙәр кем?

— Әсәйҙәр — күкрәк өтө, ҡалас йылы ы әм мөхәббәт.

— Зөмәйрә, ниңә уң ин быраса әсәй булырға теләмәнең?

— Атай ыҙ бала үҫтергем килмәгәнгә.

— Мин бына атай ыҙ үҫтем. Атай үлгәндә, ярты йәшем дә тулмаған. Өс бала ҡалдыҡ. Етем бала типтер, үҙ әйтмәне әсәй: туйғансы уйнаным, туйғансы йоҡланым. Минең менән күп уйнаған малайҙарҙы, өйҙәренә ҡайтҡас, атайҙары ҡайыш менән яра ине. Эш ташлап, донъя онотоп уйынға алынған өсөн. Атайлы ғаиләләрҙең хужалығында эше бик күп. Улар икешәр ыйыр тота, унышар арыҡ, а-нап бөтөргө өҙ ҡаҙ-өйрәк, тауыҡ. Шуға күрә бесән ташыу, утын киҫеү, ҡаҙ көтөү, тауыҡҡа атҡолаҡ үләнен йыйып ҡайтыу кеүек эш-көш атайлы өйҙәрҙә яман күбәйеп китә...

— ин дә шул уҡ ауылда йәшәгән ең инде, Фазыл!

— әй, беҙҙең ике арыҡ, бер кәзә, ете тауыҡ та бер бесәй...

— ин, Фазыл, малайыңды ташлап киткәнгә күрә үҙеңде аҡлай торған фәлсәфә уйлап сығарған ың... Атайың иҫән бул а, үҙеңдең дә яҙмышың башҡа юлдан китер ине әле.

— Айырылған йәрҙәр яңы ғаилә ҡора. Үгәй атай менән дә үҫтереп була.

— Үгәй атайҙың нигеҙе лә үгәй унын, Фазыл!

— Мин бында ни өсөн килдем әле, Зөмәйрә! Йәзилә янына әйләнеп ҡайт тип, инән өгөтләтер өсөнмө?

— Эйе шул. Беҙ бит инең менән бөгөн – пенсия кенәгә ен йыуырға тип йыйынған кешеләр.

— Рәхмәт. Яҡты йөҙөң, аҡ күмәсең, нәсихәтең өсөн рәхмәт. Китәйем мин...

— Эй, Фазыл, тол ҡартайған ҡыҙҙарҙы ла уҙҙырып, улай сәпсемә әле, еркәң ыу күтәрмә ә — әйҙә, шарап йотоп ҡуяйыҡ. Күңелеңдә икеләнеү юҡмы, тип ынап ҡына ҡарағайным. Үкенмәй ең икән — быны ы бик шәп!

— Әллә телевизорҙы ҡабыҙа ыңмы?

— Ашыҡма, Фазыл, был ваҡытта унда “Тыныс йоҡо, кескәйҙәр” тигән тапшырыу бара. Йә тағы бәхәсләшербеҙ. Икебеҙ ҙә яр ыу. Икебеҙ ҙә яңғыҙ...

— инең янда ваҡыт тиҙ үтә, Зөмәйрә.

— Ҡалған ғүмеребеҙ етер ине әле... Ә хәтерләй еңме, утыҙ йыл элек?..

— Ҡыҙыҡ. Беҙ йәшәгән ерҙә донъя кинәт ҡартайып ҡалды. Ни генә иҫкә төшөр әң дә, хәҙер йылдарҙы тиҫтәләп анайбыҙ. Утыҙ йыл элек, егерме йыл буйы... Ун йыл күргән юҡ...

— Йылдарыңды, ана, калькулятор менән ана, тик сәғәткә ҡарап ҡына өйләшмә.

— Нисәләр тирә ендә ҡыуып сығарыр ың икән, тип кенә күҙ алам. Юҡ а, минең ваҡыт хәҙер күп. Таң атҡансы айрашып ултыр аҡ та риза...

Ни тип яуап бир ен уң Зөмәйрә?! Илле йәшлек ир-атты төнгә ҡаршы өйөнә алып ҡайтып бикләгән икән — тимәк, бөтә орауҙарға ла Зөмәйрәнең яуабы бер генә: “Риза!” Тел менән әйтеүҙен, артыҡ үҙҙең кәрәге бармы?! Бындай минуттарҙа күп нәмә, үҙ еҙ рәсем кеүек, үҙенән-үҙе аңлашылырға тейештер. Иҫтәлектәр,

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 91



хәтирәләр, үкенеүҙәр, ағынып илам ыраүҙар өсөн әрәм төн бит был. Фазылдың табын артында ултырыуы бөтөнләй ҡомар ыҙ вә маҡсат ыҙ. Уның, намыҫ хөкөмөнә баш эйгән гона эйә е кеүек, тәүбәгә килеп аҙапланыуы Зөмәйрәне рәнйетә генә. Ирҙәр ҡыҙыҡмаҫлыҡ уҡ хәлдә түгел дә ә ул!.. Тимәк, ахырынаса түҙеп, был “осрашыу” уйынын дауам итергә, ынарға икән ынарға, еңергә икән еңергә кәрәк! Был спектаклдә төп ролде Зөмәйрә башҡарырға тейеш. Ваҡиға уның сәхнә ендә бара, иртәгә тамашасылар ҡаршы ында яуапты ул үҙе генә тотасаҡ.

Хужабикә, плитә ендә янып-көйә торған ризығы булма а ла, табын артынан кинәт тороп, кухняға йүгерҙе, йыуыныу бүлмә енә кереп, газ колонка ын яндырҙы. Буш ванна төбөнә шаулап ыу аҡҡаны ишетелде. ыу тауышы әйтергә теләгән фекерен күммә ен типме, ярым асыҡ ишектән көүҙә ен яртылаш күр әтеп, Фазылға өндәште.

— Мин сайынып сығам. Моңайып ултырма, аша-эс, ял ит.

әм Зөмәйрә, Фазыл тотоп алма ын тигәндәй, ишекте ҡапыл ябып, keләне элде.

Фазыл табынды онотоп, йыуыныу бүлмә енә табан боролдо. Ябыҡ ишек аша Зөмәйрәнең әр хәрәкәтен күҙ алдына килтереп ултырҙы: сәсен үтә — шпилькаларын быяла шүрлек өҫтөнә теҙә. Тимәк, хәҙер сисенә башлай. ай, ваҡыттың әкрен үтеүҙәре — сәғәттәрҙә йөрөүенән туҡтата торған минут бит был. Аптырағас, Фазыл бер рюмка ҡаплап ҡуйҙы, тағы, тағы берҙе күтәрҙе... уны апельсин телеме менән йыуып төшөрҙө... ыу ағышы өҙөк-өҙөк шаулай... тимәк, ул ваннаға кергән дә ыу ағымын үҙенә буй ондормаҡ булып ултыра. Тимәк, ул хәҙер шәп-шәрә. Ә, бәлки, ул, Фазыл ятып йоҡла ын тип, йыуынырға махсус кереп, ваҡытты ғына уҙалыр әм йыуынып бөткәс шундуҡ кер йыуа башлар?!

Фазыл, кире сигенмәҫлек тәүәккәллек менән урынынан тороп, ике араны бүлеп торған ишек янына килеп баҫты. Яңылыш ҡына бикләргә онотолманы микән тип, ынар өсөн тотҡанан тартып ҡараны — юҡ, бикле.

— Зөмәйрә!— тине ул, ишектең ут яҡты ы ҡыҫылып ҡалған ярығына ирендәрен терәп. — Арҡаңды ышҡырғамы?

Яуап урынына эстән йыр яңғыраны:

*... ыуҙар аға арыҡтан,*
*Ирҙәр ҡарай ярыҡтан...*

ыу шаулауы айырым, йыр айырым ишетелә — ҡушыла алманылар...

Фазыл ишек тотҡа ын усы менән урап тотто ла йолҡто. Тотҡа урылып сыҡманы, уның ҡарауы, эстәге келә оя ынан икереп сыҡты... Зөмәйрә ишеккә йөҙө менән ултыра ине, Фазылды күреп: “А !” — тип тартынып китте. Күбеккә күмелмәгән күкрәктәрен ике ҡулы менән ҡаплап аҙапланды. Күл өҫтөндәге томбойоҡ кеүек, мәкегә төшкән ыу инә еләй, аҡ күбектән үҫеп сыҡҡан али ә ымаҡ ултыра ине ул. Көмөш торбаның ағымы Зөмәйрәнең йомро ҡулбашына бәрелә лә ысыҡ бөртөктәре булып Фазылға сәсрәй.

— алҡын инә, яп ишекте,— тине Зөмәйрә, ләкин: “Теге яҡтан!”— тип өҫтәмәне.

Теге келә менән эстән бикләнгәс тә, Фазыл өн өҙ ҡалып, уның йыуынғанына оҡланып ултыра ы ине лә, тик битенә ҡуш услап йылы ыу сәсрәүҙән айныны.

— Оят ыҙ!— тигән булды Зөмәйрә, күршеләр ишетмәҫлек итеп кенә.—Утты үндер, исма ам...

Фазыл был үҙҙәрҙе ризалыҡ билдә е тип ҡабул итте... Кеше иң элек пинжәген, унан күлдәген алырға тейештер. Ләкин ул башта салбарын алды, быны аңлар өсөн ваҡыт тар ине. Дөрөҫөн әйткәндә, ванна бүлмә ендә уҡ сисенеүҙең бөтөнләй кәрәге лә булмағандыр — бында карауат-маҙар юҡ, ыу эсендә парлашып уйнарға дельфиндар түгел дә... Барыбер ҙә сисенеүен белде. Салбарын алғанда балағын

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 92



тапап бөтөрҙө, алған кейем шул килеш иҙәндә ҡалды. Ә бына носкийын алам тип бер аяғын күтәргәс, ул кәүҙә енең туралығын юғалтты. Бер аяҡлап икерә торғас ванна ҡырына терәлгәйне — абынлы тимер уны ыу эсенә шыуҙырҙы.

Ғүмер урта ына етеп, ике енең бере енә лә тәтемәгән кейәү мунса ы ине был: ыу йылы ы ҡанды уйната, арҡа ышҡығанда бер ҡулда мунсала бул а, икенсе ҡул эш - еҙлектән үҙ-үҙенә урын таба алмаған кеүек, ханымдың тәненә тотоноп ҡалырҙай урын эҙләй. Уң ҡул, ул ҡулдан көнләшеп, мунсала ы менән эйәреп китә. Күҙҙәр осрашты — ҡараштар гел "оят ыҙ" тип әйттерерлек урындарҙа уйнай... Зөмәйрә Фазылдың ҡулдарын ғына түгел — ҡараштарының да ҡайҙа ҡарап юлланғанын да тойоп, иҫкәнеп ҡуя. Ләкин был иҫкәнеү — үҙен ғүмер буйы ирҙәр ҡулынан, яттар күҙенән йәшергән яланғас тәндең иреүе генә...

Улар, елкәгә елкә терәп, ике енә бер таҫтамал менән өртөндө. Бер мәлгә тын - ыҙ ҡалып баҫып торғандан уң, Зөмәйрә элгестәге бәрхәт халатына үрелмәксе ине — өлгөрмәне, Фазыл уны күтәреп алды. Был юлы эстән асылырға онотолған келә тағы шартлап асылды.

Төн ишектәрҙең биген тикшерҙе.

Төн фатирҙағы уттарҙы үндерҙе.

Төн уларҙың ике ен юрған менән ҡапланы...

Улар, бере ен-бере е ашарҙай булып, үбешергә тотондо. Ҡулдар бот тирә енән ниҙер эҙләне... Бер аҙҙан юрған эсенә миләш сәскә е еҫе таралды...

— Кесе телемә лә йоҡманың ин, Зөмәйрә...

— Ҡал бөтөнләйгә... Туйғансы өйөр өң...

— Бөгөн үк өйә ем килә. Тағы... Тағы!..

— ынап ҡара үҙенде. Тәнәфес я ап алайыҡ та...

— Юрған аҫтындағы тәнәфес кенә етмәҫме?

— Ҡыуалама атты, Фазыл! Барыбер иртүк сығып ҡаса алмай ың: кейемдәрең еүеш, мин уларҙы сайҡап элеп ҡуям, ә ин сәй яңырт.

Быраулау эше менән сағыштыр аң, был минутты авария килтереп сығарыусы сәбәп тип ба аларға мөмкин... Ирҙән бушаған өйгә йортҡа кереп, кешенән ҡалған ҡуйынға ыйынып йәшәү рәүешенде яҙмышҡа буй ондороу — ирҙәр хыялы түгел. Ир кеше әр ҡайҙа беренсе булыу тура ында хыяллана... Бөгөнгө төн бары тик зимагур сәфәренең сираттағы туҡталышы ғына. Фазылды әле алда яңы юлдар көтә. Юлдары ҡыҫҡарып, уңғы туҡталышы яҡынай а ла, ул әле аман мөхәббәт хаҡында хыяллана. Йәшлектәге хаталарҙы төҙәтәм тип, ир урта ы йәшкә еткәс, тағы хата я арғамы? Яңылышлыҡтарҙы я ау рәхәт ул! Яңылышлыҡтарҙы яңылыш менән төҙәтеү — юғалғанды юғалтыу менән ҡайтарыуға бәрәбәр... Ләкин! Ләкин Фазылдың яңылышлығында бөгөнгө төндөң әм Зөмәйрәнең ис ғәйебе юҡ.

Зөмәйрә халат урынына кофта бөркәнеп өлгөргән ине. Селтәрле аҡ кофта боттарының иң йыуан өлөшөн генә ҡапларға еткән. Өҫкө төймәләре ҡаптырылмаған күкрәге, итәк еҙ ҡалған ялан аяҡтары, еңе ыҙғанған беләктәре, туҙып торған сәстәре үҙенә саҡырып тора. Фазыл, яңылышыраҡ әм ашығыбыраҡ уйланған уйҙары өсөн ғәфү үтенгәндәй, ҡатынды ҡосаҡлап алды ла бит алмаларынан, ҡолаҡтарынан, муйынынан үпте. Зөмәйрә шәм кеүек тағы иреп төштө.

Төн тағы ла оҙонайҙы... Ҡыҫҡа туҡталыш оҙон тәнәфескә күсте.

— Хәтерләй еңме, Фазыл, ин эшкә урынлашырға килгәндә беҙҙең контора өс вагондан теҙелгән тәгәрмәсле коридор ине... Хәтерләй еңме?

— Хәтерләмәйсә, ул тиклем әллә...

— Минең "Аҡ шишмә"лә беренсе көнөм инеме... Беренсе эш итеп инең хеҙмәт кенәгәңә ҡул ҡуйҙым... ин минең беренсем, Фазыл!

***

Ҡояшы ла ни тора! Тәки ҡышты ендек тип, тамаҡ ярып төтөн өрөп ятҡан ТЭЦ мөрйәләре лә ҡала пейзажына килешеп тора. Әгәр көн аяҙ булма а, улар кеше күҙенә крематорий мөрйә е булып күренер ине. Ҡояш нуры төтөн өрәктәрен болот итеп биҙәй, ә дымлы ел ул ҡыҫыр болоттарҙы офоҡҡа өйөрөлтә. Ҡыш буйы өйгән көрттәрҙән төрлө тарафтарға йүнәлгән бысраҡ ыу таҫмалары ла гөрләүектәргә оҡшап аға. Кисәге болотло шыҡ ыҙ ҡала бөгөн балҡып торғандай. Халыҡ гараж түбәләрендәге ҡарҙы ырғыта, боҙ тауҙарын вата, подвалдарҙан боҙ ташый, ҡалын кейемдәрҙе урамға сығарып элә — ҡасып ҡалған ҡыштың унғы өмөттәрен яҙ хөкөмөнә тапшыра.

Алабуғаның Костенеево ауылындағы ҡойо ҡаҙыусы бригадала ыу ташыусы машинаның боҙолған моторы “Аҡ шишмә” гаражында өс көн эсендә төҙәтелеп, дүрт тонна ыйышлы автоцистерна Алабуға яғына ашыға ине. Фазыл, өйләшеп, үҙенең йәшел вагонын Шәлегә саҡлы ғына бул а ла тағып ҡайтырға теләгәйне лә, шофер егет ҡаушап ҡалды. Был мискәле машинаға вагон тағып юлға сығыуҙың ни икәнен беләләр шул: әкрен генә барырға кәрәк, тау менгәндә — көсәнергә, үр төшкәндә — уйнаҡларға...

үҙгә кадрҙар бүлеге инспекторы Зөмәйрә ҡатышҡас әм юл ҡағыҙына айырым имза менән Фазылды вагоны-нийе менән “өҫтәп” ҡуйғас, йәш егет артыҡ ҡарыша алманы.

Машинаға гараждан силәк менән бензин ташыған арала, Зөмәйрә Фазыл менән хушлашып өлгөрҙө.

— Мин барыбер аңламайым ине, Фазыл... Күпме йөрөргә була инде юлда?

— Юл — өмөт ул! Юл — мажара! Юл — ғүмер! Юл — эҙләнеү!

— Нимә эҙләй ең уң ин?

— Тапманым бит әле!

— Нимәне, Фазыл, нимәне тапманың?!

— Нимәне икәнен белмәйем, тапмағанымды ғына беләм.

— Муйыныңа вагон бәйләп йөрөй торғас, табырҙай ыңмы?!

— Бәлки?! Шәлегә алып ҡайтам да йәшел вагонымды Мишә тамағының йәшел болонона туғарам. Ауылдың пионер лагеры ине элек унда...

— Теймә ин шул йылдарға! Хәҙер беҙгә аҡыл менән йәшәй башларға кәрәк тә ә.

— Мин дә шулай тим бит! Яңынан, тыуған ауылымдан, башлайым. Беҙҙең Шәленән дүрт юл сығып китә ситкә. Мин дөрөҫ юлдан китмәгәнмен. Унда әле тағы өс юл бар... Ҡайтам ауылға, вагонымда йәшәйем — бала сағымды, йәшлегемде ҡабатлайым, аҙаҡ күҙ күрер...

— Аҙна аҙағында мин дә ҡайтам яныңа. “Бала сағында” бергәләп ял итербеҙ.

— Минең бала сағымда ин юҡ инең шул, Зөмәйрә! Ярай, ау бул! Бары ы өсөн дә рәхмәт иңә!

— Бергә үткәргән төнөбөҙ өсөн барыбер үкенмәйем мин, илле йәштә лә әле өрйәнынан ҡауышып, йәштәр кеүек өйөшөп йәшәй алабыҙ, тип иҫбат итер өсөн барыбер кәрәкте ул төн... ау бул, Фазыл! Хуш тип әйтмәйем!..

Зөмәйрә йәшел вагон күҙҙән юғалғансы “Аҡ шишмә” ҡапҡа ынан ҡарап ҡалды.

## II. Фариза

Ҡайтҡан айын бер юғалтыу. Шәлегә ҡайтҡас Фариза апайға бүләк итермен тип, пенсия келәмен алып сығырға ине иҫәбе Фазылдың. Савин биҫтә ендәге “Убырлы ҡарсыҡ өйө” юл уңайы ғына, ҡаланың атлы экипаждар өсөн генә алынған урамдарында вагон өйрәп, бимазаланып йөрөй ө юҡ.

Тәбиғәттең ай үҫә ен көн үҫә торған сағы. Зөмәйрә ҡуйынында үткән бер төн

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 94



эсендә биҫтә талдарының шартлап ярылған бөрөләренә алҡа-алҡа суҡтар эленгән. Өй түрендәге ҡамыштар тамыр төбөнән бәпкә сығарған, Ҡазан- ыу ярындағы әрәмәлекте ужым баҫыуы урынына күреп, абан турғайҙары тантана итә. Биҫтәне баҫып алам тип килгән ҡар ыуҙарының ҡеүәте бөтөп, күләүектәр рәшәткәләрҙән өй нигеҙенә табан сигенгән.

Болдор ишегендәге сылбырға эленгән йоҙаҡтың юҡлығын күргәс, Фазыл, өйҙөң хужабикә е килгәндер, тип уйлағайны ла — ватып кергәндәр, имеш... Бүләккә бирелгән келәмдән елдәр иҫкән. Был өйҙән урларҙай бүтән нәмә тапмағас, урындыҡтары-ние менән өҫтәлде ауҙарып ҡасҡандар.

Барыбер иртәрәк биргәндәр миңә хәйер еҙ келәмде, тип йыуатты ул үҙен. Плинтус өҫтөндә аяҡ бөкләп ултырған аҙ баҡа ына теш ара ынан ғына сыртлатып төкөрөп, Фазыл был өйҙән бөтөнләйгә сығып ыҙҙы.

Ҡаланың туҡ ан туғыҙ тыҡрыҡ-лабиринттарын үтеп, оло трассаға сыҡҡас, машина ҡыйыуланды, артына тағылған вагонды ла онотоп, юл дауамы менән киҫешкән офоҡҡа ашҡынды.

— Ҡыҙыулама, энекәш! Вагон төшөп ҡалма ын. ин мине уңғы түбәмдән мәхрүм итә күрмә!

Фазылдың мотор тауышын еңергә тырышып ҡысҡырып өндәшеүен шофер үҙенә екеренеү итеп ҡабул итте, ахры ы.

— Таштан йорт алырлыҡ рәтең барҙыр әле. Ғүмер буйы быраулаусы булып эшләгәс, был вагонды балыҡ тотор өсөн генә өйрәп йөрөй өндөр.

— Яңы нигеҙ ҡорорға дәрткә дарман да бар, мәгәр туҡталырлыҡ урын ғына юҡ. Ана, Шәле урмандары башлана. Ашыҡма! Тыуған яҡтар ағындырған, рәхәтләнеп өйөнөп барайым әле.

— Экскурсияға сыҡманыҡ, Фазыл ағай! Минең әле эш сәғәтендә ҡайтып өлгөрә ем бар.

Шофер егет, ҡаршы өндәш ә лә, барыбер тиҙлекте кәметте. Ике арала бүтән үҙ ҡуйырманы.

Ах, был юлдар!.. Сәфәр сыҡ аң, юлдар әҙәм бала ын шайтан өйөрмә е кеүек аймап ала...

“Балалар, оло юлда уйнамағыҙ, юл алып китер!..”

Әсәйҙәр тағы ниҙер ҡысҡырып ҡала, тик инде беҙ ишетмәйбеҙ. Урамға сыҡҡан айын әйтелә торған киҫәтеү был, шуға күрәлерме, ҡолаҡ өйрәнгән, ул хәйер-фатихалар күпме генә изге бул алар ҙа, беҙҙе иҫкәндермәй, артыҡ уйландырмай. Өйҙән сығыуға беҙ әсәйҙәр тауышынан бик тиҙ алыҫлашабыҙ. Йәйәү йөрөмәйбеҙ ҙә, йә ағас атҡа атланып, йә тимер сыбыҡҡа әләктереп дүңгәләк тәгәрәтеп... Ауыл ҡапҡа ын сығыуға әсәйҙәрҙең хәйер-фатиха ын арыш баҫыуы өҫтөндәге турғайҙар тауышы күмеп китә. Ағас аттар беҙҙе гел ауыл ситенә өйрәй, беҙгә инде ауыл эсендә генә ҡыҙыҡ түгел, ситкәрәк сығып офоҡҡа таяна ы, йыраҡтағы мажараларҙы яҡынайта ы килә. Беҙ тигәс, ауылдың бөтә малайҙары ла ундай түгел. Кемдәрҙер ата ҡаҙҙар менән янъял сығарып, пожарный быуа ында бығырҙап ҡала, кемгәлер урып-йыйыу“ уғыш”ында емерелеп ҡайтҡан комбайндар өйөмөндә аҡтарыныу ҡыҙыҡ; кибет артындағы йәшник ара ында хазина эҙләп йөрөүселәр ҙә етерлек, көтөү ҡыуғанда уянып, Мишәгә олағыусы сабаҡсылар ҙа бар. Ләкин улар Фазыл түгел. Ауылда юлдар етерлек, тик улар иҫкергән, туҙған, алйыған... Ул юлдарҙан сығып кит әң, хыялыңа, мөҡәддәс мораҙыңа ирешә алмайынса уҡбайға әйләнеп, еңелеп, кире ҡайтып керер ең төҫлө. әр кем үҙенә тиң юлды эҙләй.

Ә быны ы КамАЗ юлы ғына. Татарҙар Мәскәүгә хаж ҡылырға бар ын өсөн алынған юл. Саф ауанан, тыныс төндәрҙән, айрар ҡоштарҙан мәхрүм иткән был юл — үҙәккә я аҡ түләп, татарҙы талау юлы... Кеше үлмәгән, фажиғә булмаған бер

генә саҡрымы ла юҡ уның. Шәле Ҡазандан ҡайтышлай ошо юлдың ҡырҡынсы саҡрымында ҡала...

Шәлегә яҡынайған айын күңелдә борсолоу бара. Әллә ирәк ҡайтҡанға микән — ҡайтҡан айын бер юғалтыу унда. Шишмәләр кәмей... Ауыл барлыҡҡа килгәндән бирле ғүмер-ғүмергә абантуй майҙаны булған әүәлге Мәҙрәсә баҡса ын бүлгеләп, алты йорт алып ҡуйғандар. Фазылдың вагоны ыйырлыҡ та урын ҡалмаған.

Шәленең ел тирмәне лә, ҡанатын йәшен уҡҡандан уң, тынып, емерелеп ҡалған. Ике ҡатлы ағас мәктәпте үтеп, утынға өләшкәндәр. Ағас клубты таш нигеҙгә күтәреп, кибет иткәндәр. Батшалар заманында ике мәхәллә булып йәшәгән дүрт мең кешеле Шәленең коммунизм төҙөлөшөндә лә иҫән ҡалған ыңар мәсетенең манара ын үттереп, инде дини әм милли яңырыш осорона кергәс тә, мәсет алдырырға аҡса таба алмайынса, диндарҙарҙы сәждә ҡылырлыҡ ышыҡ урын ыҙ ҡалдырҙылар... Таҡта ярғыстың оҫтахана ы көпә-көндөҙ янып көлгә осҡан. Яңы ын алырға, таҡта ярыу-шымартыу өсөн станоктар алырға колхоздың ҡаҙна ы буш. Хәйер, колхоз төшөнсә енең дә “ҡол” тигәне генә ҡалды, буғай, ә ҡолдарға хеҙмәт хаҡы түләү тейеш түгел... Фермалар ҙа аман шул уҡ — Фазыл кескәйҙән күреп үҫкән килеш, хатта төҙәтелмәгәндәр ҙә... Ана, тракторға тағып бер арба ҡорбанды — әле көтөүлек күреп тә өлгөрмәгән быҙауҙарҙы Көрәксә йылға ы итәгендәге үләт соҡорона алып киттеләр.

***

– Фазыл ағай! Вагоныңды ҡай ы тирәгәрәк ҡалдыра ың? Шәленең кибет тирә енәме, әллә Ҡазан автобусы туҡтай торған ергәме?

— Урман ауыҙында ҡалам. Ауылға йәйәү генә барам. Рәхмәт иңә! Кире ҡайтҡанда был тирәгә уғылып кит, бәлки, әлегә бында булырмын.

— Ҡарарбыҙ... Бала-саға уйыны уйнап йөрөй өң. Такси ғына яллап сыҡ аң, көн эсендә бөтә эшләгән ауылдарыңды бер юлы айҡап ҡайта инең инде, Фазыл ағай...

Фазыл вагонының тәгәрмәстәре аҫтына таш киҫәктәре ҡыҫтырҙы ла КамАЗ юлынан ҡом урлап алынған тар шоссе буйлап Шәле үҙәгенә атланы. Мең хужалыҡлы ауылда Фазыл йән йылы ы алырлыҡ бер кеше бар, ул — бер туған аға ы Хәйҙәрҙең ҡатыны — Фариза еңгәй. Фазылдар ҡәүемендә етемдәр сама ыҙ күп ине, атай ыҙ етемдәрҙең шәжәрә е тиҙ ҡорой... Фариза еңгәй. Фазылды илап ҡаршы ала, өйөнә- өйөнә ыйлай, көлә-көлә ауыл хәлдәрен өйләй, киткәндә оло юлға тиклем эйәреп сыға. Хәйҙәренән башҡа үҙе генә оҙата, оло улын фронтҡа оҙатҡан үк еҙ әсә кеүек илап аубуллаша. әм уның әр хушлашыуы бәхилләшеүгә тартым.

Фариза... Уның йөҙөн был өйҙә беренсе булып Фазыл күрҙе... Урлап алып ҡайттылар ҙа мейес аралығына яптылар. Аралыҡтың ишеге юҡ, сәскәле шаршау ғына эленгән. Шаршау эсенә Фазылға ғына инеп-сығып йөрөргә ярай. Башҡалар өсөн ул ҡойма кеүек межа, үтеп керергә ярамай — йола ы ҡушмай. Шәлелә гел шулай — урлашып ҡына өйләнәләр. Дөрөҫ, кемдең кемде урлаясағын бер аҙна алдан уҡ бөтә ауыл белеп тора ине... Ҡазандың колхоз баҙарынан ҡырҡ саҡрымдарҙа икенсе Ҡытай булып йәйелеп ятҡан Шәленең үҙ ҡанундары: бында утынды-бесәнде лә, хәләл көсөң менән эшләп тапҡан малыңды әм хеҙмәт көнөнә тейеш икмәкте лә, хатта насип өйгән йәренде лә урлап ҡына алырға... Килтереп биргәндәрен көт әң — бөлә ең. “Мә!” тип әйтерҙәй кеше бер председатель генә, ә “Бир!” тип тороусылар дүрт меңдән артыҡ.

Шаршауҙың теге яғында өс ағай Фаризаның үҙ аяғы менән сыҡҡанын көтөп

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 96



йөрөй. Мөйөштә Динә — Хәйҙәрҙең дә, Фазылдың дә әсә е — мейес булдыра. Усаҡ утындары, ялҡын ирпеп, маҡтана-маҡтана яна. Динә, оҙон аплы киҫәү менән мейес алдына күмер тартып, табала туңмай иретә. Усаҡ осҡондары, ҡыҙған майға сәсрәп, йондоҙ булып атыла. Малдар өсөн ашлы ыуға тип ҡуйылған силәккә картуф ҡабыҡтары ауҙарғас ҡына аңлап алды Фазыл: әсә е картуф ҡыҙҙырырға йыйына... Усаҡта ҡоймаҡ бешермәҫтәр бит, шарт та шорт килеп көллө күмергә батыра бит ул... Фазыл ярата торған ҡоймаҡтар иртәгә бешер... Иртәгә Фариза өсөн яңы көн, яңы ғаиләгә эйәләшеү башланыр...

Хәйҙәр аға ы шаршау тирә енән китмәй. Китер ине — мейес ара ы ишеккә бик яҡын, иҙмәй ҡал аң, әле килен булып өлгөрмәгән кәләш туп а арҡыры бер генә икерер. Ә унан — ҡайын таҡталарҙан ҡаҡҡыланған өй алды ғына — йүгереп килеп бәрел әң — телә әң ҡай ы еренән туп-тура урамға килеп сыға ың. Хәйҙәр ағай аҡта. Ә тағы ике ағай — күрше егеттәре... Шуға күрә төн урта ы тип тормайҙар — ашыҡмайҙар, ыҙыҡлы картуф бешкәнде көтәләр. Фазыл да ашыҡмай. Уның әле яңылыҡ күреп, кис ултыра килгән саҡта әбей-әсәләргә бәйнә-бәйнә өйләрлек хәбәр йыя ы бар. Йоҡолар ҙа ҡасты инде бөгөн, уҡырға бара ы юҡ, йәше етмәй әле, таң атҡансы кәләш аҡлап ултыра ала. Күрше ағайҙарҙың да йоҡо о ҡасҡан. Уларҙың әле был ваҡытта клубтан ҡайтышлай пожарныйҙа йыйылып, кәрт уға торған саҡтары. Белә инде Фазыл: ҡыҙ урлаусылар — ҡәҙерле ҡунаҡтар — картуф бешкәс “аяҡ йыуырға” әҙерләнәләр.

Хәйҙәр ағайҙың нисектер шатлығы иҙелмәй. Ә күрше ағайҙарҙың, ана, ауыҙы йырыҡ. Фазылға өйләгән булып, мөйөштәге Динә апайҙарына ҡыҙҙы нисек апҡайтҡандарын аңғарталар.

— Көнө бер аҙ алҡыныраҡ тура килде. Ат бәҫләнеп бөттө. Ошо арала урлама - аҡ, көндәр йылынғансы тотмаҫтар уны, тине бит Хәйҙәр... Ҡәүи урамында, сана өҫтөндә, таң аттырабыҙ икән тип торам. Хәйҙәргә нимә, туңмай ул, уның түше ҡыҙған... Фаризаның клубтан ҡайтҡанын ағалап торабыҙ. Әйттем бит, клубта бөгөн кино, индийскийҙар гел ике сериялы була, оҙаҡ көтөргә тура килә. Ну, тәүәккәлләгәс, до конца торҙоҡ инде. Фаризаның Зыяҡтар тыҡрығынан бороло-уы булды... Етмә ә, теге өйләнмәй торған Хөрмәтулла эйәргән үҙенә... Беребеҙ уны уғып осорҙо, икебеҙ Фаризаға толоп бөркәнек тә, шалт санаға. Хөрмәтулла аҡырма а, шылт та юҡ ине. Сәрелдәп ҡысҡыра башланы: “Фаризаны урлайҙар, Фаризаны!”— ти.

— Иртәгә иманын өшкөрәм әле мин уның,— тине Хәйҙәр, үҙгә артыҡ ҡушылырға теләмәйсә генә.

— е... Иртәгә ундай юҡ-бар эштәргә ваҡытың булмаҫ... Бүтән клубҡа сығыу юҡ инде иңә. Или... или...

— Или хәҙер Заман бабай килеп өсөбөҙҙө лә Хөрмәтулла урынына уғып осора. Юрый ғына урлағайныҡ тип, өсөбөҙ ҙә ҡарауыл ҡысҡырып ҡалырбыҙ. Или... был төн хәүеф-хәтәр еҙ генә үткәндә, клуб тирә е иңә больше тү-тү... Кистәрен урамды ағын аң, беҙҙең менән каланса төбөндә кәрт уғыр ың... Вәт, айғыр — айғыр инде, кәнишне, ирҙәр хәлен аңлай торған нәмә, “На!” тигәнде лә көтмәйенсә, дилбегәгә буй ондо. Толоп аҫтынан Фариза тауышы ишетелә: кемгә урлай ығыҙ мине, ти. Мин әйтәм, Хәйҙәргә. Ҡай ы Хәйҙәргә, беҙҙең ауылда дүртәү бит улар, ти. Дәмши Хәйҙәренә тигәс, тел еҙ ҡалды.

Динә, ут өҫтөндәге таба ын ҡуҙғатырға ла ҡурҡып, тыңлап торған икән. Күрше ағай өйләп туҡтауға, табағас менән киҫәү башын төйә башланы.

Фазыл кескәй генә — Фазыл ҙур! Бәләкәй генә бул а ла, Заман бабайҙың ҡыҙҙары бик матурҙар икәнен ишетеп белә Фазыл. Үҫкәс мин дә уның ҡыҙын урлайым әле, ти.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 97



Хәйҙәр аға ы эйәк осон елкеп кенә ымлап ҡуйҙы. Дөрөç аңланымы икән... Үҙенсә: Фариза еңгәнде күреп сыҡ әле, унда нишләп ултыра икән, тип әйтеүе инде. Фазылға шул ғына кәрәк тә! Шаршауҙың бер сәскә ен күтәреп, аралыҡҡа шылды. Егеттәрҙең бере е шаяртып ҡысҡырып ҡалды:

— Әй, ағайҙан алда ҡайҙа бара ың! Быны ы инә түгел әле! инә тигәне бишектә ҡалды. Килә е йылға уҡырға төш әң, тәүәккәлләрбеҙ!..

Аралыҡҡа мейес ҡашаға ы аша яҡты төшә. Фариза, Фазылды күреп, өйөнөсөнән унының сәсенән ыйпаны. Мейес ара ында артыҡ эçе бул а ла, өçтөндәге сөм-ҡара ырма ын алмаған. Башындағы мамыҡ шәле аҙ ғына артҡараҡ төшкән. Ҡабарынҡы толомдарҙы икегә бүлеп, сәс юлы күренеп тора. Илап туйған, ахыры. Баш бармағының тырнағы менән мейес аҡшарын тырнап, ниндәйҙер өҙөк-өҙөк хәрефтәр ыҙғылаған. Ләкин Хәйҙәр тигән үҙҙә ундай хәрефтәр юҡ. Мәктәпкә йөрөмә ә лә, әҙ-мәҙ генә белеме бар инде Фазылдың.

— Тирләп үлә ең бит, еңгәй, ниңә өçтөндә алмай ың?

Еңгәй тип өндәшеүгә, Фариза иçкәнеп китә.

— Сисенеп ултыр ам, атай үлтерә бит мине.

Шаршауҙың теге яғынан егеттәр тауышы ишетелде.

— Әйттем дә, ҡыҙҙы бер кем дә туп-тура үҙенә апҡайтмай, тинем. Хөрмәтулла барып әйт ә, ата ы момент килеп етәсәк.

— Моментындан картуф бешә инде,— тине Хәйҙәр, ҡыйыуланып.

— Заман бабай был ваҡытта ферманан силос урлай торғандыр әле, өйҙә йоҡлап ятҡан сағы түгелдер.

— Мине бер урлап ҡаранылар, атай тәҙрәләрен алып керҙе.— Быны ын Фариза Фазылға әйткән булды, ләкин тауышы Динәгә ишетелерлек ине.

— Кил ә, алыр ҙа китер. инә тейгән кеше юҡ әле,— тине Динә, үртәлеп.—Беҙҙең шикелле хәйерселәргә матур ҡыҙҙарҙы күп енәләр инде ул.

үҙгә Хәйҙәр ҡушылды:

— Замандыҡылар ҙа аҡ күмәстә үçмәгән. Матурлыҡтың туйҙан уң кәрәге юҡ.

Егеттәрҙең бере е ҡыҙып китте.

— ин, Хәйҙәр, өйҙә аулаҡ, тигәйнең...

— Эй, Хоҙайым, хәҙер ти әң, хәҙер сығып китәм. Заман бабай килеп янъял ҡуптар а, арағыҙға керермен, тип кенә торам. Ул йәтим быҙауҙы еҙ ҙә яҡлап ҡала алмаç ығыҙ әле.

— Әсәй!— тип ҡырт киçте Хәйҙәр,— бәрәңгең бештеме әле?!

— Хәҙер, көт бер аҙ. Таба аçтына кереп ята алмайым бит...

Ул арала икенән үрелгән ары шнурлы Ильич уты күҙ ҡыçып алды. Тимәк, төнгө бер тула. Бер-ике минуттан колхоздың электр станция ы туҡтай тигән үҙ.

Динә кәрәсин лампа ын ҡабыҙҙы. Өçтәлде туп а янына килтерҙеләр.

— Абзый, Заман бабайҙарға барып, тәҙрәләренән тыңлап киләйемме? Беҙҙе үгәләрме икән?

Йөрөмә тигәндәй, Фариза Фазылды үҙенә яҡынырак килтерҙе. әйбәт булды әле, тип өйөндө малай. Юҡ а, Замандарға барып еткәнсе, кибет урамындағы эттәр янынан үтә е бар. Динә, бөгөнгө хәлдәргә указ сығарғандай, уңғы үҙен әйтте.

— Ике тапҡыр урланған ҡыҙҙы алып ҡайтҡан атайҙар юҡ ине әле быға са!

Ул арала унлы лампа төн хужа ы булып ҡалды. Бары ын өçтәл артына саҡырҙылар. Фариза ашыҡманы. Фазыл уны хәҙер кем тиергә лә белмәй: апаймы, еңгәме?!. Ҡат-ҡат саҡырып та сыҡмағас, Динә шаршау артына үҙе керҙе.

— Әйҙә, аралыҡта төн уҙҙырырға ин бында арыҡ бәрәсе түгел ең. Кеше янына сыҡ. Атайың кил ә — китер ең, килмә ә — яҙмышың...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 98



Фариза ҡарауыл ҡысҡырып илап ебәрҙе. Мин илаған кешенән ғарҡ туйған инде, тигәндәй, Фазыл ағайҙары янына китәйем тигәйне, ҡулынан сытырҙатып ҡыҫҡан — ебәрмәй. Малай уның күҙ йәшенә еүешләнеп бөттө. Бер аҙҙан, кейенгән килеш кенә, Фазылға эйәреп, өҫтәл артына килеп ултырҙы. Бәрәңгене ҡабып та ҡараманы. Бер-бер артлы өс сынаяҡ сәйҙе бушатып, тағы өн өҙ ҡалды. Егеттәр көрән сургучлы шешә астылар. Хәйҙәр стаканға үрелмәне. Башын бөтөнләй аҫҡа эйеп ашап ултырған булды, үҙе Фаризаға ҡарай алмай. Әйбер урлап тотолған ҡараҡ кеүегерәк, ҡарашын ҡайҙа йәшерергә белмәйенсә, тимер ҡашыҡ менән таба төбөн ҡыра.

Шәле ауылы алпауыт урманына урлап алынған ҡасҡындар өйөнән үрсегән, имеш... Уны Иван батшанан суҡындырмайынса урлап алып ҡалғандар, тиҙәр. Ҡыҙҙар кейәүгә урлатып ҡына сыға. Әгәр егет менән килешеп, дөрөҫ итеп әйт әк, йәбешеп сыҡ а — уларҙың нәҫеленә көн бөтә... Колхоз малын урлауҙың ғәйебе юҡ Шәлелә. Аты-арба ы булғандар урмандан утын, ҡарауылсы болононан бесән урлай; йәйәүлеләр кукуруз ара ынан ваҡ мал өсөн сүп үләне йыйып киптерә. Колхоз председателе аҡал Шәйхи кукуруз тапала тип ҡыуып йөрө ә, халыҡ бәрәңге сүбен утарға керешә; бәрәңгенән ҡыу алар — сөгөлдөргә күсә; мең хужалыҡлы ауыл шулай йәшәп килә. Өй янындағы ун биш сутыйлы баҡсала берәү ҙә картуфтан башҡа ул-был үҫтермәй. Ә инде өй айын кереп йөрө ән — әр кемдә ҡышҡа етерлек силос, сөгөлдөр, люцерна, оло өйөлөп ята. аҡал Шәйхи быны белә, өйҙәрҙе тентеп йөрөмәй, әр колхозсы үҙе эшләгәнде урлап алырға тейеш, ти. Урламаған кеше — хәйерсе!.. Бына Хәйҙәр ҙә ҡыҙ урланы, байыр, Алла бойор а... Хәҙер инде бесәнде лә, утынды ла икәүләшеп урларҙар, ыйыр алып ебәрерҙәр. Фазыл улар янында май бесәйе кеүек сепаратор тәрилкәләре генә ялап йәшәр...

Егеттәр, йоҡо алдынан беҙгә берәр шешә етте тип, амин итмәйенсә генә сығып ыҙҙылар. Улар артынан Динә лә оҙаҡ торманы. Заман бабай Фаризаны ҡалдырҙы, тимәк. Хәйҙәр, бүләк көткән малай-шалай ише, аулаҡ өйҙә хәйләкәр йылмайып тора. Фазылды кешегә анаусы юҡ. "Әйҙә, улым, Ямалыйҙарға кереп ҡунабыҙ, тип саҡырғайны Динә, тик Фариза Фазылдың ҡулын табағастай иттереп ҡыҫып тотҡан, кит ән, мин дә ҡалмайым, ти. Әкәмәт икән Заман бабайҙың был ҡыҙы, Фазыл урламаны бит ине?! Өлкән аға ының майлы күҙҙәренә ҡарай ҙа малай, ярар инде, ҡалып тор, тигәнде аңлап ала. Фариза ағас карауатты пыр туҙҙырып, бер яҫтыҡ өйрәп алды, уны иҙәнгә — тәҙрә аҫтына ырғытты. Ата ы килер тип көтәме аман... өҫтөн алмайынса ғына бөгәрләнеп ятты. Билдәле, ҡулдар ҡулға ялғанғас, Фазылға ла уның янына йығылырға тура килде, туңма ын өсөн ул еңгә ен стенаға ҡыҫты. Өлкән аға ы өҫтәренә ырыған юрған ҡапланы. Фазылға эҫе булғас, Фариза еңгә енә лә сисенергә тура килде... Лампаны үндергәс, өлкән аға ы Фазыл янына килеп ятҡан булды — бер үҙенә тағы ике яҫтыҡ йәйеп, хан кейәүе тиер ең, ырма йәй ә ярамаған... Йоҡо аралаш ҡулынан ысҡынма ын типме, йәш еңгәй ҡәйнеште ҡосаҡлап уҡ ятты, минең дә Исмәғил исемле энем бар, ти...

Фаризаның ҡулынан еләк абыны еҫе килә... Ни айәт, Хәйҙәр сабыр ыҙланып көткән минуттар етте — Фазылдың өнө менән төшө бергә ҡушылды...

Ҡышҡы иртәлә биткә яҡтылыҡ төшөрлөк булғас, улай бик иртә уянылмағандыр... Сәйер — өлкән аға ының ике яҫтығы өҫтөндә арҡырыға Фазыл ята, тегеләр ике е бер яҫтыҡта... Шулай тынғы ыҙ йоҡлай ул Фазыл. Төн сыҡҡансы карауатта арҡыры-торҡоро килеп, юрғаны төшөп бөтә, мендәре уҡмаша... Фариза еңгә е, Фазыл тип белеп, Хәйҙәрҙе муйынынан ҡосаҡлаған...Ну ҡыҙыҡ итте әле үҙҙәрен... Фаризаның ырма ы — сөйҙә, мамыҡ, шәле еңенә тығылған. Бишмәтен

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 99



эләктерҙе лә, ишекте шығырлатмай ғына асып, Ямалыйҙарға шылды. Өй алды ишегенә сылбыр кейҙереп, ялған йоҙаҡ элде. Күрше-тирә кер ә, Хәйҙәрҙәрҙә кеше юҡ икән, тип уйла ындар... Шул кәрәк өлкән аға ына!

Шәленең Ғәббәс Таифә е күршеләренә уҡлау орарға кергән еренән, мейестән бәлеш сыҡкан саҡҡа тура килеп, ҡунып ҡалған ти... Иртән уҡлау күтәреп, ҡабаланып сыҡҡанда, тайып йығылған. Ҡә әре, ошо ашығып йөрөүҙәрем менән аяҡ- ыҙ ҡалам инде, тип зарланған, ти... Ямалый ҙа тороп ҡына эшкә китеп бара ине, Фазыл уны ҡапҡа төбөндә тура килтерҙе.

— Йәш килен матурмы уң? Кейәү ашына сабата тараҡаны булып төшкән ең инде, улым,— ти.

Фазыл серен йәшермәне.

— Башта үҙем ҡосаҡлап йоҡланым, аҙаҡ өлкән ағайға бирҙем...

Еңгә енең ҡуйынында йоҡлау көн айын тәтемәне шул Фазылға. Фариза йөн иләргә ултыр а, малай тиҙерәк уға йылышып, алдына башын ҡуя ла орсоҡ зырылдауынан ойоп йоҡоға китә. Ләкин уянғанда ул гел яңғыҙы, кейеҙләнеп бөткән мамыҡ түшәк өҫтөндә була. Әгәр йоҡоға киткәнсе Хәйҙәр ҡайтып кер ә, ул уға шундуҡ киҫәтә:

— Бар, урыныңа ят! Мишәйт итмә еңгәңә!

Тора-бара Фариза килен булып эйәләште. Хәҙер бер ҙә ырма кейеп йоҡларға ятҡаны юҡ. Ағас карауатты шаршау менән урап алдылар. Шаршау эсенә кергәнсе бер сисенә, шаршау эсенә кергәс тағы артыҡ кейемдәрен ала.

Рәхәтләнеп кенә йәшәп ятҡанда, Хәйҙәр Фаризаны эйәртеп башҡа сыҡты. Ошо уҡ урамда йәшәүсе Зәйтүнә апайҙары ғаилә е менән Ҡазанға күсеп киткәс, өйҙәре буш ҡалғайны. Иҫке өй бул а ла, йәштәр өсөн аулаҡ ине. Ул өй Хәйҙәр менән Фаризаның биш бала ы тыуғансы түҙҙе.

Фазыл еңгә енең башҡа сығыуын ауыр кисерҙе. Фаризаны ағынған айын Хәйҙәр аға ына үпкәләүе арта торҙо. Ул ғына айырҙы уларҙы... әм Хәйҙәргә ҡарата булған әлеге үпкә хисе Фазыл менән бергә үҫте.

***

Ҡунаҡҡа ҡайтҡан кеше иң әүәл ауылдың кибетенә кереп, ҡулындағы күстәнәстәрҙе бындағы сауҙа кәштә ендәге тауарҙар менән сағыштырып ҡарарға әм ҡай ы бер яңылыҡтарға күҙ-колағын эйәләштерә торорға тейеш.

Плащ туҡыма ына ике йөй алып әтмәлләнгән ҡул сумка ына күстәнәс тултыра башлағас, сираттағы апайҙар, Фазылға иҙҙерер өсөнмө, бышылдамайса, махсус рәүештә тел йәшермәй, үҙ ҡуйырттылар. Яйын тура килтереп, Фазылдың үҙен дә үҙгә эйәрттеләр.

— Кемдәргә ҡайтып килешең уң, энекәш?

— Фариза еңгәләргә инде. Минең бүтән ҡайтыр урыным юҡ та...

— Хәйҙәр ағайың пожарныйҙа эсеп яталыр әле.

— Фариза еңгәйҙең самауыры ҡайнағандыр әле.

— Әллә белмәй ең дәме, аппағым?! Фариза гүр эйә е булды ла а. Бер йыл ғына үткәндер, шәт.

— Нисек инде?! Уйнап-көләп йөрөгән еренән кеше кинәт үләме ни?

— Хоҙай кемгә нимә яҙған бит... Ҡышты йәшелсәләр иҫән сыҡтымы икән тип, баҙын асып ҡуйған да, елләтмәй-нитмәй, бәрәңге ен сүпләргә тотонған. Баҙарға барып ҡайтырға йыйынған, ахыры ы. Иҫке баҙҙың еҫе була бит ул уның. Хәйҙәр ағайың айнып ҡайтҡансы, еңгәндең тәне ыуынып, күҙә е ҡатҡан, ти... Ауыр тупрағы еңел бул ын, иҫкә алыуыбыҙ доға бул ын үҙенә... Хәйҙәрҙең донъя- ы серегән инде уның... Фаризаны күмгән көндө лә иҫерек ине. Хәҙер үҙенә үлем эҙләп йөрөй...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 100



— Тыуып-үҫкән нигеҙең дә көлгә осто, балаҡайым, бәлки, ишеткән ендер ҙә?..

— Ярар, кеше ҡунаҡҡа ҡайтҡан, еҙ уға “Иҫәнме- аумы?” тип әйтергә лә ирек бирмәй егеҙ.

Фариза еңгә енең үлеме тура ындағы аяу ыҙ хәбәрҙең тыуған ауылды бөтөнләй юғалтыу хәҡиҡәте икәнлеге әле генә башына бәрҙеме, әллә инде бер хәүеф өҫтөнә кинәт икенсе е ишелеп төшөүен күтәрә алманымы — Фазыл күстәнәстәр тултырылған сумка ы яғына ауышып ҡуйҙы. Ә буш ҡулы үҙенән-үҙе ул күкрәк аҫтын тотто. “Йөрәк ул яҡтамы икән әллә ул?” — тип уйлап өлгөрҙө Фазыл әм, йығылмаҫ өсөн ауышҡан яғына атлап, тигеҙ еҙ аҙымдар менән кибеттән сығып китте.

Аяғы уйҙарына буй онманы, юҡ а, ул хәҙер Фариза еңгә енең иҫке пилорам ҡойма ына терәп өйөлгән ҡәбере өҫтөндәге бер йыллыҡ ҡый үләнен утап, баш ҡаҙығын турайтып китергә тейеш ине... Үҙе үҫкән нигеҙгә уғылып, атай ярҙамынан башҡа ғына алынған йорттоң көлөн күреп, күңелен ыуытырға тейеш ине... Эре йүкәләрҙән күтәрелгән ап-аҡ өйҙө, Фазылдың әсә е атып киткәндән уң, күсмә Ҡыҙыл байраҡ кеүек ҡулдан-ҡулға йөрөп, ике йыл эсендә өс-дүрт хужа алыштыра торғас, ни айәт, ҡыҙыл әтәс суҡыған икән. Урыны шәп ине — ауыл урта ында — яҙғы гөрләүектәр, ямғыр-ташҡындар баҫмай торған, инеше лә аяҡ осонда ғына...

Урамда ике ҡулын елкеп кенә йөрөргә күнеккән Фазыл күстәнәстәрен ҡайҙа ҡуйырға ла белмәне. Бағана төбөндә ҡалдырып кит әң, ауыл эсе тулы зимагур эттәр, табып, ботарлап хур итерҙәр... Берәй бала-саға осра а: әбейең-бабайың бармы, минән саҙаҡа илт, Заман бабай ҡыҙы Фаризаға атап доға уҡы ын, тиер... Мең хужалыҡлы ауыл урамдары тып-тын, балалар ғүмерен ҡырырҙай үләт таралғанмы әллә? Фазылдар сана шыуып туҙҙырған Сүтә тауы, көн тыуҙы и ә өйрәктәрҙән алдан килеп ыу ҡойонған Пожарный быуа ы, рәшәткәләр аша ығылып төшкән сирень сәскәләре, ыбыҙғы я арға ваҡыты етеп ыу ылланып бүрткән тал сыбыҡтары бала-саға ҡулы күреүҙән, сыр-сыу ишетеүҙән мәхрүм. Балалар йә мәктәптә, йә телевизор ҡаршы ында... Шәленең унғы сабыйы – Көрәксә йылға - ына йомран сығарырға, Шәүәли ҡомлоғонда арҡа ҡыҙҙырырға, Сәфәри ҡыуаҡлығының сәтләүектәрен ҡойорға, Аҡ шишмә енең ыуын эсергә, абантуй майҙанында мәҙәк өйләп ҡулъяулыҡ алырға әҙер булған Фазыл — үҙенең яҙмышын эйәртеп, ауылдан бөтөнләйгә китеп бара. Ҡулындағы күстәнәсе Фариза еңгә енең хәтер ашын үткәрерҙәй аманат булып йөрөй.

Ҡалай тышлы йәшел вагон ҡояш йылы ын үҙенә йыйып ҡалған, май иретерлек булып ҡыҙған. Ҡулындағы күстәнәстәрҙе тәҙрә аҫтындағы аяҡлы шкафҡа ҡуйғас, Фазыл, вагонды бикләп, оло юл өҫтөндәге кафеға йүнәлде. Был кафела Шәле кеше енең хәжәте юҡ. Тамаҡ ялғарға тип туҡталған транзит шоферҙар Фазылды танымаҫтар, ниңә ҡайтҡан инең, китә еңме ни, тип йөҙәтмәҫтәр әле... Ныҡытып ашап сыға ы ла, кафе менән рәттән урманға терәп алынған “Автозаправка”ға туҡталған машиналарҙың берәй ен аулап, вагонды Аҡтаныш яғына өйрәттерә е бар.

## III. Хәмдиә

Кафенан бер тәүлеккә етерлек ашап сыҡҡас, Фазыл оло юлдың икенсе яғында аяҡ осондағы ике силәк өҫтөнә көйәнтә ен ҡуйып, Ҡазан яғына машина көтөп тороусы ханымды күреп өн өҙ ҡалды. Шишмәнән ыу алып ҡайтыу түгел уйы, силәктәренең ауыҙы ашъяулыҡ менән ҡаплап бәйләнгән. Әгәр оҙон суҡлы шәлен үтеп, ҡалын ҡара сәсен юл еленә таратып ал а, муйынына ай яҡты ы төш ә; әгәр йәшел яғалы ҡоңғорт плащын алып, аҡ ерлеккә ҙур ҡара түңәрәктәр төшкән күлдәген кей ә, тулы балтырын аҡ гольфи менән ҡаплап, бейек үксәле

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 101



ялтырауыҡ ҡара туфлигә менеп баҫ а — был ханым Фазылдың йәшлегендә ҡалған Хәмдиә е булыр ине.

“Хәмдиә, Хәмдиә... Ауылдан китеүемдең сәбәбе ин дә ба а!”— Фазылдың уйҙары тағы йәшлегенә тәгәрәне.

Шәленең Ҡайынлыҡ башы тигән яғынан клубҡа өс урам тартыла. Ләкин Хәмдиәләр нисектер урауҙан — Вахит урамынан — Фазылдарҙың өй түренән үтеп йөрөй. Хәмдиә йөрөгәс, билдәле инде, уға башҡа ҡыҙҙар ҙа, тире йыйыусы Ғәбделхәй төркөмө лә эйәрә. Фазыл ана шуға үртәлә. Шәле тиклем ауылдың иң иҫке өйөндә йәшәгән Динә малайынан көлөп, үҙҙәренсә мыҫҡыл итеп йөрөүҙәре, буғай.

Атайҙары уғыштан яраланып ҡайтҡас, ҡалай урыҫының иҫкергән келәт бураын ташып, мүкләп күтәргән дә, ашыҡ-бошоҡ Динәгә өйләнеп, ғаилә үрсеткән. Үлеп киткәнсе тиҙерәк нәҫел ҡалдырырға ашыҡҡан. Яралы атайҙан өс бала яралып, үҫә-үҫә башлы-күҙле була торғас, ни айәт, иң иҫке өйҙә Фазыл ата ы менән генә йәшәп ҡалды. Хәйҙәр ағай ының үҙ нигеҙен яңырта ы бар; апа ы Тәнзилә ялан-ҡырҙарына мамыҡ түшәлгән, ҡояшынан хөрмәләр сатнаған, өрөклө әм йөҙөмлө үзбәк ҡышлағында алты бала үҫтереп ята. Тимәк, урыҫ келәтенән күтәрелгән өйҙө Динә менән Фазыл ғына яңырта аласаҡ. Хәйҙәр Фаризаны урлап алып ҡайтҡан был ҡыуышҡа бер ағас карауат ҡына ыя, сөнки өйҙөң икенсе ярты ын мейес алып тора. Түшәмдән ямғыр тама башла а, өс айырсалы әнәк менән алам ырғытып, түбәне ямай торғайнылар. Гел өҫтәй торғас, аҫтағы аламдары сертмәгә әйләнеп, ҡыуаҡ-ҡыуаҡ булып тиреҫ алабуталары йәшәреп ултырыр ине. Фазыл уйын менән мауығып күрмәй ҡал а, ишек алдындағы тауыҡтар, әтәсте ерҙә ҡалдырып, түбәгә осоп менәләр ҙә шул алабута төптәрендә тибенә башлайҙар. Тауыҡ аҡтарынған урындар соҡорланып, ямғыр үткәрә. Алабуталарҙы менеп урып төшә е ине лә, тик Динә рөхсәт итмәй, былай ҙа серек түбә көс-хәл менән тора. Бүрәнәләре ҡыуышланып, араларындағы урман мүге сереп бөткәс, Динә йыл айын, ат тиҙәгенә ҡыҙыл балсыҡ бутап, өйҙөң тышҡы стена ын ылап сыға әм аҡбур менән ағарта. Ә ҡышҡа кергәндә, өйҙө ыйыр күле урманынан алып ҡайтҡан ике арба ылыҫ менән “тышлай”. Яҙға сыҡҡас, ылыҫты таратып, өйҙө тағы ағартып ҡуя...

Хәмдиә Фазылдарҙың ни хәлдә йәшәгәнен яҡшы белә әм шуға күрә мыштым ғына көлә. Ә бер көндө ул бөтә Вахит урамын яңғыратып көлдө. Уға, ғәҙәттәгесә, Ҡайынлыҡ яғына ҡайтыусылар ҙа эйәргәйне.

Эш шунда... Карауат аҫтында, Фазылдан ҡалған оҙонса кәрзин бишекте оя итеп, ун дүрт йомортҡа баҫып ала ҡаҙ ултыра. Йыл айын ун дүрткә ултыра, ә үҙе ете- игеҙҙән ары бәпкә сығармай. Ата ҡаҙҙарҙа түгел хикмәт. Әрәмгә артыҡ тамаҡ ашатып ятмайыҡ тип атып ебәр ә лә, ата ҡаҙға интеккәндәре юҡ — күрше-күләндәрҙеке Динәнең ала ҡаҙы йомортҡа алып урамға сыҡҡанды көтөп кенә тора... Динә үҙе сабыр ыҙ... Күрше-тирәләрҙә берәм- әрәм бәпкә күренә башлағас, беҙҙеке нишләп тын да сығармай, әллә йомортҡалары ҡара сереккә әйләндеме, тип, дүртенсе аҙна ында уҡ ояны туҙҙыра башлай. Бәпкә тауышын көтөп оя ында тәүлектәр буйы ғишыҡланып ултырған ала ҡаҙҙың ыу эсергә сыҡҡанын көтөргә түҙемлеге етмәй — ҡулы менән тығылып, мамыҡлы алам эсенән йән йылы ы еңгән йомортҡаларҙы берәм-берәм ала ла сүместәге алҡын ыуға ала... Бәпкә тибенгәне иҙелмәгәс, Динә бошона төшә, ҡабығы ҡалын булып, йомро йомғаҡҡайҙарҙың түңәрәк томшоҡтары тишерҙәй түгел микән? Тонсоғоп үлеп бөттөләрме?.. әм Динә моронлап та өлгөрмәгән йән оя ын ватып ҡарай... Тырҡылдап торған бәпкә башын күргәс, эске яҡтан ҡан ыланған ҡабыҡтарҙы ашыҡбошоҡ ҡаплап, йомортҡаны ала ҡаҙ аҫтына ала. Шунан, был бәпкәнең ис шик -

еҙ тыуғансы уҡ үләсәген белеп, ултырып илай. Ул кисте ни Динә, ни ала ҡаҙ йоҡлай алмай. Был хәл йыл айын ҡабатлана.

Динәнең " ынау"ҙарынан уң ете- игеҙе генә иҫән- ау ҡала. Берәр аҙна өй эсендәге ҡояш нурында күпереп, ирендән генә өтлө сәйҙәр эсерә торғас, бәпкәләр көрәйә әм оя ы менән Фазыл ҡулына ҡала. Ҡаҙ картая, Фазыл — үҫә! Уларҙың йәш айырма ы ла ете генә йыл. Мин шулай өйләнгәнсе мәҙрәсә баҡсаында ҡаҙ көтөрмөн микән, тип уйлаштырып ҡуя ҡуйыуын, ләкин башҡа сара юҡ, бесәндәр өлгөргәнсе малай-шалайҙың аяҡ-ҡулы бушай, гел уйын менән мауығып, атай ыҙ ҡалған бәпкәләрҙе әрәм итер еңме? Ҙур ауылдың бәпкә сүпләрҙәй ала ҡарғалары ла, төйлөгәндәре лә күберәк була бит.

"Динә апай, ата ҡаҙыңа мыйыҡ сыҡкан, буғай!"— тип үртәүселәрҙе ишетмәмешкә алышырға тура килә.

Хәмдиәне Ғәбделхәй оҙата бара. Уларҙан ике бағана ара ы ҡалышып Фазыл атлай, үҙе ғәрләнә әм был хурлыҡҡа эйәләшә алмай. Хәлендә иптәш малайҙарға өйлә әң, кәнәштәре әҙер: "Шул тире йыйыусы малайын яға ынан тотоп ҡайтыр юлына бороп ебәр, ҡарышып маташ а, арт яғына тибеп ҡуй берҙе, үҙ урамында телә ә кемде еңергә була!" — тиерҙәр. Бергә-бер тартыш а, кәнфит ашап үҫкән Ғәбделхәйҙе телә ә ҡай ы урамда еңә Фазыл, ҡурҡмай ул унан, ояла ғына... Яҙ еттени ә, Фазыл ишеләр абантуй өсөн алдан уҡ аҡса йыя башлай. Ә аҡса — аяҡ аҫтында ғына — өй тирә ендәге иҫке-моҫҡо сепрәктәрҙең кило ы алты тин; картуф баҡса ына сәселгән өйәктәрҙеке дүрт тин. Ҡышын уғым уйып, үгеҙ салған кешеләрҙең баҡса ы — аҡса оя ы инде, биллә и!

Утилсе тире, йөн кеүек ҡиммәтле тауар ҡабул иткәндә складта үҙе тора. Ә Фазыл ишеләр янына малайын ғына сығара. Ғәбделхәй, класташтары алдында сауҙагәр атлы ҡыланып, ҡолаҡ артына ҡәләм ҡыҫтырып сыға, ҡулында — аҡсалы муҡса. Ҡапсыҡҡа тыңҡыслап тултырылған сепрәктәрҙе үлсәү ырғағына аҫып "туҡ ан тин" тип яҙып ҡуя; бер силәк өйәккә утыҙ тин төшә. Аҡ ҡағыҙға кәнфит кеүек итеп төрөлгән көмөш ыу аҡсаларҙы оялыуҙан бөкшәйгән усына берәмберәм анап ала, алмай — сепрәк-сапраҡ, өйәк- аяҡ йыйған ҡулдарҙан ерәнеп, ырғыта ғына... Бер ум утыҙ тин аҡса менән абантуйҙа туй үткәрергә була. Өйәңке төбөндә печенье кимереп, лимонад эсеп ултырғаныңды күр ә, Ғәбделхәй мыҫҡыллы көлөп, өҫтөнә ҡарап тора — ниндәй аҡсаға байрам иткәнде белә, йәнә е!

Фазылдың Ғәбделхәй менән күҙгә-күҙ күрешергә теләмәүе – ҡурҡыуға оҡшаш оялыу ул. Хәмдиәләрҙән бағана ара ы ҡалып, Фазыл йырлай-йырлай ҡайта. Көйҙәре "Раушания", "Райхан" да, тик үҙҙәрен Хәмдиәгә аңлашырлыҡ итеп кенә үҙе уйлап сығара. Бар ҡыҙығы шунда: Хәмдиә, Фазылдарҙың өй тәңгәленә еткәс, аҙымдарын аҡрынайта, хатта күрше Ямалыйҙар тыҡрығында туҡтап та тора. Егеттең шиғри үҙҙәрен ахырынаса тыңлап бөткө ө килә, буғай. Фазыл и ә тағы ла матурыраҡ шиғырҙар айлап, моңлораҡ, ышандырыбыраҡ йырларға тырыша.

Тап шул ваҡытта тыуасаҡ бәпкәләренең көтөүсе е, Фазылдың тауышын танып, мүк ара ынан урамға муйынын уҙған ала ҡаҙ, бөтә Шәлене яңғыратып: "Ҡыйғаҡ! Ҡыйғаҡ!" – тип ҡысҡырып ебәрмә енме?!

Хәмдиә менән Ғәбделхәй быны күреп-ишетеп, эй, көлдө... "Ата ҡаҙ... мыйыҡ..."— тип хихылданы тире йыйыусы малайы.

Хәмдиәнең көлөүенән Фазыл үҙенең бала сағын юғалтты. Ул үҙен кинәт ғәрлеге уянған ир кеше итеп тойҙо.

Әлеге хәбәрҙе улы улҡылдап өйләгәс, Динә был донъяға өс етем ҡалдырып киткән ирен төнө буйы үгеп сыҡты. Шунан уң, балаларын Фаризаға өйөп, оҙон аҡса эҙләгән урман киҫеүселәргә эйәреп, Молотов өлкә енә киткән Хәйҙәрҙе

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 103



әрләне. Бары ынан да оҙағыраҡ итеп ҡыҙы Тәнзиләне Ҡараҡом сүленә ожмах эҙләп киткәне өсөн битәрләне. Кемдәрҙелер ҡарғаны, илап алды, тағы зарланды.

Ә икенсе көндө райпландан егерме физметр ағасҡа бойороҡ ҡағыҙы алып ҡайтты. Шәленең иң унғы алам түбәле серек өйөнән ҡотолорға теләп, аҡал Шәйхи ағасты Ҡыҙыл Йәштәр урманынан ташырға машина бирҙе; колхоздың балта оҫталарына ҡушып бура буратты. Динә исеменә кассанан мең ум ссуда бирҙе. Был йыл буйы түләнергә тейешле ул аҡса балта оҫталарын ашатырға, иҙән-түшәмлек ярҙырырға, тәҙрә рамдары әм яңаҡтар эшләргә ярап ҡуйҙы.

Өй күтәргәндә Фазыл аҙна буйы аяҡ өҫтөндә булды. әр хәлдә, ул көндәрҙә ултырып ашағанын, ятып йоҡлағанын бөтөнләй хәтерләмәй...

Үҫергә ашыҡмай тор... Иҫке өй эсендә көпә-көндөҙ ҙә гел эңер-меңер эленеп тора ине. Ә яңы өй эсенә ҡояш нурҙары еңеп ҡала: төнгө сәғәт ун икелә уянып, имеҙ матсаны имеп ятҡан йәш түшәм таҡталарын анарға, бесәйҙең яңы туп ала ҡойроҡ болғап берәй енең урамға сыҡҡанын ағалап ултырыуын күрергә, яңы мейес тирәләй эленгән барсалы ҡашағаның йылы ауала елпенеп тороуын тойорға була. Ләкин яңы өйҙөң яҡтылығы Динә өсөн хайран ҡиммәткә төштө. Уның ярты эшләгәне көҙгө уңыштан бүленә е икмәк өсөн тотолоп ҡалын а, ярты ы ссуда түләүгә китәсәк.

Әсә енең асыуын килтермәҫ өсөн, төпсөк улы кистәрен клубҡа йөрөүҙән туҡтаны. Хәмдиә тура ындағы хыялдар иҫке өй менән бергә үтелде.

Йәйге каникул башланырға бер аҙна ҡалыуға, сирек билдәләре “дүрт” тә “биш” кенә булғас, йыллыҡ өҙөмтәләрҙең дә шәп сығарын алдан уҡ белеп, Фазыл гаражға барып, тракторсылар тирә ендә сыуала башланы. абансы урынына ултырырға иҫәбе.

Гараж ҡапҡа ына кергәнсе үк, ҡойма буйында Ҡәйүм ағай үҙенең “Владимировец”ы аҫтында тапалған кешеләй йәйелеп ята. Данлыҡлы трактор инде “Т-28”ҙең этеп кенә ҡабыҙа торғаны. Шуға күрә Ҡәйүм ағай уны гаражға керетеп тормай: урамда килеш тағып китергә яйлыраҡ, ти. Етенсене бөтөрөп кенә абансы урынын яулау еңел түгел, әр тракторсы үҙенә ярҙамсыны уҙған йыл эшләгән егеттәр ара ынан айлай. Фазылдың әле үҙен эштә күр әтеп ҡарағаны юҡ.

Ҡәйүм, трактор аҫтында килеш, егеттең аяҡтарын күреп ҡалды:

— Кем ул унда, кабиналағы тартманан монтажканы алып бир әле?

Фазыл “ ә” тигәнсе монтажканы килтереп бирҙе.

— Кем ин?

— Фазыл. Динә малайы...

— Ә — ә... Ниңә мәктәптә түгел? Биҙҙеңме?

— Биҙмәнем. Аҡса кәрәк, өй алған өсөн ссуда түләй е бар...

— Әле шулай уҡмы ни?

Ағай трактор аҫтынан шыуышып сыҡты ла, әңгәмәләшенә текләп:

— Бигерәк бәләкәй икән ең!

— Рулгә буйым етә. Йәй буйы үҫәм әле мин...

— Хәҙер бына, руль бирҙеләр, ти, иңә. Бәләкәй булыуың шәп, кабинала икеҙгә ҡыҫыҡ булмаҫ, тип әйтеүем... Үҫергә ашыҡмай тор, йәшлек былай ҙа тиҙ үтеп китә ул.

— Тракторың ватылғанмы әллә?

— Ун биш йыл эшләп, ватылғаны юҡ уның. Стартеры ғына янды. Домкратҡа күтәреп, лом менән ҡайырырға тура килер. Бар инде, улай а, өйөңә ҡайтып, кейемеңде алыштырып кил.

Фазыл эшкә урынлашыуы менән маҡтаныу өсөн клубҡа бер сығып керҙе лә —

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 104



вәссәләм! Йоҡо туй ын өсөн иртәрәк ята хәҙер. Йоҡо туйма а, трактор кабина ында иҙрәтә, йоҡлаған кеше төшөп ҡала ул тип, Ҡәйүм аға ы гел иҫкәртеп тора.

Ат сапҡысы болон бесәнен өйөп йөрөйҙәр ине, бригадир килеп сыҡты: эште йә әтерәк тотоғоҙ, киске дүрттәрҙән уң кассирша аҡса алып ҡайта, абантуйға ашыҡтыралар, тине. Тракторҙың нисек эшләгәнен күр әгеҙ — әйтер ең, унын да ай буйы эшләгәне өсөн получка ала ы бар!..

Ҡәйүм Фазылды үҙенән ҡалдырманы, кассаға сиратта ла алдына баҫтырҙы. Сират әкрен бара. Мунса төнлөгө хәтлем генә тәҙрәнән кеше айын, башта исемлек сыға, уға имза алынғас, бер минуттан кассирша Мәрфүгә апайҙың аҡсалы ҡулы күренә. Тағы исемлек, тағы аҡсалы ҡул. Сират яҡынайған айын, йөрәгең “дөп-дөп-дөп” тип түгел, ә Хәмдиәне күргән саҡтағы кеүек итеп тибә. Ни айәт, Фазыл исемлек өҫтөндә — Мәрфүгә апайҙың ҡәләмен тотоп тора. Их, был минуттарҙың килеп етәсәген алданыраҡ бел әң... матур итеп имза ҡуйырға өйрәнгән булыр инең... Ата ы менән әсә енең баш хәрефтәрен ялғағас, Фазыл исемлекте төнлөктән шыуҙырҙы. Мәрфүға апай ике минут көттөрҙө. Шунан уң төнлөктән аҡсалы ҡулы түгел, ә күҙлегенең ике быяла ы күренде:

— Егерме тәңкәнде ссудаға тотоп ҡалам, бына, ҡағыҙын юғалтма. Ә утыҙ алты ум етмеш тине — ҡулыңа...

Фазыл усын шундай итеп ҡыҫып йомдо, өйгә ҡайтҡас — етмеш тинде төргән өс умлыҡ ун ике аҡса тирләп сыҡҡан! Әсә е эштән ҡайтып әнәген ҡоймаға өйәгәйне. Улы иртәрәк ҡайтып кергәс, башта ҡурҡа төштө. Шунан усындағы ҡуйын дәфтәре ҡалынлығы аҡсаны күргәс, улының бесән туҙаны ҡунған сәстәрен эйелеп үпте, арҡа ынан ыйпап, таҡмаҡлай-таҡмаҡлай өйҙө:

— Төпсөк балам, нигеҙ хужа ы, иҫән- ау ғына була күр!

уңғы ике йылды Хәмдиә тирә ендә Фазыл үҙе генә йөрөнө. Ғәбделхәй уҡыуын ташланы. Уны йыш ҡына кистәрен алмыш күрәләр. Элекке класташтары ҡаршы ында “Беломор” көйрәтеп, хәмерле төтөнөн өргөләп, тире йыйыусы өнәренән зарланып торған: Фазылдар кеүек картуф баҡса ы айын өйәк- аяҡ, сепрәк-сапраҡ, тимер-томор йыйыусылар бөтөп килә, арыҡ тиреләрен дә хужалыҡтар үҙҙәре иләтеп тун тектерә башланылар, тип әйтә, ти. Эсеүенең дә сәбәбе шул, ахыры ы.

Сығарылыш кисә ендә Ғәбделхәй Хәмдиәне иртәнге өскә тиклем күтәреп йөрөнө. Ә Хәмдиә Фазыл янында ине.

— Хәмдиә, Ҡазанға китә еңме?

— Юҡ, ауылда ҡалам.

— Улай а, ниңә уҡып йөрөнөң?

— Ун биш йәштән фермаға китмәҫ өсөн. Ә ин нишләргә йыйына ың?

— Минең иңә өйләнгем килә. Бөгөн үк.

— Шампанский эскәнгә генә шулай ул. Мин эсмәнем, бына, бер ҙә кейәүгә сыға ым килеп тормай.

—Тире йыйыусы ҡулына ҡала ың инде. Нүжәли, ин Ғәбделхәйҙе еңә алмайың, Хәмдиә?

— Уны ин еңергә тейеш! Әсәйем, хәйерсегә ҡыҙымды бирә ем юҡ, ти...

— Мин китәм — аҡса эшләргә. иңә секрет әйтәм: Ырымбур өлкә енә вербовка менән киткән күршебеҙ Сыуаш Ғатаулла ағайға хат яҙҙым. Кил, тигән. ин минең әйләнеп ҡайтҡанды көт кенә!

— Кейәүгә сығырға бик ашҡынып тормайым әле. Иркенләп йөрө. Хат яҙыр ың.

***

Поезға уңға ҡалғайны Фазыл.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 105



Ҡазанға күсеп, тиҙерәк фатир алыр өсөн урам епереүсе булып урынлашҡан Хәжәр апайҙарҙа ҡунып сығырға тура килде. Хәжәр — Динәнең йәшлек дуҫы. Хәҙер инде ул Ҡазандың Ҡабан күле янындағы Дегтярная урамында йәшәй. Әсә е менән баҙарға килеп, бәрәңге үтмәгән көндәрҙә ҡунып ҡалырға яйлы уларҙың фатиры — бөтә трамвай сәләмләп үтә торған “Кольцо” туҡталышында ғына. Шуға күрәлерме, Шәленең ярты халҡы белә Хәжәрҙең фатирын. Уның йөҙө лә асыҡ, ишеге лә көнө-төнө бик еҙ. Килгән бер кешегә йылмайырға тырышып, күҙ төптәренә йыйырсыҡ сыҡҡан. Йылмаймаҫ ине, ауыл кеше енә ҡараңғы сырай күр әт әң, Шәлегә үҙе күп ҡайта. Хәжәр апайҙың Фазылға тиҫтер улы бар — Юныс. Ун йыл уҡып интекмәйсә генә буй- ын еткергән, өйҙә эш еҙ ята. Эсеүенән тыя алмағас, атайҙарын ҡыуып сығарғандар. Атайлы ғаилә бармы икән уң был донъяла?.. Кисен баҙарҙан Шәленең йәнә өс ҡатыны килеп керҙе. Юныс менән Фазылға урын йәйерҙәй мөйөш — ҡыйыҡ башында ғына ҡалды... Төнө буйы өйләшеп, хыялланып сыҡтылар. Фазыл Ырымбурға китәм ти ә, мин ине оҙата төшәм вокзалға, ти быны ы.

Хәжәр апай, таң менән тороп, Суконный баҙарына терәлеп торған урамдарҙың бере ен еперөп ҡайтҡас, тиҙ генә кейемдәрен алыштыра ла мех фабрика ына йөрөй торған ағас трамвайға кондуктор булып баҫа. Юныс өйҙә көнө буйы бер үҙе.

Улар вокзалға йәйәү төштө. Ҡазан-Куйбышев поезы китергә өс сәғәтләп ваҡыт бар ине әле. Юныс ашыҡманы, ахырғаса көтәм, тине, уның әле бер кемде лә поезға ултыртып, ҡул болғап оҙатып ҡалғаны юҡ икән, уғыш тура ындағы кинолағы шикелле аубуллашырбыҙ, ти.

Вокзал тирә ендәге ығы-зығыға ҡушылып, Ҡазан шпаналары ымаҡ йөрөнөләр шунда. Ике енең дә ҡулдары кеҫәлә... Юныс билет алдырманы, аҡса әрәм итмә, проводник менән ярты хаҡҡа өйләшербеҙ, ти. Сыуаш Ғатаулла ы аран, йәш ҡатыны — дәжжәл, кире ҡайтырға бул а, бер аҙ аҡсаң ҡал ын, ти.

Ысынлап та, проводник абзый Юныстың әллә ҡасанғы дуҫы кеүек ҡыланды. Ярты хаҡҡа ғына өсөнсө ҡаттағы әндерәлә боҫоп барырға рөхсәт итте. Вагон айын арба менән ташкүмер өләшеп йөрөйҙәр ине, үҙ кешеләй, уны силәкләп ташырға булыштылар. Күмер туҙаны буялған ҡулы менән кеҫә енә тығылып тәмәке сығарғас, проводник абзый Юнысты бөтөнләй үҙ итте.

— Ниңә Ҡазандан ҡаса был егет?— ти абзый.

— Ҡасмай, ул Ырымбурға ата ын эҙләп бара. Ун ете йыл күрешкәндәре юҡ,— ти Юныс. Ә үҙе Фазылға, күҙ ирпеп кенә, шым торорға ҡуша.

Проводник юлда өйләндерә башла а тип, булмаған атайҙар тура ында әкиәт табып торған арала, поезд инде ҡуҙғалып та китте. Юныс вагонға эйәрҙе, баштараҡ ул поезд көйөнә генә атланы, шунан, күҙ йәштәрен тыя алмайынса, ҡыҙыу-ҡыҙыу йүгерергә тотондо. Фазыл ҡул болғап уға ҡалырға ҡуша, ә ул, кире енсә, бер ырғыу менән баҫҡысҡа икереп менде лә ары флажок тотоп барған проводниктың ҡултыҡ аҫтынан үтеп, вагон эсенә уҙҙы. Проводниктың: “Ә ин ҡайҙа керә ең?!” — тип үгенеүенә Юныс: “Түләйбеҙ, ҡурҡма!” — тип кенә яуап бирҙе.

Бөтөнләй ҡаушап ҡалды Фазыл.

— Хәжәр апай үлтерә бит... малайын урлап киткән өсөн!

— Ауылға ҡастым, тип уйлаясаҡ. Ҡабан артындағы хужа ыҙ дачаларҙа аҡтарынған саҡтарҙа өсәр көн өйгә ҡайтмағаным бар. Шундай йыраҡ юлда минән башҡа харап була ың ин... Сыуаш Ғатаулла ы миңә туған тейешле кеше әле. Гел саҡырып хат яҙа ине, адресын яттан беләм... Икебеҙҙе лә ыйҙырыр өйөнә... Килеп етеү менән әсәйгә хат яҙырмын.

— Шәт үҙем дә, Ҡазанға эшкә урынлашам, тип кенә сығып киткән кеше. Әсәй

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 106



шуға күрә аҡсаны ла аҙ бирҙе.

— Аҡсаны эшләрбеҙ!— тине Юныс, ҡулдарын ыуғылап. – Ырымбур бай яҡ ул. Шәлегеҙҙең нисә ғаилә е вербовка менән олаҡты шунда.

— Эшләргә ине шул!— Фазыл өсөнсө ҡаттағы әндерәгә үрмәләне.

Ике-өс сәғәт барғас быға са йыйылған борсолоуҙарға тағы бере е өҫтәлде —юлда бик тиҙ ашағы килә икән... Үс иткәндәй, пассажирҙар Ҡазанды сығыу менән үк тығынырға керештеләр әм юл буйы әле бер, әле икенсе өҫтәлдә ҡағыҙ ҡыштырҙатып, колбаса еҫе сығарып, йәш ҡыяр турап, бешкән йомортҡа ватып, ас сәйәхәтселәрҙе үртәп барҙылар. Әлдә ярай, Хоҙайҙың рәхмәте, йоҡо енде... Уянып киткәндә инде проводник абзый "ҡуяндар"ҙан аҡса орап маташа ине. Поезд Куйбышевҡа кергән, имеш.

Ашағы килеү — ауыртыу кеүегерәк, уға өйрәнеп булмайҙыр. Дөрөҫ, хәҙер инде Фазылдың ашҡаҙаны ыҙып- ыҙып ыҡрамай, эсе ауыртмай. Аяҡтары ауыр атла а ла, кәүҙә е еңел, эсәктәре ҡойолоп ҡалғандай.

Йөк ташыусы эшелонға ултырырға ҡурҡтылар: көнө йылы, ҡояшы шәп, Сорочинск туҡталышына ни бары алты сәғәтлек юл. Түҙмәҫлек түгел. Тик бына, Куйбышевты сығып, илле саҡрым үтеүгә, тимер юл ике сатҡа айырыла... Яңылыш кит әң, Ырымбурҙың сиҙәм ерҙәрендәге ауылдаштарыңды эҙләп йөрөр өң! География дәресенән имтиханға әҙерләнгән шәкерттәр ише ҡыланып, Куйбышевтың вокзал стеналарындағы карталарҙан бара ы юлды ныҡлап өйрәнергә тура килде быларға.

Ун дүрт вагонлы Ташкент поезының бөтә пассажирҙары, нисектер, уңғы вагон ишегенә өйөлөшкән. Трамвай кеүек, урын ыҙы булып сыҡты — күпме кеше ыя, шунса ултыра. Ун бер тәҙрә, ике ишек аша биштәрле халыҡ ун дүртенсе вагонға еңә. Был тамашаны ситтән ҡарап тор аң, Куйбышевта берәр үлөт сыҡҡан да бөтә ҡала халҡы бер юлы йылы яҡҡа ҡасып бара, тип уйлар ың, биллә и. Ҡарап торорға ваҡыт ҡына юҡ...

— Кереп ултырайыҡ,— ти Юныс тыныс ҡына, гүйә, кондуктор әсә е трамвай менән килеп туҡтаған.— Урыны юҡ-юғын, уның ҡарауы, ревизорҙар ҙа, проводник үҙе лә керә алмай бында.

— Нишләп анау ун икенсе тәҙрәне асмағандар?— Фазыл, ун класс бөтөргән кеше булараҡ, Юнысҡа аҡыллы фекер әйтергә теләй.

— Точно! Беләм мин уны, уборный тәҙрә е ул, оло кеше унан ыйып керә алмай — эстән ишеге бикле. Ә беҙ керәбеҙ, поезд ҡуҙғалғас асып сығарырҙар әле.

Тәҙрәнең өҫкө ярығына ҡул тығып икәүләшеп аҫылынғас, асылды үҙе. әм вагондағы баш анына бүлеп иҫәпләгәндә ун ике кеше ыйырлыҡ бәҙрәф "купе ы"на Юныс менән Фазыл ике е генә инеп ябылды. Тәҙрәне кире күтәрергә тура килде. Уларҙан күреп, бер өйөр пассажир ябырылғайны. Шаҡылдатыуҙарына елкә менән баҫып, ишетмәмешкә алыштылар. Тәҙрә быяла ы ҡалын — еңел генә вата алмаҫтар... Юныс шатлығынан ауыҙын йыя алмай.

Поезд ҡуҙғалды. Перрон бушаны. Берәү ҙә артып ҡалманы.

— ыйҙылар!

— Алты сәғәт буйы баҫып барып арытмаҫмы?

— Ана унитаз, алмаш-тилмәш ултырырбыҙ...

Проводниктар әлеге общий вагонды ташлап ҡасҡан, буғай. Пассажирҙар юл буйы шаҡып, тотҡаларҙы ҡайырып, тибә-тибә дөбөрҙәт әләр ҙә, өс ҡырлы йоҙаҡҡа бикләнгән ишекте асып кереүсе табылманы.

Улар Сорочинск станция ына бәҙрәф тәҙрә енән төштөләр...

Поезды ҡаршы алырға килгән махсус автобуста етмеш саҡрым юл үтеп, Ташлы тигән район үҙәгенә килеп төшкәс, шоферға буш кеҫәләрҙе әйләндереп

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 107



күр әттеләр ҙә – алдан өйләшелгән кешеләре көтөп тора тиер ең — үҙҙәренә кәрәк яҡҡа машина эҙләп, май заводына йүгерҙеләр. Шәлегә ҡайтыр өсөн дә ошонда килеп, ауыл машиналарын көтә ине Фазыл...

Завод яғынан иҫкән дала еле менән йылы өт еҫе килеп бәрелгәс, егеттәр күҙгә-күҙ ҡарашып ҡуйҙы. Хәҙер инде улар ҡай ы бер нәмәләрҙе үҙ еҙ ҙә аңлаша. Аяҡтар үҙҙәренән-үҙҙәре йүгерә, Фазыл Юнысты, Юныс Фазылды уҙып-уҙып китә. Ишек алдында машинанан бидондарҙы елтәй- елтәй өт бушаталар, эскә ташыйҙар. Кабина ишегендәге яҙыуҙа “М. Горький исемендәге колхоз” тиелгән.

— Бәхетебеҙ бар икән, беҙ бара торған колхоздыҡы ла а! Тағы ярты сәғәткә уңға ҡал аҡ, иртәгә саҡлы көтәр инек. Әйҙә,— тине лә Юныс, бер бидонға килеп йәбеште,— тот икенсе ҡолағынан, эскә ташыйбыҙ тип бел ендәр, ә беҙ уны буш бидондар ара ына, кузовҡа, мендерәйек.

Машина тигеҙ юлға сыҡҡас, буш бидондар шалтырауҙан туҡтаны. Теге тулы бидон да бушаны... Ике офоҡ ара ына бау тарттырып алғандармы был юлды? Күҙ ҡарашы барып етә алмаҫтай иген дала ын икегә ярған юл сатнап ҡайышланып ҡатҡан — яңы асфальт кеүек ялтырап ята.

— Ни бер ағас, ни бер соҡор күренмәй. Сиҙәм ер тигәндәре ошомо?

— Аха!— тип белдекле ҡиәфәт менән раҫлап ҡуйҙы Фазыл.

Даланы ҡояшы ауышҡан салт аяҙ күк ҡапланы әм тотош офоҡ урап алды. Августың тығыҙ ауа ы офоҡ өҫтөндә өт тауы булып күҙҙе арбап тора. Ах, был даланың ни тиклем ғаиләне сихырлап алып киткән икмәкле сик еҙлеге! Ни айәт, ошо сик еҙлектән оло, алтын тауылай серле эҫкерт ҡалҡып сыҡты. Яҡынайғас ҡына беленде — алам эҫкерте түгел, ә баҫыу урта ына өйөлгән иген тауы икән! Был хәтлем уңышты ниндәй ырҙын ыйҙыр ын уң?!

— Сәйәхәткә килмәнек. Нишләптер эс боша башланы, Юныс, алты үгәй балаға әсәй тейешле кешегә артыҡ тамаҡ булып килеп төшәбеҙме?

— Алты ғына түгел, игеҙ бала.

— игеҙме?! Беҙҙе ҡушып анай ыңмы?

— Юҡ. Ике ен үҙе тапҡан.

— Унау булабыҙ, улай а,— тағы көр өнөп алды Фазыл.

— Бөтә өмөт Мәғәсүмдә. Бала саҡта бергә уйнап үҫтек, Ырымбурға тейәлеп киткәндә үк үгәй әсәйҙәрен илатырҙай малай ине инде ул. Беҙҙең гадук. Ул быҙау көтөүе көтөргә тейеш. Хаттарында шулай яҙалар ине.

Офоҡтоң бер сите кителде. Тәбәнәк урманға ыйынған ауылды күргәс, асыҡ машинала дала еленән күшеккән тәнгә йылы керҙе.

Улар урман ауыҙында осрашты. Мәғәсүм быҙау көтөүенә ыбай эйәргән. Үгеҙ быҙауҙарҙың артым бирә торған сағы — ашауҙан туймаҫтай ҡыланалар. Кис ет ә фермаға — ябылыуға ашыҡмайҙар, бер-ике аҙым алға атлағандай ит әләр ҙә, кире дүнеп, урман яғына сабалар. Алйыған сыбыртҡы ын үҙ атына тейҙермәҫкә тырышып ҡына, Мәғәсүм көтөүҙе ауылға ашыҡтыра. үгенеүе гел Шәле кеше е ымаҡ. Быны ын инде Фазыл ғына самалай, Юныс и ә күптән Суконный шпаналары телендә үгенә.

— Таныр микән беҙҙе?

— Үҙең таный ыңмы уң?— ти Юныс, Фазылды ынарға теләп.— Быны мин таныным Мәғәсүмде! Әсәй менән бер туған Сыуаш Ғатаулла ының алтынсы бала ы ул!

— Ә беҙҙең Шәлеләге элекке ут күршебеҙ!

— ин дә минең брат икән ең, әй, Фазыл.

Был минутта егеттәрҙең ике енең дә Сыуаш Ғатаулла ының яҡын туғаны бу-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 108



лып күренге е килде.

Мәғәсүмдең “тр-р!” тип атҡа өндәшеүе — беҙҙең өй бына ошо, тигән үҙ ине. Колхоз амбары шикелле тәбәнәк-оҙон, өҙәк түбәле аҡ өйҙөң ишек алды тағылмалы трактор боролоп сығырлыҡ киң. Шәле ҡалыбы менән үлсәгәндә, бындай ишек алдына алты мөйөшлө ике йорт алып, шунда уҡ ике картуф баҡса ы бүлеп бирергә була...

Туп алары бейек түгел икән, абынмай ғына керҙеләр. Ғатаулла ағай тегеүселәр ҡайсы ы менән ҙур ҡанатлы гәзиттең беренсе битенән мәҡәлә киҫеп ята ине. Ул ҡалын быялалы күҙлеген маңлайына күтәреп, ҡунаҡтарға ҡарап ҡатты — танымаНы. Мәғәсүм, йәштәштәренә иҫе китмәгәндәй генә ҡыланып, түр яҡҡа үтеп китешләй, ата ына ымланы:

— ине эҙләп килгәндәр, Шәленән, тиҙәр. Бере е – Ҡорос төпсөгө, бере е – үҙебеҙҙең Сыуаш ҡәүеме...

Ғатаулла ағай ҡайсы ын өҫтәлгә ырғытты. Унның үгенгән тауышына үгәй әсәй йүгереп сыҡты. Ул да, ғәжәпләнеүҙән тел осондағы үҙен әйтә алмайынса, ауыҙын салшайтып шаҡ ҡатып тора. Ғатаулла ағай арҡаларынан ҡосаҡлап алғас ҡына, төнгө ҡунаҡтарҙың йәненә йылы керҙе.

— Ҡарсыҡ! Ҡаҙан аҫтына яғып ебәр! Бишбармаҡ бешерәбеҙ!

— Ниткән бишбармаҡ, тинтәк урыҫ! Төнгө ун бер тулып килә! Ана, мейес алдында ярты суйын аш ҡалды...

— ин миңә хет әйт, хет әйтмә! Бишбармаҡ күргән малайҙар түгел былар. Бөгөн йоҡламайбыҙ. Беҙ Ырымбурға вербовка менән ҡасҡанда был шалапайҙар сөннәткә ҡалғандар ине әле.

Үгәй әсә, йөҙөндәге баяғы шаҡ ҡатыуын ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә, соланға инеп еңде.

Ун ағас ҡашыҡ ҡаҙан тирәләй теҙелешеп бишбармаҡ оҫа башлағанда, төнгө сәғәт берҙәр еткәндер, шәт...

— өйлә, Фазыл. Шәленекеләр нишләп ята унда?— тине ғаилә башы, башҡаларға үҙ ҡатырға ла ирек бирмәй.

— Ҡай ы яғынан башлайым уң?

— Хет урта ынан тотон.

Ғатаулла ағайҙы хәтерендә ҡалғанса бик йәш итеп күрергә теләгәйне Фазыл. Ә ул бөтөнләй сит кеше... Арҡа ы көйәнтәләнгән, ҡулдары алынған, сәсе баш сүмесендә генә ҡалған, күҙҙәре — аҙна буйы йоҡо күрмәгән сырхауҙыҡы кеүек. Алғы тештере ҡойолғанғамы, “т” ауазына баҫым я ағанда теле ҡаҙна арҡыры төртөп сыға ла “ш” булып ишетелә...

— Эй, Ғатаулла ағай, ауылдың ҡап урта ында беҙҙең өй инде ул. Өсөнсө йыл яңыны алып сыҡтыҡ... Ә беҙҙән йыраҡ түгел Вәхит ағайҙар... Унның Хәмдиә исемле ҡыҙы үҫеп етте. Бына аҡса эшләп ҡайтам да өйләнәм. Бай егеттәрҙе ярата ул...

Ғатаулла ағайҙың йөҙөндәге барлы-юҡлы нуры ла үнде.

— ин бында бала-сағa әкиәте өйләп ултырма! Шәлелә ниҙәр бар, тим мин?

— Аша ын инде кеше, йыраҡ юлдан килгән дә улар.— Мәғәсүм яҡлап маташҡас, ата ы уға бер генә ҡараны:

— Тихо! инән орамайҙар. Ауылда үҫкән кеше яңылыҡтарҙы ла белмәҫкә, әллә ул әтәмбәй затмы?!. аҡал Шәйхи нишләп йөрөй унда? Әле аман улмы председатель?

— Ул. аман үҙе...

— Ике көнлөк отчет- айлау ойошторол, аҡалды мин ҡуйҙырҙым бит инде... Тағы кемдәр иҫән, кемдәр вафат?

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 109



— Әмәйән Мансурын күҫәк менән бәреп үлтерҙеләр.
— Да?!
— Калдун Саимә үҙе лә ысҡынды — ҡайын төбөндә.
— Иди ты?!
— Хәбир Хәлимә е йөҙ ҙә өс йәшкә еткәйне. Яңы тештәре, икенсе имсәктәре үҫә башлаған, тиме, быйыл йәнтәслим ҡылды.
— Ну!
— Монтер булып эшләгән Моряк Ғосман да, бағананан йығылып...
— Юҡтыр ҙа, минән дә йәшерәк бит әле ул! уң, итит-митит, ул Шәлелә берәр иҫән кеше бармы? Ҡырылып бөткәндәр бит!
Юныс менән Фазыл ораyҙарға яуап бирә торғас, өтлө сәйҙән уң ултырған ерҙәрендә — тәҙрә янағына өйәлгән килеш йоҡоға китеп, Сыуаш Ғатаулланың о-рау алыуынан ҡотолдолар...
Ҡунаҡ ашы тиҙ бөттө. Юнысты иткә оҙатыла ы үгеҙҙәрҙе имертер өсөн көтөүсе ярҙамсы ы итеп ҡуйҙылар. Ә Фазыл — силос тейәүсе. Ян яҡтарына тәрән борт-тар менән күтәртелгән тағылмалы арба кукуруз комбайны артынан бара. Арба төбөндә Фазыл кукуруз салатын ҡыҫҡа аплы әнәк менән тигеҙләп әм тапап өлгөрөргә тейеш. Әгәр арбаға дүрт тоннанан да кәмерәк тейәл ә — үгәләр, арт а — маҡтайҙар. Силос ямғыры аҫтында ауылды ағынып моңайырға ваҡыт юҡ, аҙ ғы-на туҡтап тор аң да, еүеш масса күмеп китә. Инде тиҙерәк зарығып көткән кис етмә ә, үләм, быуындарым ына, еңерҙәрем өҙөлә, эсем төшә, күтәнем сыға тигәндә генә комбайн үнә. Бригадир көнлөк эш хаҡын әйтә: бөгөн ун ете ум эшләнегеҙ. Кисә ун дүрт умлыҡ ҡына ине!.. Хәмдиә менән ике ара ун ете умға яҡыная!..
Шәлелә уҡығанда эсе яна торған двигателдәрҙе өйрәнеп, ҡулға “Ауыл механи-заторы” тигән ҡатырға биреп сығарғас, эй, көләшкән ине малайҙар... Ярай әле, Фазыл уны паспорт менән йәш яҙыуы ара ына ҡыҫтырып килгән... Кукуруз баҫыуҙары бушағас, ул “хунвейбиндар”ға үс итеп Ҡытайға ебәрелмәй ҡалған ҡы-ҙыл- ары тракторға ултырҙы. Яңы түгел-түгелен дә. Тик гөрөлтө ө шәп, тимер сы-быҡ менән бәйләнгән ерҙәре юҡ, еңел ҡабыҙыла... Бындай тракторға хужа булыр өсөн Шәлелә ун йыл буйы абанда ултырып йөрөйҙәр...
Ашауға киткән ваҡытҡа “перекур” минуттарын өҫтәп ярты сәғәткә еткерә ең дә килгән бураҙнаң ситенән кире ҡайтып китә ең. игеҙ сәғәт эсендә ни бары ы бер әйләнеш юл үтелә... Ялҡтырғыс, шатлыҡ ыҙ, ауылдағы бәхетле көндәренде күҙ ал-дыңа килтереп алйыта торған ағышлы бураҙналар... Көндөҙгө сменала түҙерлек әле, ә бына төнгө өндә аҙна буйы ҡараңғылыҡҡа табан аман алға ла алға, туп-ту-ра... Көн айын... Фазыл ошо сик еҙлекте ҡараңғылығы әм билдә еҙлеге менән бу-раҙна-бураҙна үтеп, Шәлегә әйләнеп ҡайтырға тейеш! Ҡайтҡан көндө үк Вәхит ағай Хәмдиәне үҙе — үҙ ҡулдары менән Фазылға килтереп бирәсәк! Туйға саҡлы ул уны үпмәҫ тә хатта! Улар индостан киноларындағы кеүек йырҙар йырлашып шишмә буйҙарында, Мишә туғайҙарында ғына йөрөр. Ә инде туйҙан уң... ҡунаҡ-тар таралышҡас, аулаҡ өйҙә ике е генә ҡалғас... Хәмдиә закон ҡаршы ында ла, ата ы алдында ла, Ғәбделхәй уйҙарында ла бары тик Фазылдыҡы ғына буласаҡ... Ах, был бураҙналарҙың оҙонлоғо! Фазыл әсә енә бер хат юллағас та, Хәмдиәгә ике хат ебәреп өлгөргәйне. Яуап хаты оҙаҡ көттөрмәне... Әсә енең хаты ҡапыл баш-ланған: “иҫәнме- аумы” юҡ, “ниңә киттең” дә тип орамаған, иң беренсе өйләме: “Хәмдиәне урланылар...” “Ата ы ҡыуып килгәс, Ғәбделхай эт өсләткән...”
Нисек инде кеше өлөшөн урлап бул ын? Ниңә Фазылдың бәхетен, хыялдарын урланығыҙ?! Ул хәҙер кем яҙмышы менән йәшәргә тейеш!
Әлеге хәбәр бураҙналарҙы өҙҙө...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 110



Юныс “Сиҙәм ерҙәр”ҙә үҙе генә ҡалды...

Кафенан сығып килеүсе кешенең йыраҡтан уҡ туп-тура үҙенә табан килеүен күреп, Хәмдиә бөтөнләй ситкә боролоп баҫты. “Был иҫерек тәрегә нимә кәрәк икән, сәғәт ораған булырмы, бер шешәлек аҡса ҡыҫырмы, әйҙә, тип, берәр машинаға ултырырға ҡыҫтармы, хәсис?!”— тип, бәйләнергә яйын ҡалдырмаҫлыҡ тоҙло-боросло үҙҙәрен тел осона йыя башлаған ине инде Хәмдиә. Ситкә боролоп, әлеге әҙәмдең йәнәшә килеп баҫыуын иҙмәгәнгә абыш а ла, улыш алғанына саҡлы ишетеп тора...

— Хәмдиә?!— Фазыл, сабыйҙы тәрән йоҡо онан уятырға мәжбүр кеше кеүек, аҡ ҡына өндәшеп: “Ысынлап та инме был? Мине таный ыңмы? Күҙ ирпеп бер генә ҡара инде...” тигән сәйер енеү, ораү, ялбарыуҙарҙы бер юлы ошо исемгә ыйҙырған ине.

Хәмдиәнең асыуҙан кирелгән иңбаштары кинәт алынып төштө. Ләкин ул Фазылдың ҡосағына ташланманы. Хатта әле уға табан боролорға ла ашыҡманы. Сәғәттәргә уҙылған минут ине был, үҙен нисек тоторға, үҙҙе ниҙән башларға, аҡланырғамы, әллә бер ни иҙҙермәҫкәме икәнлекте белмәй әлегә Хәмдиә. Ләкин йылдар буйы йыйылып килгән ағыныу әм ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас үжәт ҡыҙыҡ ыныу, “Ныҡ ҡартайҙымы икән?” тигән ораүға яуап ишетергә теләү, күтәрге - еҙ сабыр ыҙлыҡҡа әүерелеп, Хәмдиәне Фазылға табан этәрҙе.

— ине, Монголияға эшкә киткәс, ҡатыны янына ҡайтырға теләмәйенсә, сит ерҙә ҡалған, тигәндәр ине, Фазыл!

— Мин түгел ул. Сабирйәнов менән бутағандар...

— Торба борғанда асҡыс уғып үлтергән, тип тә өйләнеләр.

— Уны ы Кислов тура ында.

— Яҙғы Ағиҙел аша сыҡҡан саҡта машина менән боҙ аҫтына киткән, тигәне лә дөрөҫ түгелме?

— Юҡ инде. Бына ла а мин!

— инең минән үс ала ың бар, эйеме, Фазыл, шуға ағалап йөрөй өндөр.

— Ниндәй үс ул, Хәмдиә?

— уң, ине ауылдан минең арҡала ғына киткән, тинеләр бит.

— Бына быны ы хаҡ. Кеше үҙенең дөрөҫкә тура килгән берҙән-бер осрағы... Кискә табан ҡайҙа барышың уң, ошолай күтәренеп?

— Ҡалаға инде, ҡайҙа бул ын!.. Кистән барып ҡунам да иртән баҙар асылыуға атып бөтөрәм. Шәлелә донъя ҡубарып газ кертәләр. Беҙҙең йорт Күл урамында — торба үткәрергә яй ыҙ, ти. Әгәр иртәгә төш ваҡытына ҡулдарына аҡса тоттормаҫ ам, экскаваторҙар канау ҡаҙымаясаҡ.

— Аҡса тоттор аң, ҡаҙыйҙармы?

— әй, ул газ үткәреүселәр ҡаҙырға ла, күмергә лә риза — аҡса ғына бир! Кем — бура ын атты, кем — быҙауын. Бер остан газ кер ә, утын ташыу хәсрәте бөтә инде. Халыҡ шуға уңғы малын атып та түләргә риза.

— Ә ин биҙрә-көйәнтәләп нимә ата ың?

— Йоморҡалар был.

— Яҙ көнө, шул саҡлымы?

— Мин ашханала эшләйем. Ризыҡ күп ҡала. Тауыҡтарым ҡыш буйы оянан төшмәй. Утыҙ баш улар минең.

— Ҡасандан бирле оло юл сатында тора ың – ҡул күтәрмәй ең. Үҙҙәре туҡтап алғанды көтә еңме?

—Юҡ, хәҙер тағы ун – ун биш минуттан Түбән Кама автобусы килә, туҡтай ул. Саллыныҡылар әллә ни туҡтамай.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 111



Ун минут... Фазылдың тағы ун минут өмөтө бар. Пионер йәшенән сығып, мәктәп форма ынан ҡотолоп, беренсе тапҡыр ҙур егеттәр кеүек костюм-салбар кейеп, клуб юлына атлаған көндән бирле белеп тә, ауылдан киткәндән уң бүтән тура килтерә алмаған Хәмдиәне күрер өсөн яҙмыш Фазылға ун минутлыҡ өйөнөс бүләк итте. Ләкин Фазыл ун минутҡа ғына риза түгел.

— Хәмдиә, ин мине бик ҙур мәшәҡәттән ҡотҡарҙың бит әле. Йомортҡаларыңды үҙем атып алам, ике силәген дә. Буровойҙа бик яйлы ризыҡ ул. Соляркалы усаҡ өҫтөндә күмерләнеп бөткән тәрән эсле ҙур табаға ярты литр көнбағыш майы ҡойоп, ун биш дана йомортҡаны ыт аң... Өс кешегә бер ултырып ашарға етеп кенә тора. Ике биҙрәнде нисәү тип иҫәпләйек?.. — Фазыл, Хәмдиәгә икеләнерлек урын ҡалдырмайынса, ҡабаланып-ҡабаланып сауҙа эшенә кереште.— и, өс йөҙ штук — беҙҙең өсөн ун көнлөк ул. Тәк, хаҡын күпменән өйләшәбеҙ?

— Өсөнсө көн тиҫтә е биш мендән ине.

— Бөтөнләй ос оҙ... Себеште тауыҡ итеп үҫтерә ең, ҡыш буйы аҫырап сығара ың, тырмашып тәрбиәләй ең. Ә алған йомортҡа ы — бер стакан сәй хаҡы ғына. Тиҫтә ен ете мендән алам.

— Юҡ, юҡ, ярамай, миңә харам килешмәй, артығын алмайым,— тип өҙгөләнде Хәмдиә.

— Улай а, бына иңә ике йөҙ мең, ысын күңелдән. Биҙрәләрең өсөн тағы бер йөҙ... Ҡарыш аң, Хәмдиә, юҡ а, биҙрәләренде тибеп ауҙарам... е... е.

— Зимагурҙан булыр ҙа. Инде миңә тигән автобус менән ин китә еңме Ҡазанға?

— Ҡайҙа, ниндәй автобус?

— Ә-ә-әнә! Ништрай баҫыуын ярып ике фара киләме шул...

— Хәмдиә, әйҙә, ҡасып ҡалабыҙ. Мине алырға үҙебеҙҙең машина киләсәк.

— Әйҙә уң, дамба аҫтына. ТатЦИК шишмә енә ыуға бара, тип уйла ындар, силәк-көйәнтәне үҙем күтәрәм.

Тауыҡ ферма ы саҡлы автобус Шәле боролошона етәрәк тиҙлеген кәмет ә лә, көтөп тороусы кеше күренмәгәс, тиктомалға туҡтап ваҡыт әрәм итмәне.

ТатЦИК шишмә е мал уғара торған урынға әүерелгән. Көтөүҙең ҡай ылыр хыялый ыйыры урғылып аға торған инеш ыуынан ерәнеп, шишмәнән емергән, ыуы айыҡҡас, тапап киткән...

Фазыл көтөүселәрҙән ҡалған ҡалай кружка менән шишмәне таҙартҡан арала, ергә май айының баллы төнө төшкән ине инде.

— Фазыл, еҙҙең машинағыҙ ҡасан килә уң?

— Таң атҡасыраҡ көтәм.

— Ҡала шоферҙары шулай иртүк юлға сығалармы? Беҙҙең ауылдыҡылар хәҙер, мин иңә әйтәйем, арттарына ҡояш төшкәнсе йоҡлай, өйлә намаҙы еткәндә эшкә йыйыла, ахшам ваҡыты етте и ә, өйҙәренә таралалар... Ә тракторсыларыбыҙ... айыҡ баштан штурвал тоторға ҡурҡа... Кемгә утын, кемгә бесән, кемгә кирбес ташып, бөтә отрядтары менән эсеүгә абышып бөттөләр.

Бейегерәктән дә әйләнгестән башланып китте үҙ башы. Колхоз паркындағы иҫерек тракторсылар, ватыҡ комбайндар, кузовтары тимер сыбыҡтар менән генә ҡаптырылған иҫке машиналарҙан башланған үҙҙе Фазылдың ун дүрт йәшлек сағына тиклем килтереп еткерер өсөн ошо төн генә етерме? Төнө лә, ай- ай, иҙгер, үтә күренмәле! ис бер ғәйбәтте әм яңылыҡты йәшерә алмаҫтай тынғы ыҙ ауыл төнө...

— ин үҙ өлөшөндө тапҡан ың инде, Хәмдиә?!

— Таптым да... ҡаптым. Беҙҙең ауылда ҡыҙҙар айламай егеттәрҙе. Егеттәр та-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 112



ба, оҙата, урлай. ин бит минән үҙең ҡасып йөрөнөң.

— Ҡасмай ни... Клуб юлында йә агроном малайы Рафаэль, йә тире йыйыусы маңҡа ы Ғәбделхәй аҡта торалар ине! Минең кеүек хәйерсе бала ына ҡайҙа инде ул Хәмдиә тирә енә яҡын килеү.

— Уны ы, Фазыл, беҙ үҫкәндә байҙар-хәйерселәр юҡ ине инде!

— Ул айырманың бөткәне лә, бөтәсәге лә юҡ.

— Шулай итеп, икебеҙ өсөн дә бер мин ғәйепләме?

— ин, бары тик ин генә, Хәмдиә... Байлыҡ ул күсмә Ҡыҙыл байраҡ шикелле, кем алдынғы — шуның ҡулында. Кисәге байҙарҙың хәҙер күбе е белдереү күргән айын эш эҙләп саба. Мин үҙ ғүмеремдә әллә нисә тапҡыр байыным. Бөгөн дә, Аллаға шөкөр, Вәхит ағай ҡыҙына яусы ебәрерлек баймын. Хәмдиә е генә беҙҙеке түгел...

— Фазыл, яратҡан егет ҡыҙ күңелен яуларға яйын табырға тейеш.

— Мин иңә етенсе класта уҡығанда уҡ хаттар яҙҙым. игеҙ саҡрым йәйәү барып, Питрәч почта ы янындағы йәшниккә алам да тиҙерәк өйгә йүгереп, шул көндө үк инән хат көтә башлайым.

— Эйе шул, миңә Питрәчтән бик күп хаттар килде. Тик, асыулана торған хәлме, яуап яҙам тип мин дә Питрәч почта ына йүгерә алмайым инде?!

— Әгәр яуабын яҙ аң, хат киҫәгенде тәнәфес ваҡытында ҡулыма ғына тоттора ала инең.

— Кит әле бынан, тәнәфестә егеттәргә хат өләшеп йөрөргә әллә ин мине почтальон тип белдеңме?

— Мәктәпте бөтөргәс тә урларға иҫәбем бар ине — атайың, уғып үлтерәм, тине!

— Ә Ғәбделхәйҙе үлтермәне... Ул үҙе үлде. Бына ошо КамАЗ юлының Шәлегә борола торған сатында, әлеге шишмәнән ярты саҡрымда ғына... Күреп еткермәгәндәр. Өс кеше тейәлгән коляскалы мотоциклға Саллы яғынан бөркәүле КамАЗ килеп бәрелгән. Бер юлы өс кешене күмдек. Башҡа шабашниктар уянғансы тип, иртә таңдан "Ҡалай" совхозына балта эше белешергә киткәйнеләр. Аҙыраҡ томан таралғанды ла көтмәнеләр, йәндәре ашыҡҡандыр инде.

Хәмдиә, кинәт кенә тымау төшкәнен иҙгәндәй, танауын пыршылдатып ҡуйҙы. Шишмә янындағы саф ауа күңел нескәлеге менән бергә ҡушылды. Шуға күрә Фазылдың шомло тынлыҡтан тиҙерәк ҡотолғо о килә ине, тынлыҡтан ғына, Хәмдиәнән түгел.

— Сәйер кешеләр еҙ, Шәле ҡатындары... Үҙенде ҡарауыл ҡысҡыртып урлаған, илатып йәшәгән Ғәбделхәй өсөн күҙ йәше түгеп ултыра ың...

— Ике баламдың ата ы ла ул минең!.. "Ҡыҙыл туй"лап алған, өйөн алған, малын тапҡан, нужамды ҡыуған, улдарымды башҡа сығарырҙай итеп аяҡҡа баҫтырған.

— Ә мөхәббәт?!.

— Мөхәббәт ул яңғыҙ кешегә пар эҙләр өсөн генә кәрәк.

— Бына беҙ икебеҙ ҙә яңғыҙ бит инде. Шуға күрә мөхәббәт тура ында өйләшеп ултырабыҙ.

— Ләкин мин яңғыҙ түгел. Ике балам бар.

— Ике е лә ситтә йәшәгәс, тағы яңғыҙ ҡалдың тигән үҙ.

— Быны ы яңғыҙлыҡҡа кермәй унын. Бер үҙемә тормош көтөүҙәре ҡыйынлаш а, ике енең бере енә күсәм дә киләм. Әлегә, Аллаға шөкөр, ау-сәләмәтмен. Йорт-ерем етем. Үҙең ни хәлдә, Фазыл?

— Йорт-ер еҙ. Шәлеләге өйөбөҙҙөң көлө күккә осто, өс бүлмәле фатирымды ҡатыныма ҡалдырып ҡастым.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 113



— Байыным, тигән була ың, байлыҡ ул — мул тормошло нигеҙ. Аҡса йыйаң — таларҙар, мөлкәте мулды алдарҙар, ә нигеҙе ныҡ кеше гел бай ҡалыр.

— Хәмдиәнең күҙ яуын алырлыҡ, тире йыйыусы Ғәбделхәйҙе көнләштерерлек өй алыр өсөн аҡса эшләргә тип сығып киткән инем дә, бөгөн, ана, әйләнеп ҡайттым. Нигеҙ күтәрергә йорт урыны эҙләп йөрөйөм.

— Шәлеләме?

— Юҡ, Шәле өсөн мин гел шул хәйерсе Сәләхи малайы ғына. Ситтән, элек үҙем эшләгән ауылдарҙың бере енән, эҙләп ҡарарға иҫәп.

... Бер аҙ үҙ еҙ баҫып торған арала Фазыл әсә ен иҫенә төшөрөп алды. Йөрәге сәнсеп ҡуйҙы.

***

Ырымбур далаларынан тыуған өйҙөң туп а ына ҡайтып ултырғас, кеҫәләрендәге байлыҡтың теүәллеген тойоп, Фазыл өйөнөсөнән тел еҙ ҡалды.

Динә түрҙәге өҫтәлдә ырлы уҡлау менән кер тәгәрәтә ине. Улының туп ала ултырыуын стенаға эленгән көҙгөнән ҡарап торҙо. “Иҫән- ау ғына ҡайттыңмы, улым”,— тип өйөнөп сәләмләй е урында, әсә кеше, үҙ улын үҙе танымағандай, керҙәренән айырылманы. Бер аҙҙан: “Шыбыр тиргә батҡан маңлайыңды өрт!” тигәндәй, ырлы уҡлауҙан тағатып алып, өлгө ырғытты.

— Эттәр баҫтырҙымы әллә? Утҡа төшкән ең...

— инең янына ашыҡтым. Ни хәл, әсәй?!.

— Шәле юлына сыҡҡас, ашыҡҡан ыңдыр. Өйгә ҡайтҡас хәл орап маташмаҫтар. Хәлде уны гел белешеп торалар... йүнле кешенең балалары. Теге донъянан юл юҡ. Бик барып күрерҙәй булыр ығыҙ әле.

— Нисә тапҡыр сығып киттем өйҙән, гел буш кеҫә менән ҡайтып керҙем. Был юлы байып ҡайта ым килде. Шуға оҙағыраҡ йөрөлдө.

— Балаларығыҙ булғас, әсә бәхетенең ни икәнен аңлар ығыҙ әле. Аҡсағыҙ ниемә кәрәк?..

— Өй алғанда алған ссуданы бер юлы түләп, бурыстан ҡотолор өсөн кәрәк был аҡса, әсәй!..

әм Фазыл карауат өҫтөнә ҡапланған сигеүле аҡ япмаға кеҫәләрен бушатты. Күберәк итеп күрен ен өсөн, ул уларҙы бер урынға өйҙө. Динә, оят күренешкә тап булған йәш ҡыҙҙай иҫкәнеп, улын ярамаған шөғөл өҫтөндә тотҡандай ҡурҡып ҡуйҙы.

— Үҙеңдекеме?! Бурыс түләй е бар тип, ерәй ен рәнйетмәнеңме? Беҙгә харам мал килешмәй!

— Хәләл мал, әсәй! Эшләп, маңлай тиремде түгеп алдым.

— ай, улым!— Динә ырлы уҡлау өҫтөнә ҡапланды, шығырҙап кипкән, тәгәрәтелгән аҡ ашъяулыҡ өҫтөнә уның сабыр ыҙ күҙ йәштәре тамды.

— ин нимә инде, әсәй, мәйет оҙатҡан кеше кеүек, ебеп тора ың! өйөнөргә кәрәк. Әйҙә, правлениеға, ссуданы түләп ҡайтабыҙ, күр ендәр беҙҙе!

— ай, әйбәт эш тапҡан ың, балам. Аллаға шөкөр, “хәйерсе нәҫеле” тигән ҡара аҡалыбыҙҙан ҡотолдоҡ, буғай... Йыйып ҡуй аҡсаларыңды. Туйыңа тип аҡла.

— Ниндәй туй, әсәй! Бурыстан ҡотолайыҡ әле...

— Өҙҙөм инде мин колхоз менән араны... Ссуданы кисә генә түләп ҡайттым.

— Аҡса кемдән алдың, әсәй?! Ағай ебәрҙеме, әллә үзбәк еҙнәйҙәнме?

— Өйҙө аттым.

Ике арала тынлыҡ урынлашты... Баҡти әң, япма өҫтөнә аҡса өйөлгән карауаттары, урам еҫе еңгән аҡ керҙәре, ҡояш нуры тулған иҙәндәре, ҡыҙарып бешкән арыш икмәгенә йомарт мейестәре, балҡып торған тәҙрәләре менән был өй инде

сит кеше ҡулына күскән. Әсә е менән улы үҙҙәре алған өйҙә үҙҙәре хужа түгел.

— Ниңә ин мине көтмәнең, әсәй!

— Киттең дә юғалдың... Үлгән бул ам, ҡәбер ҡаҙышырға ла таба алмаҫтар ине үҙенде... Апайың янына Үзбәкстанға китәм, унда хет утын ташый ы юҡ, ти.

— Әсәй, ауылда нигеҙ бөткәс, ҡайҙа ҡайтып йөрөрбөҙ?

— Хәйҙәр ағайың иҫән саҡта, Шәле етем итмәҫ беҙҙе. Фариза еңгәң ине үҙ бала ылай яҡын күрә.

...Иртә вафат булған ирҙең иңендәге йөгө тол ҡатын елкә енә өйөлә. Сандыр кәүҙәле, еңел өйәкле, тынғы ыҙ йәнле Динә утыҙ дүрт йәшенән иңенә өс бала күтәреп, алам түбә аҫтында ытылған серек өй ишек алдында көрәк- әнәккә, балта-ураҡҡа таянып ҡалды. Ирҙәр күтәрә алмаҫты күтәреп, ҡатындар түҙә алмаҫтай нужаларға сыҙаны ул. Балаларым ас-яланғас булма ын, йәтимлекте тойма ын тип эшләне лә эшләне. Көҙ көнө хеҙмәт көнөнә тейешле икмәк бүлгәндә бойҙайарыш-борсаҡ ҡапсыҡтары тейәлгән ылау иң әүәл Динәләр ҡапҡа төбөнә килеп туҡтай. Йылға алты йөҙ илле хеҙмәт көнө эшләү күп кенә механизаторҙар ҡулынан да килмәй. Башҡалар өй түренә ике-өс йәймә йәй ә, Динә үҙ өлөшөнә тигән яңы ашлыҡ бөртөгөн алты-ете йәймәгә ибеп киптерҙе. Бөртөктәр өй түренә йыйылған ҡояш йылы ында көн эсендә кибә. Кәбәктәрен елгәргән саҡта әсә е Фазылға ыҙғырып торорға ҡуша. Хоҙайҙың рәхмәте, етемдәр ыҙғыр а, бөркөү көндө лә ел сыға... Динә бөртөктәрҙе силәктәргә тултырып, йәймәләргә ҡоя. Фазыл ыҙғыра ла ыҙғыра, әсә е елгәрә лә елгәрә... Оҙаҡ итеп, еренә еткереп, күршеләр алдында маҡтаныр өсөн түгел — ғорурлығын, ҡыуанысын тыя алмайынса...

Әллә артыҡ йыш өйләгәнгәме, егерме беренсе йылғы аслыҡ, уғыш йылдарындағы ҡытлыҡ тура ындағы фажиғәле хәтирәләргә балалар ҡолағы күнекте... Улар хәҙер, колхоз икмәгенә риза булмайынса, ҡала күмәсе орайҙар. Атайлы балалар ҡулында алма-хөрмә күреп ҡайтҡас, өйҙә зарланалар, әсәйҙәренең йәненә тейәләр.

Алма менән хөрмә Шәле баҡсаларында үҫмәй, Шәләлә гөл ауыттарында ла картуф үҫә. Ә алма-хөрмә — ҡала емеше.

Динә Ҡазанға картуф атырға китте.

Баҙарға яңы картуф сыҡҡансы, урамдағы баҙҙа ҡыш сыҡҡан иҫке бәрәңгене оҙата ы бар.

Шоферҙар ҡапсыҡҡа илле тин ала, шуға күрә Динә ун ҡапсыҡҡа ыйырлыҡ картуфты биш кесерткән ҡапсыҡҡа тултырып, күтәреп тейәргә яйлы бул ын өсөн ауыҙын ике ҡолаҡлап текте.

Хәйҙәр күрше Ямалыйҙарҙан арба алып сығып екте. Тейәгәндә Хәйҙәр ҡапсыҡтың төбөнән, ә Динә ҡолаҡтарынан күтәрҙе. Фазыл дилбегә тотоп торорлоҡ малай ғына ине. Картуфтарҙы ел тирмәне янына мендереп ҡуя ы — унда иртәнге етеләргә Ҡазандан брезент кузовлы такси килеп ала. Ул машинаға Шәленең бөтә кеше е лә ыя, буғай, — “Ҡазанға бара ы ине” тигән берәүҙе лә ҡалдырмай, тынҡыслап тейәп, Чех баҙарына бушата. Хәйҙәр үгеҙенең ел тирмәне тыҡрығына боролған минуттан Фазылдар әсәйҙәренең Ҡазандан бәрәңге атып ҡайтҡанын көтә башлай. Гүйә, Чех баҙарының буяулы иренле, кершән битле, алҡа ҡолаҡлы, капрон сыраҡлы, парса күлдәкле ҡылтым түтәйҙәре Шәле бәрәңге ен ел тирмәне янына килеп ҡаршы ала.

Аға ы менән апа ы мәктәптән ҡайтҡас, йәрәбә — өйҙөң өс тәҙрә ен бүлешәләр. Нисә тапҡыр ал аң да, шыбағаның яуабы бер: колхоздың гараж яғына ҡарай торған тәҙрә ағай кешегә эләгә, апай кешенең тәҙрә е — клубҡа йөрөй торған урам яғына. Ә инде Фазылға, ғәҙәттәгесә, ишек алды тәҙрә е ҡала. Аға ы аҡ ҡалас,

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 115



апайы ҙур алма, Фазыл әсә ен генә көтә. Урамда трактор тауышы ишетел ә йә ат кешнә ә, ис юғы үгеҙ мөнрә ә лә, өс бала шунда уҡ үҙ тәҙрәләренә ябырыла. өйөнөслө хәбәрҙе кем иң алдан әйтә?!

— Әсәй ҡайтты!!!

Көн айын, сәғәт айын яңғыра а ла ялыҡтырмай торған, өйөндөрә әм кейендерә торған, шуҡландыра әм туҡландыра торған тан ыҡ әм игелекле хәбәр был.

Динә, өйгә кереү менән, юлдан ҡайтҡан кейемдәрен алырлыҡ хәл алғанса тип, туп аға ултыра.

— Эт булдым, балалар... Картуф ауыр үтте, ике кило ына егерме биш тин генә бирәләр. Бер ҡапсығын тотош алма алар, Хәжәр апайығыҙҙа ҡунып ҡала инем... Йомортҡа әйбәт үтә... тауыҡ оя ын борсомағыҙ, йөҙгә тултырып бул а, тиҙ генә Питрәч аша барып ҡайтырмын. өт әйберен дә ябырылып алалар. ыйырлы кешенең эше рәхәт, исма ам. Ат шишмә енә ыуға килгән ише генә Ҡазанға килеп керә лә беҙ бер ҡапсыҡ картуф бушатҡансы, ике күнәк майын-эремсеген атып бөтөрә... Атайығыҙ мәрхүм, ауыр тупрағы еңел бул ын, ул барған ергә мин дә бара ы, уңғы ыйырҙы ла уйып ашап ҡараны, терелә алманы... Хәйерсе тейәп ҡалдырҙы.

Динә бытылдай тора, балалар Ҡазандан ҡайтҡан биштәрҙе аҡтара тора. Өй эсенә күрше апайҙарҙы ыйлар өсөн күстәнәс итеп алынған ыҫланған балыҡ еҫе, мәк ибеп бешерелгән аҡ күмәс әм сәйнүк тиклем ҙур алма еҫе тарала. Нужа тигәнең төн уҙғансы ғына өй эсенән сығып тора.

Динәнең ҡаланан картуф атып алйып ҡайтыуы "ах-ух" булып ике-өс көнгә уҙылыр ымаҡ, тик быға ваҡыты, иркәләнеп ултырырлыҡ яйы ғына юҡ. Ҡала баҙарында үткән эш көнө өсөн бригадир Мөхәммәт былай ҙа Динә тирә ендә тамаҡ ҡырғылап йөрөр әле. Динәне күргәс, уның гел тамаҡ төбө ҡысыта башлай. Ҡара ҡайыш сумкаға йәшереп алып килгән өс литр ыраны тарантасының алғы ултырғыс аҫтындағы бесән вағына күмеп ҡуйғас ҡына, Мөхәммәттең тамаҡ ҡырыуы бөтә. Ғөмүмән, Сәләхийе үлгәндән бирле Динә тирә ендә тамаҡ ҡырғылаусылар күбәйҙе. Хөрши Фәрзетдине, Мөхәрләм Әхмәте, Ишем Нәғиме ти еңме, бары ы ла, Динәнең бикле ҡапҡа ын астырып, тамаҡ ҡыралар. Шөкөр, ҡулдарына банкы менән ыра сығарып тотторғас, ниңә тамаҡ ҡырғандарын оноталар үҙҙәре. Онотмаҫ инең, өс минуттан: "Әсәй, ин ҡайҙа, ниңә кермәй ең инде",— тип өс бала килеп сыға. Динә үҙе балаларын орошҡан булып аҡлана:

— еҙгә рәхәт. Утынығыҙ ҡайтҡан, баҡсағыҙ ҡаҙылған, оноғоҙ тарттырылған. Миңә бөтә е өсөн дә ялына ы. Улар ҡулында машина, улар ҡулында ат... Атағыҙ еҙ үҫеп еткәнде көтмәне бит. аман- аман гона лы булам инде, мәрхүм ҡаршы ында. Иҫкә алыуым сауап бул ын инде...

Тағы шуны ы сәйер: Шәлелә яңғыҙ, тол ҡатындар, ултырған ҡыҙҙар быуа быуырлыҡ. Тик шулай ҙа иренән өс бала тотоп ҡалған Динәгә яусылар өҙөлмәй... Динәнең ризалығы юҡ, үгәй ата ҡулында үҫкәнсе, етем үҫ ендәр, ти ине ул.

Ғәйбәткә ышанып, берүк яңылыша күрмәгеҙ, Динә ҡапҡа ын шаҡыған әр хәсискә ыра сығарып тоттормай. Ферма мөдире Ғәйзулла ишеләргә тәтемәй ул ыра. Сөнки Ғәйзулла ҡулында ат та, трактор ҙа юҡ, сөнки Ғәйзуллаға ыра ғына кәрәкмәй. Утыҙҙан уҙған, ҡырҡҡа етмәгән Динә ылыу кәүҙәле, көрәк- әнәкураҡ ише нәмә ҡулынан төшмәгәнгәме — иңе ныҡ, тәнгә тығыҙ ине. Өҫтөнә бишмәт кей ә лә, септә бөркән ә лә, биле уйылып торор. Ир ҡайғы ынан сөм-ҡара сәсе ағарманы, бит алмаларына иннектең кәрәге булманы, өҫ-башын көн айын алыштырыр, колхоз эшенә лә кершәндәй аҡ яулыҡ бәйләп йөрөр.

Фазыл Хәйҙәр аға ы төҙәтеп биргән сананы өйрәп, пилорам тирә енә юнысҡыға килә. Ауыл ҙур булғас, пилорамда эш өҙөлмәй. Эстә таҡта яралар, юналар; рамдар, ишектәр я айҙар. Ә тышҡы яҡта бура бурайҙар. Балта оҫталары бүрәнә баш-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 116



тарын, бура таптарын үҙҙәренә айырып  өйәләр. Ә вaҡ  юнысҡылар Фазыл кеүек йәтимдәргә ҡала. Көн  айын ике-өс  сана алып ҡайтҡас, Динәнең аҙбарына  юнысҡы тау булып өйөлә. Ҡабыҙғылыҡҡа, ҡоймаҡ, көлсә бешерергә бына тигән ваҡ утын был. Динә Ҡазанға  картуф   атырға барырға бул а, Фазыл бигерәк тә тырыш балаға әүерелә. Ике сана юнысҡы алып ҡайтҡас, Ғәйзулла ферма ына  ыйырҙар аҫтынан ҡоро килеш сыҡҡан  аламға китә. Фазыл уны тиреҫкә тип ташланған  әнәк менән тарап  йыя.

Бер көн шулай, ҡышҡы кистә, Фазыл әсә енең рәхмәтен ишетергә теләп, Ғәйзулла ферма ына  аламға китте. Урамдағы  ыуыҡ егерме градуслап булыр.  ыйыр тире е шаҡайып ҡатҡан,  аламын тарап алыуҙары еңел түгел. Сананы тултырыр өсөн Фазыл бер сәғәтләп ыҙаланды. Ни айәт,  алам   өйөмөн кәзә арҡаны менән тарттырып,  әнәкте бау өҫтөнә ҡаҙап, сананы өйгә  өйрәмәксе ине, ғүмерҙә булмағанды, Ғәйзулла килеп бәйләнде.

— Кем ҡушты  иңә?— ти был, сана бауын ҡулына алып.

— Ҡушманы,  тиреҫ бит ул, барыбер сығарып түгә е.

— Ҡырға түккәс ашлама була ул.

— Баҡсаға  алам сәсмәйҙәр бит?

— Баҡсаға сәсмәйҙәр, ә ҡырға   алам да ярай. Етмә ә телеңә  алынып маташа - ың.  аламыңды сана ы менән конфисковать итәм.

— Бер литр  ыра алып киләйемме?

—  ыраң үҙеңә бул ын, хәйерсе тәре. Мин брага эсмәйем, ашҡаҙанды боҙа ул! — Ферма мөдире  аламды бушатып, Фазылдың сана ын ҡарауылсы өйөнөң соланына керетеп бикләне. Үҙе ҡайтып киттеме — күҙҙән юғалды.

Киске   ауым бөткән мәл. Фермалар ябыулы.  ыуыҡтың градусы арта. Ауыл эсендә, йылыныр өсөн генә,  бәйҙәге эттәр өргөләй. Эңер-меңер ҡуйыра төшкәс,  алҡын тынлыҡ йәнгә   үтеп керә икән. Әллә керпектәренә, ҡаштарына ҡунған бәҫтәре иреп аға, әллә күҙ йәше – Фазыл үҙенең  илауын   иҙмәне... Ямаулы бейәләй аша иҫке  быйманың шахта калушынан, сепрәк тышлы бүрегенең ҡолаҡсынынан, өсөнсө йыл мәктәп профсоюзы бүләк иткән бушлатынан үтеп кергән  алҡындар бергә  ҡушылып бөтә тәнен ҡалтырат а ла, Фазыл  уны туңыуға  анаманы, Ғәйзуллаға булған асыуҙан, сана ыҙ- әнәк еҙ ҡайтып кергәс әсә енән әләгәсәк ороштан   әм үҙен яҡларҙай ата ының  юҡлығына хурланыуҙан өшөйөм, тип аңланы.

Ғәйзулла китмәгән икән әле. Ул ҡарауылсы өйө янындағы  бағананың лампочка ын  үндерҙе. Ҡараңғылыҡ кинәт килеп төшкәндәй ҡотто алды.

— Бар, ҡайт өйөңә! Әсәйең кил ен санаңды алырға. Бар, бар, йә ҡатып үлер ең! Әсәйеңә әйт, Ғәйзулла  ағай көтә, тиген!

Фазыл бейәләй ямауы эсендәге  бар йылы ын өрөп  үҙ еҙ баҫып торҙо. Ғәйзулла уны төртөп ебәрҙе.

— Бар, тиҙәр  иңә, хөрәсән!

Юҡ, Фазыл был ферма хайуанына әсә ен әрәм итергә теләмәне. Бының  ише кешеләргә алдаш аң да ярай ине, изгелек хаҡына, нәфрәт, кәм енеү хаҡына.

— Әсәй өйҙә юҡ. Ҡазанға ҡуна китте.

Ҡурҡыуы бушҡа булды Фазылдың. Динә ҡараңғы кистә буш сана  өйрәп ҡайтҡан малайын туҡмаманы, аҙағынаса тыңлағас, ҡырыҫ ҡына әйтеп ҡуйҙы:

— Беҙҙең яҙмышыбыҙ ошо, улым!— Әсәй кешенең йыуатыу  үҙе ине был...

***

— Әсәй, нисә көнгә ҡайттың, тип  орамай ың?

— Беҙ был өйҙә ҡунаҡ ҡына  инең  менән. Сәғәҙәт апаңдар килеп, бөгөн  ти ә бөгөн ҡыуып сығара ала. Ишек асылған  айын бына килеп керерҙәр, әйберҙәрен килтererҙәр кеүек. Уларҙың урындары түбәндә, өйҙәренә  йыл  айын  инеш керә.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 117



Өйөбөҙ бейектә ине...

— Әсәй, әйҙә сәүиткә барайыҡ та договорҙы йыртып ташлайыҡ. Сәғәҙәт апайҙың аҡса ын кире ҡайтарайыҡ.

— Ауыл кеше е бер әйттеме — шуның менән амин инде ул. Ҡалала судлашып йөрөүҙәр барҙыр. Гәрсә ауыл кеше е ике төрлө өйләшмәй.

— Әгәр тағы берәй аҙна уңлап... өйгә ҡайтып кер әм — ин юҡ, хужа булып сит кешеләр ығы-зығы кил ә... йөрәгем ярылыр ине.

— Бер аҙна ын белмәйем. Бөгөн ин ҡайтма аң, Хәйҙәрҙәргә инеп йоҡлар инем.

— Инде нишләйек, әсәй?!

— Алып китерҙәй нәмәләрҙе барлап сыҡ.

— Нимәне, ҡайҙа алып китәйем?! Вагонда өйрәп йөрөргәме?

— Мин дә бер әйбер алмайым. Ҡулыңдағы төйөнсөгөң дә Үзбәкстанға саҡлы барып еткәнсе алтын хаҡына төшөр.

— Ниңә ул тиклем йыраҡҡа олағырға, әсәй? Әйҙә, минең менән.

— Үҙең әйтмешләй, вагонында өйрәлеп йөрөргәме?

— Әсәй! Ҡазанда фатирға урынлашып торорбоҙ. Түләрлек кенә аҡса эшләйем бит мин.

— Нимә уң ул аҡса?! Кеше фатирында бикләнеп ятайыммы? ин хәҙер ни ҡала малайы, ни ауыл малайы түгел. Ҡыр малайы ин хәҙер.

— Әсәй, Шәле малайы мин, Шәле малайы!

— Юҡ инде, улым, киттең ин ауылдан. Бөтөнләйгә китеүең ошо. Бер киткәс, кире ҡайтыр өсөн ағымға ҡаршы йөҙөргә кәрәк.

— Улай а, ниңә ин китә ең, әсәй? Бүтән Шәле юҡ бит был донъяла!

— Кәүҙәм әйләнеп ҡайтыр әле. Өс бала үҫтереп, гүремде ситтә ҡаҙытмаҫтар... Әсә кеше бала үҫтергән бишек кеүек кенә ул, балаларың осоп киткәс, бишектең кәрәге ҡалмай.

— Улай тимә, әсәй! Беҙ үҙебеҙ етем үҫ әк тә, ин етем түгел, әсәй, инең өс таянысың бар...

— Таяныстар аяныс... Ауырып йығыл ам, вагонынды телеграмма менән дә ҡыуып тоторлоҡ түгел.

Эйе шул, Динәнең кәүҙә е әйләнеп ҡайтманы. Шәле зыяратында уның ҡәбере юҡ.

***

— Үлгәс, Шәле зыяратына илтеп күмер егеҙ, тип васыят яҙып ҡуйыр ығыҙ шунан... — Хәмдиә тынлыҡты боҙоп, үҙ ҡушты тағы.

— Эйе шул. Ҡайҙан белдең?

— Киткән кешеләрҙең күбе е Шәлелә күмелгән. ин лутсы зыяраттан әллә ни йыраҡҡа төпләнмә. Үлгәс мәшәҡәтең аҙыраҡ булыр. Ана, ТатЦИК ауылында яңы урам өсөн ер бүләләр. Колхоз үҙе тарҡал а ла, идара ы иҫән әле, ауыл Советы менән ике е исеменә берләштереп ғариза яҙып бир.

... Ҡояш байығандан бирле ел иҫә ине, кинәт тынып ҡалды. Төн ҡараңғылығына баш осондағы болоттар ҡара ы ла ҡушылған, юҡ а инде офоҡтоң Туғаш болоно менән киҫешкән ерендә таң нурҙары шыта башлар ине. Фазыл көтөүселәрҙән ҡалған ҡалай кружка менән эс бошҡандан ғына ыу эсеп ҡуймаҡсы ине, шишмә сихырынан ҡотола алманы...

— алҡын тейҙермә тағы, төнө былай ҙа дымлы.

— ай, Хәмдиә. Мин ыу эскән шишмәләрҙең алҡынлығын бел әң... быны ы йылы сәй кеүек кенә.

— Шулайҙыр инде... Шишмәләр тирә ендә ҡыҙҙар менән айрашып, яңғыҙ башыңа иллене тултырған ың. әр кешенең яратҡан шишмә е бер генә булырға тей-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 118



еш.

— Минең яраткан шишмәләрем бихисап! Утыҙ йыл эсендә өс йөҙҙән артыҡ ауылда артезиан шишмә ҡаҙып киттем... Быраулап бөтөрә ең, насосты тәрәнгә төшөрә ең, утты тоташтыра ың да ҡом сәғәтенә ҡарап көтә ең. Баштараҡ балсыҡ боламығы бәреп сыға, әкренләп ыу фонтаны яҙғы инеш төҫөнә керә, инеш ай-ыртҡан өт менән алышына, өтлө ыу әкренләп яҡтыра башлай... әм, ни айәт, ысыҡ бөртөгө ымаҡ саф шишмәгә әүерелә. Уны иң беренсе булып ин эсә ең... Ул шундай алҡын, шундай татлы, шундай ҡәҙерле — эш бөткәс ул шишмәне ташлап китеүҙәре яман ыу!!!

— Әллә үпкәләнең?

— Юҡ. Гел ыу тура ында өйләнә торғас, ана, ямғыр ибәләй башланы. ин ҡайт өйөңә. Таң атҡансы ҡайҙа йөрөнөң, тип бәйләнерҙәй кешең юҡ. Ҡайт та йоҡла.

— Ә ин?

— Мин — ҡыр кеше е. Ҡырағай ат шикеллерәк. Йүгән кейҙертмәйем, аҙбарға кермәйем, ҡулға эйәләшмәйем. Иректә йәшәйем.

— Ниткән ҡырҙа йәшәү, ти, ул, үҙ ауылыңа ҡайтҡас?! Хәҙер үк беҙгә китәбеҙ.

— Юҡ. Тире йыйыусы малайы алған нигеҙҙә ышыҡланырға теләмәйем. Юл са-тындағы йәшел вагонды хәтерләй еңме? Әйҙә, шуны асып керәбеҙ — бына тигән ҡыуыш.

— Эй, Хоҙайым, кеше күҙенә салынма аҡ ҡына ярар ине. Ире үлгәненә ете йыл да юҡ, ирҙәргә эйәреп йөрөй, тиерҙәр, Аллам аҡла ын!

Йәшел вагон янына килеп баҫҡас, Хәмдиә яурынындағы биҙрә көйәнтә ен ергә ҡуймай торҙо. Фазыл и ә, үҙ вагонын үҙе танымағанға алышып, тәҙрәләрҙән үре-леп ҡараны, тәгәрмәстәренә типкеләне әм, кеҫә енән асҡыс бәйләме сығарып, берәм-берәм йоҙаҡҡа тығылған булды. Ә инде ете- игеҙ асҡыстың бере е йоҙаҡҡа ярап, вагон ишеге ҡапыл асылып киткәс, эй өйөндәләр икәүләп, эй өйөндәләр... Вагон эсендә көндөҙгө ауа бүленеп ҡалған. Урын-ер бөхтәләп йыйыштырыл а ла, гараж еҫе килә, шуға күрә вагон эсе өй бүлмә енә оҡшамаған.

— Сәй ҡуйып ебәрәйемме, Хәмдиә?

— Нисек инде?!!

— Тумбочкала стакандар бар, шәкәре, ҡашығы ла шунда. Ана, теге биҙәкле ҡапсыҡта тәм-том. Самауырыбыҙ ғына ҡоромло — паяльный лампа менән ҡай-ната торған.

— Был вагон инекеме?— Хәмдиә күҙҙәрендә ағайыу осҡондары уйнаны.

— Урланған түгел.

— Мине алдап алып инмәнеңме? Үс алырға шаҡтай ныҡ әҙерләнеп ҡайтҡан-ың!

— Ниндәй үс?!. Ҡатын-ҡыҙ менән уғышып йөрөмә әм, бөткән, ти, минең эш. Әгәр кафе янында яңылыш осрама аң, әле күрешмәйенсә лә ҡала инек. Бик шөрлә әң, әйҙә, ямғыр аҫтына...

— Ярар инде, урланған вагон түгел, тинең. Көн асылғансы түҙермен.

Тел остарын өтә-өтә ашығып зимагур сәйе эсеп, тәнгә өй йылы ы еңгәс, түбәләге ямғыр шыбырлауы көсәйгәндәй тойолдо.

— Миңә серем итеп алырға кәрәк. Көнө буйы тыпыр-тыпыр аяҡ өҫтөндә. Ял итмә әм, аяҡ ыҙлар. ин телә әң нишлә.

— Урын етерлек: өҫтө – ике, аҫты – андыҡ. Кәрәк ә, ана, аҡ йәймә бар...

— Эйе, сисенеп тә ята ы түгелме тағы... Оло юл өҫтөндә, Шәленең аяҡ осонда... Мендәрен алам... Ә ин телә әң нишлә!

— Плащыңды кейеп йоҡлама аң инде...

— Шунан күлдәкте генә сисә е ҡала. Ҡуй ҡом сәғәтенде, биш минуттан уятыр -

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 119



ың.

Ҡом сәғәтенең ҡомо ағып бөткәс, вагон эсендә ваҡыт туҡталып ҡалды.

Фазыл, ҡаршы яҡтағы икегә ҡырын ятып, Хәмдиәне күҙәтә: ошо кеше өсөн ҡасандыр үлергә лә әҙер инең ин, егет! Ана, плащ ҡапланған баҙар ҡапсығы кеүек ята инең мөхәббәтең! Күҙен йомғас та йоҡлап китте... Йөн ойоҡ менән кейгән алты ярымлы балтырлы галошын да алманы ғәзизең. Ойоҡ балтырына арыҡ йөнөнән иләп бәйләнгән гамажының балаҡтарын ҡыҫтырған. улыш алғанда унын кәүҙә е өрөлөп, ҡаранғылыҡ эсендә тағы ла шыҡ ыҙланып ҡала. Күк күкрәүе ишетелмә ә лә, йыраҡтағы йәшен яҡтырыуы ҡара-ҡаршы уйылған ике тәҙрә аша үтеп йөрөй — вагон эсен әр еҙ фотограф кеүек туҡтау ыҙ яҡтырта — ғүмер буйы хыялланған ошо күрешеү минуттарын рәсемгә төшөрөп алырға теләй, гүйә. Фазылдың йоҡо о ҡасты, ул үҙен бөгөнгө кистә тағы ла бер иң изге кеше енән етем ҡалғандай хис итте. Беренсе мөхәббәтем тип, тормош шауҡымынан йәшереп, хәтирәләрҙең иң изге йылдарында аҡлап йөрөткән етмеш ете илдең хан ҡыҙына алыштырғы ыҙ, иҫкә төшөргәндә, күҙ алдына килтергәндә бәғерҙәре ыҙланып ағынырҙай Хәмдиәне юғалтты. әм йәшлектең иң гүзәл осоро, кинәт уңып, төҫ өҙләнде, йылдар теҙмә енең күҙ яуын алырҙай биҙәктәре ҡойолдо, яҙмышының өйөнөслө осоро көйөнөс менән алышынды. Хәмдиә бер ҙә үҙгәрмәҫ, утыҙилле-йөҙ йылдан уң осрат аң да, ул әле аман мәктәптең "Отличник" тигән маҡтау таҡта ындағыса күрән күлдәк өҫтөнән ҡанатлы аҡ алъяпҡыс япҡан, күкрәгенең иң изге еренә комсомол значогы ҡаҙаған, оҡланыулы күҙ ҡарашына бөтә йы анды ыйҙырған ҡыҙ бала булып аҡланырға тейеш кеүек ине...

Хәмдиә, Фазылды үртәгәндәй, Шәлене әйләнеп үткән болот дөбөрҙәүҙәрен ҡайтарып ғырылдай башланы. Ул ба адирҙар йоҡо о менән йоҡлай, көн асылышына, нужа ҡамытына егелергә көс йыя.

Яҙғы ямғыр ырҙын табағына борсаҡ бушатҡандай бер шыбырҙап алды ла тынды. Хәмдиәнең ғырылдауы йырағайҙы. Йәшен яҡтылары таң нурында иреп юҡҡа сыҡты.

Фазыл өҫтәлдәге ҡом сәғәтен әйләндереп ҡуйҙы ла, вагон ишеген әкрен генә асып, аусы бесәй кеүек ағайып, ергә төштө. Урман эсенән иртәнге ел менән үлән сәйе еҫе килә. Юл ситендәге уҙған йылғы уҡмаҡтарға түңәрәк, уҙынҡы, ваҡ-ваҡ әм китек көҙгөләр ымаҡ ләйсән ямғыр күләүектәре ибелгән. Ул көҙгөләргә ҡара а, бәлки, Фазыл да инде мәктәптән асығып ҡайтҡан Сәләхи малайы түгелдер. Нишләтә беҙҙе ваҡыт тигәнең... Йәшләй ҡауышып, тигеҙ ғүмер итеп, бергә ҡартай аң ғына иҙелмәйҙер ул киҫкен үҙгәрештәр. Яҙмышҡа парлашып эйәләшергә кәрәк.

## IV. Әлфинә

Кеше ҡартаймай, бары тик ул йәшәй торған мөхит кенә йәшәрә... ...Машинанан төштөң дә юл бөттө, тип уфтанырға ярамай икән. Хәмдиәнән уң ис кем күҙгә күренмәҫ, тип а ороуҙар ашығысыраҡ булған. Ҡыҙҙарға Хәмдиәнеке төҫлө оҙон ҡара толом ғына түгел, ҡыҫҡа сәс тә килешә әм унын сөм-ҡара булыуы Әлфинә өсөн бөтөнләй мәжбүри түгел — арғылт төҫ тә бик тәбиғи уға. Заманында, Хәмдиәгә оҡшатырға теләп, Фазыл бөтә ҡыҙҙарҙың күҙен ҡарағат ҡараына буяп сығырға риза ине. оро күҙле ҡыҙҙар ҙа бик өйкөмлө икән.

... Фазыл әкрен генә Әлфинәнең ҡулынан тотто... Ҡош тотҡаны бар унын — асыҡ тәҙрәнән вагон эсенә килеп кергән иртмә ҡойроҡто тотҡаны бар. Усындағы ҡошто нығыраҡ ҡыҫ аң — үлә бит ул, әгәр инде усынды ҡыҫырға ҡурҡ аң, бармаҡ ара ынан шыуып сығып осоп китә. Бына шундай минуттар был! Әгәр ҡулын ебәр әң, Әлфинәне ата ы Самат ағай алып китер кеүек, ә инде ҡыҫыбыраҡ тот аң,

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 120



яуыз ниәтле ирҙәрсә дорфа килеп сығыр.

Улар көндөҙ игене уғылып, әле алам сүмәләләре теҙелешеп баҫҡан баҫыу яғына атланылар. Ҡыр иркенлегенән йән ҡанатлана, иген еҫенән ғорурлыҡ арта, баш осондағы аяҙ күк көмбәҙенән йондоҙҙар ҡойолғанда мәрхәмәтле теләктәр теләй е килә.

— Әлфинә, ошо иген баҫыуына аяҡ баҫҡас, иң беренсе нимә күҙ алдыңа килде?

— Иртәгә ырҙынға киске сменаға сығабыҙ. Уңыш әйбәт быйыл. Колхозсылар беҙҙән башҡа үҙҙәре генә эшкәртеп өлгөрә алмайҙар... Ә ин нимә тура ында уйлаған инең?

— Ырымбур далалары күҙ алдыма килде. Ос оҙ-ҡырый ыҙ иген баҫыуҙары!

— Нишләп йөрөнөң унда?

— ине эҙләнем!

— Был үҙҙәренде атай ишет ә әле!

— Ниңәлер мине үҙ итмәне атайың, эйеме?

— әй, бөтә егеттәремә лә шулай ҡырыҫ та ул. Беҙҙең районда оҙаҡ эшләр егеҙме икән, Фазыл?

— Ул тиклемен үк белмәйем. Беренсе аҙнамды ғына эшләйем әле мин. Мастерыбыҙ Ҡазанға ҡайтып китте, ниндәй хәбәрҙәр менән килер...

— Улай а, ин әле ауыл айын ҡыҙҙар өйөп өлгөргән кеше түгел? Атай әйтә...

— Тағы нимәләр ти?

— Атай әйтә: Ҡайынлыҡта ыу сығара алмағандар, ти.

— Быны ына ла яуабым юҡ, Әлфинә.

— Тағы ҡасан килер ең икән?

— Иртәгә үк, йәйәүләп.

— Әйттем бит, Фазыл, иртәгә киске сменаға ырҙын табағына сығабыҙ. Урыпйыйыуҙар бөткәс килер ең, йәме! Унда уҡыуҙар башлана... Беренсе сентябрҙән уң уҡытыусылар беҙҙе клубҡа йөрәтмәй... Шулай итеп йәйге каникулға саҡлы... Алла ҡуш а, сығарылыш имтихандарынан уң күрешербеҙ.

— Ул ҡәҙәр түҙә алмам. Тиҙерәк күргем килә ине.

— Бына күрешеп торабыҙ бит, күрмәй еңме ни.

— Күрмәйем, Әлфинә... Дөм-ҡараңғыла ла танырлыҡ итеп туйғансы күреп ҡалғым килә.

Фазыл, гөлгә ҡунған күбәләкте тоторға теләгәндәй, аҡ ҡына, әкрен генә ҡыҙҙың беләгенән тотто.

— Их, был беҙҙең унынсы, йөҙөнсө осрашыуыбыҙ бул а, Әлфинә?!

— Нишләр инең?

— Арабыҙға ел ыймаҫлыҡ итер инем.

— Мин мәктәп бала ы ғына әле, Фазыл!

— Үҫкәс миңә эләкмәҫ ең шул ин.

— Уны ы инең үҙеңдән тора инде.

— Килә е йәйгә саҡлы күрешә алмайбыҙ, тигәс.

— Бөгөн яйын таптың бит. Ауылдан сығып ҡасмайым да мин, тағы яйын табыр ың. Бик күрә ең кил ә...

— Ә ин үҙең, Әлфинә? Килеүемде теләй еңме?

— Әгәр кил әң, Аҡҡүҙ шпаналарынан ҡасҡан төҫлө ҡасышлы уйнамам. ин мине бик еңел табыр ың, Фазыл... Хәҙер мине ебәр, йә атай эҙләп сығыр...

— Оҙатып ҡуям.

— Юҡ, Фазыл! Беҙҙең ауылда мине ҡурҡытырлыҡ кеше тыумаған әле. ау бул. Иҫән- ау ҡайтып етегеҙ. ине үҙебеҙгә ҡунырға саҡырыр инем дә, өйөгөҙҙәгеләр ҡайҙа киткәнеңде белмәй ҡалғандарҙыр... Мин киттем.

Әлфинә китте әм, үҙемдә аҡлармын тигәндәй, Фазылдың ярты йәнен үҙе менән алып китте, гүйә. Ярты-йорто килеш нисек йәшәмәк кәрәк?..

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 121



Төнгө сәйәхәттән уң, йоҡолары туйып уянғас, хеҙмәт дуҫы Мәдиәрҙең беренсе үҙе үк Фазылдың асыуын ҡабартты.

— ыу эске килә...

— Биҙрәлә бер тамсы ыу юҡ.

— Ҡайынлыҡ ҡойо она барып кил әле, Фазыл.

– Күрҙем мин ҡойоно. Биш-алты көйәнтәне сиратҡа ҡуйғандар ҙа, әбейҙәр биҙрә өҫтөндә, ҡул эштәрен тотоп, аран ҡойолған ыу арҡҡанды көтөп ултыралар. Бик ашыҡҡандары ыуҙы ләме-ние менән тултырып, өйгә ҡайтҡас тондороп эсәләр, ти.

— БыҒаса нисек ҡырылып бөтмәгәндәр уң улар ыу ыҙ?

 уңғы ике йыл эсендә ямғырҙан башҡа ыу рәхәте күрмәгән Ҡайынлыҡ халҡы өсөн ғәжәйеп тамаша ине был: салт аяҙ июль селлә ендә ауыл урамына гөрләүек бәреп керҙе. Ул, шишмә енән ҡасҡан тулҡын кеүек, ашығып, юлында осраған бөтә туҙанды йыуып, машина тәгәрмәстәре эҙе буйлап ағып, хәл еҙ инешкә ярҙамға ашыҡты. Ҡайышланып ҡатҡан урамдағы туҙан онон бер ҡат йыуып алғас, әлеге гөрләүек күҙгә күренеп таҙарҙы. Ҡаҙҙар... Ҡаҙҙар дәррәү күтәрелеп, гөрләүектең оя ын күрергә теләгәндәй, быраулау агрегаты янына йыйылдылар. Ә унда — скважинанан фонтан булып ыу бөркөлөп тора. Ҡаҙҙар, бер-бере ен бүлдерә-бүлдерә, Фазылды әм уның иптәше, быраулаусы Мәдиәрҙе маҡтанылар. Ҡөҙрәттәренән кил ә, шланг башынан үрелеп ыу эсерҙәр ине лә, ләкин фонтан шауы ҡаҙҙарҙы шөрләтеп, ғәйрәттәрен тыйып тора. Фазыл бала сағынан уҡ, ике аҫтында ояла ултырған ҡаҙҙың серек бүрәнә аша баш тығып ҡысҡырғанын күргәндән бирле, әлеге ҡоштарға үпкә аҡлап йөрөй ине. Хәмдиә менән айырылышыуҙа ҡаҙҙарҙың да ғәйебе бар кеүек тойолдо уға. Баҡти әң, ҡаҙҙар киләсәктә уның өсөн Әлфинәнең барлығын белгән икән...

— Егеттәр, еҙ ҡаҙыған ҡойоноң ыуы бөтмә ен! Бөтмәҫме, егеттәр?!— тип геүләште халыҡ.

Мәдиәр ҡом сәғәтен ҡырлы стакан урынына ҡуйҙы. Бер бүлемдән икенсе бүлемгә ваҡыт ағышы булып ҡом ибелә башланы.

— Скважиналағы ыуҙың күплеге ошо сәғәт менән үлсәнә инде. Насос эшләйме – эшләй, ҡомо ҡойоламы — ҡойола, ыу ағамы — аға! Торба эсендәге ыуҙы погружной насос ике генә төкөрә. Әгәр ер аҫтындағы шишмәгә юлыҡ аң — ыу мәңге бөтмәй.

Мәдиәр ҡом сәғәтен тағы... тағы... тағы әйләндерҙе. Ә ыу аға ла аға...

— Ә дебеты ҙурмы?

—Ҡыҙыл насос төшөрҙөк, сәғәтенә 16 тонна бирә торғанды. Биш сәғәттән бирле аға.

Фазыл Хәмдиәнең донъя тултырып хырылдауына бераУыҡ күнекте. Ә уйҙары әүетемсә генә тағы Әлфинә тарафына юллана...

— Әлфинә, әйҙә, буровойға. Йәшел вагон өйөбөҙ булыр. Таң атҡансы янында булайым. Унда бөтә техника хужа ыҙ ҡалды. ис юғы... ошо кисте... миңә бүләк ит. Әле тағы ҡасан ошолай күрешә алырбыҙ. өйләшә е, аңлаша ы, кәңәшләшә е бар. Әгәр беҙ йышыраҡ күреш әк, ин арабыҙға кеше керетмәҫ инең. Бәлки, вәғәҙәләр бирешер саҡ еткәндер, Әлфинә?! Әйҙә, китәйек Аҡтанышҡа. Мин бөгөнгә осрашыуға боҙло Ағиҙел кисеп, юл ыҙ ҡырҙар үтеп килдем, Әлфинә! Мин хәҙер инән башҡа йәшәй алмаясаҡмын...

Фазыл, Әлфинәнең “юҡ” тигән ҡәтғи яуабы күмелеп ҡал ын тигәндәй, үҙ өҫтөнә үҙ, өйләм өҫтөнә өйләм теҙҙе... Әлфинә ҡаршы өндәшмәне. Фазыл әкрен генә машина ын ҡабыҙҙы, урынынан ҡуҙғалды. Әлфинә өндәшмәне... әм улар Ҡайынлыҡ юлынан аман йырағая барҙылар... Машина ла Фазылға ярҙам итергә теләне, ҡыҙ кире уйлағансы тиҙерәк йәшел вагон янына илтеп еткерәйем тигәндәй, осто ғына. икәлтәләрҙе тойманы, боролоштарҙа икермәне, үр

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 122



менгәндә әкренәймәне, иртән батып ятҡан ҡарлы күлде йөҙөп кенә сыҡты, шыйыҡ бураҙналарҙы ҡанатланып үтте. Инде йәшел вагон фара яҡты ына килеп кергән ине... Әллә тиҙлекте кәметеү яраманы, әллә тағы карбюраторға ыу сәсрәне – машина, ырғылып осҡан еренән бер-ике сөскөрөп, кинәт үнеп ҡалды. Ә яңынан ҡабынғанда тәгәрмәстәр бер урында әйләнә ине.

— Интектермә машинаны, Фазыл. Көн асылғас берәй яйы сығыр әле. Өҫтөбөҙҙән яуып тормай, урыныбыҙ йомшаҡ, йылы.

— Ана ғына бит вагон, ана!..

— Нимәгә кәрәк шул вагон? Тик ултыр машинаңда.

— Вагон — өй ул, Әлфинә! Икебеҙҙең өй!

— Бәләкәй саҡта сәскәле быяла ватыҡтары йыйып, өй биҙәшле уйнай инек беҙ. Ә бөгөн ундай уйындарға иртәрәк әле. Минең уҡып бөтөрә ем бар.

— Оҙон ҡунысла итектәремде кейәм дә ине вагонға күтәреп алып барам.

— Вагонғамы, әллә карауатҡа тип әйтә ең киләме, Фазыл?

— Белмәйем, Әлфинә. Яратҡан кешеләр бер-бере енә ундай тура орау бирергә тейеш түгел.

— Яратыуҙы иңгә-иң терәп ултырып та иҫбатларға була.

Двигатель йоҡом орап ҡына эшләй, аяҡтарға йылы ауа өрҙөрөп тора. Фазыл кабина ишегенә өйәлеп ултырҙы, Әлфинә уға ыйынды. Егеттең ирендәре ҡыҙҙың сәсенә төртөлдө. Ғүмер баҡый йәшәп, хәтереңә уйылып ҡала әм иҫкә төшкәндә ағындырып йәнде тетрәтә торған иң тәмле йоҡо — ошо инде ул. Дөрөҫөрәге, йоҡо түгел, йоҡлағанға абышыу был.

Үҫмер ай ҡыҙ күҙләргә сыҡҡан, Аҡтаныштың баш өҫтөндә үҙенә урын таба алмай, йыраҡтағы өй шәүләләрен нурға күмеп, әле мөрйәгә килеп ултыра, әле өйәңкеләрҙә яңы тормош тергеҙгән ҡарға ояларына килеп ҡуна, унда оҙаҡ тормай — аҙашып йөрөгән ваҡ болоттарға килеп бәйләнә, күҙен ҡыҫып ҡына ерҙәге ғашиҡтарҙың яҙғы ауазын көнләшеп тыңлап тора...

Тәбиғәт, беҙҙән башҡа үҙе генә йәшәгән саҡта, кешеләр тыуыуына алдан ҡанундар әҙерләп ҡуйған. Ана шул ҡанундар нигеҙендә Әҙәм менән ауа үҙҙәренә йәшәү шарттары тыуҙыра башлаған. Бөгөнгө ялған пәйғәмбәрҙәр и ә, тәбиғәттең ошо тәжрибә ен инҡар итеп, әүәл йәмғиәт төҙөп ҡуйыр, шунан уң ғына закондар тыуҙыра башларҙар.

Йән эйә е үҙен кеше итеп тоя башлағас, иң беренсе йәшәү мәғәнә е итеп мөхәббәтте эҙләр. Ғашиҡ кеше өсөн ашау-эсеү, кейенеү, эшләү әм йәшәү ғәме әллә ни мө им түгел. Ғашиҡ кеше ҡауышыуҙы төп маҡсат итер әм кәрәк ә бүтән йәшәү шарттарынан — хатта ғәзиз ғүмеренән дә ваз кисер...

Ләкин!

Ләкин Тәңрем, бизмәнде тигеҙ тотор өсөн, бер тәрилкәгә мөхәббәт ал а, икенсе енә нәфрәт алыр. Берәү ҡауыш а — икенселәрҙе айырыр. Берәү кил ә — икенсе берәү китергә тейештер. Әгәр диңгеҙ өҫтөндә алтын балыҡ күреп палубалағы барлыҡ пассажирҙар бер яҡҡа өйөл ә — ул карап ауып батыуға дусар булыр. Хәлбүки, планетабыҙҙағы барлыҡ кешеләр тотоштан бәхетле, мөлкәтле әм парлы бул а — Ер шары үҙенең күсәрен юғалта. Ер миллиард йылдар буйы тигеҙлеген имен аҡлай алған. Сөнки берҙе бир ә, берҙе алған; берәүҙе ашат а — икенсе берәүҙе ас ҡалдырған, кемдер кейен ен өсөн кемделер шәрә сисендергән; көнгә — төндө, утҡа ыуҙы тәҡдир иткән; бәхеткә — хәсрәт, илауға көлөү инселәнгән...

Тәбиғәт ҡанундарына буй онмайынса, йәшәйеш эҙенән тайпылыу осраҡтары берәм- әрәм генә булған кеүек, бер-бере ен өҙөлөп өйгән ике саф йөрәктең ҡауышып ғаилә ҡора алыуы ла — ирәк күренеш. Туҙғанаҡ мамыҡҡа төрөп йөҙ орлоҡ осора — шуның бары тик бер-ике е генә үҫеп китә ала... Алма сәскә енә меңәрләгән еркә ҡойола — өс-дүрт орлоҡ шытыр...

Яҡында ғына ниндәйҙер сит машина геүләүе Фазыл менән Әлфинәнең “ анду-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 123



ғас йоҡо он” бүлде.

— Вездеход бул а, көсө етергә мөмкин!— Фазыл тәҙрәгә ҡунған алҡын парҙы ус төбө менән өртөп, ишек яңағындағы көҙгөгә ҡараны.—УАЗикка оҡшаған. Ғәлимйәновтыҡы ахры ы.

— Ағаймы? Абау... Ҡайтып әйт ә, атай үлтерә мине...

— Сәғәт киске ете генә бит әле. Тап клубҡа сыға торған ваҡыт.

УАЗик юл ыҙ ерҙә шәберәк йөрөй бит ул — Ғәлимйәнов, Фазылдарҙы әйләнеп уҙып, алға кереп туҡтаны. Ләкин кабинанан ҡатын-ҡыҙ сыҡты.

— Әллә әсәй инде, Хоҙайым!— тип шыңшыны Әлфинә.— Утынды яндыр әле, Фазыл!

Фара яҡты ына табан, ҡыҫҡа балтырлы резина итектәрен балсыҡтан көс-хәл менән йолҡоп, Йәзилә килә ине. Унын башына япҡан махер шарфы муйынына төшкән, сәстәре туҙған. Килә-килешләй Фазыл яғындағы ишеккә йүнәлде был.

— Кемең был инең?— тип ғәжәпләнде Әлфинә, баяғы ғәмде бик тиҙ онотоп.

— Бер кемем дә түгел... Йәзилә бит ул... Беҙҙең бригадирҙың ҡыҙы...

— Ата ы ҡайтып китте, тигәйнең дә. Быны ы нишләп йөрөй, улай а?

— Ҡайҙан беләйем? Ҡазандан юл юҡ килеш нисек бында килеп етә алған, тип аптырап ултырам әле үҙем дә.

— Аптырарлығың барҙыр. Сәбәбе булма а, йә әннәмдән эҙләп килмәҫтәр ине...

Йәзилә, ишек асылып бөткәнде лә көтмәйсә, кабинаға икереп менде, Фазылдың муйынын ике ҡуллап ҡамыт урынына ҡосаҡлап алды ла үкереп илай башланы:

— Мин, ине эҙләп таба алмам, тип төңөлә башлағайным. Бөгөлмәнән вахта ташый торған вертолет менән килдем. Быраулау мастерының ҡыҙы мин, тигәс, алдылар, аҡса ла орамanылар. Аҡтаныштан бик күп кеше ситкә йөрөп эшләй, бынан Бөгөлмәгә, унан Сараға илтәләр, ти. Фазыл! Әхүәлдәр харап бит беҙҙең... өйләшә е бар инең менән. Икәүҙән-икәү генә...

Әлфинә үҙен өсөнсө кеше итеп тойҙо. Кабина ишеген асты — иҙмәнеләр; ергә төштө — күрмәнеләр; Ғәлимйәнов УАЗигына табан китте — туҡтатманылар... Ул арала райком машина ы Фазылдың хыялын алып боролоп китеп тә бара ине инде... Бөгөнгө кистең хәүефен шунда ғына тойоп алды Фазыл. Ул Әлфинә артынан йүгерҙе — аҡ салбарҙары менән тубыҡтан бата-бата, туфлийҙары төшөп ҡалғансы йүгерҙе... Йәшел вагонға Фазыл артынан ҡабаланып Йәзилә килеп керҙе.

—Йәзилә! Нимә эҙләп йөрөй өң бында?! Кем саҡырҙы? ин мине бөгөн ғүмергә буйҙаҡ ҡалдырҙың.

— Юҡты өйләмә лә! өйгән ҡыҙы ташлаған айын өйләнеүҙән ваз кис ә, бөтә ирҙәр яңғыҙ йәшәр ине. Мөхәббәт — уйлап сығарылған кино ғына ул, кемдең фантазия ы көслөрәк — шунын кино ы ҡыҙығыраҡ.

— Ниңә килдең, атайың ҡайтып китте бит Ҡазанға? Телеграф буйынса, ана, миңә аҡса ебәрттергән.

— Ҡайтты ул... ин бит бында...

— Булма асы!

— Фазыл, атайым беҙҙе ташлап китергә уйлай шикелле? Әсәйем шикләнә, әллә ошонда берәй ен тапҡанмы, тип... харап бит беҙҙең эштәр?!

— Күрәҙәсе булма ам да, мин инең атайыңда, Әмир ағайҙа, үҙемдең яҙмышымды күрәм, тик ул минән алданыраҡ бара... Күрә ең, беҙҙең профессияға хас ғәҙәти яҙмыштыр...

— Ниңә улай икән, Фазыл?

— Ана, күрҙең: мине бысраҡ урта ында ҡалдырып китеп барҙы Әлфинә! Ул бит мөхәббәттең үҙе ине.

— Китә е кешенең беренсе көндө үк китеп барыуы әйбәтерәк. уңыраҡ кит ә, айырылышыуы тағы ла ғазаплыраҡ булыр. Мәктәп бала ының холҡо ҡырҡҡа

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 124



төрләнер әле... Ауылдан киткәс, инең кеүек романтик егеттәр күп осрар әле уға... Бына мин атайым иҫән килеш — етем, әсәйем ир еҙ ҡала. өйгән ҡыҙҙарҙы алыштырып була, атай берәү генә.

— Улай а, бөгөн мин ине йыуатырға тейешме?

— Йыуатма! Үҙенде ҡара. Ана, кейемең еүеш, аяғыңа ыу үткән. Аяғыңды эҫе ыуға тығып ултырырға кәрәк. Хәйер, тиҙ генә ҡайнар ыуҙы ҡайҙан алыр ың уны? Араҡы бармы бында?

— Бар! Ана, ике аҫтында... бер йәшник.

— алып ташла туй костюмыңды. Бысраҡ салбарыңды ырғыт — араҡы менән аяғыңды йыуам. Ауырыу егеттең бер кемгә кәрәге юҡ. Мөхәббәт арҡа ында башыңды әрәм итәләрме?! Мөхәббәттән дә көслөрәк наҙ бар әле был донъяла, кейәү!.. Бер стакан тултырып эсеп ҡуйыр ың — эстән йылыт ын. Вагонда ҡабымлығың бармы?

— Барҙыр.

— Хәҙер... Хәҙер, тиҙ генә алып киләм.

***

— Хәмдиә, мин Аҡтанышҡа юл тотам,— тине Фазыл сәсе-башы туҙып килеп уянған ҡатынға. әм, унан бер кем дә орама а ла, өҫтәп ҡуйҙы:— Әлфинә янына.

Уға нисектер еңел булып китте, әйтер ең, ауыр йөктән ҡотолдо, тыны иркенәйҙе.

Йәшел вагонда ул бала сағы, йәшлеге буйлап сәйәхәт итә, үткәндәрен күңелендә әллә тағата, әллә ҡабаттан йыйып йомғаҡҡа урай?.. Хәмдиә, Зөмәйрә, Йәзилә — үткәндәрҙә. Ә киләсәктә? Әлфинә... Бармы ул киләсәк, көтәме унда Фазылды Әлфинә?

... Йәшел вагон Аҡтаныш яғына тәгәрләй. Юл — өмөт ул. Юл — ғүмер ул. Ә вагондағы кескәй өҫтәлдә ҡом сәғәте үҙенең донъяуи ғәмәлен үтәп ултыра. Фазыл уны ҡай саҡ әйләндереп баҫтырырға онотоп та ҡуйғылай.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 125





**Зәки**
**ЗӘЙНУЛЛИН**

# ШАХМАТТАҒЫ ИКЕ АТ ӘМ ӘЙКӘЛ-САЛАУАТ

ХИКӘЙӘ-ХӘТИРӘ

1948 йылдың октябрь айы. Район үҙәгендәге китапханала гәзит-журналдар аҡтарып, уҡыштырып ултырам. Минең янға китапханасы, Мөйөш Хәйбрахман бабай ҡыҙы Фәриҙә апай, килде лә:

— Зәки! ин, туғаным, шахмат уйнай беләеңме? — тип ораны.

— Беләм.

— Бер абзыйҙың бик тә шахмат уйнағы ы килә. Тик уйнай белеүсе юҡ. Уйна әле уның менән!

— Ҡайҙа ул?

— Ана, иң ситтәге өҫтәл артында ултыра.

Мин инде туғыҙынсы синыфта уҡыйым, йәйен ун биш йәшем тулды. Тик минең буй- ын 12-13 йәшлек малайҙарҙыҡы хәтлек кенә. Их, ис кенә лә үҫеп булмай. әм мин, кескәй генә кәүҙәле булып ҡалырмын, тип бик тә ҡурҡам. Кешеләр менән, бигерәк тә оло кәүҙәлеләр менән аралашмаҫка тырышам.

Ҡырҙағы өҫтәл артында беҙҙең урамдағы Ташкергән Сәхиулла ына оҡшаған, иллене уҙған бер ағай ултыра. Беҙгә, ауыл малайҙарына, ауылда йәшәп ҡырҡты уҙған әр кем бабай инде. Минең өсөн был кеше лә бабай. Ошо Сәхи бабайға оҡшаған кеше өҫтөнә ороҡ пальто кейгән (китапхана эсе ыуығыраҡ), өҫтәл янында шундай уҡ төҫтәге эшләпә лә ята. Матурлап ҡырған арыраҡ мыйығы ла тап Сәхи бабайҙыҡы шикелле. Урынынан аҙыраҡ ҡуҙғала биреп, ағай иҫәнләшергә ике ҡулын уҙа әм урыҫсалап орай:

— Исемең нисек?

---

*Зәки Зәйнуллин (1933) — яҙыусы, ғалим; “Полковникты оҙатыу”, “Ник яма ыу был көҙҙәр?”, “Ағиҙелдең аръяғында...” .б. китаптар авторы. Ҡазанда йәшәй.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 126



— Зәки.
— Ә тулы исемең нисек?
— Әхмәтзәки.
— Минең исемем — Сосланбәк. Кавказдан мин. Шахмат уйнай беләң ме?
— Беләм. Аҙыраҡ.
— Шулаймы? Аҙыраҡмы?
Йылмая ағай.
— Эй-йе.
Өҫтәл аҫтынан тартма ы менән шахмат тартып сығарҙы ла был, ҡулына ҡара әм аҡ пешкалар алып, уларҙы өҫтәл аҫтында ике усына йәшерҙе.
— айлап ал.
Миңә ҡара пешка эләкте.
Тотондоҡ, әй, уйнарға! Үҙемсә мин арыу ғына уйнаған кеүек инем. Мәктәптә мине еңә алған бер генә уҡыусы ла юҡ. Математик Мәғәсүм ағай Зәйнуллин мине пыр туҙҙырып еңә ине лә, минең "бәхеткә", ул Свердловск ҡала ына күсенеп китеп барҙы. Үҙемә үҙем бик ышанып уйнай башланым — еңәм дә мин был Кавказдан килгән ҡартласты!
Ләкин!
Абзый кеше баштан уҡ үҙенең ике филен дә миңә биреп, минең аттарҙы алды. Ат менән фил көс яғынан бер сама, шунлыҡтан мин был хәлгә әллә ни ә әмиәт бирмәнем. Аттарҙы алыу менән, был Кавказ кеше е игеҙ пешка-ы менән дә өжүмгә күсте. Пешкалар алдан, улар артынан ике ат, ике ладъя бара, улар пешкаларҙы тылдан аҡлап, нығытып килә. Ә минең уның тылына сығырға аттар юҡ. Ә филдәргә юлды пешкалар тотош ябып, мине ҡыҫрыҡлап килә. Мин үҙемдең пешкаларҙы алмашҡа биреп ҡарайым да бит, алышмай, ҡә әр! Инде миңә йөрөргә лә яй ҡалманы. Бына ул пешкалар аша икертеп ике атын минең яҡҡа кертеп ебәрҙе лә мине тар-мар итеп тә ҡуйҙы. Быға са бер ҡасан да былай тиҙ еңелгәнем юҡ ине әле.
Ул көндө рәттән дүрт мат алып, кәйеф тамам төшөп, кикрек шиңеп ҡайтып киттем район китапхана ынан...
Төндә әллә ниндәй тынғы ыҙ төштәр күреп аташып сыҡтым. Теге ағай мине шахмат таҡта ы өҫтөндә ҡорос дағалы, яр ыу, ғәйрәтле ике атынан тапата икән. Аттарға эйәреп бер көтөү пешкалар йүгерә. Бары ы ла миңә "мат!", "мат!" тип ҡысҡыралар икән.
Икенсе, өсөнсө, бишенсе, алтынсы көндәрҙә лә был Сосланбәк миңә мат артынан мат ҡуя бит! Ә ис отола ы килмәй! Нисек инде мин, Лотфулла Писер малайы, эшләпә кейгән бер Кавказ кеше енән мат артынан мат алып торорға тейеш ти әле! Үҙебеҙҙең Эстәрлебаш ауылында, үҙебеҙҙең китапханала етмә ә!
Уйлай торғас, таптым бит, әй. Тар-мар ителеүҙән ҡотолоу юлы әллә ни ҡатмарлы ла түгел икән. Абзыйҙың филдәренә үҙемдең аттарҙы бирмәҫкә! әм мин, уйнай башлау менән, ике филде алға килтереп сығарам да тегенең өжүм итә башлаған филдәренә ҡаршы йүнәлтәм, филгә — фил! Тегелә лә аттар бар, миндә лә аттар ҡала. Абзый пешкаларын минең яҡҡа ҡыуа, мин үҙемдекеләрҙе уның яғына ҡыуам. Арттан аттар, ладъялар бара.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 127



Өйрәндем бит Сосланбәк ағайҙан уның тактика ына. Китә уғыш, китә алдаш, китә урап үтеүҙәр әм ҡырылыш! Донъялар, тыштағы ҡарлы бураныуыҡтар, ярым буш, ас ҡор аҡ — бары ла онотола.

Беҙҙең был алыштарға ике ай тулып уҙған саҡта биш партияның ике е минеке була ине инде. Кавказлы ағай яңы тактика уйлап сығарып мине от а, икенсе партияла уҡ уның тактика ын мин үҙенә ҡаршы ҡулланам. Хәле мөшкөлләнә ә, ағайҙың күҙлеге тирләй башлай. Күҙлеген өртөргә тип сыбар яулығын сығара икән, минең эскә йылы йүгерә. Тағы ла тырышыбыраҡ, дәртләнеберәк ябырылам үҙенә. Көндәр үтә-үтә, беҙ уйнаған өҫтәл янына халыҡ йыйыла башланы. Тауышланмайынса, бышылдап өйләшеп кенә фекер алышалар әм минең өсөн йән аталар. Үҙебеҙҙең ауыл малайы алыша ла ба а Кавказ кеше е менән!..

Шулай март аҙаҡтарына тиклем "уғыштыҡ" беҙ шахмат таҡта ы өҫтөндә. Апаруҡ тигеҙ алыша инек инде...

Бер көндө кил әм, Сосланбәк ағай юҡ. Фәриҙә апай миңә "Овод" исемле урыҫ телендәге китап бирә. Кисә Сосланбәк ағайҙы Өфөнән килеп "Победа" тигән машинала алып киткәндәр, имеш.

— Бына, иңә иҫтәлеккә китап ҡалдырҙы. Яҙыуы ла бар. Уҡы, — тине Фәриҙә апай.

Уҡыйым: "Заки, дорогой! Будь таким же упрямым, каким ты играл в шахматы. Постарайся учиться и получить хорошее образование.

Сосланбек Тавасиев.
Март, 1949 год".

1969 йылда, Рига ҡала ында хәрби аспирантурала уҡып йөрөгән саҡта, хәрби китап магазинынан бер буклет атып алдым. Шунда Өфө ҡала ында Салауат Юлаевҡа ҡуйылған әйкәлдең фото ы бирелгән. Унда әйкәл авторының да фото ы бар. Ул фотонан миңә... бик тә таныш йөҙ ҡарап тора ине! Йөрәк урынынан ҡупҡандай дөп-дөп тибә башланы. Был кеше мин 1948—1949 йылдарҙа Эстәрлебаш китапхана ында шахмат уйнаған Сосланбәк абзый ҙа а! Ул Салауат батырҙы атландырған ат та төштә мине ҡыуған-тапаған шахмат аттары кеүек яр ыу, ғәйрәтле ине.

Скульптор Сосланбәк Тавасиев беҙҙең Эстәрлебаш ауылына 1941 йылдың июль айында Мәскәүҙән эвакуация менән килгән була. әм Эстәрлебашта, ир-егеттәрҙе уғышҡа оҙатҡан саҡта, бер башҡорт ҡартынан беренсе тапҡыр Салауат Юлаев тигән батыр тура ында ишетә.

Эйе, Салауат Юлаевҡа әйкәл ҡуйыу уйы уға 1941 йылдың июль-август айҙарында, беҙҙең Эстәрлебаш исемле боронғо ҙур ауылда килгән...

Эстәрлегә ҡайтышлай әр саҡ мин Өфөгә кереп сығырға тырышам. Салауат Юлаев әйкәле янында — Ағиҙелдең бейек ярында бик оҙаҡ баҫып торам. Бөйөк батыр рухына әм мәш үр осетин скульпторы рухына белгән доғаларымды ҡат-ҡат уҡыйым. Доғалар уҡыған айын күңел йылына бара, күҙгә йәштәр килә...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 128



**Рифә**
**РАХМАН**

# СӨННӘТСЕ ӘБЕЙ

**ХИКӘЙӘ**

*99 баланы сөннәткә ултыртҡан оло өләсәйем Мәлихаға бағышлайым.*

Мәфрүзә ҡарсыҡтың үлем түшәгенә ауғанлығы көнө-сәғәте менән бөтә ауылға таралды. Тиҙ арала ауылдың икенсе башында йәшәгән ҡыҙына, йыраҡтағы ейәндәренә хәбәр еткерҙеләр. Инде килә алырҙай кеше йыйылып бөткән кеүек булғас, ҡарсыҡ тер әктәренә таянып тороп ултырҙы ла:

— Мөхәммәтғәлиемдән хат юҡмы әле?— тип ораны.

Быға ҡәҙәр ер емертеп йөрөгән, ғүмерендә лә көндөҙ карауатта ятыуҙы бар тип белмәгән Мәфрүзә әбейҙең йәй урта ында яҡты донъя менән хушлашырға йыйыныуы үҙе бер сәйер хәл тойол а ла, бер нәмә булмағандай, яҫтыҡҡа янтайып өйләшеп ултырыуы хәйер-фәтиха алырға тип килгәндәрҙе тамам аптырашта ҡалдырҙы.

— Урын табып ултырышығыҙ инде, балалар,— тине ул яйлап ҡына,— алыҫ юлдан килгәндәргә самауыр яңыртығыҙ.

Ғәзизәнең яңы ғына ағартылған мейес янында төтөнлөгөн ҡырып алып ултырған самауырға күҙе төштө. Яҡын әбейе янында ҡунаҡта булып ҡайтҡандан уң, ҡыҙы: “Әбейем, инде икенсе килеүеңә мин булмам, тубырсыҡтарҙы бер йыллыҡ итеп кенә әҙерлә, минән уң ҡарағай тубырсығынан ҡайнатылған сәй эсергә теләүсе табылмаҫ, тип өйләнгеләне. Яңынан күрмәҫ кеүек, ҡосаҡлап бик ныҡ арҡамдан өйҙө”,– тигән ине. Ҡара ана! Бөтә тормошон йылға ағыштарылай гел белеп, иҙеп тора был оло кеше тигәнең... Ул сағында артыҡ иғтибар ҙа ителмәгән был үҙ бик тәрән мәғәнәгә эйә булғандай тойолдо, күҙ төптәренә йәш төйөлдө, өндәшмәне, кеше күрмәгәндә генә күлдәк еңдәре менән ыпырып алды. Үҙе эсенән, бәхетле әбей ҙә инде, ейәндәренең балаларын күреп, ҡарашып китә бит, тип өйөндө.

Ғәзизә уҙған йәйҙә ҡыҙы Нәфисә йыйып киткән тубырсыҡтарҙан самауыр ҡуяйым тип соланға, улар алынған кәрзингә, табан атланы. Керҙе лә аптырап китте: кәрзин төбөндә ни бары биш-алты тапҡыр сәй ҡайнатарлыҡ тубырсыҡ тәгәрәп ята. Ет ә лә өс көндән артыҡҡа етмәҫ, шул тиклем ҡунаҡ төшкән өйгә... Ҡунаҡ тиергә лә тел әйләнмәҫлек бер көн булды ла а!

Ғәзизәнең йөрәгендә — бик тә ҡәҙерле кеше ен юғалтыуҙан ҡурҡыу, үткәндәр тура ында уйлауҙан тыуған ағыш хисе ине. Ҡыҙына ҡат-ҡат: “Килә е йәйгә, килә е йәйгә...”— тигәне әллә ысын уҡ булырмы икән?

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 129



Инде орлоҡтары ла ҡойолоп бөткән, әммә күрер күҙгә тос, матур тубырсыҡтарға үрелгәндә, ҡулдарының уларҙы бик аралап, анап, аранланып алғанын тойҙо. “Ет ә лә өс көнгә етер”,– тип уйланы ул, тағы бер тапҡыр кәрзиндән күтәрелгәндә, икеләнеберәк торғандай. Шунда ҡылт итеп әбейенең намаҙ уҡығанда ҡалдырмай торған бер теләге иҫенә төштө: “Өс көндән артыҡ урынымда ятҡырма аңсы, Хоҙайым, әжәл сирҙәренең шул өс көнөнә сыҙарлыҡ түҙемдәр бир әңсе...” Был доға, Мәфрүзә әбейенең теләк үҙҙәре ҡыҙҙы гел аптырата торғайны. Оҙағыраҡ тор а уң, уның яҡты донъя менән шулай бик тиҙ хушлаша ы киләме икән ни?

Әле ул саҡта ораулы ҡараштарын эләктереп алған әбе е ғәҙәтенсә емелдәп кенә йылмайҙы ла: Эй, ҡыҙым, кеше ҡулдарына бер ҙә ҡала ы килмәй шул,– тип ҡуйҙы. – Үҙ аҡылында, үҙ көсөндә китеүгә етмәй инде ул...” Кеше ҡулдары тип... Кем ауыр ына уң уны ҡарарға? Сит-ят ҡулдар түгел дә ба а! Бары ына ҡарап торған бер “яҡын әбей”ҙәре бар!

Услап күкрәгенә ҡыҫҡан тубырсыҡтарҙың бере е кире кәрзингә төшөп китте лә мөйөштә йыйылып ятҡан иштәре янына тәгәрәне. Ғәзизә уны кире күтәреп алманы. Тубырсыҡтарҙы күпмегә оҙағыраҡҡа еткер әң, әбейе шуның ҡәҙәр артығыраҡ йәшәр кеүек инеме... Яҙмышты алдарға теләгәндәй, ул бер тубырсыҡты үҙе үк кире кәрзингә ырғытты.

Бик тә ярата ине шул уның әбейе ҡарағай, шыршы еҫтәренә быуылып ҡайнаған, шишмә ыуынан бешергән бөтнөк сәйен, бигерәк тә ярата ине инде бына... Бөтә халыҡты аптыратып, ауыл ғәҙәттәрен анға уҡмағандай, бер улар ғына баҡса түренә ылыҫлы ағастар ултыртты, бер ул ғына ҡаршы ындағы үҙе менән килен булып килгән көндө төртөлгән ҡарағай төбөнә ире Ғәлләмдән пар кеше ыйырлыҡ ултырғыс я атты.

Бала сағында, яҡын әбейҙәренең өй ҡаршы ындағы сиҙәмлектә мәш килгәндә, уларҙы шул нарат сайғаҡлы ултырғыстан, ҡаҙ бәпкәләрен аҡлаған кеүек, таяҡ менән төрткөләп кенә уйнатып ултырырға ярата ине ул. Унан — йомшаҡ бәпкә үләне өҫтөндә иҙрәп, ҡояшта ҡыҙынып ятҡан тубырсыҡтарҙы бергәләп йыялар ҙа сәй эсергә инеп китәләр.” Ҡаҙ йомошлағансы, кеше аяғы баҫҡансы, алып ҡалығыҙ инде балалар”,– ти ине Мәфрүзә әбейҙәре, самауыр эсенә тултырылған тубырсыҡтарҙан ят, зарарлы еҫтәр килеүен, самауырҙың нәжесләнеүен теләмәгәндәй.

Яҡын бабалары вафатынан уң ололарҙан ҡарағай төбөндә бүтән кемдең дә бул а ял иткәнен хәтерләмәй Ғәзизә. Әллә сөннәтсе ҡарсыҡты ололап, үҙҙәренән айырып ҡуйыпмы, әллә был бәхетте Ғәлләм ағайҙарыныҡы ғына анапмы, ҡаршы ына ултырырҙар, ҡарағайҙың икенсе яғына йыйылышырҙар, Мәфрүзә әбейҙең артында баҫып тор алар торорҙар, әммә ләкин йәнәшә ендә урын алмаҫтар.

“Туҡтәле, әбей, бер ни булмаған кеүек, түр башында күрше-күлән менән өйләшеп ултыра, ә мин инде уның тура ында үткән замандағы кеүек өйләйем”,– тине Ғәзизә, үҙен ошолай уйлауҙан нисек туҡтатырға яйын тапмайынса.

Әле ейәндәренең ейәндәрен дә күрерлек ҡиәфәттәге, мәңге йәшәр кеүек тойолған Мәфрүзә өсөн өйөнмәҫлек инеме ни?! Улай ҙа, эҫе йәй урта ында, бесән өҫтөндә, бөтә донъяның башына тимер менән уҡҡандай, ҡарсыҡтың халыҡты хушлашырға саҡырыуы күрше-күләнде лә, балаларын да тамам аптырашта ҡалдырған ине.

— Ә-ә, ин икән ең. Мин, Ғәйфулланың төпсөк малайы керәме икән әллә, тип торам,— тине Мәфрүзә әбей, үҙе көткән кешеләрҙең исемлеген күңеленән тағы бер ҡат барлаған ҡиәфәт менән.—Мөхәмәтғәлием дә ҡайтып ет ә, сөннәт улдарым ҡәберлеккә килеп бул а ла хәлемде белерҙәр... Ҡай ы ҡай ы яҡҡа таралып бөткәндәр шул инде. Бында йәшәгәненең дә — үҙ тормошо. Эш кеше енең бындай йәйҙә эштә булғаны яҡшы.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 130



Ҡарсыҡ, ултырырға урын яйлағандай, мендәрҙәрҙе тотҡолап ҡараны. Шунда уҡ бары ы ла, хәҙер әбекәй, хәҙер әбекәй, тиешә башланы.

— Юҡ та, мин былай... Тик тора алмағандан ғына. Әле бына сөннәт тигәндән... Туҡ ан туғыҙ улымдың сөннәт өләсә е бит мин. Туҡ ан туғыҙ! әр бөртөгөнөң ғүмере минең ҡулдағы бәке үткерлегенән уҙған...

***

Мәфрүзә ҡарсыҡ йыраҡ Шүләнгер яҡтарынан был ауылға килен булып төшкәндә, сөннәтсе әбейгә әйләнермен, тип башына ла килтермәгән ине. Приказчик ҡартының ҡосағында йылынып, затлы кейемдәр эсендә матурланып, йомшаҡ түшәктәр өҫтөндә түш киреп йәшәргә ине унын иҫәбе. Бына был яй ыҙ, йән еҙ булып ҡалған яҫтыҡ өҫтәрендә түгел...

Ҡаралты-ҡура тура ында ҡайғырта ы юҡ. Бар нәмә килен төшөүгә яңынан, ике ҡатлынан алдырылған, йорттоң тирә-яғын инде мул ниғмәт килтереүсе еләкемеш баҡса ы биҙәй. ыу буйында аҡ мунса мөрйә енән, ҡунаҡ-фәлән төшкәнде хәбәр итеп, көн буйына төтөн төтәй, аҙбарҙа туҡ малдар мөңрәй, ҡапҡа төбөндә ялтырап торған тире кошевкаға егелгән ҡап-ҡара туры айғырҙар бейешә.

Йәш килен бирнә енән сығарылған еҙ ҡоштабаҡтар, баҡыр ҡомғандар, өй алды стена ындағы ҡаҙаҡҡа элеп ҡуйылған сигеүле өлгөләр бында яңы тормош башланғанды хәбәр итеп тора. Уларҙың ҡай ы ына эргәләге баҡсалағы алмағастарҙың ҡыҙыл, ары алмалары сөмәкәйләп тултырылған. андуғас үрәте төшкән көйәнтәләр, йәш киленгә ыу буйҙарын күр әтергә әҙерләнеп, шундай уҡ үрәтле алюмин силәктәргә үрелгән.

Өй эсенә кер әң, кире сыға ы килмәй: бирнә андығында нисә йылдар быуылып ятҡандан уң тынсыулыҡтан ҡотолғандарына өйөнөшкән өйөм-өйөм сәскәле-суҡлы туҡымалар, ҡашағалар, шаршауҙар, ултырғыс япмалары, өҫтәлгә йәм биргән ашъяулыҡтар, көҙгө өҫтәре... Сигеүле өлгөләр менән матурлап та ебәргәс, былай ҙа гөлгә күмелеп ултырған тәҙрәләренә эске яҡтан да нур ташҡыны ағылғандай, яҡтылыҡ ингәндәй булды.

... Өй түрендә, ылыҫ еҫтәре сығарып, самауыр гөжөлдәй.

Ғәлләмдең танау япраҡтарына ҡунған тир тамсыларына иҫе китеп ҡарап ултыра ул. Бөтөрөлөп киткән мыйыҡтарына төшәләр ҙә унан кәрәҙле бал тултырып ирендәренә яҡынлашҡан ҡалаҡ өҫтәренә икерерҙәр кеүек.

Ғәлләмде Мәфрүзә бер күреүҙә яратты. Ялындырып торманы, орап килгән көндө үк, атай-әсә ен аптырашта ҡалдырып, бирнә туплаоға тотондо. Беҙ ярар ти әк тә, көтә ең мәллә, бер ҙә күргән-белгән кешең түгел бит, тағы бер ныҡлап уйла, әле эш уҙмаған, тейештеләр. Ҡыҙ, улар ҡаршы ында ғүмерендә беренсе тапҡыр ҙур батырлыҡ күр әтеп, барам икән барам, тип ярҙы ла алды.

Ә бит ире, ысынлап та, бына тигән. Эшкә ҡулы ятып тора, беләгенән көс таша, уҡымышлы, динле, замандан да артта ҡалмаған. Шаянлыҡ та етерлек үҙендә: ҡапҡа алдына шәп аттарында килеп туҡтауға, йәш егеттәр кеүек ыҙғырып ҡына ебәрә. Ул да булмай, Мәүлиха абыстай сығып, туры айғырҙарҙы өҙәнгенән тотоп тынысландыра ла көмөш тәңкәле ҡайыштарҙы ҡапҡа башына ҡағылған алҡаларға бәйләй.

Унан, йылы ыу алынған ҡомғанды алып сығырға тип, тиҙ генә өйгә кереп китә. Мәфрүзәнең был өйҙә яратҡан вазифа ы — эштән арып ҡайтҡан иренә тә әрәт алырға булышыу. Ул быны яратып, ғүмер буйы ошоно ғына эшләп үҫкән кеүек оҫта башҡара. Ваҡытында абынын бирә, ваҡытында ыуын ала, сигеүле таҫтамал менән ҡартының ҡулдарын үҙе ҡорота, биттәрен икенсе бер өлгө менән йомшаҡ ҡына итеп үҙе өртә. Шул арала, яйын тура килтереп, Ғәлләм дә уны бит алмаларынан еңелсә генә үбеп ала. Был йортта ҡәйнә-ҡайны булма а ла, улар иркенләп өйөшөргә әле бер-бере енән ҡыйын ыналар, әҙәп еҙлек, тупаҫлыҡ анайҙар.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 131



Ғәлләмдең ауылдаштарына аңлашылмай торған бер ғәҙәте бар. Йәйге, көҙгө эштәр бөттөмө, донъя күрәм тип, хужа ынан ял алып, йыраҡ ҡалаларға сығып юғала. Саквояжын еңел генә елкеп кит ә лә, ҡапсыҡ-ҡапсыҡ күстәнәс, аҫыл туҡымалар, беләҙек-йөҙөктәр күтәреп ҡайтып керә ул. Шунан ай буйына ауылдаштары унын күргәндәрен тыңларға йөрөй. Ғәлләм ағайҙары бер ҡаланан икенсе ҡаланы тыңлатыусы сыбыҡтар, ер ҡаҙыусы машиналар, тағы әллә ниҙәр тура ында өйләй, әммә күберәк ул әле нимә буласағын фаразларға, кешеләрҙе хыял донъя ында йөҙҙөрөргә ярата.

Ун алтынсы йылдың яҙында шундай сәфәрҙәренең бере енән Ғәлләм бөтөнләй башҡаса ҡайтып керҙе. Башына ниндәйҙер уй тулғаны әллә ҡайҙан күренеп тора ине. Ҡескәй генә төйөнсөгөнә алып ҡайтҡан ваҡ-төйәк, таҡта сәй менән ыйланғас, инде бары ы ла өҫтәл тирә енән ҡуҙғалабыҙ тип торғанда, төпсөгө Хәҙисәне алдына ултыртып өйҙө лә:

— Әсә е, донъялар боҙолорға тора бит әле, балалар тура ында уйламай булмай, был йыл ҡышҡа утын әҙерләп тормайбыҙ, йорттоң бер өлөшөн турап яғырбыҙ,— тип ҡуйҙы.

Аҫҡы ҡаттың аш бүлмә ен сәйер тынлыҡ тултырҙы. Түшәмгә ҡарап-ҡарап ултыр а ла, Мәфрүзә ҡарты ҡылған ныҡлы ҡарарҙың сәбәбен тикшеренергә батырсылыҡ итмәне. Яулыҡ осон тешләп тынып ҡалды.

Ихата кесерәйеп, ҡаралып, меҫкенләнеп китте. ыйыр ҙа моңлораҡ мөңрәй, тауыҡтар ҙа моң оуланып ҡытҡылдай кеүек тойолдо. Мәфрүзә менән Ғәлләм кистәрен ҡарағай төбөндәге ултырғыста ирәк күренә башланы, уларҙы йорт үҙгәртеү, донъяны башҡаса көтөү мәшәҡәте баҫты. Мәфрүзә лә элеккесә ҡош кеүек талпынып, дәртләнеп йөрөй алманы, сөнки ире бай абзыйынан да эштән сығып өлгөргән, аҡса яҡтары шаҡтай ҡыйынлаша төшкәйне:

— Батша төшәсәк бит, ҡарсыҡ. Кешегә генә өйләй күрмә, беҙҙең ауыҙҙан сыҡма ын: үҙең генә ишеттең! Тормоштоң ҡайҙа тәгәрәүен Алла үҙе генә белә. Шуны ы хаҡ: байҙарға көн бөтәсәк, ти. Ундай ваҡытта байынды, бай түгеленде лә ҡарап тормаҫтар... Ауыл тулы хәйерсе йәшәгәндә, ике ҡатлы таш йортоң менән ин дә шулар ара ына эләгә ең инде...

Ауыл урта ында бай йорттарынан да матур булып ултырған күрекле йорттоң ай эсендә шул хәлгә килеүе, Ғәлләмдең унғы йөрөп ҡайтыуынан уң, кеше йыйып, күргән-белгәнен өйләргә ашыҡмауы күрше-күләнде генә түгел, тирә-яҡ ауылдарҙы ла бошоуға алды, ҡай ы ы нимәгә юра а юраны, эштең асылына ис кем төшөнмәне.

Бары ы ла ун етенсе йылға килеп кергәс аңлашылды. Яманынан ҡурҡыта, шул уҡ саҡта яҡшы тормошҡа ниндәйҙер өмөттәр ҙә уята торған әле был, әле теге хәбәрҙәр ауылға көн булма а, ай айын килеп тора башланы. Уларҙың ысынға аша ын оҙаҡ көтөргә тура килмәне: батша ла төштө, власҡа большевиктар ҙа килде, ауыл байҙарының байлығын тартып алыу ҙа башланды.

Иң элек Ғәлләмдең оло ҡыҙы Ма ибикә килен булып төшкән йорттағыларҙың бары ын урамға сығарып ташланылар, ҡаралтыларын, әйберҙәрен — ҡай ы ын кемгә тараттылар. Ата кеше, ҡыҙы туп а ына килеп йығылыр, шул мәхшәрҙә тора алмаҫ, тип көткән ине, улай булманы, ире менән бер булып, тештәрен ҡыҫып, күршеләре йортоноң бер мөйөшөндә, шаршау менән бүлеп алынған аш- ыу яғында йәшәп киттеләр. Эштәрен дә эшләштеләр, үҙҙәренекенә ҡушып, балаларын да ҡараштылар. Аҙбарҙарындағы малдары ла ят итмәне, уларын сәүит кешеләре ҡасандыр үҙ аҙбарҙарынан туп-тура кертеп кенә ҡуйған ине...

Ғәлләмгә инҡилап елдәре ҡағылманы: ала ы әйбер ҡалмаған, былай ҙа өләшеп бөтөрөлгән ине. Ябай халыҡтан урыҫса яҙыу яҙырлыҡ кеше тапмағанға, ярлыларҙың комитетына үк айлап ҡуйҙылар үҙен, ҡаршы төшөп ҡараманы, артыҡ үҙ

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 132



көрәштереүҙең мәғәнә еҙлеген аңланы, писер бул ам ғына, тип ризалашты, өстө өскә ҡуш белмәгән сәүитселәр менән бергә эшләп китте.

Йыл артынан йыл уҙҙы, яңы көн артынан көн тыуҙы, бөтөнләй башҡаса, динеҙ, Алла ыҙ тормош башланды... Сөннәт бабалары ла, мулла-монтағай ҙа, хәреф танытҡан хәлфә лә ауылдан йә ҡыуылды, йә, бер ни янама а ла, үҙҙәре үк сығып ҡасты. Ғәлләм шулай ҙа намаҙын ташламаны. Өйҙә ҡылған доғанан ҡурҡырға кәрәк, тип тапманы.

Ирҙәрҙең ҡай ы ы уғышта ҡырылған, ҡай ы ы былай юҡҡа сығарылған шундай бер заманда уғыл өҫтөнә уғыл тыуҙы, әммә шәп, биҙәлгән дуғалы саптар аттарҙа ауыл әйләнеп уҙҙырылған бәпәй туйҙары ла, ҙурлап исем ҡушыуҙар ҙа онотолдо. Улай ғына түгел, тора-бара сөннәткә ултыртырлыҡ, баба булырлыҡ кеше ҡалмағанлығы ла беленде. Ул ауылға саптылар, был ауылға... Сәүит тыя, тип тә торманылар, сөннәт тигәне әр кем өсөн йәшәү кеүек бер яп-ябай ғәмәл ине. Бабаларҙан килгән был йоланы боҙорға ис кем ҡыйма а ла, юлы ис табылманы. Сөннәт бабаларын ер йотҡан инеме ни?! Ахырҙа, ирҙәрсә ныҡлығын, таҙалығын, батыр йөрәклелеген белгән ауылдаштар Мәфрүзәгә килеп баш эйҙеләр: балаларыбыҙҙы сирле итмә, фәлән-фәлән абзыйҙан ҡалған сөннәт бәке е бар, риза булып, шуны үҙеңә ҡорал ит, тинеләр. Ризалаш а ризалашты, ризалашма а — юҡ (шуны орап торҙолармы икән әле?), шул көндө үк Мәфрүзә түтәкәй Сөннәтсе әбей булып китте.

Ире Ғәлләм менән йорт кенәгә енең унғы битенә сөннәт балаларының аты, нәҫел ҡушаматы, туған, арыуландырылған йылын теркәргә кәңәшләштеләр. Мәфрүзәнең инде илле бере тулып килә, үҙе лә иҙмәҫтән, ҡарсыҡтар рәтенә кереп бара ине. Шулай ҙа төҫө, тотошо, кейем- алымы менән башҡаларҙан айырылып торған, аман да приказчик ҡатыны икәнлеге әллә ҡайҙан күренгән Мәфрүзәне үҙ менән дә ҡартайтырға ҡыймағандары, ололап, яҡын итеп, Сөннәтсе инәй тип атай ине.

Бала тыу а тыуа, күлдәк-ыштан кейә, көн дә ҡашыҡ тотоп ашарға ултыра — колхозлаша ыңмы ин, юҡмы, үҫтерергә хәлеңдән киләме әле — орап тормай икән. Ике-өс йыл тигәндә исемлектәге балаларҙың аны туҡ ан туғыҙға етте лә, дәфтәрҙең ул бите, ҡултамға алынып, бөкләп, йәбештерелеп ҡуйылды. Диндарлығынан ырым-шырымға артыҡ иғтибар бирмәгән Мәфрүзә сөннәт тигәндә әллә нимә эшләне. Баба ынан, йөҙөнсө баланы сөннәткә ултыртырға ярамай, үлә, тип ишеткәне бар ине, аҡылы менән шул үҙҙе кире ҡаҡ а ла, күңеле тыңламаны, ниндәйҙер ҙур бер көс унан сөннәт бәке ен йыраҡҡа — келәттәге кейем- алым алынған андыҡ төбөнә йәшертте.

Үс иткән кеүек, икенсе көндө үк иртә таңдан уларҙың ҡапҡа ын дөбөрҙәтеп-дөбөрҙәтеп ҡағырға тотондолар. Урам тәҙрә аша Мәфрүзә килеүсенең күпхуж рәйесе икәнлеген күрҙе, үҙен саҡыра тип уйламайынса, колхозда баш агроном булып эшләй башлаған ире Ғәлләмде төрткөләп уятты:

— Ниҙер булғанмы, ана, Мотиҡ абзый ҡапҡа ҡаға, сыҡ тиҙерәк!— тине. Ғәлләм ҡауҙарланып-ҡабаланып, мейес башындағы үҙе еркәләндереп я аған яңы сорт ашлыҡтарҙың бөртелешен тикшерергә ултырҡан ағас ауытты бәреп төшөрҙө. Урынына алып ҡуйманы. Мәфрүзәгә генә ҡушып, эйәге менән йәшниккә ымланы. Ишек ҡатындағы элгескә үрелгәс, уны ы, ҡаҙағынан ысҡынып, кейемдәрениҙәре менән иҙәнгә килеп төштө. Ғәлләм өҫтөндәге кейеме менән генә урамға, ҡапҡаны асырға йүгерҙе.

Тик Мотиҡ Мәфрүзәнең үҙенә килгән икән.

— Ҡотҡар, еңгәсәй,— тип үҙ башланы ул инер-инмәҫтән. — Малайҙың ғәүриәте тамам эренләгән, сөннәткә ултыртма аң, иртәгә-бөгөн үлер бит...

Мәфрүзә ҡарсыҡ яуап бирергә ашыҡманы. Ул үҙен сөннәткә ултыртып йөрөгәне өсөн генә күпме яфалаған был кешенең күҙҙәренә тура ҡарай алманы.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 133



— Яңылышлыҡ миндә булған,— тип дауам итте үҙен Мотиҡ.— Үҙ башыңа төшмәйенсә, белмәй ең икән ул....

Сөннәтсе әбейҙең аман да бер ни әйтмәйенсә тораташтай тороуын Мотиҡ, аҫтыртынлығы, үпкә аҡлауы, үлем түшәгендә ятҡан бала ы өсөн эстән генә өйөнөүе, тип фаразланы.

— Кисер, еңгә, яңылышлыҡ — миндә,— тине ул тағы бер ҡат.—Сәүит ҡушҡанса йәшәйем, тип...

— Беҙ ҙә сәүит ҡушҡанса йәшәйбеҙ ул, Мотиҡ,— тип әйтә башлаған Мәфрүзәне рәйес ярты юлда туҡтатты:

— Мин бит ин сәүитсә йәшәмәй ең тип өйләп тормайым, ине сөннәтселектә ғәйепләргә тип тә килмәнем, малайға ярҙам ит, тип оло башымды кесе итеп... үлә бит... Үлә!!! ин эренләнгән яры ын киҫеп төшөрмә əң, билла и, үлә!!! иңә унының нимә е бар инде?!

Үҙенән нисә йәшкә кесе Мотиҡтың шундай саҡта ла үҙенә ба а ына Мәфрүзәнең иҫе китмәне. Ул быға өйрәнгән ине инде, шуға күрә, үҙҙе оҙонға у-ҙылыуынан ҡурҡҡандай, соланға сығып китте. Ул да булманы, таҙа аҡ таҫтамалға төрөлгән сөннәт бәке ен тотоп та керҙе:

— Унының нимә е бар, тип уйлай ың икән, киҫә ең дә төшөрә ең,— тип Мотиҡ ҡулына тотторҙо.

— Ни, мин бит... Сөннәтсе түгел...— тине рәйес, башҡа ни тиергә лә белмәгәнгә.

— Мин дә сөннәтсе булып тыумаған, кәрәк кәртәгә кертә, итексегә лә, тимерсегә лә әйләнә ең. Киҫә ен киҫкән инде мин, иңә үслек менән түгел, йөҙөнсөгә ҡулым бармай.

Үҙенән быңдай үҙҙәрҙе ис ишетергә теләмәгән, күҙҙәре атылырға торған Мотиҡҡа ҡарап:

— Баланың ғүмерен уйлап ҡына...— тип өҫтәне.

Мотиҡ хөрәфәттәрҙән көлә торған бер кеше ине. Ауылдың иң аҡыллы ҡарсығы тип уйлаған Мәфрүзәнең, шул булыр-булмаҫ ырым-шырымға ылтап, ярҙам күр әтергә ашыҡмауын ул аңларға ла теләмәне.

— уңғы тапҡыр орайым: ултырта ыңмы малайҙы сөннәткә, юҡмы?!— тине ул екергән, бойороҡ биргән ҡиәфәттә. Мәфрүзә лә тап шулай уҡ яуап ҡайтарҙы:

— Юҡ!

Юҡ, ти ә тине, әммә ләкин ире Ғәлләмде йыраҡ ауылдағы бер танышына, сөннәт ҡартына, ат егеп елдертте. Мотиҡтан бигерәк сабый ҡыҙғаныс ине. Шундай борсоулы көндәрҙең бере ендә күктән килеп төшкән кеүек сөннәтсе ҡарт малайҙы аяу ыҙ үлемдән аҡлап ҡалды, әммә инде Мәфрүзәне рәйестең мәңгелек дошманына әүерелдерҙе. Улының таҙарып китеүенә ул ғына сәбәпсе икәнлеген, хәйер, Мотиҡ белмәй ҙә ҡалған ине. Ҡарты Ғәлләм дә, яҡшы атлы булып күренергә тырышҡандай, был хаҡта үҙ оҙайтырға теләмәне. Унының үҙ өйөнөсө өйөнөс: ошо уҡ көндәрҙә ҡатыны Мәфрүзә, бөтөнләй аптыраште ҡалдырып, бала алып ҡайтырға йыйына ине. Ярай әле, шундай ваҡытта ҡан күрмәне, өҙлөгөп китергә сәбәбе аяҡ аҫтында бит унының, тип фекер йөрөттө буласаҡ атай.

Ҡара ин был Мотиҡты, ҡор ағы танауына еткән Мәфрүзәне кешегә лә анамағандай дыу килтереп сығып китте, тип уйланы ла бер аҙҙан. Кеше ҡайғы ы менән уны ы шул миҙгелдә үҙенең дә тамам башынан сыҡҡан да ба а! Йәше илленең был яғына сыҡҡан ҡатынының балаға ҡалыуынан ул әле лә иҫәүәнләнеп йөрөй ине юғи ә...

Ай уҙҙы тигәндә, Мәфрүзә тағы бер ҡыҙҙы түр башындағы карауатҡа ҡуйылған, сигеүле япмалар менән сорналған кәрзингә килтереп алды. Инде унының тыуғанына ла шаҡтай көндәр үткән, матурланып, тулыланып килә, кешеләрҙе күрә башлағаны ла тойомлана ине. Ун алты көн тигәндә, әсә е ҡосағынан айырҙы, бай ҡыҙҙары ғына ятырлыҡ, биҙәклəп үрелгән ауыттың илаҡ бер хужа ы итте.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 134



Орҡоя ир бала ыңары булып үҫте. Буйға ла йәштәштәренән нығыраҡ, көскә лә ис бере енә бирешмәҫлек, телгә лә кәрәгенән артыҡ үткер булды. уғышып-фәлән йөрөмә ә лә, Мотиҡ малайы Байраҡ менән генә еркәләре килешмәне, юлдары ҡаршы кил ә, юл бирешмәнеләр, бәхәс сыҡ а, ике е ике яҡта булдылар, сөнки атаы малайға был нәҫелгә ҡоторған үгеҙ кеүек ҡарарға өйрәтеп үҫтерә ине. Орҡояның быға иҫе китмәне, телә ә ул уны аҡылға ултырта ала ын бел ә лә, ҡаҡманы, уҡманы, әммә сәкәләшкәндә юл ҡуйырға ла ашыҡманы.

Орҡоянан ҡотолоуҙың яйын Мотиҡ абзый тиҙ тапты: уғыш бөтөп, тормоштар рәтләнә башлаған кеүек тойол а ла, Ғәлләм абзыйҙың кәнсәләр тирә енән китеүенән, аяҡтан йығылыуынан файҙаланып, йәше лә тулмаған ҡыҙҙы урман эшенә яҙҙы. Исемлек асыҡлаған йыйылышта, ун игеҙе тулмағандарҙы яҙмайыҡ инде, тип ҡаршы төшә башлаған күрше е Сәлихте:

— Тулған, бик тулған, ин белә еңме, минме? Мин малайҙы сөннәткә ултырт тип килгәндә, инде ул аяҡ ара ына ерерлек бер ҡыҙ ине,— тип ҡырт киҫеп туҡтатты. Башҡалар инде әйтеп торманы. Алдында йәш буйынса төҙөлгән исемлек ятҡан ауыл сәүите рәйесе лә телен тешләп ҡалыуҙы дөрөҫөрәк ананы. Бер мәктәптә, бер үк парталар артында уҡып йөрөгән балаларҙың бере е Ҡазанға — уҡырға, икенсе е — урман йығырға китте.

Ҡарағай ҡуйылығы эсендә, ҡоро ергә ылап алынған бура йорттарҙа, ҡыш башланғас, алҡын, дымлы ине. Етмә ә, ашау яғы ла шаҡтай таҡырайҙы, быға ҡәҙәр бирелгән икмәк телемдәре йоҡарҙы, сыр шаҡмаҡтары бөтөнләй юҡҡа сыҡты, әр кем алғы ынып, тилмереп, әллә нindәй өмөттәр менән яҙҙы көтә башланы. Майға кергәс, алмаш килер, уларҙы өйгә ҡайтарырҙар кеүек ине, тик Орҡоялар ауылынан алмаш ебәрмәгәндәр икән, ҡыҙҙы, йәй уҙғансы тип, тағы урман эшендә ҡалдырҙылар.

Аслыҡта кесерткән ашап ҡына түҙә алмам, тип уйлаған Орҡоя ете төн урта ында күлдәк-ыштандан ғына ауылына ҡасты. Бер алып сыҡма а, бер сығыр тип, уҡмаҡтар буйынса оло юл яғын самалап йүгерҙе лә йүгерҙе, таң атҡанда — өйөндә ине инде.

Мейес төбөнә икмәк тәгәрәтеп йөрөгән Мәфрүзәне ҡыҙының был рәүешсә ҡайтып кереүе тамам аяҡтан йыҡты, етмә ә, ире Ғәлләм дә, ни сәбәптәндер, Орҡояны уйлапмы, башҡа ынанмы, көтмәгәндә йөрәге хәл еҙләнеп йығылған, инде унғы көндәрен йәшәп ята кеүек ине.

— Ҡыҙым, әллә уң, белгән кеүек инеңме...— тине әсә кеше.— Атаң әжәл менән булашып ята. Инде телдән дә ҡалды. Ауыҙын астырып, ыу алып, ризыҡ ҡына ашатып торабыҙ...

— Юҡ, әсәй, ҡайҙан беләйем, ти, ҡастым мин, атайҙы аҙаҡ күрермен, йәшер мине тиҙерәк,— тине Орҡоя, ата ы янына уҙырға, уны ла борсорға батырсылыҡ итмәйенсә.— Оҙаҡ көттөрмәҫтәр, кем белә, эҙләп тә килерҙәр.

Мәфрүзә ҡарсыҡ айнып киткәндәй булды. Иламаны, орашманы, борсоманы, ғәҙәттәгесә, яулыҡ мөйөшөн тешләп уйға ҡалып торҙо ла, ҡыҙына өҫтәлдәге иҫке икмәкте бул а ла ҡаптырып, баҡсаға алып китте.

Ихата артында, аҙбарға яҡын ғына өйөп ҡуйылған, түтәлгә әҙерләгән тиреҫлеккә ашыҡмай ғына ҙур уйым я аны, төбөнә кәртәгә кибергә эленгән балаҫтарҙы йәйҙе, шунан баш елкеп кенә ҡыҙына кереп ятырға ҡушты, йөҙ тирә енә иҫке мөрйә башын ҡуйғандан уң, ҡалған ерен туҙған кейем-фәлән менән ҡапланы ла түтәлде матур, тигеҙ итеп яңынан өйҙө. Торбаның тирә-яғына йолҡоп ташланған сүп үлән, ҡороған сыбыҡ-сабыҡ алды. Эше бер кем аңламаҫлыҡ, иҙмәҫлек булып ҡалды.

Ысынлап та, эҙләп килеүселәр оҙаҡ көттөрмәне, төш етәрәк аҡ ҡына ишек шаҡынылар. Шаҡыуҙары йомшаҡ бул а ла, өйләшеүҙәре ҡаты ине. Өй аҫты пыран-заран килтерелде, сормалар аҡтарылды, аҙбарҙан мал сығарылды... Түрҙә

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 135



ятҡан Ғәлләм карауаты ла ҡуҙғатылды, тел еҙ тип тә торманылар, эҙләп-эҙләп тә, Орҡояны таба алмағас, уға ла янап, әйтмәгәндәрен ҡалдырмай, пырлап сығып киттеләр. орашып, күршеләренән дә бер хәбәр алмағас, ҡайтмағандыр, тип ышандылар, ахры ы. Күҙҙән юғалдылар. Колхоз рәйесенең эште ҙурға ебәрге е килмәне, аҙна тигәндә, икенсе берәүҙе табып, бер ни белмәгәндәй, “Орҡояны ҡайтарығыҙ, ата ы үлем түшәгендә” тигән хат тотторып, урман эшенә ебәрҙеләр. Ул арала Ғәлләм дә вафат булып, ата ын ерләргә тиреҫтән сығарылған ҡыҙ ваҡиға ы баштараҡ бөтә ауылды шаҡ ҡатыр а ла, кеше телендә оҙаҡҡа барманы. Әллә Мотиҡ инде был эш менән нәчәлниктәр күҙенә салыныуынан ҡурҡты, бер ҡайҙа барып, бер ни хәбәр итеп йөрөмәне, эсенән генә, үсте тормош алды инде, тип өйөнөп тынысланды.

Мәфрүзәнең оло улы Мөхәммәтғәли, ҡышҡы алҡында күлдәк-ыштандан немец концлагерынан ҡасып, аяҡтарына алҡын тейҙергән, урынға ҡалған, тыуған ерендә ҡайтып йәшәргә хоҡуғы ла юҡ, бул а ла, мәйет ерләргә лә ҡайта алмаясағы көн кеүек асыҡ ине. Унын ҡарауы, ба адирҙай Нурғәли, ваҡытын ғына белгәндәй, Кузбасстан сираттағы ялына ҡайтып төштө. Ата ы менән хушлаша уҡ алма а ла, ҡәбере өҫтөнә бер ус тупраҡ ибергә өлгөрҙө:

— Ауыр тупрағың еңел бул ын, алҡын гүрең беҙҙең күңел йылыбыҙ менән йылын ын...

Әле ҡарттар таралғас та, бик оҙаҡ китә алмайынса, инде баҡыйҙағы ата ы менән серләшеп ултырҙы ул.

— Мин дә, инең кеүек, ер аҫтарынан сыға алмай эшләйем бит, атай,— тине ул уйсан ғына.— Ер аҫтарынан юл алып, иңә табан ғына барырға ла... Булмай шул!

Шулай тигәндә тауышы өҙөлдө. Бер мәғәнә алып әйткән үҙенең икенсе мәғәнә енә үҙе аптырап ҡалды. Әйткәнен онотторға тырышты, тик ҡайтҡас та тыныслана алманы. Мәйет сыҡҡан ергә доға уҡырға йыйылышҡан күрше ҡарсыҡтарының көйөнә моңланып, сыра яҡты ында ата ының приказчик сағында төшкән рәсемдәрен ҡарап ултырҙы. Уныҡы кеүек мутлыҡ бирә торған мыйыҡтарын борғоланы, рәсемдән ҡараған моңло күҙҙәрен ыпырҙы. Керпектәрен йомдорғандай ит ә лә, тап үҙ йәшендә булған ата ы ис кенә лә йоморға теләмәй, ҡәнәғәтлек хисе менән туп-тура уға ҡараған ине.

Иртән мейес тирә ендә булашып йөрөгән әсә е, аштарҙы уҙҙырғас, өйләнеп китер ең инде, улым, үлгән артынан үлеп булмай, хәҙер донъя иңә ҡалды, тип ҡуйҙы. Нурғәли үҙе лә был турала уйлаштырғылай ине. Кузбасста күҙе төшөп йөрөгән ҡыҙҙары ла юҡ, бында ла көтөп алған сибәркәйҙәр күренмәй-күренеүен, тик бына йәш сағында уҡ оҡшатҡан бере е бар...

Мотиҡтың оло ҡыҙы Хәлисә ине ул. Әсәй ҙә теләгәндә, әллә өйләнергә инде?! Яусы ебәрергәме? Әсә е генә яусыла а?

Ишек алдына сығып, баҫҡыстар өҫтөндә бик уйланып ултырғандан уң, соланға башын тығып ҡына, әсә ен үҙе янына саҡырҙы:

— Кил әле, әсәй, ысынлап та, өйләнәйем мин булма а, бына Мотиҡ ағай оло ҡыҙын, инең ризалығың менән, биреп ҡуй а...

Мәфрүзәнең күҙ алдары ҡараңғыланды. Йығылмаҫҡа тырышып, ишек яңағына өйәлде. Шулай ҙа, аяғына яңылыш баҫҡан ғына бер ҡиәфәт сығарырға тырышып, сайҡалып киткән еренән турайырға маташты, булдыра алманы. Тап йөрәк тапҡырына ҡылт итеп беҙ менән ҡаҙанылармы ни — бөгөлөп төшкән хәлендә алъяпҡыс аҫтынан ғына күкрәген тотто. Юҡ, йәшәйем икән әле, тине ул шунан, туҡтап ҡалғандай булған йөрәгенең тек-тек кенә тибеп китеүен ус төптәре менән тыңлап.

Йорт ишегенә арты менән ултырған Нурғәли быларҙы күрмәй ине. Бер аҙҙан әсә турайҙы, улы боролоп ҡарағансы тип, ораштыра башланы:

— Хәлисәгәме? Беҙгә төшөрмө уң ул? Йыуашлығың да хаттин ашҡан... Хәлисә бейеп торған, башын сөйөп баҫҡан ат кеүек...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 136



— Шундайҙарҙы оҡшатам да инде мин, әсәй!

Холоҡка йыуаш бул а ла, өҙҙөрөп әйткәндә инде Нурғәли ҙә ата-әсә енә оҡшап ҡала. Әйтте әм вәссәләм! Шуны белгәнгә, был турала ҡабат өйләшмәнеләр.

Нурғәлиҙең китер көндәре еткәндә, Мәфрүзә ҡарсыҡ, йәш сағынан ҡал а ла, әле лә өҫтөндә бер тигән ултырған, ҡыҙҙарса төҙ кәүҙә ен тағы ла ҡупшылатып ебәргән күлдәген кейҙе лә, елт-елт атлап, юғары осҡа — Мотиҡтарға китте. Китте лә Хәлисәне етәкләп алып та килде. Ҡыҙҙың, ғүмерлек дошманыңа барам, тип әйтә ен көтмәгән Мотик ике ен бергәләп тиерлек йорттарынан ҡыуып сығарған ине. Шулай итеп, Хәлисә Нурғәли менән ҡуш булып, бәхет ҡошон тотҡандай, Кузбасс яҡтарына китеп барҙы.

Ошо ике баланың бергә ҡушылыуы ике нәҫелде лә татыулаштырырға тейеш ине кеүек. Мәфрүзә теләгәнсә барып сыҡманы. Ҡоҙа-ҡоҙағый өй тултырып ҡунаҡ йыйғанда өндәшергә ашыҡманы, күрше-күлән менән бер-бер эште өмәләп башҡарғанда ла балта-көрәк күтәреп килеп етмәне. Ҡыҙы урынына почтальон сумка ын тағып йөрөй башлаған Хариса иренән дә былайыраҡ булып сыҡты. Ғүмерен рәхәттә уҙҙырған ҡатын сумка тултырып өй беренсә йөрөргә кәрәклек-те башына ла килтермәй ине, кино-фәлән барғанда, мунса тиклем клубтың экран төбөнә килеп баҫа ла урам буйынса ҡушаматтарҙы теҙеп китә:

— Ыштан ыҙ Ғәли, Күпер аҫты Лотфулла, Ҡыяр буры Марзыя...

Исеме сыҡҡан бере тиҙ генә уның ҡулындағы гәзитте эләктереп ала ла, башҡа-ларҙы төртә-йыға, кире үҙ урынына барып ултыра. Бәхет еҙлегеңә ҡаршы ул көндө кис сыҡма аң, хат ыҙ ҡалыуынды көт тә тор.

Мәфрүзә ҡарсыҡты оло о-кесе е хөрмәт иткәнгә, ул урамдан үткәндә, уғышып ятҡан балалар ҙа шым ҡала, тәмәке тартҡаны тәмәке ен салбар кеҫә енә йәшерә, бер-бер сәрхүше тиҙерәк ҡайҙа бул а ла шылыу яғын ҡарай ине. Почтальонка ҡо-ҙағый, әллә кеше үҙенән аҡланып, әллә инде ҡыҙының ҡәйнә е булғанға, бер аҙ йомшарып, хатты үҙе үк килтермә ә лә, кемде бул а ла табып, Мәфрүзә түтәйҙәренә йүгертә торғайны.

Хаттар ғына ирәгәйҙе. Нурғәлиҙең юрағаны юш килде: эшләгән шахта ы еме-релеп, ғүмерлеккә таш аҫтында ҡалды. Киткәндә, оҙатырға тип йыйылышҡан йәштәштәренә, шаярғандай итеп, таш баҫма а, бер ҡайтырбыҙ, тип көлөп ҡуйған ине шул. Килене Хәлисә лә, аталары йортона әйләнеп ҡайтырға теләмәйенсә, бала ы менән шул тупраҡҡа берегеп ҡалды. Был Мотиғулла менән Мәфрүзәне яҡ-ынайтманы ла, йырағайтманы ла. Хәлисәнән килгән хәбәрҙәр менән бүлешмәнеләр, хәсрәт-ҡайғыларын уртаҡлашманылар. Килен ҡунаҡҡа башта ҡәйнә йортона ҡайтып төш ә, шунан үҙ аталарында ял итте.

Ҡасандыр Сөннәтсе әбейгә эсенән түгел, тышынан да йүнле теләк теләмәгән Харисаға, уның түшәккә йығылыуын ишеткәс, кинәт әллә ни булды. Башта ул туҡ анын тултырып та ер емертеп йөрөгән Мәфрүзәнең аяҡ ыҙ ҡалыуына ышан-маны. Шунан ғына, эске бер тойом менән, был хәлдәрҙең ысынлығын аңланы. Аңланы ла йүгереп килеп тә етте. Ҡоҙағый тигәне түр карауатта, мамыҡ мендәрҙәргә терәлеп, күрше-күлән менән өйләшеп, хәйер-фатиха ын таратып ул-тыра. Нисек тә уға ла алып ҡалырға кәрәк ине был изгелеге менән дан алған ҡар-сыҡтың яҡшы үҙен. Ҡыҙы Хәлисәнең — ҡәйнә е, ейәне Камилдың өләсә е лә ине бит ул...

— Ҡоҙағый,— тип үҙ башланы Хариса илам ырап ҡына.— Инде инең дә ахыр сәғәттәрең етә...

Тирә-яҡтағылар, “Был ни тағы?” тигән кеүек, уға ҡарап тороуҙарын күргәс кенә, ул үҙенең тағы бер хата эшләп ташлауын аңланы, әммә эш уҙған ине инде. Сөннәтсе ҡарсыҡ ҡына әллә уны ишетмәне лә, бик ағынған кеше ен күргәндәй:

— Әле, Хариса, тап бына инең хаҡында уйлап ултыра инем. Кеше ебәрттем, уны ы юҡ булды, үҙең күренмәҫ еңме тип көттөм... Бына килгән ең бит,— тине.—

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 137



Мөхәммәтғәлиҙән хат юҡмы, ҡоҙағый?

Хариса йөрәгенә май  ыланылармы ни: йөҙө яҡтырып, күҙҙәре асылып киткәндәй булды. Ауырыуҙың бик тә хәленә керерҙәй булып:

— Юҡ шул, юҡ, ниңә килергә тейеш инеме ни? Бәй, килгәненә аҙна-ун көн дә юҡ бит,— тип яуап ҡайтарҙы.

— Күңелгә кил ә дөрөҫ  килә ине лә... Бына, юҡ икән бит әле... Тейешен тейеш кеүек инде ул... Бик тә көткәнгәме  уң?..

Ҡарсыҡтың ғажизланып әйткән был  үҙҙәре әле яңы ғына бер ни булмағандай  өйләшеп ултырғандарҙың күңелен  ағышландырҙы. Унең иң  өлкән улын  ағынғанын, инде  уғышҡа киткәндән бирле бер күрергә тилмереп ғүмере уҙып киткәнлеген бары ы ла белә ине. Мөхәммәтғәлиҙең өҫтөнән халыҡ дошманы тигән ҡара тамға алын а ла, туғандары менән күрешергә рөхсәт яҙыуы бирел ә лә, ҡайтырлығы  ҡалмаған, әсә енең дә йыраҡ илдәргә сығып китерлеге бөтөнләй юҡ ине.

—  е... ҡара  ин уны, яңылышҡанмын бит,— тип ҡуйҙы ул, үҙ алдына  өйләнгәндәй генә.—Тағы ике көн эсендә лә килмә ә, риза-бәхиллегемде  ҡоҙағый үҙең еткерер ең инде.

Быҕаса үҙ-ара бер йүнле  үҙ әйтешмәгән ике ғаиләнең ошо рәүешсә  өйләшеп ултырыуы   бары ының  күңелдәренә бер еңеллек тә  килтерҙе.

— Бумағанды, ни  өйләй ең  ин?! Ниндәй ике инде ул?— тиештеләр кис ет ә лә ҡайтып китергә ашыҡмаған күрше әбейҙәре.

Икенсе көндө лә, өсөнсө көндө лә йорттан кеше өҙөлмәне. Сөннәт әбейе янында үлем көтөү хәсрәте менән тормош итеү рәхәтлеге үҙ-ара буталған кеүек булды: мөнәжәт көйләүсе е лә, доға уҡыусы ы ла күп ине, улар ялҡытып ебәргәнгә, тыныс ҡына итеп, хәл-әхүәл дә  ораштылар, донъя тура ында ла  өйләштеләр, әммә ауырыуҙың сәғәт  айын  бирешкәне, хәленең  бөткәндән-бөтә барғаны күренеп тора ине.

Өсөнсө көндө, төш ваҡыты тигәндә, оло ҡыҙы фельдшер ҡатынға йүгерҙе. Күҙ йәштәренә быуылып:

—Әсәйҙең бөтә арҡа ы шарт та шорт килә, үҙ аҡылында әле,  аман Мөхәммәтғәлиҙе  орай. Уны ы ла, бахыр, ошо көндө лә әсәй янына ҡайта алмай бит, үҙ хәле хәл,— тип өҙгөләнде.

— Ҡан тамырҙары шартлай башлаған инде улай а... Ныҡ ине бит, бигерәк тә ныҡ! Йөрәк түҙгәнгә түҙә алмаҫлыҡ хәлгә килеүҙән был...  уңғы сәғәттәрелер, Маикамал, шул улының хәбәре генә йәшәтә инде уны.

Татар ауылында сит-ят телде тамам өйрәнеп, ғөрөф-ғәҙәттәргә күнеп бөткән Шура түтәкәй ана шулай  өйләнде.

— Көтөп торорғоҙ, мин хәҙер!

Ул оҙаҡ көттөрмәне. Ялтырауыҡ тимер-томорҙарын тейәп килеп тә етте.

— И-и-и, йәшәй е лә йәшәй е әле  иңә, Мәфрүзәтәй,— тине ул, әбейҙең инде үлсәгестәр ҙә көскә тойған ҡан баҫымын  үлсәгәндә.

— Шура, тәҙрәнән ҡарағыҙ, Хариса күренмәйме?— тип  ораны көс-хәл менән генә Мәфрүзә ҡарсыҡ.— Мөхәммәтғәлиемдән хат килмәнеме икән? Килмәнеме икән  уң...

Ул урынға йығылғанға тиклем өс тәүлек тигәндә, Мөхәммәтғәлиҙән ҡала, күрә е килгән кеше е килеп бөткән, инде әбейҙең  уңғы өмөтө лә өҙөлгәйне. Бына ул тын ыҙ ҡалғандай,  елкенмәй  ята башланы. Күңелдәрҙе шик алды. Ҡарсыҡтың үҙ-үҙен тотошонда көтөлмәгән яҡҡа үҙгәрештәр булмағас, был хаҡта ҡыҙыҡ ынырға ҡыйын ындылар, тын  ғына көтә бирҙеләр.

Йортто тағы  оҙон тынлыҡ баҫты. Бер аҙҙан ҡапҡаның  кирелеп  асылыуынан тимерҙәре  ыңғырашып ҡуйған тауышҡа бары ы ла айнып киткәндәй булды. Инде, ишеккә ҡарап, кем керер икән, тип көтөп тора башланылар. Шул саҡ, яңы-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 138



нан хәл кергәндәй, бары ын тағы бер ҡат иҫәрләндереп, Мәфрүзә ҡарсыҡ тороп ултырҙы, бары ын бер ҡат күҙенән кисерҙе лә, таныш кеше ен күрмәүенән ғажизланып, ишелеп төшкәндәй генә карауатына ятты. Күҙҙәре асыҡ ине әле:

— Мөхәммәтғәлиемдән хат...— уңғы улыш алғанда әйтелә башлаған үҙе ауала өҙөлөп ҡалды. Ҡарсыҡтың башы йомшаҡ мендәрҙәр йөҙөндә ине...

Ҡабаланып алынған тын шул арала кешеләрҙе ишеккә табан борҙо. Унда ҡосаҡ кереп посылка күтәргән Хариса баҫып тора ине.

— Мәфрүзә ҡоҙағый, бында иңә хат та посыл...

Ул шунда үҙенең ни бары ярты минутҡа уңға ҡалғанлығын аңланы. Йөрәген айҡаған хәсрәткә түҙә алмайынса, үгеҙ кеүек үкереп, урамға сығып йүгерҙе. Унда, өҫкө яҡ урамдан, башҡалар барғас, мин дә барайым инде, тигән кеүек, Мотиҡ төшөп килә ине. Хариса был посылка менән хаттың бынан өс көн элек үк ҡайтҡанлығын, әллә ҡасанғы үстәрҙе аҡтарып сығарып, эске бер мәкер менән, көт өн әле, тип көлөп иренең йәшереп ҡуйғанлығын белеп алған әм йәшерелгән урынынан тартып сығарып, ҡоҙағыйына йүгергән ине.

Харисаның ошо ир менән уҙған ғүмеренең бөтә мәғәнә еҙ сәғәттәре, үстәре, дошманлыҡтары башынан кискән кеүек булды. Күҙе томаланып, ул алға табан атланы әм тубырсыҡтарын ҡойоп, моңайып ҡалған ҡарағай олонона килеп төртөлдө. Саҡ ҡына сиҙәмлектә семсенеп йөрөгән ҡаҙ бәпкә енә баҫманы. Уларҙы аҡлап йөрөгән ата ҡаҙ ҡатындың итәгенән эләктереп алды. Хариса уны ҡыуманы, ҡурҡытманы, башынан ыйпап, тынысландырып, итәктәренән ысҡындырҙы, көш-көш тип ситкә ебәрҙе. Ҡаҙ ыҫылдаған булып ҡына ҡыланды ла яңынан балалары урта ына кереп баҫты.

Мәфрүзә ҡарсыҡҡа сәйгә тип ҡойолған имеҙ тубырсыҡтарҙа ҡаҙҙарҙың ғәме юҡ. Быҡылдашып, йәш сиҙәм өҙөүҙәрен беләләр. Йомшаҡ ҡына иҫеп ҡуйған ел кескәй генә бер тубырсыҡты үләндә тәгәрәшкән бәпкәләр ара ына ҡыуып кертте. Тәжрибә еҙ бәпкә йомшаҡ, ныҡынмаған мороно менән төртөп-төртөп ҡараны ла, тапап, өҫтөнән уҙҙы, йығылды, торҙо, тағы йығылды.

“Улар ҙа әҙәм балалары кеүек – тип уйланы Хариса. – Ҡайҙа абына ыларын, ҡайҙа йығыла ыларын белмәйҙәр... Уларҙы, ана, әсәләре, аталары аҡлай. Инде бына ошо ҙур ауылдың ҡәҙерле бер әсә е юҡ...”

Ғәзизә, келәттән уңғыларын алып керҙем инде тигән ине, йыйырға кәрәк булыр әле был тубырсыҡтарҙы... Кеше баҫҡансы, ҡаҙ йомошлағансы. Ҡарағай тубырсығы сәйенең сихәтенә ис нәмә етмәй ти бит. Сөннәтсе әбей юҡҡа шулай оҙаҡ йәшәмәгәндер. Әллә кешеләр доға ы йәшәттеме икән?

Юҡ, униң айҡалған күңелен сыра эҫе ендә генә ҡайнаған сәйҙәр баҫырлыҡ түгел ине. Ҡылт итеп күңеленә улы Байраҡты сөннәтләгәндән ҡалған бәке килеп төштө. Йорт бүрәнәләренең солан яғындағы ярығына ҡыҫтырып ҡуйған ине, буғай. Ҡайтырға ла алырға кәрәк булыр...

Хариса доға ын-фәләнен өйрәнеп, был изге эшкә керешеүҙе күңеленә ысынысындан беркеткән ине инде. Донъялыҡта аҙағынаса алынмаған ғәфүҙе әхирәттә бул а ла алырға кәрәктер. Бер ғүмерҙе киҫте, икенсе е башлана ғына кеүек ине әле... Бер ғүмер кисте, икенсе е әле башлана ғына ине шул...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 139



**Рәмзиә**
**ҒӘБДЕЛХАҠОВА**

# КИТМӘ!

## НОВЕЛЛА

Подъезда ут юҡ ине.

Дөм-ҡараңғыла әрмәнә- әрмәнә, Шакирә баҫҡыс ҡултыҡса ын эҙләп тапты, ыуға батыусы үҙенә уҙылған ҡулдарға нисек йәбешә, ул да уға шулай тотондо. Әллә кемдәрҙең тирле устары ыйпап үткән был ҡултыҡса уны, тоғро дуҫы ымаҡ етәкләп, өҫкә, үҙе йәшәгән етенсе ҡатҡа алып менәсәк.

Йәйге көн ни оҙон бул а ла, ваҡыты еткәс, ҡала өҫтөнә ҡара сапанын йәйеп, төн уҙылып ята. Ҡараңғылыҡ өркөтә, шикләндерә. Бина эсендә бигерәк тә. әр боролошта хәүеф ағалап тора кеүек. Ишектәр әллә нисә йоҙаҡҡа бикләнгән. Ундай-былдай хәл була ҡал а ла, улар асылмаясаҡ. Бер ни күрмәнек, бер ни ишетмәнек... Шулай тынысыраҡ. Заманалар кешеләрҙе битараф булырға өйрәтте. Ша ит менән ҡорбан бер ыҙыҡта баҫып тора. Бөгөн – ша ит, иртәгә – ҡорбан...

Шакирә тауыш-тын ыҙ ғына атларға тырыша. Әммә, нисек аҡ баҫ а ла, тулап-яр ып типкән йөрәк тауышы үҙ ҡолағына ғына түгел, бөтөн подъезға яңғырай кеүек. Ул бала саҡтан уҡ ҡараңғылыҡтан ҡурҡа. Күңеленән генә әбейе өйрәткән доғаларҙы бышылданы: "Лә хәүлә вә лә ҡүәте... Йә Хоҙайым, йүн - еҙ бәндәләреңдән аҡла! Үҙ өйөмә иҫән- ау ҡайтып инергә насип ит!"

Бына инде бишенсе ҡат. Тағы ике баҫҡыс ҡына менер ҙә үҙ буҫаға ынан атлап инер, ике ишеген дүрт йоҙаҡҡа бикләп, иркен улар. Үҙ өйөм – үҙ өңөм, үҙ көйөм.

Алтынсы ҡатты үтеп, етенсегә күтәрелгәндә, ҡатын саҡ ҡысҡырып ебәрмәне. Ике ҡат ара ындағы майҙансыҡтың тәҙрә төбөндә, теҙҙәрен ҡосоп, ниндәйҙер кеше ултыра! Әллә ир-ат, әллә ҡатын-ҡыҙ – урамдан төшкән аран ут яҡты ында ҡарға оя ылай туҙған баш ҡына шәйләнә.

"Наркоман!" – былай ҙа ҡурҡыуҙан ҡупкан йөрәген семетеп, башынан иң элек ниңәлер шул уй йүгереп үтте. Үҙ аҡылында бул а, шаран асыҡ тәҙрә төбөндә шулай иркенләп, йәйелеп ултырыр инеме был бәндә?! Саҡ ҡына улға ауышты ни ә, түбәнгә атыласаҡ бит.

Шакирә күләгә-кеше янынан шым баҫып, тыныс ҡына үтеп китмәксе ине, теге е үҙ ҡатты:

– Мин ине көтәм...

Ҡойо төбөнән бәреләуғыла гөбөрҙәп күтәрелгән ҡайтауаз ымаҡ ҡалтырауыҡ, тынғы ыҙ тауышты ишетеп, ҡатын шып туҡтаны, өндәшеүсегә арты менән баҫҡан килеш:

– Ниңә? – тип ораны.

– Миңә ша ит кәрәк. Юғи ә, аңламаясаҡтар.

– Мин ине күрмәнем, – тине ҡатын әм юлын дауам итте.

– Ә мин инең күреүеңде теләйем!

Шакирә, ярты ыны менән генә тәҙрә яғына боролоп, ҡайғыртыусан, йомшаҡ тауыш менән шәүләгә өндәште:

– Йығыла ың бит...

Шөрләүен иҙҙермәҫкә, аҡ ыҙ үҙ әйтеп, тәҙрә уйымындағы әҙәмде яр ытмаҫка кәрәк ине.

– Ә, бәлки, минең йығылғым киләлер, – тине күләгә-кеше әм киҫкен хәрәкәт менән ҡулдарын ҡош ҡанатылай йән-яҡҡа йәйеп ебәрҙе.

Тәҙрә артындағы бушлыҡты уйлап, ҡатындың тәне сымырҙап, теҙ быуындары ҡалтырап китте. Егеттең йөҙөндә и ә ила и тынызлыҡ ине.

– Уң яҡта – ҡараңғы, бысраҡ подъезд. Был – тормош, – тине ул. – Ә ул яҡта – ирек, бейеклек, сик еҙлек. Был – үлем. Ҡай ы яҡ өйкөмлөрәк? Үлем түгелме ни?

Шакирә эсенән генә тиргәнеп алды: "Ҡыҫыр хәсрәт! Төн урта ында кеше ҡурҡытып, аташып йөрөмә әң!" Уйҙары үҙҙәргә әүерелеп, ҡараңғылыҡҡа ибелде:

– Ҡанға батып, асфальтта сәсрәп ятҡан мәйет өйкөмлөләр шул?!

Ҡатын, юлын дауам итмәксе булып, бер генә аҙым я арға өлгәрҙе.

– Китмә!!! – тип ҡысҡырҙы егет.

Китмә... Китмә!!! Ҡасандыр ул да әрнеп-өҙгөләнеп шулай ҡысҡырғайны... Тик китеүсене барыбер туктата алманы.

Шакирә, артҡа боролоп ҡарауҙан үҙен көскә тыйып, алғы баҫҡысҡа күтәрелде.

– Китмә!!! – тип ҡабатланы егет. – уңғы мәлдә яңғыҙ булғым килмәй. Осошомдо кемдеңдер күреүен, мине оҙатып ҡалыуын теләйем.

Шакирәнең был иҫәр заттың ҡурҡыныс уйынында ҡатнашырға бер ниндәй теләге юҡ, әлбиттә. Тегенең асыу-яр ыуын ҡуҙғалтмаҫ өсөн, йомшаҡ ҡына аҡланғандай:

– Көнө буйы ауыҙға ризыҡ ҡапманым... – тине.

Ҡатындың теләге лә, үҙҙәре лә йән аҫрау, йәшәү менән бәйләнгән, артыҡ ғәҙәти, тәбиғи ине. Тормошҡа артын ҡуйып, упҡынға ашҡынған йән уларҙы ишетергә теләмәне.

– Ҡурҡма. Был... оҙаҡ булмаясаҡ... Мин осам да китәм.

– инең ҡанаттарың юҡ. Таштай түбән атыласаҡ ың.

Егеттең хәтере ҡалды:

– Мин таш түгел...

– Ҡош та түгел. инең ҡанаттарың юҡ, – тип ҡабатланы ҡатын.

Ул бары өс баҫҡыс күтәрелгәйне, артынан ҡабат үҙәк өҙгөс тауыш яңғыраны:

– Китмә!!!

Ҡатын иренеп кенә артына боролдо, бер нисә баҫҡыс түбән төшөп, алҡын стенаға өйәлде:

– Ни кәрәк иңә? – Тауышы арыған, битараф ине.

– Ниңә ҡаса ың ин? Ниңә мине ҡалырға өгөтләмәй ең?

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 141



– Мин яҙмышты үҙгәртә алмайым, балаҡай. Әгәр иңә бөгөн тәҙрәнән икереп үлергә яҙған икән, ин барыбер икерәсәк ең. Тәҡдирҙе уҙып булмай. Унан ине көйләп ултырырға ваҡытым да юҡ. инең – үҙ тормошоң, минең – үҙемдеке. Арыным мин...

Шакирә, үҙҙәренең дөрөҫлөгөнә ышандырырға телəгəндəй, ауыр улап ҡуйҙы.

– Мине бер кем аңламай. Аңларға ла теләмәй...

Ике яр урта ына баҫып, икеләнеп торған мәлдә ҡаршы ында пәйҙә булған был йән эйә ен егет үҙ янынан ебәрергә теләмәй, буғай. Әллә ҡотҡарыу көттө ул унан, әллә упҡынға осошон еңеләйтеү өсөн күңелен бушатҡы ы килде.

– Ә ин кемде аңлай ың уң?!

орау егеткә оҡшаманы, ул уны яуап ыҙ ҡалдырҙы. Уға был ҡатындың үҙен ҡыҙғаныуы, "китмә!" тип ялбарыуы, өгөтләүе кәрәк ине. Ул сағында донъяға булған бар асыу-үпкә ен уның өҫтөнә түгеп ҡалдырасаҡ ине.

– Миңә шундай ауыр... Мин гел яңғыҙ булдым...

– Барыбыҙ ҙа яңғыҙ, – тине ҡатын. – әр кемдең үҙ уҡмағы.

– Мине аттылар. Хыянат иттеләр.

– Беренсе тапҡырмы? Беренсе хыянат бик ауыр була ул...

– Ҡалғандары еңелме?

– Беренсе хыянат ауыр, – тине ҡатын. – Аҙаҡ өйрәнә ең.

– Хыянатҡа өйрәнеп буламы ни?

– Хыянатка өйрәнеп булмай. Ышанмаҫҡа өйрәнә ең.

– Ышанмайса нисек йәшәргә уң?

– Шуға күрә тормош ҡатлаулы инде, балаҡай. Таяныр кеше табыу ауыр.

– Ниңә ерҙә яуызлыҡ күберәк? – тип ораны егет. Шакирә менән өйләшеү уға оҡшап китте, буғай.

Был ораућа әр кешенең үҙ яуабы бар.

– Яҡшылыҡтың ҡәҙерен белеү өсөн, – тине Шакирә.

Сөнки ул күптән аңланы инде: аулыҡ ҡәҙерен ауырыуҙар , бәхет ҡәҙерен бәхет еҙҙәр, бар ҡәҙерен юҡ белә...

– Мин яҡшы булдым. Ләкин Ул мине барыбер ташланы.

Егет "Ул" үҙен айырып, баҫым я ап әйтте. Был үҙгә мөхәббәт тә, нәфрәт тә бер юлы ыйған ине. Әсе ҡамырҙағы йөҙөм кеүек.

– Тимәк, яратмаған. Ярат а, ташламаҫ ине, – тине Шакирә.

– Яратты! Тик уға хәйерселәр кәрәкмәй. Аҡса, байлыҡ кәрәк, машина... Ул мөхәббәтте байлыҡҡа алыштырҙы.

– Мөхәббәтте байлыҡ алыштыра алмай. Ул да быны аңлар. Ләкин ул иңә кәрәкмәй. Хыянатсылар өсөн йәш түкмәйҙәр, тәҙрәнән дә икермәйҙәр. Уларҙы үҙ уҡмағынан ҡыуырға кәрәк, бары шул ғына. Тормош уҡмағында сүп-сар ятмаҫҡа тейеш. Юғи ә абыныуың бар.

Егет уны әллә ишетте, әллә юҡ.

– Ул киткәс, мин ҡулымдағы бөтә аҡсаларҙы яндырҙым, – тип үҙенең шыңшыуын дауам итте. – Улар бәхет еҙлек алып килә. Аҡса – үҙе яуызлыҡ сығанағы. Шул бысраҡ ҡағыҙҙар хужа булған донъяла йәшәгем килмәй. Аҡса мөхәббәтте үлтерә...

– Яңылыша ың, балаҡай. Мөхәббәтте аҡса түгел, хыянат үлтерә.

– ин хаҡлылыр, бәлки... Ләкин хыянат бул а ла, мөхәббәт үлмәне бит! Ул хәҙер ҙә миндә йәшәй. Үҙемдеке генә түгел. Уныҡы ла... Артыҡ күп ул, артыҡ ҙур. Шуға күрә миңә ауырҙыр. Ике кешелек мөхәббәтте бер үҙем нисек күтәрәйем...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 142



– Улай булғас, ин үҙеңде түгел, мөхәббәтте үлтерергә теләй ең. Уныҡын, үҙеңдекен, Алла тыҡын...

– Алланың бында ни ҡыҫылышы? Бармы уң ул? Минең уны күргәнем юҡ.

– Беҙ күрмәгән нәмә "юҡ" тигән үҙ түгел әле.

Егет, башын теҙҙәренә алып, байтаҡ өндәшмәй торҙо. Ике е лә ҡараңғылыҡта, тынлыҡта яңғыҙ ҡалдылар. Туғыҙ ҡатлы йортта ла шундай тынлыҡ булыр икән! Уларҙан башҡа бында бер иҫән кеше ҡалмаған тиер ең. Ни менеүсе, ни төшөүсе күренмәй. Был аташҡан бәндәне төнө буйы бер үҙе аҡлап ултырмаҫ бит инде Шакирә. Китергә кәрәк. Терәк табыуҙан өйөнөп, ойой башлаған ынын стенанан көскә айырып, ул әкрен генә баҫҡысҡа табан сигенде. Ләкин егет уның ниәтен улышынан иҙеп алды, буғай: ялт итеп был яҡҡа боролдо:

– Китмә!!! Мине кемдер тыңларға тейеш. Бәлки, был уңғы теләгемдер.

– Мин арыным, – тине ҡатын. – Ғәфү ит, минең ине йыуатырлыҡ көсөм юҡ.

Ләкин егеттә уның ҡайғы ы түгел ине, илаҡ, меҫкен тауыш менән үҙ зарын түкте:

– ин йыуатма, тыңла ғына. Ул – минең ҡояшым ине! Шашып- аташып яраттым мин Уны. Хатта әсәйемдән дә артыҡ яраттым. Бары ын да оноттом. Ул ғына ҡалды. Ул ғына! Мин Ун ыҙ бер көн дә, бер миҙгел дә йәшәй алмайым! Теләмәйем дә...

– Ә ул йәшәй ала! Ундайҙар оҙаҡ әм рәхәт йәшәй. Буш йәндәрҙе ел күтәреп йөрөтә.

"Ни өйләйем мин? – тип уйланы Шакирә. – Күрмәгән-белмәгән кешене ғәйепләргә ни хаҡым бар? Ул ҡыҙ, бәлки, фәрештәгә тиң бер гона ыҙ заттыр. Бәлки, эш байлыҡта ла түгелдер... Бәлки, бер ниндәй хыянат юҡ, ул үҙенең ысын мөхәббәтен тапҡандыр... Яңылыштар ҡабатлан а ла, яҙмыштар ҡабатланмай... Ташланған йәр – үртәлгән йән ни өйләмәҫ? Ирҙәрҙең ҡатынҡыҙ күңелен аңлай торғаны бармы?!"

Уйҙарын егеттең үпкәле-янаулы уҫал тауышы бүлде:

– Мин кит әм, Ул үкенәсәк!

"Эй, бер ҡатлы йән! Ул ҡыҙый инең донъяла барлығыңды ла онотҡандыр инде. Ташлап китеүселәр артҡа боролоп ҡарамай..."

– Яңылыша ың! Үкенмәйәсәк! Ҡәбереңә лә килмәйәсәк!

Өҙөп- уғып әйтелгән рәхим еҙ үҙҙәр, тауҙан ишелгән ауыр таш ымаҡ, егет яғына тәгәрәне. Хәҡиҡәт ҡасан татлы, еңел булғаны бар?!

Был үҙҙәр бушлыҡҡа икереү өсөн тәҙрә төбөнә менеп ҡунаҡлаған кешене үртәргә-яр ытырға тейеш ине кеүек. Ләкин күңел күңелгә оҡшамай. Егет, аҡланғандай, ғәйепле, күндәм тауыш менән:

– Мин Уның илауын теләйем... – тип кенә ҡуйҙы. Әңгәмәсе енең көс өҙләгән тойоп, Шакирә тағы ла ҡыйыуланды:

– Йүләр! Ила а-илама а... иңә уң... Мәйеткә барыбер түгелме?!

– Барыбер түгел... Иртәгә бында журналистар, тикшереүселәр киләсәк. Уларға сенсация кәрәк. ин өйлә, бары ы ла бел ен: минең үлемемдә... Ул ғәйепле.

– ине төртөп төшөргән кеше юҡ. Үҙ ғәйебеңде башҡаларға ауҙарма, – тине Шакирә тыныс ҡына. – Әсәйең ине тәҙрәнән икерер өсөн үҫтермәгәндер. аташып йөрөмә, өйөңә ҡайт!

Егет уны ишетмәне лә, буғай:

– ин минең уңғы теләкте үтәргә тейеш!

Туғыҙ ҡатлы таш йорттоң шыҡ ыҙ тәҙрә төбөн йәшәү менән үлем сиге итеп айлаған был иҫәр бәндә Шакирәне күҙгә күренмәҫ ептәр менән, гүйә, үҙенә

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 143



бәйләп ҡуйған ине. Дөрләп янған ут та кешене үҙенә шулай тарта, имеш. Әгәр егет янында оҙағыраҡ тотҡарлан а, теге яҡҡа икәүләп икереүҙәре лә бар...

Ике аралағы сәйнәлеп-сыуалып бөткән ептәрҙе бер юлы өҙөргә теләгәндәй, ҡатын киҫкен боролдо:

– Өмөтләнмә! Мин ине күрмәнем, ишетмәнем. үҙең бул а, яҙып ҡалдыр. Хуш!

Китешләй егеткә шул үҙҙәрҙе ташланы ла, үҙен ҡабат туҡтатыуҙарынан ҡурҡыпмы, баҫҡыстан ҡыҙыу-ҡыҙыу менә башланы. Артынан:

– Минең ҡағыҙым да, ручкам да юҡ... – тигән меҫкен үҙҙәр ҡыуып етте.

– Булғас... икерер ең! – тип ҡысҡырҙы ҡатын етенсе ҡаттан.

– А-а-а!!!

Шакирә иҫкәнеп артына боролдо, ҡултыҡсаға таянып, аҫҡа үрелеп ҡараны. Бәй, егет башын ҡосоп урынында ултырасы.

***

Ишекте асыуға танауына әскелтем еҫтәр килеп бәрелде, түр яҡтан таныш тауыш ишетелде:

– Ығы-ғы... Ығы...

– Хәҙер, улым, хәҙер...

Шакирә ишек төбөндәге трюмо тумба ына килеп ултырҙы ла, көҙгөлә сағылған ҡатындың алҡын арҡа ына өйәлеп, күҙен йомдо. Ултырыуҙың ни ҡәҙәр рәхәт икәнен уның кеүек аңлаусы бармы икән донъяла? Ун сәғәт буйы аяҡ өҫтә тороу ҡот осҡос ауыр. Арып хәлдән тай аң да, эсең тулы ут бул а ла, көл-йылмай, кеҫә ен бушатып, аҡса ын шунда ҡалдырып кит ен өсөн, ишектән ингән әр кеше алдында шат ҡиәфәт менән бейеп тор. Ул эшләгән кибеттә талаптар шундай. Түҙ әң түҙ, түҙмә әң – биғәйбә, "Китмә, ҡал!" – тип инәлеүсе юҡ. Әҙәм бала ы ҡәҙер еҙ заман. ин киткәнде, урын бушағанды көтөп, ишек төбөндә унлап эш еҙ тапана.

"Ниңә йәшәйем мин?" – тип йыш уйлай ине Шакирә. Йәшәүен, балам өсөн, тип аҡларға тырышты. Ләкин сәләмәт кеше лә артыҡ булған был илгә, үҙе лә ауырыу йәмғиәткә уның сирле бала ы кәрәкме уң?!

– Ниңә йәшәйем мин? – тип ораны бер саҡ Шакирә нурлы йөҙлө, йылы ҡарашлы бер йәш мулланан. (Бәлки, ул мулла ла булмағандыр әле. Башына түбәтәй кейеп, бик эшлекле ҡиәфәт менән мәсеттә йөрөгәс, Шакирә ниңәлер тап бына уға ышанып үҙ ҡатты.)

Аптырап-йөҙәп йөрөгән көндәренең бере ендә йәнен ҡыйнаған орауҙарға яуап, күңеленә йыуаныс эҙләп ингән ине ул мәсеткә.

– Алла ы Тәғәлә беҙҙе ынар өсөн яратҡан, – тип яуап бирҙе теге.

Ҡатын кинәйә менән мыҫҡыллы йылмайҙы:

– Балда-майҙа йөҙөүселәрҙе лә ынаймы?

– Кемде байлыҡ, кемде юҡлыҡ, кемде хәстә менән ынай, әр кемгә – үҙенеке.

– Ниңә миңә бары ы бер юлы? Яңғыҙлыҡ та, хәйерселек тә, сир ҙә? Нисек күтәрәйем, нисек түҙәйем? – тип әрнеп ораны Шакирә.

– әр кемгә күтәрә алырлыҡ бирермен, тигән. Ауырлығына күрә сабырлығы, сиренә күрә дауа ы, гона ына күрә яза ы бар. еҙ көслө. еҙ күтәрә ала ығыҙ.

Уның үҙҙәре ҡатынды ғәжәпләнергә мәжбүр итте:

– Минме көслө? Ю-у-уҡ... Мин бик арыным... Йәшәргә теләгем дә, көсөм дә ҡалманы. Күҙемә тилмереп ҡарап ятҡан сирле улым булма а... бөгөн үк...

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 144



бауға...

Әллә үҙен нығырак ҡыҙғаныуҙарын теләп, әллә хәленең ни дәрәжәлә ауыр, сара ыҙ икәнен аңлатҡы ы килепме, Шакирә үҙе лә иҙмәй арттырып ебәрҙе. Бауға менергә уның уйында ла юҡ ине.

Был сыбар, болғауыр донъяла әле бик аҙ йәшәгән инсафлы егет, уның үҙҙәрен йөрәгенә яҡын алып, йыуатырға, өгөтләргә кереште:

– Т-т-әүбә, тиегеҙ, апай. Унда ни көткәнен беләегеҙме уң? Үҙегеҙгә ҡул алып, тыныслыҡ табырмын тип уйлай ығыҙмы? Ҙур гона ала ығыҙ бит.

Шакирә и ә үжәтләнеп баш сайҡаны:

– Мин үҙ тормошома үҙем хужа!

– Юҡ, – тине йәш мулла. – еҙҙе донъяға әсә тыуҙырған, Хоҙай йән биргән. Алла ы Тәғәлә әмеренән башҡа ғүмер өҙгәндәрҙең йәне иблис ҡулына күсә. еҙ шуны теләй егеҙме? Түҙергә кәрәк, апай. Ғазабына күрә сауабы булыр.

"Матур өйләп, аҡыл өйрәтеүе еңел ул. Үҙең минең урында бул аң, нишләр инең икән? – тип үртәлде ҡатын. – Хәйер, ин минең урында булмаҫ ың... ин дә шуларҙың бере е бит..."

Шуларҙың бере е Шакирәгә хыянат итте әм шунан уң ул ир заттарын күрә алмаҫ булды. Хыянат, гүйә, үҙенең үтмәҫ бысағы менән тәнен, йәнен телә-телә, әр күҙәнәктә кескәй ҡояш булып балҡыған мөхәббәт тамсыларын у-рып алды. Буш урынға ҡара ҡан булып нәфрәт инеп урынлашты. Күңелендә ыҫмалалай ҡайнаған шул нәфрәт юлында осраған әр ир-ат өҫтөнә шаулап түгелергә әҙер ине. Мәсеттәге тыныс, сырайы яҡты йәш мулла ла, уның аҡыллы үҙҙәре лә нәфрәт юлын бүлә алманы. Шакирә егеттең йәшлек нуры балҡыған матур күҙҙәренә туп-тура ҡарап, тегенең ҡаушап-юғалып ҡалыуынан үҙенә күрә бер тәм табып, эсендәге ағыуын түкте:

– Беҙ түҙербеҙ ҙә... Ә еҙ ниңә түҙмәй егеҙ уң?! Ауырлыҡ килде и ә, ҡой-роҡто ыртҡа алып, тиҙерәк ҡасыу яғын ҡарай ығыҙ. Барығыҙ ҙа бер! Еңел, рәхәт йәшәгегеҙ килә. Яңғыҙ әсәне лә, ҡарт ҡатынды ла, сирле баланы ла ташлап китә егеҙ. Бөтән боҙоҡлоҡтоң башында ирҙәр тора. Ирҙәр, дөрөҫөн әйткәндә, хайуандарҙан бер нәмә менән дә айырылмай. Йән юҡ бит еҙҙә... Тик мин шуны аңламайым: әгәр Хоҙай ғәҙел икән, ни өсөн тигеҙлек юҡ? Әллә Алла үҙе лә ирҙәр яҡлымы?!

Уның үҙҙәре егетте тағы ҡурҡыуға алды, өйкөмлә йөҙөнә күгелйем тим-гелдәр бәреп сыҡты, ул хатта тотлоға уҡ башланы:

– А-п-пай, улай ярамай. еҙ бик ҡурҡыныс үҙҙәр өйләй егеҙ. Алла ҡар-шында барыбыҙ ҙа тигеҙ. Уға тел тейҙермәгеҙ. Улығыҙ бар ҙа ба а. Ул да ир-ат енесенән. еҙҙең нәфрәт уны үлтерәсәк. Нәфрәт нәфрәт үрсетә. Мөхәббәт кенә терелтә, йәшәргә көс бирә. Сабыр булығыҙ, апай.

Егет был үҙҙәрҙе ялбарып, иларға етешеп әйтте. Күрә ең, ул әле мулла ла булмағандыр, шунда уҡып йөрөүсе шәкерт кенә булғандыр. Сөнки икенсе юлы мәсеткә килгәндә, Шакирәне башҡа кеше – сал аҡаллы, бик етди, тәкәббер ҡиәфәтле бер ҡарт ҡаршы алды. Үтеп барышлай, аяҡ өҫтө генә:

– Намаҙға баҫ, мәсеткә хәйер бир. Алла ы Тәғәләнән сабырлыҡ ора, – тип кәңәштәрен бирҙе лә тиҙ-тиҙ атлап ҡыҙыл ләлә сәскәләре төшөрөлгән йәшел ишек артына инеп юғалды...

Ирҙәрҙең йәше лә, ҡарты ла уға сабыр итергә, түҙергә ҡуштылар. Ҡатын-ҡыҙ был ергә түҙер өсөн дә, ирҙәр тормошон биҙәр өсөн генә киләлер, күрә ең...

Түҙмәй ҡайҙа бар ын, түҙә Шакирә... Сабырлыҡ кәсәләре мөлдөрәмә тулған ғына түгел, ташып аҡҡан ине. Бына ултыра бит ярты мәйет булып. Урынынан ҡуҙғалырға көс табалмай. Шунда ултырған килеш йоҡлап ҡына

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 145



кит әң ине. Башҡа бер ни кәрәкмәй. Бары ял ғына, бары туйғансы рәхәтләнеп бер йоҡлай ы ғына! Донъяла иң татлы нәмә йоҡо икән…

Күҙҙәр йомола, тәнен рәхәт тулҡын биләп ала. Зәп-зәңгәр күктән алтын нурҙар тама. Күҙ алдында ик еҙ-сик еҙ йәшел болон йәйрәп ята... Ҡулына бер бәйләм ҡыр сәскәләре тотҡан аҡ күлдәкле көләс егет Шакирәгә табан атлай. Яҡыная, яҡыная… Бына инде артҡа тараЛған ҡара сәстәре, ҡуйы керпектәре аҫтында йондоҙ булып емелдәгән зәңгәр күҙҙәре, яңаҡтарын соҡорайтып йылмайған тулы ирендәре ап-асыҡ булып күренә. Шакирә, шатлығынан ҡулдарын йәйеп, уның ҡосағына атыла:

– Ризуан!!!

– Ығы-ғы, ығы…

Ҡатын иҫкәнеп күҙҙәрен асты. Улы уны көтә, саҡыра… Улының ашағы ы килә… Аҫты еүештер, йүргәктәрен алыштыра ы бар…

Ләкин ҡыймылдағы ы ла килмәй. Арыған-йонсоған тән үҙенә ял, тыныслыҡ орай. Түҙмәҫ, бер көн өҙөлөр ҙә инде…

Йоҡоло-уяулы килеш күргән төшө үткәндәр ҡуйынында ҡалған ҡояш ыҙ мәлдәрҙе яңыртты…

– Илтеп ташла быны ғәриптәр йортона!

– Ни өйләй еҥ, Ризуан?! Ул бит беҙҙеҥ бала.

– Был минеҥ бала түгел! Беҙҙеҥ нәҫелдә бындай имгәктәр юҡ! иңә алкаш бала ын тағып ебәргәндәр. Бар, кире үҙҙәренә илтеп бир! Миңә был утын түмәре кәрәкмәй. Йә – мин, йә – ул!

– Ул да йән эйә е…

– Ә мин? Мин йән эйә е түгелме, мин хайуанмы? Ғүмеребеҙҙе ошо бүгәйҙе көйләп үткәрәйекме? Уның мәңге кеше буласағы юҡ! Тыңла үҙемде, Шакирә! Мин ине ҡыҙғанып әйтәм. айла: йә мин, йә ул!!!

Шакирә айланы. Ике ен дә. Ҡатынға ир, әсәгә бала артыҡ түгел: ике е лә тан ыҡ, ике е лә ҡәҙерле, ғәзиз. Ләкин ҡарар иргә оҡшаманы…

– Китмә, Ризуан… Яңғыҙым нишләрмен?! Нисек йәшәрбеҙ ин еҙ?!

Ир өндәшмәй, осоноп-туҙынып әйберҙәрен йыя.

– Ташлама беҙҙе, Ризуан… Зин ар, китмә… Мин ин еҙ йәшәй алмайым… Мин ине яратам!!! ин беҙгә кәрәк!

– Аңлаштыҡ инде! Етте!

– Нишләйем мин инән башҡа?!

Ғорурлыҡ тура ында уйлар саҡ түгел, ғәрип бала ының, үҙенең яҙмышы, киләсәге шул ир ҡулында. Уртаҡ ояның нигеҙе лә, түбә е лә ул саҡта Ризуан ине. Ул кит ә, икмәк еҙ ҡалалар.

– Ташлама беҙҙе, Ризуан… Зин ар, китмә…

Бөтөн ынынан, тотош-килбәтенән күндәмлек, табыныу ҡысҡырып торған, Хоҙайҙың үҙе ҡаршына баҫҡандай, ҡулдарын күкрәк туры ына ҡаушарып, йәшле күҙҙәре, мөхәббәт тулы ҡарашы менән инәлеп-өмөтләнеп иренә төбәлгән ҡатындың аяҡ аҫтына бер бәйләм асҡыс килеп төшә. Ишек шапылдап ябыла…

" ин – минеҥ улар ауам, эсәр ыуым, айым-ҡояшым". Ҡасандыр Шакирәнең эҙҙәренә баҫып йөрөгән Ризуан был йортта башҡа күренмәне.

Ирҙәр шундай ышаныс ыҙ, имеш… Ирҙәр шундай ҡурҡаҡ әм көс еҙ икән…

Ләкин хыянатсылар бушлыҡҡа китмәй. Уларҙы кемдер саҡыра, көтә, йылы ҡуйын аса. Ҡала ҙур түгел, күреп тә, ишетеп тә белә Шакирә: Ризуан шат күңелле йәш ҡатыны менән тупылдап торған ике бала үҫтерә.

Ә улар шулай… аман шулай әле.

“Үткәндәрҙе уйлап, үҙеңде ҡыҙғанып ултырыуҙан файҙа юҡ, тор, Шакирә, ине улың көтә”. Ҡолаҡҡа үтә иҙгер ул, әсә е ҡайтҡанын белә. Ләкин Шакирә

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 146



ашыҡмай. Йоҡоноң йомшаҡ, йылы ҡуйынына инеп, ойоп-иҙрәп киткән тәнде урынынан ҡуҙғалтыу үлем менән бер. Ҡатын ҡан тамырҙары бүртеп, ҡыҙарып шешенгән аяҡтарын, сәнсешеп торған табандарын ышҡый. Бисараҡайҙар... Кемдәргәлер ярар өсөн арып хәлдән тайған нескә аяҡтар. Ҡоштарҙың да аяҡтары нескә... Тик уларҙың ҡанаттары бар. Хоҙай ҡоштарға ҡанат биргән, ә кешеләр ерҙә үрмәләргә мәжбүр. Ниңә беҙгә лә ҡанаттар бирмәнең, Раббым?! Ҡанаттары бул а, Шакирә был тиклем арымаç ине.

Аҡ ай-тук ай залға үтте, улы ятҡан карауат янына килде. Ҙур башлы, аҡай күҙле малай, зәңгәр урттарын күр әтеп, бәхетле йылмайҙы: "Ығы-ғы..." Шакирә улының ҡаҙ мамығылай йомшаҡ сәстәренән иркәләп, яңағынан үбеп алды. Ниндәй бул а ла, үҙенеке, йөрәгенән өҙөлөп төшкән ҡәҙерле йән.

– Хәҙер, улым, хәҙер...

Ҡатын бала ының урын-түшәген алмаштырҙы, боҙ кеүек алҡын аяҡтарын, хәл еҙ ҡулдарын дымлы сепрәк менән өрттө, иртән бешереп ҡалдырған ризыҡтарҙы йылытып ашатты, алма, кишер ҡырып бирҙе... Малай үҙенсә ниҙер гөрөлдәп бер аҙ ятты ла, иртәгә ҡабат ыңғырашып уяныр, ун йыл буйы күҙәткән тар, ҡыçынҡы бүлмәне ҡабат күрер өсөн, шешенке ҡабаҡлы, ҙур күҙҙәрен йомдо... Кисә бөгөнгә, бөгөн иртәгәгә оҡшаш, бер ниндәй үҙгәреш юҡ әм булмаясаҡ...

Бер сынаяҡ өтлө сәй эскәс, Шакирә лә урынға ауҙы. Тик арыуы баштан аш а ла, йоҡлап китә алмай, байтаҡ борғоланып ятты. Тәҙрә төбөндә бөршәйеп ултырған теге хәйер еҙ бәндә ҡабат күҙ алдына килеп баçты, инделе-сыҡтылы үҙҙәре ҡолаҡта ҡат-ҡат яңғыраны. Тәки икерҙеме икән ул? Өйөндә, бәлки, бисара әсә е тилмереп көтәләр... Ҡыçыр ҡайғы ы арҡа ында ысын хәсрәт үрсетеп йөрөмә ә уң! Үҙ ҡәҙерен үҙе белмәйсә... Уның кеүек иçәрҙәр ирекле көндән генә үҙҙәренә үлем эҙләп сапҡанда, өмөт өҙ ауырыуҙар, әрнеү-ғазаптарға түҙә-түҙә, яҡты донъяла бер генә көн, бер сәғәт бул а ла артығыраҡ йәшәр өсөн йән тырмаша...

Әйтәгүр, өйгәненең хыянаты арҡа ында аҡылын юйған егетте йыуата ла, яман ниәтенән ҡайтара ла алманы Шакирә. Әллә теләмәнеме? Әллә үҙенең дә күңеле ҡатҡан, йәне үлгәнме? Китәм, тип йәшәү менән үлем ара ындағы ҡылдай нескә ыҙыҡҡа сығып баçҡан кешене юлынан бороп, ҡабат тормошҡа ҡайтарыу өсөн ҡайҙан көстәр ала ы ла ниндәй үҙҙәр таба ы?! Көс өҙ көс өҙҙә, меçкен меçкенде йыуата аламы? Хәйер, көслөләрҙә меçкендәр ҡайғы ымы?! Ләкин... Кем кемде аҡлап, яҡлап бөтәр өн уң был донъяла? Ғәмәлдә әр кеше яңғыҙ бит. Яңғыҙ икән, тимәк, көслө булыу кәрәк. Тимәк, бар ышаныс үҙеңдә. Кешелек – яңғыҙҙар йәмғиәте...

Үҙен аҡлау өсөн күңел төбөнән тартып сығарылған был уйҙар ҙа Шакирәне әллә ни йыуата алманы, үҙен-үҙе ғәйепләү хисе йәненә дегет булып яғылғайны. Әгәр икеләнгән, аҙашҡан йән юлына Хоҙай тап быны Шакирәне сығарған икән, тимәк, шулай кәрәк булған, тимәк, ул уның көсөнә ышанған. Упҡын ҡаршы ында баçып торған егетте ауыр мәлендә яңғыҙын ташлап дөрөç эшләмәне Шакирә. "Китмә!!!" – тип ялбарғас та китте лә ә... Шакирәнән дә шул үҙҙе көттө – уға был яҡта ҡалырға, үҙенең көс өҙлөгөн аҡларға бер сәбәп кәрәк булғандыр. икерәм тигән кеше бер сәғәт буйы фәлсәфә ҡороп ултырмай: тота ла икерә. Ә Шакирә уны аңламаны, тынысландыра ы, өгөтләй е урынға, яра ына тоҙ алып, үртәп-үсекләп китеп барҙы...

Төнгө тынлыҡты боҙоп, асҡыстар шылтыраны, ике ишектең дүрт йоҙағы

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 147



ҡабат асылды...

Подъезда ут бар ине.

Шакирә бер нисә баҫҡыс түбән төшөп, аҫка күҙ алды. Тәҙрә шар асыҡ, шул бушлыктан ҡойо төбөндәй алҡын күҙҙәрен тондороп ҡараңғылыҡ ҡарап тора. Ә теге егет унда юҡ, ул ҡайҙалыр киткән...

Ҡайҙалыр...

Шакирә тәҙрә янына килеп, урамға үрелеп ҡараны. Аҫта киң итәктәрен йәйеп ултырған бөҙрә сәсле сирень ҡыуаҡтарын күрҙе. Урамда тыныс ине. Әллә бер ни булмаған, әллә булып та уҙған...

Егет киткән, тау хәтле мөхәббәтенән, йөрәк әрнеүенән ҡотолған. Әллә тотолған... Кем белә, унан ҡайтып өйләүсе юҡ. Үҙенә ҡул алған гона лы йәндәрҙе, хәлбүки, мәңгелек ғазап көтәлер... Ә ин түҙ, Шакирә. Йолҡҡоланып бөткән йәнеңде Алла ы Тәғәлә ҡулына арыу килеш тапшырыу өсөн аҡла... Әйтте бит мәсеттәге егет: "Ғүмереңде Алла әмеренән башҡа өҙ әң, йәнең иблис ҡулына күсер..." – тине.

Сирень еҫтәре еңгән алҡынса дымлы ауаны улап, асыҡ тәҙрә янында шаҡтай баҫып торҙо Шакирә. Йәйге төн серле әм уйсан ине. Ҡояш офоҡ артына юғалып, ергә ҡараңғылыҡ ингәс, кеше күңеленә әллә ниндәй сәйер уйҙар килә башлай. Шакирә лә ғаләмдең төп өҙ күҙҙәренә бағып, фәлсәфәгә бирелеп алды: "Бына шулай... Бөтөн нәмә үҙгәрә... Ҡараңғылыҡ менән яҡтылыҡ, тормош менән үлем гел йәнәшә. Ә сик еҙлеккә азат йән генә осалыр. Йән ирекле бул ын өсөн тәүҙә ерҙәге бурыстарҙы үтәп, күрә ен күреп бөтөргә кәрәк..."

Кинәт уға ҡурҡыныс булып китте. Гүйә, урамдың ҡай ылыр бер нөктә енән кемдер уны күҙәтеп, ынап-тикшереп тора. Төн ҡуйынына йәшеренгән ул билдә еҙ затҡа яҡтылыҡ усында баҫып торған Шакирә аквариумдағы балыҡ кеүек ап-асыҡ күренәлер. Ҡатын, был ҡараштың көсөн йәне-тәне менән тойоп, ҡалтыранып ҡуйҙы, ҡараңғылыҡ морон уҙған тәҙрәнән тиҙерәк алыҫлашырға теләп, ашыға-ҡабалана үҙ ҡатына ынтылды.

Шул саҡ ул яҡта лифт тирбәлгән тауыш ишетелде. Етенсе ҡатта туҡтап, ишектәрен асты әм Шакирә ҡаршы ында ҡулына бер ҡосаҡ сирень сәскә е тотҡан туҙған сәсле егет пәйҙә булды. "Бер бәхетле йәнгә тан ыҡ ҡунаҡ килә..." – тип үҙе лә белмәгән кемдәндер көнләшеп ҡуйҙы ҡатын. Уға инде күптән сәскә бүләк иткәндәре юҡ.

Әммә...

– Был еҙгә... – тине егет.

Ҡойо төбөнән ҡайтауаздай бәрелә- уғыла гөбөрҙәп сыҡҡан был тауыш ҡатынға таныш ине.

Егет, ғәйепле йылмайып, ҡулындағы сирендәрҙе Шакирәгә уҙҙы. Унан, кире сигенеп, әле аман ҡосағын асып үҙен көтөп торған "серле андыҡ" эсенә инеп юғалды. Ишектәр шаулап ябылды. Тимер ситлек, егетте үҙ ҡуйынына йәшереп, аҫка ынтылды...

Ап-аҡ, нәфис сәскәләрҙе, сабыйын ҡосҡандай, күкрәгенә наҙлап ҡыҫҡан ҡатын еңел улап ҡуйҙы: " икермәгән..."

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 148



# “ҠАНЫМДА — ТЫУҒАН ЕР ТОЙҒО О”

*(Талха Ғиниәтуллин менән осрашыу)*

**Әмир ӘМИНЕВ:**

*Талха Ғиниәтуллинды күптәрегеҙ шәхсән белә, берәүҙәр, үҙен күргәне булма а ла, әҫәрҙәрен уҡығаны бар. Бына байтаҡ йылдар инде уның хикәйә, повестары республика матбуғатында, шул иҫәптән “Ағиҙел” журналында ла, донъя күрә килә. Күптән түгел редакция архивынан Талха Йомабай улының бер ҡыҫҡа ғына хатын таптым. Унда былай тиелә: “Здравствуй, Раис! Высылаю тебе один свой опус. Может подойдет для “Агидели”. Если понравится, переведите и печатайте. Если нет, бросай в корзину. С приветом — Талха”.*

*Рәйес тигәне — Рәйес Низамов, 1974—1978 йылдарҙа журналдың баш мөхәррире булып эшләгән яҙыусы. Хаттың дата ы юҡ, ниндәй хикәйә икәнлеге лә әйтелмәгән. Уны Талха ағай хәҙер үҙе лә хәтерләмәйҙер. Был хатты әле шуның өсөн уҡыным: ағайҙың бынан утыҙ йылдар элек үк әҫәрҙәрен журналда сығарырға теләге булған, тик ул дәүерҙә “үҙе юҡтың — күҙе юҡ”тан бигерәк, әлеге лә баяғы “ҡараңғыраҡ” яҙылыуы, уғышты бөтә яланғаслығында тасуирлауы, әгәр ул уғыш тура ында бул а, окоп дөрөҫлөгө, йәмғиәттәге, кеше холоҡфиғелендәге кире яҡтарҙы фашлауы ҡамасаулағандыр, тип фараз итергә генә ҡала. Хәтерем алдама а, Талха ағайҙың “Ағиҙел”дә донъя күргән беренсе әҫәре — Фәрит Иҫәнғолов тәржемә ендә “Мәтрүшкә еҫе” тигән хикәйә е булды шикелле. Ә әҫәрҙәрен журналда даими нәшер итә башлау 90-сы йылдар башында ғына мөмкин булды. Сөнки илдә сәйәси хәл үҙгәрә, демократик елдәр иҫә башлағайны, үткән уғышҡа мөнәсәбәт-ҡараш та икенселәнде. әм шул осорҙа тап Талха Ғиниәтуллиндың әҫәрҙәре кәрәк ине, дөрөҫөрәге, ҙурҙан уғып әйткәндә, тап Талха Ғиниәтуллиндыҡы ымаҡ әҫәрҙәр әлеге сәйәси хәл-торошто үҙгәртеүгә булышлыҡ итте, әҙерләне. өҙөмтәлә башҡорт уҡыусы ы Талха Ғиниәтуллин тигән оло яҙыусыны тап “Ағиҙел” аша ныҡлап белде.*

*Әҙип бөгөн Аксаков исемендәге Бөтә Рәсәй премия ына лайыҡ булған икән, иң беренсе сиратта, был беҙҙең журналдың хеҙмәтенә лә ниндәйҙер ба а, сөнки республикабыҙ уҡыусы ына уны “Ағиҙел” танытты, быға әҙәби әм мәҙәни нигеҙҙе ул әҙерләне. Әҙип хеҙмәте ваҡыт йә әтенән уңлабыраҡ та ба аланғандыр, әммә тейешле ба аланды. әм бөгөн, яҙыусының Өфөгә килеүенән файҙаланып, уның менән осрашыу үткәрергә булдыҡ. Яҙыусы үҙе лә быға бик теләп ризалыҡ бирҙе. Уның журнал редакция ы менән беренсегә осрашыуылыр ҙа әле. Әйҙәгеҙ, уны йәнә бер тапҡыр ихлас күңелдән ҡотлайыҡ, премия өсөн Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесенә, Президентыбыҙға рәхмәт әйтәйек әм осрашыуҙы башлайыҡ.*



**Рәмил ЙӘНБӘК:**

"Ағиҙел" ҡунағы

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 149



Сыңғыҙ Айытматов – юғары уҡыу йортонда алған белеме буйынса зоотехник, йәғни филология факультетын бөтмәгән. еҙ ҙә, белеүемсә, филфакта уҡымаған - ығыҙ. Ул да, еҙ ҙә оригиналь яҙыусы. Бәлки, яҙыусы була ы кешеләрҙе филологияла уҡытырға кәрәкмәйҙер, ана шул оригинальность, йәғни үҙенә генә хас үҙенсәлекте юғалтмаҫ өсөн?

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН**:

Баш мөхәррир бик хаҡлы: мине башҡорт яҙыусы ы итеп тап “Ағиҙел” асты. Күләмле хикәйәләр, повестар иң беренсе нәүбәттә ошо баҫмала донъя күрҙе, шуға ла мин журналға, журнал коллективына бик рәхмәтлемен, еҙ мине аңланығыҙ, үҙ иттегеҙ. Ә орауға яуабым былай. Мәскәү журналдары редакцияларында күпселектә пединститут бөткән ханымдар эшләй. Бары ы ла нисек яҙырға кәрәклеген өйрәтеп ултыра. Минең бер танышым, редактор – әрләү үҙе, тип әйтә торғайны. Бына ошо ханымдарҙы ис үтеп булмай, улай түгел, былай, тип иҫбатлап тик ултыралар. Әлбиттә, әҙәбиәт – субъектив нәмә, әммә өҫтә ятҡан, әммә е лә ҡабул иткән, таныған объектив нәмәләр ҙә бар бит. Әҙәбиәт институты бар. Әммә ул да нисек яҙырға кәрәклеген өйрәтмәй, нисек яҙырға ярамағанлығын ғына өйрәтә. Унда мин уҡыған йылдарҙа урыҫтың ҙур яҙыусы ы Константин Паустовский семинар алып барҙы әм унының, мин эшләгән осорҙа бер генә талантты ла осратманым, тигән үҙҙәре бар. Шулай булғас, уйлағыҙ инде. Мин Әҙәбиәт институтында ситтән тороп уҡыным. Беҙҙең курста ҡырҡ кеше ине. Арала Юра Аракчеев тигән егет тә булды. Студент ваҡытында әйбәт хикәйәләр яҙҙы, торараҡ сағыштырмаса билдәле яҙыусы булып китте. Ул саҡ роман яҙа ине. Романын миңә уҡырға бирҙе. Романда үҙемде таныным — мине Оськин фамилия ы менән... сыуаш иткән. Унда әлеге сыуашҡа, йәғни миңә, ошондай характеристика бирелә: грамота ыҙ, шулай ҙа редактор булып эшләй ала, әммә яҙыусы сыҡмаясаҡ. Байтаҡ йылдарҙан уң мин Юраны урамда осраттым. Кәйефе юҡ ине. Ҡыҫҡа ы, репрессияға эләккән дворяндар малайы Юра Аракчеевтың яҙыусылыҡ яҙмышы кәрәгенсә осланманы. Сәбәбеме? Сәбәбе — үҙ-үҙенә иртә ышанды, мин классик инде, тип йөрөнө, ма - айҙы, танау сөйҙө. Ә был халәт – ижад кеше е өсөн насар дошман. Яҙыусыла әр ваҡыт шик йөрөргә тейеш, икеләнеү, үҙенде дөрөҫ ба аламаныңмы, бөттөң тигән үҙ. Мин ниндәйҙер кимәлдә ила и тулҡынға эләгеп ҡала алдым, сөнки уғыш тематика ы минең тема икәнде аңланым, әм шул мине ҡотҡарҙы ла. Әммә яҙғандарҙы тиҙ генә донъяға сығарып булманы, әҙәбиәткә уғышта лейтенант булғандар килде, плацдармды улар яуланы, алдат булғандарҙы яҡын ебәрмәне әм үҙҙәрен ҙур яҙыусылар тип иҫәпләне. Бакланов, мәҫәлән. Ул, бөтә йә үдтәр кеүек үк, икенсе мөхит кеше е, икенсе менталитетлы. Редактор сағында минең “Загон”ды үткәрмәне, йәнә е, яҙыусы яҙыусы тура ында яҙырға тейеш түгел. Унан “Кисеү”ҙе кире борҙо, аҙаҡ – “Гегемон”ды. 90-сы йылдарҙа шул уҡ әйберҙәрҙе тотоп әлеге редакцияларҙы яңынан йөрөп сыҡтым. Йәнә ҡабул итмәнеләр. Әлеге ханымдар ултыра. Повесть алып килдем, тигәс: “Әҫәрегеҙ нимә тура ында?”— тип орайҙар. “ уғыш тура ында”,— тим. “Не формат”... Ауыл проза ы, ти әң, йәнә “не формат”. Боролоп сығып китеүҙән башҡа сара ҡалмай, етмә ә, рәхмәт әйтә ең. Нимәгә рәхмәт, тип аптырашҡан булалар. Нимә ул “не формат”, нимә ул “икенсе әҙәбиәт” – ис аңлай алмайым. Үҙҙәре лә аңламай, аңлата ла алмайҙар. Форма менән генә, цирк артисы ымаҡ, жонглировать итеп әҙәбиәт я ап булмай ул, әҙәбиәт реаль картиналарҙа кеше яҙмышын, холоҡ-фиғелен тормошсан тасуирларға тейеш. Ҡыуаныҫҡа ҡаршы, уңғы йылдарҙа шул йүнәлешкә кире ҡайтыу тенденция ы төҫмөрләнә, шикелле.

Провинцияла таланттар бар, Мәскәү уны күрмәй, ул, ғөмүмән, Садовое Кольцонан ары бер кемде лә күрмәй, күрергә лә теләмәй. Борис Рыжий тигән талантлы шағир бар ине. Йә үдтәр уны Свердловскиҙан Мәскәүгә килтерҙе. Әммә оҙаҡ то-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 150



ра алманы. Бындағы обстановка-мөхиткә түҙмәй кире ҡайтты әм... аҫылынды. Башын бутанылар, алданылар, маҡтанылар. Күтәрә алманы. Анна Ахматоваға ла, әйҙә, еҙҙе психотерапия менән дауалайбыҙ, тигәндәр бит. Алла аҡла ын, кәрәкмәй, дауала ағыҙ, шағир булыуҙан туҡтайым бит, тигән. Шағирҙар шулай аҡылға бер төрлөрәк була инде. Шулай булма а, яҙа ла алмаҫтар ине.

Ә филология факультеты йәки икенсе өнәр буйынса уҡыуға килгәндә, миненсә, нимә бөтөүең мө им дә түгел. Сыңғыҙ Айытматовты ғына түгел, әҙәбиәт тарихы тап филфакта уҡымағандарҙың да ҙур яҙыусы булып китеүҙәрен күпләп беләбеҙ. Әҙәбиәт институты яҙырға өйрәтмәгән ымаҡ, филология факультеты ла яҙырға өйрәтмәй бит, ниндәйҙер белем генә бирә. Курстағы ана шул ҡырҡ кешенән бер-ике генә кеше ҙур әҙәбиәткә сыға алды, ҡалғандары тороп ҡалды.

**Тамара ҒӘНИЕВА:**

Бөгөн Рәсәйҙә еҙҙең кимәлдәге прозаиктар бармы?

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

Минең кимәл ул ҡәҙәре юғары түгел.

**Тамара ҒӘНИЕВА:**

Беҙгә оҡшай.

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

Мәҫәлән, Силәбелә бына тигән прозаик Рөстәм Вәлиев йәшәй. Татар кеше е, русса яҙа. Рус булып ҡыланмай, үҙенсә яҙа, шунын менән ота ла. Гоголь дә ҡыланмаған, кемгәлер оҡшарға, оҡшатырға тырышмаған әм отҡан. Ниндәй телдә яҙ аң да, үҙең булып яҙырға кәрәк. Мәскәүҙә Мирғазиян Юныс тигән татар яҙыусы ы шулай уҡ русса яҙа. Көслө яҙыусы әм ҡыйыу кеше. Башҡорттар ара ында ла барҙыр. Рәшит Солтангәрәевтың хикәйәләрен оҡшата торғайным. Йәл, иртәрәк үлде, тағы ла көслөрәк әҫәрҙәр яҙа алыр ине. Ғөмүмән, мин шуны әйтмәксемен: Рәсәй – бик ҙур ил, унын киләсәге, күтәрелеү мөмкинлеге провинцияла, региондарҙа, бигерәк тә Себерҙә, шул иҫәптән әҙәбиәттең күтәрелеше лә. Себер былай ҙа Астафьев, Распутин, Вампилов кеүек ҙур яҙыусыларҙы бирҙе.

**Тамара ҒӘНИЕВА:**

СССР заманында яҙыусыларҙы махсус үҫтерҙеләр, йөрөттөләр, халыҡҡа күр әттеләр. Ә хәҙер шулай эшләп буламы?

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

Улар күпселектә партократия вәкилдәре булды. Улар идеологияға хеҙмәт итте. Етеш йәшәнеләр. Әммә самородоктарҙы, талантлыларҙы үткәрмәнеләр. Хрестоматик миҫал — Рәми Ғарипов. Зәйнәб Биишева көрәште, дөрөҫлөк яҡлап йөрөнө. Юҡҡа сығара алманылар, әммә юғары күтәрелергә лә ирек бирмәнеләр.

**Тамара ҒӘНИЕВА:**

еҙ Зәйнәб апай менән таныш инегеҙме?

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

Таныш инем. Бер мәл дворянин кеүек фырт ҡына Малеевка ижад йортонда йөрөп ятам. Ҡаршыға Зәйнәб апай килә. Ниңәлер ҡурҡтым да ағастар ара ына ин дә кит. Күрҙе. Ниңә ҡаса ың, ти. еҙгә ҡамасаулағым килмәгәйне, тип яуаплайым. Ҡамасауламай ың, улай янтайып йөрөмә, аралашайыҡ, ин шәп яҙыусы, ти. Яҡындан аралашма аҡ та, шулай осрашҡылай инек ижад йорттарында.

**Мәхмүт ХУЖИН:**

еҙ — Бөйөк Ватан уғышында ҡатнашыусыларҙың иң унғыларының бере е. уғыш тура ында беҙ бер төрлө ишеттек, еҙ икенсе төрлөрәк яҙа ығыҙ. Әйтәйек, уғыш башында 3,5 млн. ҡыҙылармеецтың әсирлеккә төшөүен әм уғыштың 27

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 151



млн. ҡорбан килтергәнен еҙ нисек ҡабул итә егеҙ? Ил уғышты, уғышҡан быуын яҡты донъянан китеп бөттө. Гитлер, уғыш башлағанда, беҙ яңы тәртип урынлаштырасаҡбыҙ, тигән. Ә йәмғиәт бөгөн үҙе ҡаршы уғышҡан, ҡабул итмәгән шарттарҙа йәшәй. Мәҫәлән, хосуси милекселек, баҙар иҡтисады... Германияла яңы тәртип унын бөгөнгө кимәлгәсә күтәрелеүенә булышлыҡ итә.

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

Беҙҙә немец тәртибе, немец тәртиплелеге, теүәллеге бул а, мин быны тәбрикләр генә инем. Немец тәртибе – ул икенсе нәмә, ә Гитлер бөтөнләй икенсе нәмәне күҙ уңында тотҡан. Тәртип еҙлекте. Улар уғышта еңелде, ә еңеүселәр кеүек йәшәй, ә беҙҙең көнитмешебеҙ аман да еңелеүселәрҙеке кеүек. Бына хикмәт нимәлә. Мин орауҙың аҙағынан башланым инде. Йәғни, эштең өҙөмтә енән.

**Мәхмүт ХУЖИН:**

Шулай булғас, уғышырға кәрәккәнме уң?

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

Кәрәккән, әлбиттә. Еңмә әк, еҙ булмаҫ инегеҙ. Башҡортостан булмаҫ ине. Икенсе тәртип, икенсе ҡоролош. Башҡа вариант та бар... СССР-ҙы еңеп Волганы үткәс, Гитлер үлер ине. Унын урынына власҡа икенсе кешеләр килер ине. Немецтар, эйе, мәҙәниәтле халыҡ, быларҙы ниңә ҡырырға, уларҙы бит эшләтеп тә була, тип уйланырҙар ине. СССР-ҙы еңә алмаҫтары баштан уҡ билдәле була. Ярар, дошман Волганы ла кис ен, ти. Ә Урал тауҙарына тиклем күпме ара бар, танкылар менән күпме ер үтергә кәрәк, ә танкыларға яғыулыҡ кәрәк, бүтән коммуникациялар, тәрән тыл, ҡар, буран, партизандар хәрәкәте, Себер. Днепрҙа туҡтанылар, унда ниндәйҙер кимәлдә ынылыш эшләй алырҙар ине, әлбиттә, тик Сталинград янында кәрәген алып ҡуйҙылар. өҙөмтәлә бер ниндәй ҙә немец тәртибе булмаҫ ине. уғыштағы юғалтыуҙар 30 млн. тирә е иҫәпләнә. уғыштың тәүге йылындағы әлеге юғалтыуҙар ифрат ҙур ине. Шуға ла еҙ әйткән ан дөрөҫкә яҡын булыуы ла ихтимал. Смоленскиҙан Мәскәүгә тиклемге Рәсәй ере ныҡлап аҡланманы бит. Шуға ла юғалтыуҙар күп булды. Немецтар үҙҙәре лә, Сталинград янында ҡамалыуға эләгербеҙ, тип баштарына ла килтермәне, әм был улар өсөн оло көтөлмәгәнлек булды. Алла ы Тәғәлә уларҙы аҡылдан, алдан күреүҙән мәхрүм иткәйне, эйфория күҙҙәрен томалағайны. уғыш яҙмышы Сталинград янында хәл ителде лә инде. Курск дуға ында өҫтөнлөктө кире ҡайтарырға маташып ҡаранылар, тик килеп сыҡманы. Оборонаны өҙә яҙҙылар ҙа а, маршалдар Жуков, Рокоссовскийға рәхмәт, эшелонлы оборона ойоштора алдылар. Ә ҡорбандар күп булды, сөнки Сталиндың “Бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә!” тигән бойороғо бар ине. 18—20 йәшлек малайҙарға, 30 йәшлек сержанттарға рәхмәт — улар сигенмәне. Мин ни өсөн уғышты икенсе төрлө, икенсе яҫылыҡта, героизм ыҙ күр әтәм? уғыш, нигеҙҙә, мин үрәтләгәнсә аяу ыҙ булды, унда аслыҡ та, ҡурҡыу ҙа, аяу ыҙ ҡырылыуға килтергән әҙерлек еҙ бойороҡтар ҙа, хыянат та бар ине. Кинола ғына ул әр ваҡыт беҙҙекеләр еңә, ә уғыш ис тә кино түгел. Мин шулай яҙҙым— оҙаҡ баҫманылар, сөнки совет идеология ына героизм, еңеү эйфория ы кәрәк ине. Әлбиттә, героизм да булды, ун ыҙ беҙ еңә алмаҫ та инек, әммә уғыш – көндәлек ауыр, хәлдән тайҙырғыс хеҙмәт ул. Шул мәшхәрҙә нисек тере ҡала алдым – аман аптырайым. Мин немец каска ын окоптан күрә торғайным, нисә тапҡыр пулеметҡа ҡаршы өжүмгә күтәрелдем. Тере ҡалыуым сослоҡтан, йәшеренә белеүҙән түгел, пуля йәки мина ярсығы ине әллә ҡайҙан да таба ала, ә Алла ы Тәғәлә аҡлағандыр, тим.

**Тамара ҒӘНИЕВА:**

Минең атай ҙа фронтовик ине. Ул да еҙҙең ымаҡ уғыштың асылын ғына өйләй торғайны. Мин, алдаттар тик батырлыҡ ҡына эшләргә бурыслы бит, атайым ниңә герой булмаған икән, тип уйлай торғайным. Был минең героизм нигеҙ-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 152



ендә тәрбиәләнгән бала аҡылым ине.

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

уғыш — кеше тәбиғәтенә ят күренеш, тигән Толстой. уғыштар булмаҫҡа, бер-бере енә күрше генә йәшәгән илдәр бер-бере енә ҡорал менән килмәҫкә тейеш. Әммә киләләр, керәләр, талайҙар, үлтерәләр, юҡ итәләр. Меңдәрсә-меңдәрсә йыл шулай, кешелек уғыштан бер ҙә фә ем алмай, хата ын төҙәтмәй. Тыуған килешмәүсәнлекте, ҡаршылыҡтарҙы өйләшеп, килешеп сисеп булалыр, тип уйлайым. Кешенең аң кимәле XXV быуатта ла әлеге ише ҡаласаҡ, тимәк у-ғыш ҡурҡынысы әр ваҡыт буласаҡ. Быны хатта дин дә тыя алмай. Немец алдаттарының ҡайышына “Алла беҙҙең менән” тип яҙылғайны. Гитлер хатта Алла ы Тәғәләне лә у-ғышҡа “еккән”.



*Осрашыуҙан уң.*

**Мәхмүт ХУЖИН:**

уғыштар тыныс юл менән хәл итә алмаған проблемаларҙы хәл итә. Тимәк, кешелек унан ҡотола алмай, ул ҡотолғо оҙ. Миненсә, немец армия ы илде тарҡатыр, СССР составына ингән халыҡтар айырым дәүләт булып йәшә ен өсөн килде. Ҙур ғаиләләрҙә шәхестәр үсмәй, тынлаусан кешеләр үҫә. Балтик буйы илдәре бөгөн эре аҙымдар менән алға бара, беҙ и ә беҙҙе яратмаған илдәр, НАТО блогына ингән илдәр менән уратып алынғанбыҙ. Кемгәлер ярарға, ярам аҡланырға тейешбеҙ, беҙ сит өйҙә йәшәгән кеүек йәшәйбеҙ...

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

Немецтар ең ә, Башҡортостан сәскәгә күмелеп ултырыр ине, тимәксе егеҙме?

**Мәхмүт ХУЖИН:**

Мин улай тимәнем.

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

Әйткәнемсә, немецтарҙың СССР-ҙы еңә алмаҫы алдан уҡ билдәле ине. Баҫып алыу уғышы бер ҡасан да еңеүле булмай. Була, ләкин күпмелер ваҡытҡа ғына. Иртәме, уңмы ул барыбер еңелә.

**Сабир ШӘРИПОВ:**

Ҙур яҙыусы менән шулай күҙгә-күҙ ҡарашып өйләшеп ултырыуы – беҙҙең өсөн бәхет ул. Талха ағайҙың “Айыуташ” тигән хикәйә ен бала саҡта уҡ ауыл китапхана ынан алып уҡығаным хәтерҙә. Нәшриәттә эшләгәндә “Загон” тигән китабын сығарыуҙа булышлыҡ иттем. еҙҙең өсөн шатмын. Халыҡ еҙҙе бик уҡый, командировкаларҙа осрашып өйләшкәндә, мәктәптәрҙә еҙҙе белешәләр, ижадығыҙ менән ҡыҙыҡ ыналар. еҙҙә ватансылыҡ көслө, ул әр әҫәрҙәрегеҙҙә лә бар. әр бер әҫәрҙәрегеҙҙә “башҡорт” тигән үҙ бар. Исем-фамилиялар, пейзаж, тәбиғәт, мөхит... Былар бары ы ла ижадығыҙҙы беҙгә яҡын, уҡымлы итә.

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН:**

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 153



Шулайҙыр. Был йә əттəн мин теүəл картинаны бирергə тырышам. Тасуирланған мөхит ерлекле булырға тейеш. Алдаҡты, абстракцияны уҡыусы шундуҡ иҙə. Шəжəрəм Силəбе башҡорттарына тоташа. Ə ауылыма килгəндə, Ураҙ — минең тыуған ауыл – типтəр, хəҙер тамам башҡортлашты. Беҙ “ ыу” тимəйбеҙ, “су” тибеҙ. Башҡорт теленең диалекты. Типтəрҙəр Мəскəү, Ҡандыболаҡ, уңынан Ыҡ, Бəҙрəк буйынан килеп ултырған. Ноғайбəктəр, татарҙар бик аҙ була. Алтын йыуғандар. Əсəйем дə алтын йыуҙы, атай ҙа старатель булды. Башҡорт ерендə тыуып үҫкəнмен. Ауылым тирə-яғындағы географик атамаларҙы, топонимиканы урыҫлаштырмайым, нисек бар шулай яҙам. Уларҙы мотлаҡ башҡортса аҡларға кəрəк, юҡ а бөйөк телгə əйлəндерергə əҙер генə торғандар ҙа бар. Ер тойғо о тəрəндəн килə. Ҡанда бар ул, бала саҡтан. Мин ағынам бала саҡты, бигерəк тə Мəскəүҙə саҡта.

**Гөлназ ҠОТОЕВА:**

Əлеге ваҡытта ниндəй əҫəрҙəр яҙыу менəн мəшғүл егеҙ?

**Талха ҒИНИƏТУЛЛИН:**

Башлаған əйберем “ алдат əм Алла” тип атала. Сюжеты былай. өжүмгə күтəрелгəн алдат минаға элəгеп, үлемесле яралана ла “Алла! Алла!” тип зарығып ята, Алла ы Тəғəлəнəн ярҙам орай, йəшəгем килə əле, ти. Алла ы Тəғəлə уның янына килə, тере ҡал аң, ине алда ниндəй тормош көткəнен күр əтəйемме, ти. Нисек үлгəнендə лə күр əтə алам, ине милиция үлтергəнсе туҡмаясаҡ, орден, миҙалдарын, атып алған, тип ғəйеплəйəсəктəр. Юҡ, барыбер йəшəгем килə, үлтермə, тип ялбара аман яралы алдат. уғыш яланында Алла юҡ, мин — Ғазраил, ти Алла əм алдат янынан китə. алдат ниндəйҙер ҡыштырҙау ишетə. Ирлəндəр. Уны кимерергə килгəндəр. Ҡурҡып ҡысҡыра башлай. Күҙен ас а — ябай алдаттың йөҙөн күрə... Йөкмəтке ен өйлəү ҡыҙыҡ түгел, картинаны тулы ынса күҙ алдына килтереүе ҡыйын, ҡыҫҡа ы, ошо рухта. Ғөмүмəн, ҡыйыу, хатта “нахально” яҙырға кəрəк. Көтөлмəгəнсə бул ын.

**Сабир ШƏРИПОВ:**

Прозанан башҡа бүтəн жанрҙа эшлəп ҡараманығыҙмы?

**Талха ҒИНИƏТУЛЛИН:**

Пьеса яҙып ҡарарға уй бар. Сюжеттар, темалар күп. Нисек килеп сығыр.

*Билдəле яҙыусыға бирелгəн орауҙар, əңгəмəбеҙ бының менəн генə сиклəнмəне, əлбиттə. Шулай ҙа берсə етди, берсə ирония, əммə əр саҡ ихлас бирелгəн яуаптарҙан да əҙиптең ижадын, тормошон, тарихҡа, əҙəбиəткə, халыҡҡа ҡарашмөнəсəбəтен тоҫмалламау мөмкин түгел. Ул Чеховты, Толстойҙы, ғөмүмəн, рус классика ын ғына түгел, донъя классика ын яҡшы белə. “Ауыр саҡтарҙа, əҫəрҙəрем баҫылмағанда, депрессияға бирелгəндə мине Чехов ҡотҡарҙы”,— тип иҫəплəй. Дини конфессиялар тарихы менəн яҡшы таныш. 83 йəштə булыуына ҡарамаҫтан, əҙип əле лə күп уҡый, əҙəбиəт яңылыҡтары, сəйəсəт менəн ҡыҙыҡ ына, яҙа, əр нəмəгə үҙ ҡарашы, үҙ мөнəсəбəте, үҙ фекере бар. Бына шулай ул Мəскəүҙə йəшəгəн башҡорт яҙыусы ы Талха Йомабай улы Ғиниəтуллин. Үҙенсəлекле əҫəрҙəре менəн ул беҙҙе алдағы көндəрҙə лə ҡыуандырыр əле, тип өмөтлəнəйек.*

**өйлəшеүҙе Гөлназ ҠОТОЕВА яҙып алды.**

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 154



# КЕМ  ИН, ТАЖЕТДИН ЯЛСЫҒОЛ ӘЛ-БАШҠОРДИ?

1917 йылғы Октябрь революция ына тиклемге әҙиптәребеҙ ижады тура ында белә башлауға 90-сы йылдарҙа ғына мөмкинлек асылды, совет осоронда и ә уларҙың хеҙмәттәре бер яҡлы, боҙоп күр әтелде. Миҫалға дин ә елдәрен генә алайыҡ. Улар дини-мистик тәғлимәт таратыусы суфый яҙыусы-шағирҙар тип кенә ба аланды. Шундайҙарҙың бере е – Салауат Юлаев, Баҡый сәсән кеүек шәхестәребеҙҙең замандашы 1767–1838 йылдарҙа йәшәгән Тажетдин Ялсығол, үҙе әйтеүенсә, “Күҙәй халҡының ғалимы”.

“Тажетдин ижадын, уның ниндәйерәк шәхес булыуын милләттәштәребеҙ бөгөн беләме  уң?” тигән ораუға «юҡтыр» тип әйтергә баҙнат итәм, сөнки совет осоронда уның әҫәрҙәре ентекле өйрәнелмәй, уны Болғар тарихындағы «Әйле шәжәрә е» авторы буларак ҡына беләләр. Шул уҡ ваҡытта татар мәҙәни мөхитендә (Татарстанда) әҙиптең ижады юғары ба алана. Татар атласында (833-сө бит) Тажетдин Ялсығол «татар халҡының мәғрифәтсе е, яҙыусы ы, шағиры  әм табибы» тиелә. Татар энциклопедик  үҙлегендә (432-се бит) «Абыҙҙар хәрәкәте етәкселәренең бере е, тарихсы  әм педагог» тигән ба а бирелгән. Башҡорт мәҙәни мөхитендә, йәғни “Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедия ы”нда Т. Ялсығол хаҡында «башҡорт шағиры, ғалимы, сығышы Әйле ырыуынан” тиелә. Ә ижады и ә (686-сы бит) «дини-мистик йөкмәткеле китаптар яҙыусы, суфыйсылыҡ идеяларын таратыусы» тип ба аланған.

Шулай итеп, яҡташыбыҙ хеҙмәте татар, башҡорт энциклопедик хеҙмәттәрендә ике төрлө ба аға лайыҡ булған. Был ба аларҙың ҡай ы ы нығыраҡ ышандыра?

Әҙиптең биографик белешмә ендәге псевдонимы ла иғтибарға лайыҡ. Был исемдәр аша уның заманында абруйлы зыялылар рәтендәге шәхес икәне асыҡлана. Болғар тарихында үҙен “Тажетдин Ялсығол әл-Башҡорди” тип яҙ а, «Рисаләи Ғәзизә» әҫәрендә и ә «аҙ аҙыҡлы, күп яҙыҡлы Күҙәй халҡының (ырыуының) ғалимы ла» тип атай. Үҙе үлгәндән  уң ҡәбер ташына «Тажетдин бине Ялсығол әл-Болғари әл-Иштәки» тип яҙғандар. Быны күренекле башҡорт мәғрифәтсе е Риза Фәхретдинов «Аҫар» китабына ла теркәгән.

Тажетдин ижадына татар мәғрифәтсе е Ш.Мәрҗәни юғары ба а биреп, уның тура ында «күп китаптар төҙөгән, күп сәйәхәттә йөрөгән кеше ине» тип яҙған.  Т. Ялсығол ижадын өйрәнгән башҡорт әҙиптәре ара ында Ғ. Соҡорой, М. Өмөтбаев, Р. Фәхретдиновтарҙы атарға кәрәк.

Совет осоронда ислам диненә ҡағылышлы хеҙмәттәр бөтөнләй өйрәнелмәне, шул сәбәпле күп дин ғалимдары онотолоуға дусар ителде.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 155



Бындай шәхестәрҙең исемдәре киң йәмәғәтселеккә 1960 йылдарҙа ғына билдәле була башланы. Башҡорт совет ғалимы Әхнәф Харисов «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы» тигән хеҙмәтендә Т. Ялсығол тура ында яҙып сыға (“Башҡорт әҙәбиәте тарихы”. I том, 1990 йыл, 458–468-се биттәр). Х. Вилданов та әҙиптең ижадына байҡау я ай, ғалимдарыбыҙ Ғ. Хөсәйенов, И. Ғәләүетдинов хеҙмәттәрендә лә Т. Ялсығол ижады бер ни тиклем сағылыш таба. «Башҡорт әҙәбиәте тарихында» әҙип ижады тулыраҡ яҡтыртылып, татар әҙәбиәте тарихындағы мәғлүмәттәр ҙә урын алған. Тажетдин Ялсығол ижадының төрлө яҡлы булыуы, 15 китап яҙыуы, мәғариф, аулыҡ аҡлау, хөкөм йөрөтөү, әҙәп, әҙәбиәт өлкәләрен үҙ эсенә алыуы билдәләнә.

Әҙәбиәт тарихында әҙиптең хеҙмәттәрен ба алап, уның ижадын өйрәнеүселәр “дини тәғлимәттәге суфыйсылыҡ йүнәлешен таратыусы, бөтә донъяны яратҡан Алла ыны мәдехләү (маҡтау) китаптары яҙған дин ғалимы ғына түгел, ә фани донъяға ла мөрәжәғәт итеүсе” тип атай. Ә “Болғар тарихы” әҫәрендә болғар хандары, башҡорт ырыу нәҫелдәрен теркәүе әм «Йософ үә Зөләйхә» әҫәре авторы бөйөк әҙип Ҡол Ғәлиҙе халыҡ иғтибарына еткереүе бик тә мө им, сөнки, Т. Ялсығол үҙен “Тәүәрих Болғарийы” әҫәре менән мәңгеләштергән, тип әйтергә хаҡыбыҙ бар.

Атабыҙ Әҙәмдән башлап улы Ба ауетдингә тиклем 86 быуындан торған «Әйле шәжәрә е»н төҙөгән әҙип үҙ биография ы тура ында бик аҙ мәғлүмәт ҡалдырған. Хатта билдәле булғаны ла бик ҡаршылыҡлы, сөнки шәжәрәләге менән ғилми хеҙмәттәрҙәге мәғлүмәттәрҙең тап килмәүе эҙләнеүҙәрҙе ҡатмарлаштыра. Әҙиптең тыуған ауылы асыҡланмай, ата ының ҡасан хажға китеүе, ҡайҙа ерләнеүе, Башҡортостанға ни ваҡытта ҡайтыуы (йылдары ике төрлө күр әтелгән) әм Минзәлә өйәҙендә (элекке Өфө губерна ы – **М.Ғ.**) уның ҡай ы ауылдарҙа йәшәүе төрлөсә яҙыла. Ошо ораУҙарға яуап эҙләп ҡарайыҡ.

Тажетдин 1767 йылда тыуған. Уның ата ы менән хажға нисә йәштә барыуына асыҡлыҡ индерәйек. Ата ы Ялсығол хажи, шәжәрәлә яҙылғанса, 1786 йылдың майында 65 йәштә мәрхүм була. Тажетдин Дағстандағы Диярбаҡыр ауылында 14 йыл буйы ата ының ҡайтҡанын көтә. Артабан улар ике йыл Стамбулда була, тимәк, тыуған илгә 16 йылдан уң ғына юллаНалар. Уларҙың хажға китеү ваҡыты, беҙгә билдәле булыуынса, 1770 йылға тура килеп, Тажетдингә ул саҡта 3 кенә йәш булып сыға. Былай булыуы мөмкин түгел. Үҙенең хеҙмәтендә Тажетдин ата ын 14 йыл көтөү осоронда белемен үҫтереү өҫтөндә эшләүен хәбәр итә. 49 йәшлек Ялсығолдоң улына был ваҡытта кәмендә 9-10 йәш сама ы булырға тейеш. Шәжәрәлә уның тыуған йылын күрәткәндә хата китеүе ихтимал, бәлки, күсереп яҙғанда хата ебәрелгәндер. Был – бер. Икенсенән, ата ы Ялсығолдоң ерләнгән урыны шәжәрәлә түбәндәгесә яҙыла: «...Әстерханда өс аҙна торғандан уң Ҡазан ҡала ына килдек. Унда ике ай йәшәнек. Унан Троицк ҡала ына юлландыҡ. 40 умға ҡуртымға ат алдыҡ. Ләкин ҡаланан сыҡҡанда Ялсығол хажи үҙен бик насар хис итә башланы. Сөн ауылына килеп еткәс, 65 йәшендә вафат булды».

“Башҡорт әҙәбиәте тарихы” (I том, 459-сы бит) был хәл түбәндәгесә үрәтләнә: «...Ҡазан аша тыуған яҡтарына – Троицкиға ҡарай йүнәлә, ләкин 1785 йыл Зәй буйындағы Кесе Сөн ауылында ата ы вафат булған. Тажетдин ата ы зыяратын ташламай, ошонда төпләнеп ҡала». «...Шарттарымды үтәмә әң,

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 156



әҙәй разый түгелмен, тип әйткән. Ата үҙен әм вәғәҙә ен тотоп, Зәй буйҙарында йәшәй». Әлбиттә, шәжәрәлә яҙылыуынса, Троицк ҡала ына ҡайтып етеүҙәре билдәле, ләкин Троицк өйәҙендә Сөн ауылы юҡ. «Ревизские сказки» мәғлүмәттәре (“Западные башкиры”, Өфө, 2002 йыл) йыйынтығында күрше Верхнеуральск өйәҙенең Ҡара-Табын олоҫында өйөндөк ауылы теркәлгән. Ләкин был атама кеше исеменән алынып, был Сөн йылға ы исеменә бәйле ауыл атама ына тап килмәй.

Шәжәрәләге менән ғилми хеҙмәттәге сығанаҡтарҙың ҡай ы ына ышанырға уң? Шәжәрәне күсереп яҙғандамы, әллә тәржемә иткәндә хата киттеме? Сөнки шәжәрәнең иҫке төрки теленән башҡортсаға, ә унан руссаға тәржемә ителеүе билдәле.

Үҙебеҙсә фараз йөрөтөп ҡарайыҡ. Шәжәрәлә яҙылғанса, ата менән ул Троицкиға ҡайтып еткән бул а, әҙиптең Минзәлә өйәҙендәге Зәй буйҙарында тороп ҡалыуы тура ында мәғлүмәт автобиографик түгел, ә үҙе үлгәндән уң яҙылған булыуы ихтимал.

Икенсе фараз. Сөн йылға ы Шаран, Баҡалы, Илеш менән сиктәш Татарстандың Актаныш районы аша үтә. Ихтимал, Актаныш районында ҡасандыр Сөн ауылы булып, уңынан Зәй буйҙарына күскәндер. Картала Сөн ауылы табылманы. Ялсығол хажи ерләнгән урынды ла асыҡлай ы бар. Әҙиптең Зәй буйҙарындағы ауылдарҙа йәшәүе лә тикшереүҙе талап итә. Әхнәф Харисов үҙ хеҙмәтендә, бөтә ғүмерен Мәлем ауылында үткәргән, тип яҙа. Ә Х. Вилданов хеҙмәтендә, уңғы ете йыл Еркле ҡәрйә ендә балалар уҡыта әм табиплыҡ иткәндә Имәнлебашта вафат була, тип әйтелә.

Татарстандың энциклопедик сығанаҡтарында, Тажетдиндең тыуған урыны билдә еҙ, ерләнгән урыны Имәнлебаш зыяраты урта ында, тигән мәғлүмәттәр бирелгән.

Т. Ялсығолдоң тыуған ауылы асыҡланмаған, сөнки, унан бәләкәйҙән сығып китеүе сәбәпле, үҙ хәтирәләрендә иҫкә алмағандыр. Әйле шәжәрә ендә, уның ата ы Әй йылға ына Арша йылға ы килеп ҡушылған арала йәшәүе теркәлгән, тиелә. Тимәк, Тажетдиндең тыуған ауылы Силәбе өлкә енең Ҡуҫа районына тура килеп, тикшеренеүселәргә был ауылды асыҡлай ы ҡала.

Йомғаҡлап түбәндәгеләрҙе әйтеп китеүҙе мө им тип анайым. Заманының уҡымышлы дини зыялы ы, ғалим, тарихсы, табип, мәғрифәтсе Тажетдин башҡорт мөхитенән сыҡҡан әм ижад иткән. Үкенескә ҡаршы, Минзәлә өйәҙенең Совет власы ҡарары менән Татарстан Республика ына ҡушылыуы арҡа ында, милләттәштәребеҙҙең ассимилияцияға дусар ителеүе күп шәхестәребеҙҙең онотолоуына килтерҙе. Нисек кенә булма ын, революцияға тиклем ижад иткән арҙаҡлы зыялыларыбыҙ рухы башҡорт йәмәғәтселегә, дәүләте тарафынан мәңгеләштерелеүгә хаҡлы.

2007 йылда Тажетдин Ялсығолдоң тыуыуына 240 йыл тулыу, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, «Ағиҙел» журналында ла, юбилей календарында ла иҫкә алынманы. Әҙиптең 250 йыллыҡ юбилейы ла килеп етеп, был түңәрәк дата билдәләнер, тип ышанғы килә.

**Марат ҒАФАРОВ,**
**Башҡортостан Журналистар союзы ағза ы.**
**Мәсетле районы.**

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 157



# ЛЕВ ТОЛСТОЙ КӘРӘЛЕК БАШҠОРТТАРЫ ТУРАЫНДА

уңғы ваҡыт матбуғатта, башҡорттар бер ҡасан да йәйләүгә сыҡмаған, игенселек менән шөғөлләнеп, ултыраҡ тормошта йәшәгән, тигән фекер үткәрелә башланы. Уҙған быуаттарҙа башҡорттарҙың йәйләүгә сығыуын да ҡай ы бер авторҙар “малдарҙы көтөүгә ебәреү” кеүек төшөнсә менән генә сикләргә маташа. Байтаҡ авторҙар хеҙмәттәрендә сағылыш тапҡан күсмә тормошто, ҡай ы бер башҡорттар ара ында хатта XIX быуат аҙағында–XX быуат баштарында ла күҙәтелгән йәйләүгә сығыу ғәҙәтен ғилми яҡтан кире ҡағып та тормайҙар.

Шуға күрә, төп үҙгә күсер алдынан, түбәндәге инеш үҙ кәрәк, тип иҫәпләйем. Башҡорттарҙың элек ултыраҡ тормош алып барыуын алға өргән авторҙар, үҙ халҡының тарихи үткәнен евроцентризм күҙлегенән ба алап, “ярым күсмә малсылыҡ”ты “малдарҙы көтөүлеккә ебәреү” менән алмаштыр аң, башҡорттарҙы игенселек менән шөғөлләнеүсе “цивилизациялы” халыҡтар рәтенә еңел генә индереп була, тип иҫәпләй. Шул уҡ ваҡытта әлеге Рәсәй биләмәләрендә боронғо тимер быуатынан башлап цивилизациялар тәүге дәүләт берләшмәләре ҡороусыларҙың күсмә әм ярым күсмә тормошта йәшәгән халыҡтар булыуы яҡшы билдәле. Улар боронғо иран әм төрки телдәрендә аралашҡан скиф, саҡ, савромат, сармат, ун .б. булған. II—XIII быуаттарҙа күсмә әм ярым күсмә тормошта йәшәгән Евразия халыҡтары: ундар, боронғо төркиҙәр, хазар, болгар, печенег, монгол, ҡыпсаҡ, башҡорт .б. беренселәрҙән булып юғары мәҙәниәтле, яҙма ы, әҙәбиәте, үҫешкән ҡалалары булған дәүләт әм империялар ҡорған. Улар игенселек культура ын да яҡшы белгән, әм был күсмә тормош алып барырға ҡамасауламаған. Ҡатмарлы иҡтисадлы әм юғары мәҙәниәтле цивилизацияны Сыңғыҙ хан дәүерендә монголдар, Батый хан заманында Алтын Урҙала йәшәүселәр ҙә ҡора алған. Электән килгән тормош рәүеше, географик-климат шарттарҙа был дәүләттәрҙә төп шөғөл булып малсылыҡ, айырыуса йылҡысылыҡ ҡала. Ә бының өсөн бик күп көтөүлек әм күсмә йәки ярым күсмә тормошта йәшәү кәрәк була. Күсмә тормош алып барған ҡәбиләләр әм халыҡтар үҙҙәренең төп байлығы булған меңәр баш көтөүҙәргә тупланған малдарҙы туйындырыу өсөн йыл әйләнә енә хәрәкәттә булған. Был халыҡтарҙа мал-тыуар аҡса, транспорт, аҙыҡ, ауыт- аба, кейем- алым өсөн сығанаҡ ролен дә үтәгән. Мал арҡа ында йәмғиәт йән аҫрай, яҡшы тормош алып бара алған. Күпләп мал аҫрау өсөн ике шарт: тәбиғәт-климаттың уңайлылығы әм ик еҙ-сик еҙ көтөүлектәр кәрәк булған. Урта быуаттарҙа башҡорттарҙың ярым күсмә тормошта йәшәүе Көньяҡ Уралдың тәбиғәт-климат, географик шарттарына бәйләнеп, элек башҡорттар күсенеп йөрөгән йылы яҡтарҙы күсмә халыҡтарҙың биләүе менән аңлатыла. “Күсмә тормошта йәшәүсе” төшөнсә е революцияға тиклемге, совет ғалимдары әм ҡай ы бер авторҙар иҫбатларға маташҡанса, артта ҡалғанлыҡты аңлатмай.

Игенселек менән көн күреп, ултыраҡ тормошта йәшәгән халыҡтарҙың “цивилизациялылығы” тура ында. Ултыраҡ тормошта ер эшкәртеү менән шөғөлләнгән көнсығыш славяндар дәүләтенең тик IX, X быуаттар дауамында,

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 158



Евразия биләмәләрендә төҙөлгән тәүге әм боронғо империя—Боронғо төрки ҡағанатынан уң дүрт быуат уҙғас, ул саҡта ла ер эшкәртеү менән шөғөлләнмәгән варяг күршеләр әм ярым күсмә тормошта мал аҫрап йәшәгән төркиҙәр — хазарҙарҙың сәйәси ҡатнашлығында барлыҡҡа килеүе хәҙер бер кемгә лә сер түгел. Тағы ла бер миҫал. Боронғо замандарҙан бирле башҡорттарҙың ут күрше е булып ғүмер баҡый ултыраҡ тормошта йәшәгән фин-уғыр халыҡтарының— мари, удмурт, пермь .б. ниндәйҙер цивилизацияларға нигеҙ алыуы, гегемон халыҡ булыуы тарихта билдәле түгел. Хатта күршеләре башҡорттарға ҡарата ла. Дөйөмләштереп шуны әйтергә мөмкин: цивилизациялар барлыҡҡа килеү хужалыҡ итеү факторҙары менән генә бәйләнмәгән, ә сәйәси, иҡтисади, мәҙәни, социаль .б. нигеҙлектәрҙән килә.

Тарихи Башҡортостандың көньяк-көнбайыш, көньяҡ-көнсығыш әм башҡа ҡай ы бер төбәктәрендә йәшәгән башҡорттарҙың төп шөғөлө булып оҙаҡ йылдар буйы малсылыҡ, айырыуса йылҡысылыҡ иҫәпләнгән, әм улар бик күп ерҙәр биләп йәшәгән. Башҡорттар йәйләүгә иртә яҙ менән сығып, көҙ урталарына тиклем булғандар. Йылдың ҡалған өлөшө ҡышлауҙа үткән, ә малдарҙы тибенгә сығарғандар. Йәйләү — малсылыҡ менән шөғөлләнеү урыны ғына түгел, унда башҡорттар ғаиләләре менән сыҡҡан. Шунда заманы өсөн мө им ваҡиғалар: туйҙар, йыйындар, абантуйҙар .б. байрамдар, ярыштар уҙғарылған. XX быуат башында башҡорт шағирҙарының үҙ әҫәрҙәрендә йәйләү мәлдәрен маҡтауы тиктәҫкә түгел. Башҡортостан архивтарында халҡыбыҙҙың XIX быуаттың тәүге ярты ында ла йыш ҡына йәйләүгә сығыуы тура ында тарихи документтар күп кенә аҡланған. Башҡорт халҡының хужалыҡ итеүе, көнкүреше XIX быуаттың икенсе ярты ында урыҫ яҙыусылары әҫәрҙәрендә ярай ы киң сағылыш таба. Тап ошо осорҙа, Рәсәйҙә крепостной хоҡуҡ юҡҡа сығарылғандан уң, Башҡортостанға урыҫ күскенселәренең күпләп ағылыуы арҡа ында әм аҫаба башҡорттарға үҙ биләмәләрен атырға рөхсәт бирелеү менән бәйле башҡорт ерҙәренең күпләп тартып алыныуы шарттарында ярым күсмә тормошта йәшәү өсөн уңайлыҡтар юҡҡа сыҡҡанда, ҡай ы бер башҡорттарҙың йәйләүгә сығыуы тура ында урыҫ яҙыусылары ҡиммәтле генә мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырған. Тарихи Башҡортостанға килгән урыҫ яҙыусыларының тәүге е тип 1862 йылдың майында амар ҡала ынан 130 саҡрымдағы Кәрәлек йылға ы буйындағы башҡорт йәйләүенә ҡымыҙ эсеп дауаланырға килгән Лев Толстойҙы атайҙар. 1871 йылдың июнендә бөйөк яҙыусы ошо уҡ йәйләүгә тағы ла килеп сыға. 1883 йылға тиклем Лев Николаевич был яҡтарға йыл айын игеҙ тапҡыр килеп, ярым күсмә тормошта йәшәгән башҡорттарҙың көнкүреше тура ында яҙылған хаттарында, нәфис әҫәрҙәрендә, туғандары әм хеҙмәтселәре хаҡында иҫтәлектәрҙә яҙып ҡалдыра.

Кәрәлек буйындағы башҡорт йәйләүе крәҫтиән малайы Вася Морозовтың да хәтерендә ныҡлы уйылып ҡала, әм ул түбәндәгеләрҙе яҙып ҡалдыра: “Был киң дала, бер генә ауыл да, ағастар, ҡыуаҡлыҡтар ҙа күҙгә салынмай, тик йөндән уғылған тирмәләр генә күренә. Беҙ шундай бер тирмә янында туҡтаныҡ. Беҙгә ошонда йәшәргә урын бирелде. Тирмә тығыҙ түгел, беҙ, дүрт кеше, унда үҙебеҙҙе иркен тойҙоҡ. Ер иҙәнгә келәм түшәлгән, Лев Николаевичка ятып йоҡлар өсөн кейеҙ бирәләр. Тирмәнең эсе лә, тышы ла йыйнаҡ. Был ҙур тирмә иркен избаны хәтерләтә. Ҡаҙыҡтар түңәрәк я ап ултыртылған, иҫке еҫе еңмәгән кейеҙҙәрҙе тотоп тороусы бауҙар уҙылған. Беҙҙең тирмә ике рәт булып теҙелгән бик күп тирмәләр ара ында тора ине. Шулай ҙа ул үҙенең күңелгә ятышлы, бай булыуы менән айырылып торҙо”. Морозовтың ошо иҫтәлектәрендә башҡорт йәйләүе бар булмышында төҫмөрләнә әм шул осорҙағы башҡорттарҙың йәйләүгә сығыуын раҫлаусы мәғлүмәт иҫәпләнә.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 159



Был йә əттəн Лев Толстойҙың үҙенең башҡорт йәйләүенән ҡатыны Софья Толстаяға ебәргән хаттары ла бик ҡыҙыҡлы. амар башҡорттары йәйләүенә икенсе килеүендә, 1871 йылдың 15 июнендә Софья Андреевнаға яҙған хатында, Толстой былай тип хәбәр итә: “Башҡорттарҙың бары ы ла мине танының əм шатланып ҡабул итте; әммә уларҙың шатлығы, минең кисә күреүемсә, элекке кеүек эскер еҙ түгел ине. Уларҙың иң яҡшы ерҙәрен тартып алғандар, улар ер өрөргә тотонған, əм күпселеге элекке ише ҡышлауҙан сығып китә алмай”. Ысынлап та, туғыҙ йыл эсендә ярым күсмә тормошта йәшәгән башҡорттарҙа байтаҡ үҙгәрештәр булып үтә. 1869 йылдың 10 февралендәге законға ярашлы, уларға ерҙәрен ирекле рәүештә атырға рөхсәт бирелеп, башҡорт ерҙәрен алыуҙа асыҡтан-асыҡ алдашыу күренештәре күҙәтелә. Шул арҡала ярым күсмә тормош алып барған халыҡ, малсылыҡтың иктисади нигеҙҙәре ҡаҡшау сәбәпле, тулы ынса ултыраҡ тормошҡа күсеүгә мәжбүр ителә.

Толстойҙың ҡатынына тәғәйенләгән тағы ла бер, 1871 йылдың 23 июнендә ебәрелгән, хатында башҡорт ҡышлауы тура ында мәғлүмәттәр бар. Ҡышлауҙарҙың йәйен нисек файҙаланылыуы, башҡорттарҙың унарға, балыҡ тоторға йөрөүе хаҡында ла әйтелә. “Мин үҙемде скиф хәленә килгәндәй тоям, бында бөтә е лә ҡыҙыҡлы əм яңы... башҡорттарҙан Геродот еҫе аңҡый... мин иртәнге 6,7-лә тороп ҡымыҙ эсәм дә ҡышлауға барам. Унда ҡымыҙ бешеүселәр йәшәй, улар менән сәй эсәм дә, унарға китәбеҙ...” Артабан Лев Николаевич башҡорттоң бүрегә унар итеүен оҡланып үрәтләй: “Башҡорт унарға ыбай китте əм өс бүре күрҙе. Бер нәмәнән дә ҡурҡмайынса, ул ат өҫтөнән бүреләргә ырғыны. Бүреләр уны тешләй башланы. Ул ике ен ебәрҙе лә бере ен беҙгә тотоп килтерҙе”.

1871 йылдың 27 июнендә яҙған хатында Толстой үҙенең Кәрәлек башҡорттары янындағы тормошон үрәтләй. Был хатта әле йәйләүгә сығыу бәхетенән ваз кистерелмәгән башҡорт көнкүреше, хужалыҡ тура ында байтаҡ ҡыҙыҡлы мәғлүмәт табырға мөмкин. “Башҡорт ауылы, ҡышлау ( үҙ Кәрәлек ауылы тура ында — **автор**) ике саҡрымда. Йәйләүҙә, йылға эргә ендәге яланда, өс кенә башҡорт ғаилә е. Беҙҙең хужаның (ул мулла) дүрт тирмә е бар. Бере ендә ҡатыны менән үҙе йәшәй (улы Нәғим, элек килгәндә ул малай ғына ине), икенсе ендә – ҡунаҡтар. Өсөнсө өндә – ҡымыҙ бешеүсе ике ир. Дүртенсе оло тирмәлә, ә ул элек мәсет булған... беҙ. Мин бесән түшәлгән кейеҙ өҫтөндә карауатта йоҡлайым. Степа – иҙәндә мамыҡ мендәрҙә, ә Иван икенсе мөйөштә тире өҫтөндә йоҡлай. Өҫтәл менән ултырғыс та бар. Тирә-яҡта кейем- алым эленгән. Бер мөйөштә – буфет əм аҙыҡ-түлек... икенсе ендә— кейем- алым, өсөнсө өндә – китапхана əм эш бүлмә е... Сәйҙе өтләп эсәм... Тирмәләр тирә ендә йөрөйөм, тауҙар яғынан ҡайтҡан йылҡы өйөрөн күҙәтәм. Матур күренеш: меңләп йылҡы, ҡолондары менән бейәләр. Артабан ҡымыҙ эсәм дә тағы ла йөрөргә сығып, ҡышлауға барып әйләнәм. Унда ҡымыҙ бешеүселәр, башҡалар. Төшкө ашҡа көн айын арыҡ ите, беҙ уны ағас ауыттан ҡул менән ашайбыҙ”.

Ҡатынына ебәргән икенсе бер хатында Толстой иптәштәре менән Ырғыҙ, Кәрәлек йылғалары буйында йәшәгән башҡорттарға барыуы тура ында хәбәр итә. “Беҙ, әйткәндәй, ҡымыҙ булған ерҙәрҙә сәйәхәт итергә, бер аҙ атыштырырға сыҡҡайныҡ. Ә Ырғыҙ əм Кәрәлек тура ында аҙ ғына ишетеп белә инек.... Минең граф дәрәжәмде, Столыпин менән танышлығымды бындағы башҡорттар яҡшы белә, ихтирам итә. Беҙҙе әр урында яҙып бөтөрөрлөк булмаған ҡунаҡсыллыҡ менән ҡаршы алдылар. Ҡайҙа ғына бар аң да, хужа иң элек имеҙ арығын уя, оло көбөлә бешкән ҡымыҙын сығара, келәм йәйә, мендәрен иҙәнгә ташлай ҙа ҡунаҡтарын шунда ултырта. Бере ен дә арыҡ ите ашалып, ҡымыҙ эселеп бөтмәйенсә сығармай. Ҡунаҡтарҙы үҙ ҡулы менән эсерә, ауыҙҙарына (сәнске еҙ) имеҙ ҡалъя

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 160



оғондора. Ҡабул итмә әң, уны үпкәләтә ең”. 1871 йылдың 20 июлендә ҡатынына яҙған хатында яҙыусы күсмә башҡорт ғаилә ендә кемдәр йәшәүе тура ында яҙа. Күрә ең, ғаилә суҡындырылған. “Ике Башкировты, ата ы менән улын, төшөрҙөм. Ата ы, Михаил Иванович, мәҙәк башҡорт. Ул беҙҙе шашка уйынында еңел ота. Унын 14 ир туғаны булған. Үҙенең дә 11 улы бар, уға 55 йәш, ике йәш ҡатыны бар, әм ул беҙҙең менән ҡыуышыуҙан да баш тартмай”. Артабан Толстой башҡорт ғаилә ендә балаларҙы иртә йөҙөргә өйрәтеүҙәре тура ында хәбәр итә: “Кисә беҙ ыу индек, унын (хужаның — **автор)** өс улы ла беҙҙең менән ине. 6 йәшлек Костюк 15 йәшлек аға ының муйынына йәбешкәйне, теге е шул килеш яман тәрән урында йөҙөп, өс сажин (бер сажин — 2,13 метр — **автор**) сумып та алды”.

Лев Толстойҙың ҡымыҙ эсергә махсус рәүештә килеүсе булараҡ милли башҡорт эсемлеге тура ында яҙғандары айырыуса иғтибарға лайыҡ. Бөйөк яҙыусы ҡымыҙға ярай ы юғары ба а бирә. “Иң мө име, юҡ ыныу башҡа ла инеп сыҡмай. Хәҙер мин ҡымыҙға шул тиклем күнектем әм әр ваҡыт ҡыҙмаса хәлендә йөрөйөм. Иртәнән кискә тиклем еңелсә иҫерекмен. Ҡай ы бер көндәрҙе бөтөнләй ашамайым йә аҙ-маҙ ғына ҡапҡылайым”; “ҡымыҙ шул тиклем тәмле, күҙ алдына ла килтереп булмай. Степа ла, ҡымыҙ мөғжизә, ти”; “Ҡымыҙ — ғәжәйеп эсемлек. Төрлө ауырыуҙарҙан яфаланған 10 кеше булып, бары ы ла төҙәлде”. Лев Толстой ҡымыҙҙы, башҡорт дала ын әм унда йәшәгән башҡорттарҙы, уларҙың йәшәү рәүешен шул тиклем ныҡ ярата әм 1871 йылда амар губерна ының Быҙаулыҡ өйәҙендә Таналыҡ йылға ы буйында ер алып, үҙ утарын нигеҙләй. Урындағы халыҡты, башҡорт яғының тәбиғәтен юғары ба алап, Лев Николаевич былай тип яҙа: “Бында имение атып алырға халыҡтың ябайлығы, намыҫлылығы, ихласлығы әм аҡылы булышлыҡ итте. Беҙҙекеләр холҡона оҡшаш бер ни ҙә күрмәҫ ең. Сәләмәт климат әм хужалыҡ итеүҙең ябайлығы ла ылыҡтыра”. Башҡорт ерендәге имение ына яҙыусы барлыҡ ғаилә е: ҡатыны әм 6 бала ы менән килә. Улар насар ғына йортта көн күрә, яҡында ғына, далала, ике тирмә булып, унда ғаилә е менән башҡорт Мөхәмәтша йәшәй.

Яҙыусының ҡыҙы Татьянаның яҙмаларынан да реформанан уңғы осорҙа йәшәгән ярым күсмә башҡорттарҙың көнкүреше тура ында мө им мәғлүмәттәр табырға мөмкин. Унда ҡунаҡтарҙы башҡорт ҡымыҙы менән ыйлау бай буяуҙар менән үрәтләнә. “Иртә менән улар тирмәләр яғына юлланды. Унда ҡунаҡтарҙы уңғы дәрәжәлә хөрмәтсел әм итәғәтле итеп ҡарт башҡорт Мөхәмәтша Романович ҡаршылай. Иҙәнгә түшәлгән келәм әм мендәрҙәр өҫтөндә аяҡтарын бөкләп ултырып, ул тире ауыттағы әсе әм шыйыҡ ҡымыҙҙы бутап ала ла Карелия ҡайынынан я алған ижау менән йәйенке шәшкегә ҡойоп, алға эйелә биреберәк, ҡунағына она. Атайым, ғәҙәттә, ауытты ике ҡуллап ҡабул итә лә бер тынала эсеп тә бөтөрә. Мөхәмәтша , тағы ла бер ауыт ҡымыҙ ҡойоу өсөн, унын эсеп бөтөргәнен ҡарап тора”. Татьяна ҡымыҙ әсетеү барышын да шулай уҡ ентекләп яҙып ҡалдырған. “Ҡатын-ҡыҙ яғында мин ҡымыҙ бешергә ярҙамлашам. Йылҡы тире енән тегелгән бейек тоҡтарға бейә өтө алына, унан әсегән ҡымыҙҙан ойотҡо өҫтәлеп, оҙон бешкәктәр менән болғатыла. Ни тиклем оҙағыраҡ бешел ә, ҡымыҙ шул саҡлы яҡшыраҡ иҫәпләнә. Мин был бурдюктар—бейек тоҡтар алдына аяҡ остарына баҫам да, ҡулыма бешкәк алып, башҡорт ҡатындары кеүек хәрәкәттәр я ап, болғатырға тотонам”. Яҙыусының ҡыҙы ярым күсмә тормошта йәшәгән башҡорт ҡатындары әм ҡыҙҙарының кейем- алымын, биҙәнеү әйберҙәрен дә ҡыҙыҡлы ғына үрәтләй. “Улар ситсанан тегелгән киң күлдәк кейә, итәге башҡа материалдан тегелгән оборкаларҙан тора. Күлдәктең күкрәк өлөшөндә, муйын тапҡырынан башланып тегелгән төрлө төҫтәге таҫмаларға урыҫ әм төрөк аҡсалары тишеп тағылған. Ошондай уҡ таҫмалар башҡорт ҡыҙҙарының оҙон сәс толомдарында ла бар. Мин башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары менән бейә ауырға

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 161



барҙым. Аяғына итек, башына бәрхәт кафтан ябынған әҙиәнең йәш ынын хәтерләйем. Уның сәс толомдарына ҡушып үрелгән тәңкәләр, атлаған айын, бер-бере енә бәрелеп сыңлай". Татьяна Львовнаның яҙмаларында башҡорт ирҙәре кейемдәре тура ында ла бер аҙ мәғлүмәт бар. Үҫмер егет Нәғимдең бер ҡыйыу аҙымы тура ында түбәндәге юлдарҙан уҡыйбыҙ: "Был ғәжәйеп матур сәскәләрҙе күреү менән мин бик ныҡ шатландым. Бере ен бул а ла үрелеп алайым тигәйнем, буйым етмәне. Мулла улы йәш башҡорт Нәғим, оҙаҡ уйлап тормай, тиренән тегелгән галошын, артабан йомшаҡ ҡәшел тире итеген алды ла, салбар балаҡтарын төрөп, ыуға инде. Бер ус сәскә өҙөп, уларҙы миңә тотторҙо".

1885 йылда яҙылған "Ильяс" исемле фәлсәфәгә ҡоролған хикәйә ендә Л. Толстой кеше бәхете тура ында фекер йөрөтә. Хикәйәлә башҡорттарҙың малсылыҡ менән шөғөлләнеүе үрәтләнә. Малдарҙың кәмеүе, үлеү сәбәптәре тура ында ла әйтелә. Авторҙың фекере буйынса, хужалыҡтың етешлеге ундағы мал иҫәбенә ҡарап билдәләнә. Өфө губерна ында йәшәгән Ильяс исемле башҡорттоң хужалығы тәүҙә "бай булмай": ете бейә, ике ыйыр, ике тиҫтә арыҡ. Улдары ла ата ы ғаилә ендә йәшәп, малдарҙы ҡарарға булыша. 35 йәштәргә еткәс, Ильяс үҙенең хеҙмәт өйөүсәнлеге арҡа ында байып китә. Хәҙер уның ҡура ында 200 йылҡы малы, 150 ыйыр малы, 1200 арыҡ. Малдарын көтөү, бейә әм ыйырҙарҙы ауып ҡымыҙ, сыр я ау әм май яҙыу өсөн хәҙер Ильяс кешеләр яллай.

Толстой нигеҙҙә башҡорт хужалығында мал кәмеү, үлеү әм ярым күсмә хужалыҡтың ярлыланыу сәбәптәрен дөрөҫ күр әтә: малды малайҙарға бүлеп биреп, уларҙы башҡа сығарыу, арыҡтарҙың күпләп сиргә дусар булыуы, ҡоролоҡ арҡа ында бесән етмәү, ҡышын малдың күпләп үлеүе, ҡырғыҙҙарҙың иң яҡшы өйөрҙө ҡыуып алып китеүе... Ильястың хужалығы фәҡирләнә, әм ул тун, келәм, эйәр, тирмәләрен, артабан малын да атырға мәжбүр була. Әммә шуны ла урап үтеү мөмкин түгел: хикәйәнең маҡсаты башҡа булыуҙандыр инде, яҙыусы башҡорт хужалығының бөлгөнлөккә төшөүендә хөкүмәттең улар биләгән ерҙәргә ҡарата сәйәсәтен — башҡорттарҙың төп байлығы — ерҙәрен төрлө юлдар менән тартып алыуҙы күр әтмәй.

Башҡорт ерҙәрен талау проблема ын Л. Толстой 1885 йылда ижад ителгән икенсе бер хикәйә е "Кешегә ер күп кәрәкме?" лә күтәреп сыға. Был әҫәрҙә беҙҙе иң элек яҙыусы үҙе күреп белгән башҡорт йәйләүен үрәтләүе ҡыҙыҡ ындыра. "Етенсе тәүлектә башҡорт йәйләүенә килеп еттек... Кейеҙ тирмәләрҙә йылға буйындағы далала йәшәйҙәр. Үҙҙәре ер өрмәй, икмәк тә ашамай. Малдары — далала, йылҡы өйөрө менән утлай. Тирмәләр янына ҡолондар бәйләп ҡуйылған, уларҙы көнөнә ике тапҡыр инәләрен алып килеп имеҙәләр. Бейә өтөн ауып, ҡымыҙ бешәләр. Ҡатын-ҡыҙ ҡымыҙ бешә, сыр я ай, ә ирҙәр ҡымыҙ ҙа сәй эсә, арыҡ ите ашай әм ҡурай тарта. Бөтә е лә көр күңеллеләр, йәй буйы байрам итәләр".

Шулай итеп, Л. Толстойҙың хаттарында әм әҫәрҙәрендә, уның ҡыҙының иҫтәлектәрендә XIX быуаттың икенсе ярты ында ла традицион ярым күсмә тормошта йәшәгән амар башҡорттары хужалығы тура ында беҙҙең өсөн мө им булған мәғлүмәттәр байтаҡ.

**Фуат СӨЛӘЙМӘНОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**Сибай ҡала ы.**

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 162



# ТАРИХИ РУХИӘТ ФОРУМЫ

*14-16 октябрҙә Өфөлә, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының ҙур залында, “Волга – Урал төбәгендә ислам цивилизация ы” тигән темаға III халыҡ-ара симпозиум булып үтте. Бығаса булған I әм II симпозиумдар Баҡы әм Ҡазан ҡалаларында үткәйне. Секция ултырыштары икенсе әм өсөнсө көндәрҙә Башҡортостан Республика ы Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр, сауҙа әм эшҡыуарлыҡ министрлығының, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) башҡарма комитетының биналарында барҙы. Өфө симпозиумының маҡсатын Башҡортостан Президенты М.Рәхимов элегерәк сығарылған (22.03.2008) бойороғонда “Башҡортостан Республика ының ғилми, рухи-мәҙәни бәйләнештәрен Рәсәй субъекттары, яҡын әм йыраҡ сит илдәр менән артабан үҫтереү” тип билдәләй. Ошо тарихи форумды ойоштороуҙа Ислам конференция ы ойошма ы, Ислам тарихы, сәнғәте әм мәҙәниәте тикшеренеү үҙәге (IRCICA), Башҡортостан Фәндәр академия ы, Рәсәй Фәндәр академия ы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел әм әҙәбиәт институты, Башҡорт дәүләт университеты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Өфө дәүләт сәнғәт академия ы кеүек абруйлы ойошмалар ҡатнашты.*

*III халыҡ-ара симпозиумды Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов ҡотланы әм форум тема ына мөнәсәбәтле тәрән йөкмәткеле доклад менән сығыш я аны.*

*Оло форумға йәнә Ислам тарихы, сәнғәте әм мәҙәниәте тикшеренеү үҙәге генераль директоры (IRCICA) Хәлит Эрен, Баш мөфтөй, Рәсәй мосолмандарының үҙәк диниә назараты рәйесе Тәлғәт Тажетдин, Башҡортостан диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин да үҙҙәренең ҡотлау үҙҙәрен әйтте.*

*М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында үткән пленар ултырышҡа дүрт доклад сығарылды: сәйәси фәндәр докторы, Башҡортостан Республика ы Хөкүмәтенең Премьер-министр урынбаҫары, мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министры И.Ғ.Илешевтың доклады “Башҡортостан Республика ында милли әм дини сәйәсәт” тема ына арнал а, Башҡорт дәүләт университеты профессоры, яҙыусы Р.Н.Байымов башҡорттарҙың исламлашыу эволюция ын, уның әҙәбиәттә сағылыш этаптарын юлланы; Санкт-Петербургтан РФА Шәрҡи ҡулъяҙмалар институты директоры урынбаҫары, тарих фәндәре докторы С.М. Прозоров “Исламдың йәшәйеш, тәфсир форма ы булараҡ суфыйсылыҡ” мәсьәләләренә анализ я а- а, Татар дәүләт гуманитар-педагогик әм Ҡазан дәүләт университеты профессоры Ғ.М.Дәүләтшин “Волга Болғарында фән” тигән теманы яҡтыртты.*

*Журнал уҡыусыларға беҙ Роберт Байымовтың ошо пленар ултырышта өйләгән докладын тәҡдим итәбеҙ.*

**Редакция.**

**Роберт**

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 163



## БАЙЫМОВ

# Башҡорттарҙың исламлашыу баҫҡыстарының әҙәбиәттә сағылышы

уңғы ун йыллыҡтарҙа ислам тәғлимәте башҡорттарҙа ла яңынан йылдам яңыра, нығына бара. Мосолмандарҙың изге китабы "Ҡөрьән", ни айәт, башҡортсаға ла тәржемә ителде. Башҡа төр дини әҙәбиәт тә тотҡарлыҡ ыҙ донъя күрә, ҡалаларҙа, ауылдарҙа мәсеттәр ҡалҡып сыға, мәҙрәсәләр асыла. Мөхәммәт өммәтенә йәштәрҙең күпләп килеүе лә — бөгөнгө замана күренеше. Ислам тарихын, унығ асылын фәнни күҙлектән тикшереү ынтылыштары ла күптән бара.

Әҙәбиәттә суфыйсылыҡ мәсьәләләрен тикшереүселәрҙән Әхнәф Харисов, Ғайса Хөсәйенов, Зәйтүнә Шәрипова, Башҡортостандағы ислам тәғлимәтен тарихи планда өйрәнеүселәрҙән Ай ылыу Юнысова хеҙмәттәре иғтибарҙы тарта. Былдай йүнәлештәге эҙләнеүҙәр, билдәле, бөгөн дә дауам итә. Шуның менән бергә, ислам тәғлимәтенең башҡорттарҙа таралыу рәүеше, уның тарихы, айырым үҙенсәлектәре фәнни күҙлектән ентекле өйрәнелгән, тип булмай. Совет осоронда быға, әлбиттә, шарттар ҙа юҡ ине. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар өсөн был,— ис шик еҙ, үҙенсәлекле күренеш.

Ислам тәғлимәте Мөхәммәт пәйғәмбәр йөҙөндә ғәрәптәрҙә беҙҙең эраның етенсе быуаттарында уҡ донъяға килеүенә ҡарамаҫтан, башҡорттар уның менән йөҙмә-йөҙ тик унынсы йөҙйыллыҡта ғына осраша. Был хәл башлыса 922 йылда Болғар батша ы Шилки улы Алмыш саҡырыуы буйынса Бағдадтан төрки дала ына оҙайлы сәфәргә сыҡҡан, етәксе е Сусан ар-Расси, сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт булған хәлифәт илселеге эшмәкәрлеге менән тығыҙ бәйле. Өс меңләп ат әм биш меңләгән кеше оҙатыуында барған ғәрәп илселәре, билдәле булыуынса, Урта Азия илдәре, Иран, унан ҡыпсаҡ дала ы, шул иҫәптән, бәшнәк, уғыҙ әм башҡорт биләмәләре аша ҡоро ер менән Болғарға үткән. Сәйәхәт барышында илселек төрки, йәнә хазар, славян ҡәүемдәре әм уларҙың етәкселәре менән осрашҡан, ислам диненә күсергә өндәп, урындағы халыҡтарға төрлө ба алы бүләктәр, ә етәкселәренә хәлифәттең хаттарын да тараткан. Тик, күрә ең, был саралар ҙа берҙәнбер булмаған. Бағдад хәлифенең арай ҡараусы ы Нәзир әл Хурамиҙың үҙ хаттарын ғәскәр башлыҡтарына атап (мәҫәлән, уғыҙҙарҙыҡына) яҙыуына ҡарағанда, урындағы халыҡ ара ында ислам динен таратыуҙа хәрби аспект та күҙҙән ысҡындырылмаған. Ғәрәп илселеген сәйәхәт буйынса көслө ғәскәри төркөм оҙатып барыуы ла, моғайын, ошо хаҡта өйләй.

Илселек сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт яҙыуынса, ғәрәптәр, аҡлыҡ йөҙөнән, башҡорттарға айырыуса иғтибар иткән. Сөнки уларҙы "кеше үлтереүгә әүәҫ", "төркиҙәрҙең иң уҫалы", "аяу белмәүсе башкиҫәр"[1] тип белгән.

Алғараҡ китеп, шуны әйтергә кәрәк: Бағдад илселегенең Болғарғаса барлыҡ юлы, төрлө ҡәүемдәр, шул иҫәптән, башҡорттар менән осрашыуҙары, нимә күреүҙәре, нимә хаҡында әңгәмә ҡороуҙары, уларҙан тыуған тәьҫораттар үҙ мәлендә миссия сәркәтибе Фаҙлан улы Әхмәт тарафынан ярай ы уҡ ентекле яҙып барылған. Ләкин был яҙмалар үҙ ваҡытында донъяға билдәле булмай ҡалған, онотолған. Тик ошо ваҡиғаларҙан уң мең йыл сама ы үткәс кенә (күрә ең, мөғжизәүи яҙмыш ҡушыуы арҡа ында), Фаҙлан

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 164



улы Әхмәт яҙмаларына, йыраҡ Мешхед ҡала ында, большевиктар әҙерлекләүенән ҡасып эмиграцияға китеп барышлай, XX быуаттың мәш үр бер башҡорто барып юлыға. уңыраҡ бар донъяға билдәле буласаҡ шәрҡиәтсе ғалим, башҡорт милли хәрәкәте етәксе е, Ленин, Троцкий, Сталин кимәлендә эш йөрөтөүсе сәйәсмән Зәки Вәлиди була был шәхес. уңыраҡ Зәки Вәлиди был яҙмаларҙы ентекле комментарийҙар менән уғышҡа саҡлы уҡ немец телендә нәшер итә. Шуның менән урта быуаттар шәреҡ тарихының, шул иҫәптән, башҡорт рухи донъя ының да, быға саҡ ҡараңғы пәрҙә ҡаплап торған өр-яңы сағыу биттәрен аса.

Әлбиттә, ислам тәғлимәте менән төрки дала ы, шул иҫәптән, башҡорттар ҙа, 921—922 йылдарҙағы Ғәрәп илселеге эшмәкәрлегенә тиклем дә осрашмаған түгел. Был хаҡтағы мәғлүмәттәр Ибн-Фаҙландың үҙ яҙмаларында ла ибелеп ята. Унда, мәҫәлән, башта уҡ Болғар батша ы Алмыштың Хәлифәткә хат яҙыуы, мөслимдәр әмире әл-Мөктәдирҙән ислам динен, шәриғәт ҡанундарын өйрәтерлек мөғәллим әм факи тар ебәреүен, мәсет төҙөтөп биреүен үтенеп орауы бәйән ителә. Илселек Уғыҙҙар илендә лә ислам эҙҙәрен күрә, уларҙың Йынал атлы башлыҡтары, мәҫәлән, хатта мосолманлыҡты ҡабул итеп тә маташҡан. Тик ырыуҙаштары уға: " ин мосолман булып кит әң, беҙҙең батша була алмай ың инде",— тигәс кенә баш тартырға мәжбүр булған. Башҡорттарға ла бөтөнләй ят түгел был осорҙа ислам тәғлимәте. Ибн-Фаҙлан яҙмаларында әйтелгәнсә, уларҙың бере е, мосолманлыҡты ҡабул иткәне, хатта Бағдадтан уҡ миссия составында килә.

Урал—Волга даирә е төркиҙәренә, шул иҫәптән башҡорттарға ла, ислам тәғлимәтенең үтеп инеүенә, ә Болғар дәүләтенең миләди 922 йылда уҡ мосолманлыҡты рәсми ҡабул итеүенә был халыҡтарҙың VIII—IX быуаттарҙа уҡ ислами илдәр менән сауҙа, иҡтисади, мәҙәни бәйләнештәре лә етди сәбәп. Башҡорттар йәшәгән Уралдағы тимер, баҡыр мәғдәне, төрлө аҫылташтар Урта Азия, бигерәк тә Хәрәзм сәнәғәтендә, биҙәнеү әйберҙәре рәүешендә барса Шәреҡ илдәренә таралған. Ғәрәп илселеге составында башта Урал менән Болғарҙа, унан Урал—Болғар әм Шәреҡ илдәре ара ында тимер мәғдәне сауҙа ы ойоштороп ебәргән, хатта Бағдад арайы ышаныһына ла ингән Төрк Тәкин тигән шәхес тә бар. Бағдадтан килгән Хәлифәт илселеген төрки дала ына үткәрмәҫкә тырышҡан Хәрәзм хакимы Мөхәммәт ибн-Ираҡ ҡылыҡтарын да, моғайын, тик ошоноң менән генә аңлатып булалыр. Хәрәзмша , әлбиттә, был илдәргә, уларҙың мәғдән сығанаҡтарына Бағдадтың туранан-тура хакимлығынан, үҙҙәренең йоғонто о кәмеүенән ҡурҡҡан.

Шулай ҙа был осорҙа болғарҙарҙан башҡа бүтән төркиҙәр, шул иҫәптән башҡортар ҙа, мосолманлыҡ таратыусы ғәрәптәргә әллә ни ҡаршы сыҡмаалар ҙа, тормош рәүеше булараҡ, исламды ҡабул итеүҙән алыҫ торалар; дини йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, йәшәйеш ҡанундары күсмә тормош, дала шарттарына яҡыныраҡ булған Тәңреләренә тоғро ҡала бирәләр.

Башҡорттарҙың исламды ҡабул итеүҙәре бик оҙайлы, бер нисә быуат дауамында бара, тип уйларға кәрәк. Был процесс, бер яҡтан, уларҙың ултыраҡ тормошҡа күсә барыуҙары, ғөрөф-ғәҙәт, йола, көнкүреш шарттарының ислам ҡанундарына башлыса тап килеүҙәре менән бәйле бул а, икенсенән, тирә-яҡ халыҡ әм илдәрҙең тамам мосолманлаша барыуы ла эҙ еҙ ҡалмағандыр. Башҡорттар, билдәле булыуынса, байтаҡ ваҡыт Алтын Урҙа, Нуғай, Себер, Ҡазан дәүләттәре уратма ында әм составында көн итә, улар менән бер мөхиттә, бер идеология тәьҫирендә йәшәй. Әлбиттә, башҡорттарҙың исламға ауышыуҙарының сәбәптәре былар ғына ла түгелдер. Ҡай -

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 165



ылыр мәлдә мосолман диненең, урындағы мәжүси диндәр менән сағыштырғанда, күпкә кешелеклерәк булыуы ла хәл иткес роль уйнағандыр, бәлки. Сөнки мосолман дине, билдәле булыуынса, ғәриптәргә, мохтаждарға, ауырыу-сирлеләргә, сибек-көс өҙҙәргә бик мәрхәмәтле булырға, хәйер-саҙаҡа менән дә ярҙам итергә ҡуша. Ә исламға тиклемге диндәрҙә, мәҫәлән, зороастризмда (был диндә башҡорттар ҙа булған, тигән фараз бар) — бының кире е. Авесталағы ыу әм уңыш илаиә е Ардви Сура, мәҫәлән, былай ти: “Не должен возлиянья совершить мне (т.е. от которых богиня не принимает ни молитв, ни жертв) ни увечный, ни побитый, ни хворый и больной; А также прокаженный, чья выброшена плоть!” “Не прикоснусь и к тем жертвам, которые приносят глухие и слепые, калеки и глупцы...” “Припадошные — все, кто отмечен знаком заметным слабоумия. Пусть жертв мне не приносят ни тот, кто горб имеет иль спереди, иль сзади, ни карлик без зубов”.

Заратуштра Пәйғәмбәр тәғлимәте, билдәле булыуынса, ҡот осҡос рәхимеҙ, күпләп кеше ҡорбандары килтереүҙе талап иткән Молох тигән уғыш Рабба ына ҡаршы көрәштә тыуған. Ләкин, күрә ең, көслө шәхес идеалын күтәрмәк булып, үҙе лә көс өҙҙәргә ҡарата ғәҙел еҙлектән ҡотола алмаған.

Тикшеренеүселәр Башҡортостанда ислам диненең нығыныуын бигерәк тә 1313—1342 йылдарҙа Алтын Урҙала хакимлыҡ иткән Үзбәк хан осоро менән бәйләй. Улар фекеренсә, нәҡ ошо йылдарҙа ислам башҡорттар өсөн дә үҙ диндәренә, йәшәү рәүешенә әүерелә. Быны, мәҫәлән, Башҡортостандың уңыраҡ үҙ ирке менән Урыҫ дәүләтенә ҡушылыуының (1557 й.) төп шарттарының бере е итеп, дин тотоу иреклегеn, ғөрөф-ғәҙәт, ислам байрамдарының .б. тейелмәҫлек булыу талабы ҡуйылыуы ла дәлилләй. уңынан да башҡорттар Рәсәйҙең көсләп христианлаштырыу сәйәсәтенә (ҡаршы сыҡҡандарҙы тереләй утта яндырыу осраҡтары булыуға ҡарамаҫтан) фиҙәкәр ҡаршы тора, ә 1755—1756 йылдар башҡорт хәрәкәтенең төп идеологы Батырша атлы мулла Ғабдулла Ғәлиев сәйәси талаптарының үҙәгенә ислам идеяларын ала, үҙенең халыҡҡа өндәмәләрендә хатта үҙ аллы мосолман дәүләтен төҙөү мәсәлә ен дә ҡуя[2]. Мосолманлыҡ Батыршанан уң булған күп анлы башҡорт хәрәкәттәре, шул иҫәптән уларҙың Ҡара аҡал, Кинйә, Салауат кеүек лидерҙары идеология ының да состав өлөшөн тәшкил иткән.

Был аңлашыла ла. Сөнки исламдағы ымаҡ йыйнаҡ әм ҡәтғи бер Раббылылыҡ концепция ы иң тәүҙә төрлө балбалдарға табынып, мәжүсилектә көн иткән тырым-тырағай ырыу-ҡәбиләләрҙе бер халыҡҡа берләштереүҙә, бер Алла ы байрағы аҫтына йыйыуҙа тиңдәш еҙ ҡорал ролен үтәгән. Бынан тыш, билдәле булыуынса, ислам, Ғәрәп ярымутрауында тарала башлау менән үк, мәғрифәткә ныҡ иғтибар итә. Мөхәммәт пәйғәмбәр дәүерендә, мәҫәлән, уғыштарҙа әсир төшкән бәғзе берәү ун кешене ғәрәпсә яҙыу- ыҙыуға өйрәтә ҡал а, ул әсирлектән азат ителгән, ҡоллоҡтан ҡотҡарылып, иреккә ебәрелгән.

Исламды ҡабул иткәндән уң башҡорттар ара ында ла мосолман мәғрифәте йылдам үҫеш ала, ғәрәп графика ы нигеҙендә яҙма мәҙәниәт киң тарала. Екатерина II указы менән Өфөлә башында мөфтөй торған Ырымбур Мосолман Дини йыйылышы ойошторола (1788), был ислам хәлен етди үҙгәртә әм мосолман руханиҙарының ерлегән ярай ы уҡ нығыта. 1897 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, Өфө губерна ында 1098982 (бер миллион туҡ ан игеҙ мең туғыҙ йөҙ ик ән ике) мосолман (ир әм ҡатын-ҡыҙ) була, улар губерна халҡының 50,03% тәшкил итә. 19-сы быу-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 166



аттың 1-се ярты ында Ырымбур губерна ының 12 өйәҙендә 1258 ағас әм таш мәсет булған. С.Г.Рыбаковтың билдәләп китеүенсә, башҡорт биләмәләрендә йөрөгәндә уға мәсет еҙ бер башҡорт ауылы ла осрамаған…”[3] (Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия. 1997. 306-307-се биттәр).

XX быуат башындағы башҡорт хәрәкәте лә, Рәсәй империя ы биләмәләрендә ҡупҡан Октябрь инҡилабы зилзәлә ендәге дөйөм большевистик идеологиянан айырмалы рәүештә, үҙенең милли үҙенсәлеге әм ислами рухы менән айырылып тора. 1917 йылдың 8 декабрендә Ырымбурҙа “Барлыҡ башҡорттарҙың ойоштороу ҡортолтайы”н асып, уның лидеры Зәки Вәлиди: “Динебеҙ — ислам, милләтебеҙ — төрки, шуға эшебеҙҙе лә изге Ҡөрьәндән башлайыҡ”,— ти әм был бурысты атҡарыуҙы Ырымбур имамына тапшыра. Ә уңынан, ҡоролтай делегаттарының бер тауыштан Башҡорт автономия ын иғлан итеүҙәренән сик еҙ тулҡынланып: “Бөгөн мин ғәжәп тойғо кисерәм, — ти. — Гүйә, бер яғымдан Мөхәммәт пәйғәмбәр, ә икенсе яғымдан Сыңғыҙ рухы етәкләй”. Был фекерен ул башҡа осраҡтарҙа ла: “Беҙ большевик та, меньшевик та түгел, беҙ — башҡорт”,— тип нығытып ҡуя булыр. Әммә совет осоронда “дин — халыҡ өсөн ағыу, опиум” девизы аҫтында башҡа диндәр ымаҡ, ислам тәғлимәте лә репрессив сараларға юлыға, әҙәрлекләнә, мәсеттәр ҡыйратыла, руханиҙарҙың да күбе е юҡ ителә. Әммә халыҡта исламлылыҡ рухы үнмәй, инанған идеяларға хыянат ителмәй. XX быуат аҙағында дингә ҡаршы рәсми идеологияның юҡҡа сығыуы менән үк, әйтеп кителгәнсә, Башҡортостанда дини йолаларҙың дәррәү тергеҙелеүе, мәҙрәсәләр асылыуы, мәсеттәр төҙөлөүе, “Ҡөрьән”дең башҡорт телендә донъя күреүе, хажға барыусыларҙың аны арта, составы йәшәрә барыуы, руханиҙар статусы нығыныуы, ис шик еҙ, ошо хаҡта өйләй.

Барса был ваҡиғалар — башҡорттарҙың исламлашыу этаптары, үҙ заманында уҡ халыҡ ижадында, әҙәбиәттә, шул иҫәптән нәфис әҙәбиәттә лә сағыла килгән. Быны беҙ “Алдар менән Зө рә” кеүек боронғораҡ эпик ҡомартҡыларҙа ла, “Ҡуҙ-Күрпәс…” ымаҡ уңыраҡ осор әҫәрҙәрендә лә асыҡ күрәбеҙ. Урта быуаттарҙа Ҡол Ғәлиҙең дәүер ыҙаттарын эсенә алған, сюжеты “Ҡөрьән” мотивтарына нигеҙләнгән “Йософ вә Зөләйхә” ҡисса ы кеүек әҫәрҙәр донъяға кил ә, XVIII—XIX йөҙйыллыҡтарҙа “суфый шағирҙар” ләҡәбен алған әҙиптәр ижады — тарихи үҫеш йә этенән үҙе бер үҙенсәлекле баҫҡыс. Совет осоронда дингә, башлыса, кире ҡараш йәшәне әм әҙәбиәттә лә мулла, мәзин, башҡа руханиҙар образдары негатив-сатирик планда (мәҫәлән, Булат Ишемғолдоң“Сабир мулланың Өфө муллаларына ҡәберҙән яҙған хаты”) үрәтләнде. Ошо айҡанлы тағы бер мәсьәлә.

Әлбиттә, башҡорттар ҡабул иткән ислам ғәрәптәрҙә Алла ы исеме менән бәйле тыуған дин ҡанундарының барса нескәлектәренә тап килеп бөтмәҫкә лә мөмкин. Быны беҙҙәге “Алла ы” менән бер рәттән хәҙерге көнгәсә ҡәҙимге “Тәңре”, “Хоҙай” атамаларының аҡлана килеүе лә дәлилләп тора, шикелле. Был тәбиғи, милләт рухы халыҡтарҙың йәшәү урыны, шарттары, тарихи үҙенсәлектәре менән дә бәйле. Шуға ла исламға мөнәсәбәтле башҡа күренештәрҙе лә, мәҫәлән, VIII—IX быуаттарҙа Ғәрәп ярымутрауында әм Иранда яралған суфыйсылыҡ хәрәкәте менән XVIII—XIX быуат башҡорт ерлегендә тыуған суфыйсылыҡ (рухиәттә әм шиғриәттә) ара ында, өйрәнелгәнсә, тигеҙлек билдә е ҡуйып булмауын аңларға тейешбеҙ. Шуның менән бергә, уңғы ваҡыттағы “Башҡортостанда исламдың суфыйсылыҡ йүнәлеше өҫтөнлөк алған” тигән ҡай ы бер фараздар менән дә килешеп булмай. Тикшеренеүселәр суфыйсылыҡтың өс баҫҡысын билдәләй: ас-

кетизм, мистицизм әм пантеизм. Быларҙың тәүге икәү е әр диндә лә, шул иҫәптән исламда ла бар. Ә бына өсөнсө философик төшөнсә — пантеизм бик тә үҙенсәлекле, ул рухи әм материаль донъяның бер бөтөнлөгөн генә таный, йән менән тәндең, материя менән рухтың, Раббы (юғары көс) менән тәбиғәттең бер-бере енән айырым йәшәй алыу мөмкинлеген инҡар итә. әм, ошоға ярашлы, фундаменталь ислам менән ҡаршылыҡҡа инә. Йәғни суфыйсылыҡ тәғлимәте (пантеизм) буйынса, ила илыҡ, ила и көс, Раббы ҡайҙалыр тәбиғәттән ситтә, күктә түгел, ә материаль донъяның, хатта кешенең үҙендә.

Әгәр әҙәм бала ы суфыйсылыҡ юлында әҙмә-әҙлекле, үҙ-үҙен камиллаштырыу буйынса ныҡыш эшлә ә, суфыйсылыҡтың барса баҫҡыстарын уңышлы үт ә, айырым шәхес тә ила и хәҡиҡәт, ила илыҡ кимәленә күтәрелә, Раббы менән туранан-тура өйләшә, аралаша ала, тип раҫлай был тәғлимәт. Унсури, Фаррухи, Руми, Ғүмәр Хайәм кеүек Шәреҡтең бөйөк шағирҙары суфыйсылыҡтың бындай мөмкинлектәрен йәмғиәттең социаль нигеҙҙәрен тәнҡитләүҙә лә файҙаланған. Ошонан күренеп тора: Башҡортостанда әүәл дә, бөгөн дә, ис шик еҙ, исламдың бындай төрө түгел, ә Алла - ыны ҡәҙимгесә таныған, исламдың ҡанундарына, “Ҡөрьән”дең төп нигеҙҙәренә таянған тәғлимәт кенә йәшәй килә. Шуға ла төрлө тарафтағы, төрлө халыҡтарҙа барлыҡҡа килгән суфыйсылыҡ ымаҡ оҡшаш күренештәрҙе тикшергәндә милли тарих, осор, географик урын, йәшәү рәүештәре, ғөрөф-ғәҙәт .б. тыуҙырған үҙенсәлектәрҙе сағыуыраҡ барларға йәки ҡай ы бер тышҡы билдәләрҙе генә дөйөмләштерергә тырышыу ис тә дини тәғлимәттең төп ҡанундарын, нигеҙ таштарын ҡаплап китергә йә юҡҡа сығарырға тейеш түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был процесс — башҡорттарҙың исламлашыу баҫҡыстары, халыҡтың рухи әм рухани үҫеш асылы булараҡ, ислам тәғлимәтенең тәьҫире, милли менталитетты тыуҙырыуҙағы үҙ өлөшө фәндә, шул иҫәптән әҙәбиәт ғилемендә лә, әйтеп үтелгәнсә, әлегә ныҡлап өйрәнелмәгән өлкә. Проблеманы әр яҡлап, социаль-тарихи, әхлаҡи, рухи үҫеш этаптары менән бәйле фәнни нигеҙҙә тикшереү, ис шик еҙ, халыҡтың бай рухи мираҫын тергеҙергә, уның ыңғай әм проблемалы яҡтарын объектив ба аларға, рухиәттең, милли мәҙәниәттең бөгөнгө кимәлен әм алдағы үҫеш йүнәлештәрен билдәләргә, йәш быуынды быуаттарҙың бөйөк тәжрибә ендә тәрбиәләргә ярҙам ғына итәсәк.

**ӘҘӘБИӘТ:**


*1. А.П.Ковалевский.Книга Ахмеда ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921–922 г.г. Статьи, переводы и комментарии. Харьков, 1956. с.130.*

*2. Радик Вахитов. Шежере Салавата. Уфа, “Китап”, 2008. с.32.*

*3. Башҡортостан. Ҡыҫҡаса энциклопедия. Өфө, “Башҡорт энциклопедия ы” дәүләт ғилми нәшриәте.–1997. 306-307-се биттәр.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 168



# УТЛЫ ШАҒИР

*Боҙ өҫтөндә янып аҡҡан ут мин,*
*Бәреләугыла ике ярыма.*
*Сайпылдырып сап-сал тулҡындарҙы,*
*Диңгеҙгә, тип китеп барыла...*

**Р.Түләк.**

Рәйес Түләк... Ул иҫкә төшкән айын, мин, гүйә, ажғырып аҡҡан дарья ярынан боҙҙарҙы күҙәтәм. Улар ара ында эреләре лә, ваҡтары ла, бер-бере енә атланып алғандары ла, сүп-сар йөкмәгәндәре лә бар. Ләкин бөтә иғтибарҙы боҙ өҫтөндә дөрләп янған усаҡ тарта. Белеп торам: ут көсәйгән айын, боҙ кесерәйә, ут — боҙҙо, боҙ утты йота бара, йота бара...

Башҡортостан Республика ының Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премия ы лауреаты, талантлы шағир Рәйес Түләк ҡыҫҡа ғүмерендә ут менән йәшәне. Берсә ҡапыл ғына дөрләп китте, берсә үрелде, ләкин алабарманлыҡ ҡылып, кешеләрҙең ебәк күңелен ялҡыны менән өтмәне, "өшөгәндәр"гә йылы ы йәл түгел ине. Ут тигәндә, шағирҙың шиғырҙарын күҙ уңында тотам. Ялҡынлы әҫәрҙәр яҙҙы Рәйес Түләк. Үҙе лә тотоп ҡарарға өлгөрмәгән, шағир вафат булғас донъя күргән "Мең дә икенсе кис..." китабын ҡат-ҡат уҡып сығам да йөрәгемде өткән утлы шиғырҙарына хайран ҡалам. Яҙыусылар союзы идара ында Рәйес Түләктең ҡырҡына арнап үткәрелгән хәтер кисә ендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев былай тигәйне: "Мең дә икенсе кис..." кеүек китаптар ирәк сыға". Халыҡ шағиры юҡҡа ғына шулай юғары ба аламағандыр китапты — быны ында тамсы ла шигем юҡ. Китапҡа тупланған бер генә шиғыр ҙа еңел-елпе, исем өсөн генә яҙылмаған, әр бере е йөрәккә бәрә, күңелде тетрәтә. Хәйер, Рәйес Түләк ижадта талапсан булды. Хатта гәзит-журналдарға мәкәлә яҙ а ла, унын ҡәләме фәлсәфәүи, тәрән фекерҙәре менән айырылып торор ине.

Үкенескә ҡаршы, шағир иҫән саҡта уның шиғриәте хаҡында, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев менән педагогия фәндәре докторы Рафаэль Аҙнағоловтан башҡа, яҙыусы булманы. Бер-беребеҙҙең ижадына битарафлыҡ касафатылыр был. Рауил Бикбаев Рәйес Түләк менән Әхмәр Үтәбайҙың "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып..." китабына баш үҙ яҙып, Рафаэль Аҙнағолов шағирҙың "Яныу" поэма ына ентекле байҡау я ап ҡыуандырҙы.

Рәйес Түләк... Бына әле уның "Мең дә икенсе кис..." китабын инде нисәнсе тапҡыр окланып уҡып ултырам. Бер шағирә: "Рәйестең ошо китабын өсөнсө төн ҡосаҡлап йоҡлайым", — тигәйне. Шигем юҡ. "Мең дә икенсе кис..."те мең дә икенсе кис ҡосаҡлап йоҡла аң да, тан ыҡ ҡанырлыҡ түгел шул! Китаптағы образдар, фәлсәфәүи фекерҙәр зи ене теүәл булған кемде генә әсир итмәҫ ине икән?! әр бер шиғыр шағирҙың йөрәгендә бөрөләнеп, аҡылында тамыр ебәреп, донъяға бәреп сыҡҡан. Әҫәр шулай булғанда ғына замандың ел-дауылдарына бирешмәй, мәғрур имән шикелле киң ҡоласын киреп йәшәй бирә.

Рәйес Түләктең шиғри ма ирлығы — күҙәтеүсәнлектәлер, тим. Юҡ, юҡ, маңлай күҙе бында — ботаҡ тишеге. Унын күңел күҙенең үткерлеге хаҡында үҙ йөрөтәм. Беҙҙе уратып алған әр нәмәгә: тәбиғәткә, кешеләргә, күккә, йондоҙҙарға... фәҡәт

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 169



күңел күҙе менән ҡарап күнеккән шағир ул. Ябай ғына бер миҫал: сәй өҫтәле артында ултырабыҙ. Шағир каса ына шәкәр алып болғаны ла әйтеп ҡуйҙы: “Ә нығлабыраҡ ҡара аң, ошо сәйле касала ла оло мәғәнә бар”. Ябай ҡарашҡа каса – каса, сәй сәй инде. Ләкин, ваҡыт үтеү менән, уның “Каса” исемле шиғыры ҡулыма килеп эләкте.

*Ҡара аң сит үлсәм менән*
*Ошо касаға, ынап:*
*Әҙме яҙмыш, әҙме ғүмер,*
*Сәйҙәге шәкәр ымаҡ,*
*Иреп юғала тормошта,*
*Күпме тырыш-тырышма...*
*...Бәлки, шулай тәмләнәлер,*
*Татланалыр тормош та.*

Ысынлап та, ер йөҙөндәге әр бер кешенең тәғәйенләнеше ис тә юҡҡа түгел. Изгеләрҙән – үрнәк, яуыздарҙан ғибрәт алып йәшәй кешелек, фекер төйнәй, ығымта я ай. Ләкин ҡанун аяу ыҙ: тегеләре лә, былары ла “сәйҙәге шәкәр ымаҡ” иреп юғала тормошта. Уларҙың юғалыуы ла эҙ еҙ үтмәй: тормош тәмләнә. Ә яуыздарҙы ҡайҙа итә ең? Уларҙы ла шәкәр менән бергә бутай ыңмы ни, тиер берәү? Эйе, тормош бар кешелекте бергә бутай. Ләкин яуыз, йәғни “шәкәр еҙ” тигәндәр беҙҙең дөйөм “касабыҙ”ҙың төмен юғалта алмай бит әле. Тимәк, изге күңелләләр, мәрхәмәтле йәндәр күп арабыҙҙа. Ана шуларҙың тәме, шуларҙың йәме менән йәшәйбеҙ бөгөн. Үҙеңдән ниндәй тәм ҡалыр? Бына ошо турала күберәк уйла ын ине Әҙәм бала ы!

Рәйестең күҙәтеүсән үткер күңел күҙе хаҡында әйткәндә, үҙебеҙ күреп йөрөгән ябай ғына күренеште лә телгә алғы килә:

*имер ен тип, ҡоштоң аяҡтарын,*
*Ҡанаттарын ҡырҡып алалар.*
*Матур бул ын тиеп, ағастарҙы*
*Тунап бөтөрәләр ҡалала...*

Был күренештәр беребеҙгә лә ят түгел. Маңлай күҙе менән барыбыҙ ҙа күреп, ғәҙәтләнеп бөткәнбеҙ. Тик шағир икенсерәк күрә башлай:

*Мин дә ҡырҡтым хыялым ҡанаттарын,*
*Күпме хистәремде тунаным –*
*ыйып йәшәйем, тип, талабына,*
*Ҡалыбына ошо донъяның.*

Шиғырҙың тәүге строфа ы ябай күренеште хәбәр итеү бул а, икенсе строфа ошо күренеш аша кешенең эске донъя ына баға. Ошо донъяның ҡалыбына ыйып йәшәр өсөн әҙ кешенең хыял ҡанаттары ҡырҡылдымы ни?! Әҙ ҡырҡыламы?!

Өсөнсө строфала и ә шағир ҡанаттары ҡырҡылған, хистәре йолҡҡоланған бер меҫкен ҡиәфәтендә түгел, рухы ташып, ҡаны ҡайнап торған көрәшсе сифатында яҙмышҡа оран ташлай:

*Ишетә еңме, яҙмыш! Миндә әле*
*Ҡалыптарҙы онтар айбарлыҡ.*
*Ҡош ит әң ит имәндәрҙә саңҡыр,*
*Ағас ит әң – бөркөт айларлыҡ.*

Күңел күҙенең күреү ҡеүә е тура ында тағы ла бер шиғырға туҡталып үтке килә. “Тулҡын йышлығы” тип атала ул.

*Ҡәберлектәр, антенналар кеүек,*
*Күккә оноп айын, тәре ен,*
*Зарын өйләй ошо донъялыҡта*
*Кисергәне-күргәндәренең.*
*Тырышалар, ахыры, тултырырға*
*Кешеләрҙең күңел бушлығын.*
*Кеше күҙе, кеше ҡолағы тик*
*Тота алмай тулҡын йышлығын.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 170



Донъя мәшәҡәтенә сумып, ҡеүәтле моторҙар үкереүенән тонған ҡолаҡтарыбыҙға, кемдәрҙелер нимәләлер ғәйепләп ҡатҡан йөрәктәребеҙгә ул “йышлыҡ” нисек ишетел ен инде! Бер килеп ул тулҡын йышлыҡтарын шул уҡ антенналар аҫтында үҙебеҙ ҙә ебәреп маташырбыҙ. Ләкин ер йөҙөндә йәшәгәндә үҙебеҙ үк бабаларыбыҙҙың ҡолаҡтарын тондорғанбыҙ, радар кеүек иҙгер йөрәктәрен тутыҡтырғанбыҙ икән — нимәгә өмөтләнергә мөмкин?! Үкенескә ҡаршы, ул “радар”ҙар хәҙер беҙҙең төшөбөҙгә лә инмәгән йышлыҡтарҙы үҙләштерә, әҙәм башына йймаҫ “өн”дәр сығара. Заманса, йәнә е. Ә бит бер заманда ла изгелек, мәрхәмәт кеүек әхлаҡи нурҙарҙы бер ниндәй ҙә призмалар тарҡата алмай. Ана шул нурҙарҙы иман итеп аҡлайыҡ.

Ҡәберлектәге “антенналар”ҙан ниндәй генә тулҡындар ағылмайҙыр: ыҡтау ҙа, үткән ғазаплы тормош өсөн үкенеү ҙә, өгөт-нәсихәт ауаздары ла, бәхет өндәре лә... Бына ин ҡәбер алдында. Унда иңә бары үле тынлыҡ ҡына таныш. Ләкин күңел күҙенде асыбыраҡ, анау “антенналар”ҙың аҫтында ятҡан эйәләрен уйла ла уларҙың был донъяла нисек ғүмер иткәндәрен саҡ ҡына бул а ла күҙ алдыңдан үткәрергә тырыш әле. Берәүҙәре көлкө уятыр, берәүҙәре хәсрәткә алыр, берәүҙәренә ерәнеп бағыр ың, берәүҙәргә рәхмәт уҡыр ың... Туҡта! Эш бының менән генә бөтмәй әле. Хәҙер инде үҙеңдең аҙмы-күпме йәшәлгән тормошоңдо байҡа. Аңлашыламы? Тимәк, ин улар ебәргән йышлыҡтың семтемен генә бул а ла тота алдың. “Мин ерләнгәс, башҡалар ни уйлар икән минең хаҡта?” тигән ораууың да тыуып ҡуйғандыр бәлки. Тыу а, бик яҡшы. Был әле инең бәләкәй генә табышың. Ләкин бөтә оло табыштарҙың нигеҙендә кескәй генә орлоҡ ятҡанын онотмайыҡ... Ситләштем. Фәлсәфәгә бирелеп киттем, буғай. Хәйер, сәбәп миндә түгел, Рәйестең ошо кескәй генә шиғыры этәрҙе мине был уйҙарға. Ғөмүмән, Рәйес Түләктең ниндәй генә шиғырын алма, уйланмау, оҡланмау, борсолмау мөмкин түгел. Уның әр бер шиғыры төрлө-төрлө хазина ҡатламдарынан тора. Ошо ҡатламдарға тәрәнерәк төшкән айын, бере енән-бере е зиннәтлерәк хазиналарға юлыға ың. Ғөмүмән, Рәйестең иҫкәндермәгән, табыш ыҙ шиғыры юҡ. Әйтәйек, тыуған яҡты ағыныу кеүек темаға кемдәр генә шиғыр яҙмаған. Ул шиғырҙарҙың күптәре ике тамсы ыу кеүек бер-бере енә оҡшаш, тапалған үҙҙәр теҙмә енән ғибәрәт. Ә бына Рәйестә ул нисегерәк:

*Халҡым, тиеп йырҙар яҙҙым. Уның*
*Еталманым ис бер осона.*
*Еталманым остарына. Бына*
*(— Как “Возвращение блудного сына”).*

Бөйөк Рембрандтың “Возвращение блудного сына” картина ын кем белмәй икән?! Картинала йылдар әм юлдар туҙанында таушалған егет, тыуған йортона ҡайтып, ата ының алдында тубыҡланып тора. Рәйес Түләк “Ҡайтыу” шиғырының тәүге строфа ында уҡ ошо күренеште иҫкә төшөрөп, уҡыусы хистәрен әҫәрҙең ағышлы моң ағышына урып, убып ала. Ләкин ул тыуған яҡҡа, картиналағы егет кеүек, меҫкен хәлендә ҡайтмай: “Арып түгел, ағынып ҡайтам еҙҙең / Сабый саҡтан таныш устарҙың, / Ҡараштарҙың еҙҙең, тауыштарҙың / Йылы ына ыу ап, моңона.// Хәйер, лирик герой, яҙмыш еле ҡайҙа ташла а ла, тыуған еренән айырылмаған, ғәзиз төйәгенең — Буранбайҙың — әр бер нигеҙ ташын, Ташкит менән Шөңгөр шишмәләренең тулҡындарын йөрәгендә йөрөткән:

*Ышана ығыҙмы: бер илгәҙәк,*
*Берсә үтә сая төҫ менән,*
*Беҙҙең Ташкит менән беҙҙең Шөңгөр*
*Ағып ята Иҙел өҫтөнән.*

Шағир Иҙел өҫтөндә лә тыуған ауылы шишмәләренең тулҡындарын күрә, “сөнки — Урал еҙгә нигеҙләнгән, сөнки — Иҙел еҙҙән башланған”.

Эйе, Рәйес Түләк тә Буранбай ауылынан киң даръяға ҡушылып ағыр өсөн елкән киргән. Ләкин кешелек йәшәйеше диңгеҙендәге “туғыҙ валлы” тулҡындар хәтәрерәк шул. Был “диңгеҙ”ҙә “карап”тарҙағыларға ғына хәүеф әллә ни янамай. “Карап”ҡа ултырыр өсөн “капитан” йырын йырларға кәрәк. Ә Рәйестең үҙ моңо, үҙ йыры бар. Шуғалыр ҙа, бәлки, уның елкәнен тулҡындар түңкәргәс тә беребеҙ ҙә “ҡотҡарыу түңәрәге” ташларға ашыҡманы. Күрмәмешкә алыштыҡ. Таланттарҙың ҡәҙерен бе-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 171



лергә өйрәнербеҙме бер, юҡмы!? Хатта талант үҙ ҡәҙерен белмәгән осраҡта ла... сөнки талант – милләтте күтәреүсе ҡанат ул!

Түләк шиғриәте төрлө хазина ҡатламдарынан тора, тигәйнем. Фекерем тулыраҡ бул ын өсөн, шағирҙың “Яҙыуҙар” циклынан бер нисә шиғри юлын, хазина бөртөктәрен килтереп китмәксемен: “Айғыр өсөн донъя ауырлығы /Ауыҙында яҭкан ауыҙлығы.// Хисең шау сәскә бул а ла, тот бейектә./ Тәпәштәген хатта кәзә ашап китә. // Йәшәй-йәшәй шуға инандым: / Күләгә е юҡ тик йыландың. // Күк асылып, ҡояш көлөп тор а күктә, / Алтын кеүек баҙлап китә күләүек тә”.

Ошо мәҡәләне “Утлы шағир” тип атауым ис тә юҡҡа түгел. Рәйес Түләк үҙе лә байтаҡ шиғырында ут образын файҙаланды, хатта “Яныу” тигән ғәжәп поэма ла яҙҙы. Ҡай ы бер шиғырҙарҙан өҙөктәр килтереп үтәйек:

*Янған ағас хатта ер аҫтында*
*ис серемәй, тиҙәр.*
*Ил хәтерендә лә аман иҫтә*
*Янып ауған ирҙәр.*

Шунан:

*Әүәләй ҙә алҡын ыуға ала,*
*Утҡа алып йәнә ҡыҙҙыра.*

Тағы ла:

*Ҡышҡы селләлә урманда тыуҙы ялҡын:*
*– Ыстағафирулла! Донъя ҡалай алҡын!*

Артабан:

*Башҡорт рухы үн ә,*
*өйәнтөҫтәй,*
*Янып үнеүе булыр илебеҙ.*

әм:

*Усаҡ яна алҡын ҡар өҫтөндә*
*әм усаҡҡа алҡын ҡар яуа.*

Ә “Яныу” поэма ы үҙе ни тора! Рәйес Түләк ҡыҫҡа ғына ғүмерендә ут менән йәшәне, халыҡ яҙмышы өсөн борсолоп, ут йотоп йәшәне. “Пирамида”, “Бәхәс”, “Монар”, “Ете сат”, “Арҡайым”, “Әсүҙәк”, “Табын”, “Тел еҙ гимн”, “Дуҫлыҡ монументы” әм башҡалар кеүек тетрәткес шиғырҙар юҡтан ғына тыумай.

Йәнде әсеткәне шул: фани донъяла шағир ыйыныр, үҙен йылытыр мөйөш таба алманы. Ситлектәге ҡош шикелле, тегеләй уғылды, былай уғылды. уңғы ваҡытта “Башҡортостан” гәзите редакция ында эшләп, иреккә сыҡҡан ҡош кеүек, ижад киңлегенә талпынғайны. Ләкин... Рәйес Түләктең үҙ үҙҙәре менән әйткәндә:

*Уфтанды ут: “Яңғыҙыма ҡыйын бында...”*
*Йәшәр өсөн әсә енең ҡуйынында,*
*Ата ының ҡуйынында йәшәр өсөн –*
*Күккә атылды ут, алып барлыҡ көсөн...*

Шағир үҙе лә шиғырҙары кеүек булды: берсә уйсан, берсә яр ыу, берсә күңелсәк ине уның булмышы. Меҫкенләнә белмәне. Кемгәлер баш эйеү, инәлеп-ялбарыу ят ине уның ҡылығына.

Күҙ алдымда тағы ла боҙҙар ағыла... Ана, берәү енең өҫтөндә усаҡ дөрләй. Ул уттың ниәте шулай нур бөркөп, диңгеҙҙәргә барып етеү ҙә бит, ләкин алҡын менән ялҡындың килешеп йәшәгәне юҡ әле. Ут – боҙҙо, боҙ утты ашай...

**Салауат ӘБҮЗӘР.**

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 172



Зиннәт
ҒӘЛИМОВ

ҠЫҪҠА ХИКӘЙӘЛӘР

## БОЛОТТАР АРА ЫНДА  УҒЫШ

Бөйөк Ватан  уғышының тәүге йылдарында фажиғәле  әм ҡыуаныслы ваҡиғаларға осрарға тура килгеләне.  уғыш менән тәүге осрашыуым миндә айырыуса көслө тәьҫир ҡалдырған. Фронтҡа килеп,  уғыш менән йөҙгә-йөҙ осрашҡансы,  уны Граждандар  уғышы тура ындағы китаптарҙан уҡыған буйынса төҫмөрләй инем. Әммә ысынында бары ы ла башҡаса булды.

Йылы Украина көҙө. 1941 йыл. Төш ваҡыты. Уңышы йыйып алынмаған баҫыуҙа окоптарҙа ултырабыҙ. Баш осонан болоттар йөҙә. Шул болоттар ара ында — самолет моторҙары геүләүе, ә  ҡайҙандыр ситтән артиллерия канонада ы ишетелә. Кинәт юғарыла пулемет очереды яңғыраны,  әм бер аҙҙан төтәгән самолет күренде. Артынан оҙон төтөн юлын ҡалдырып, ул ҡала ситендәге бойҙай баҫыуы эргә енә килеп ҡаҙалды ла шартланы.

— Беҙҙең самолетты бәреп төшөрҙөләр, — тип ҡысҡырышты машинаның ҡыҙыл йондоҙон абайлап ҡалған  алдаттар.

Шул арала күктә парашютсы күренде. Рота командиры менән бер нисә  алдат совет осоусы ы төшәсәк урынға йүгерҙеләр.

Ә болоттар ара ында  уғыш барҙы. Пулемет тауышы йышайҙы. Яҡында ғына пушка гөр өлдәне.

Шунда тағы бер янған самолет күренде. Быны ының инде ҡойроғона ҡара свастика төшөрөлгән ине. Баш особоҙҙа парашютсы эленде. Беҙҙең осоусының аяғы еңелсә  йәрәхәтләнгән ине, ә фашист иләк кеүек тетеләнгәйне.

Ҡалҡыулыҡта беҙҙең самолет яна, эргәлә генә, түбәндә, немец  ҡоҙғонон ҡара  өрөм ҡаплап алған.  алдаттар урта ында  —  беҙҙең осоусы.

Офоҡта ауыл яна. Артиллерия канонада ы көсәйгәндән-көсәйә бара. Был  —  уғыш йөҙө. Был  уғыштың үҙе ине.

---

*Зиннәт  Ғәлимов (1922—1983) башҡорт әҙәбиәтенә  ярай ы  тос өлөш индергән фронтовик-яҙыусыларҙың бере е ине.  уғыш инвалиды булыуға ҡарамаҫтан, Стәрлебаш, Күмертау яҡтарында оҙаҡ йылдар гәзит хәбәрсе е булып эшләне. Әҙиптең  архивында бығаса ташҡа баҫылмаған ҡулъяҙмалары ла ятҡан  икән. Уларҙы журналыбыҙға мәрхүм әҙиптең тормош иптәше Анастасия ханым Тухтарова тәҡдим итте.*

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 173



# Аҡыл ыҙ сәпсек

Беҙ йәшәгән йорттоң мөйөшөнә йылытҡыс пар торба ының осо сығып тора ине. Унан әр ваҡыт өҫкә аҡ быу урғыла, ә аҫҡа, нигеҙ буйына сүрелдәп еп нескәлегендә генә булып ҡайнар ыу аға. Нисә ҡарама, шунда күләүек йыйылған була.

Ҡыштың бик алҡын бер көнө ине. Үтеп барышлай шундай хәлде күреп, ҡыҙыҡ ынып, туҡтап ҡалдым. Йылы ыуҙан йыйылған, өҫтө быуланып торған күләүек янына бер сәпсек килеп төштө. ыуҙан килгән йылыны иҙеп, күрә ең, ҡыуанып-ҡыуанып сырҡылдарға, икергеләргә тотондо был. Шул саҡ уның аяҡтары йылы ыуға тейҙе, шикелле. Ҡошсоғом оҙаҡ уйлап торманы, күләүектең урта ына уҡ икергеләп керҙе лә, кескенә ҡанаттарын ҡағып-ҡағып, ыу ҡойона башланы. Ҡыуанып бөтә алмай инде был рәхәттән. Башын ыуға тығып ала ла, шатланып, бер ыҙғырып ҡуя, шунан уң тағы ла ҡанаттарын ыуға бәрә башлай. Бик ағынғандыр эҫе көндәрҙе, йәйге йылы ыуҙарҙы.

Ҡойоноп туйғас, томшоғо менән ҡанат ҡаурыйҙарын таҙартҡас, бик күтәренке күңел менән икерә- икерә ыуҙан сыҡты ла яҡындағы ҡоймаға барып ҡунды. Оҙаҡ та үтмәне, борсола башланы. Йөндәре тырпайып ҡатҡан башын борғолай, алынып төшкән ҡанаттарына томшоғон тейҙереп ала.

— Туңып үлә бит был аҡыл ыҙ нәмә,— тип, ҡар ырынты ын йырып, уға табан атланым.

Минән ҡурҡып, сәпсек осоп китмәксе итте, ләкин ҡойманан ысҡыныуы булды, ҡар эсенә таш кеүек тәгәрәп барып та төштө.

Ҡанаттары, ҡойроғо туңып ҡатҡан, бөтә тәне дер ҡалтырай. Йылы бүлмәгә алып кереп, тәҙрә төбөнә ятҡырҙым үҙен.

Март айының ҡояшлы көндәре еткәс кенә, мәхлүкте үҙ иркенә осороп ебәрҙем.

— Бынан уң ҡышҡы алҡында ыу ҡойонма, аҡыл ыҙ сәпсек! — тип өгөтнәсихәт биреп оҙаттым үҙен.

# Ҡайындар ниңә илай?

Ҡышҡы юл буйлап барғанда күңелгә яман ыу тойғо биреп тороусы тәбиғәт күренеше асыла. Урмандар ситендәге ҡайындар тәбиғи булмаған күренештә ҡалған. Әйтер ең, улар кемдер алдында теҙләнеп, ауырайған баштарын эйеп тора төҫлө. Яҡынырaҡ барып баҫ аң, ағастарҙың аҡ кәүҙә ен ҡалын боҙ уратып алғанын күрә ең. Көн урта ында ҡояш нурҙары иреткәндә, ҡайындарҙың күҙ йәштәре тама тиер ең.

Аҡ ҡайындар нимә уйлап илайҙар икән?

Юҡ, улар теҙләнеп баш эйергә өйрәнмәгән. Ауыр ҡайғы ғорур баштарын әм зифа буйҙарын бөгөргә, әсе күҙ йәштәрен түгергә мәжбүр иткән. Ентекләп ҡарағыҙ әле: ҡайын берсә үҙенең хәсрәтле торошо менән сирле бала ы өҫтөнә эйелгән кеүек. Ә икенсе е — билдә еҙ алдат ҡәбере янында баҫып торған сал сәсле ҡайғылы әсәне хәтерләтә.

Ғүмер буйына кешеләр гүзәл йәшлек йылдарын — аҡ ҡайындың матурлығы әм зифалығы менән, ә ҡартлыҡ йылдарын ел-дауылда йәшен уҡҡан кәкре ағас менән сағыштыралар. Аҡ ҡайында нисектер ауыр минуттарҙа ҡалған кешенең образы тасуирлана кеүек. Ҡарағыҙсы: улар тәбиғәттең аяу-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 174



ыҙ көстәре өжүмен кисерә-кисерә, күҙ йәштәрен түгеп илай төҫлө.

Йылы яҙ килер. Ҡарҙар әм боҙҙар иреп бөтөр. Меҫкен ҡайындар үҙҙәренең эйелгән баштарын ҡалҡытып, арҡаларын төҙәйтергә тырышыр. Әммә нисек кенә тырыш алар ҙа, үҙҙәренең элекке мө абәт хәлдәренә, гүзәллектәренә ҡайта алмаҫтар, ғүмерлеккә ғәрип булып ҡалырҙар.

## Замана балалары

Уларҙың ошо ҡалаға күсеп килгән генә йылдары ине әле. Бер көндө Өфөнән университеттың икенсе курсында уҡыған ҡыҙҙары Сәлимәнән бик ғәжәп хат килеп төштө: “Атай, әсәй! Мин кейәүгә сығам! Ризалыҡ бирегеҙ”. Ризалыҡ, риза ыҙлыҡ аңлатҡан хат-хәбәр яҙып маташманылар, әлбиттә, асыуынан күтәрелеп бәрелгән Сәлимйән шул көндө үк киске поезға ултырып, үҙе Өфөгә сығып китте.

Юл оҙон ине. Поезд төнө буйы барҙы. Сәлимйән ултырып та, ятып та сыҙай алманы. Бөтә юл буйы йөрөп сыҡты. Ләкин уның яр ыған күңеле Өфө яҡынлашҡан айын баҫылғандан-баҫыла төшкән кеүек булды. “Ҡыҙға хәҙер 19 йәш. Сабый түгел инде. Үҙенә тиң кеше осраған икән… Тик бына башта уҡыуын тамамла ын ине. Минең барыуҙан ғына нindәй файҙа сығыр икән уң? Сәлимә бәләкәйҙән үк яман үҙ үҙле, ис тә баш бирмәй торған ҡыҙыҡай булып үҫте, бик иркәләнек тә шикелле үҙен. Башына килгән уйынан ис тә кире ҡайта торғандарҙан түгел шул. — Шунан уң тағы асыуы ҡабарып китте. — Юҡ, был юлы мин үҙемдең атай кеше икәнемде күр әтмәй ҡалмам. Арт абағын уҡытайым әле! Университет студентка ы тип тормам бына! Диплом алмайынса бер ҡайҙа ла бармай ың и бөттө-китте!” — тип үр әләнде ул.

Дөйөм торлаҡ вестибюлендә ултырған ата ын күргәс, Сәлимә өҫкө ҡаттан төшөүсе оҙон баҫҡысты бер генә атланы, шикелле: осоноп килеп Сәлимйәндең муйынына аҫылынды, әле генә йоҡонан торған бөтә ҡайнар тәне менән ыйынды.

“Бына хәҙер арт абағын уҡытып ҡара инде уның”, — тип уйлап алды күңеле тулып, күҙҙәренә йәш килгән Сәлимйән.

Тынысландылар, күҙҙәрен өрттөләр.

Сәлимйән ҡыҙының нескә кәүҙә енә, йоҡо ал ыулығы китеп өлгөрмәгән ҡуңырт йөҙөнә күҙ төшөрөп алды ла:

— Ябыҡҡан ың, — тине.

— Уҡыу ауыр бит, атай. Бик күп уҡырға тура килә…

— Шулай булғас? — тип бүлдерҙе уны ата ы.

— Нимә “шулай булғас”, атай?

— Хатыңда нимә яҙғаныңды оноттоң дамы эллә? Бәлки, беҙҙе шаяртмаҡсы ғына булған ыңдыр?

Сәлимәнең бит алмалары нығыраҡ ал ыулана төштө. Оялып, тулышып торған ирендәре менән генә йылмайҙы. Әсә енекенә оҡшаған зәңгәр күҙҙәрен ситкә йәшерергә тырышты.

— Юҡ, атай, шаяртманым, — тине ул әкрен генә, унан уң, малайҙарҙыҡына оҡшатып, ҡыҫҡа ҡалдырып киҫкән, баҡыр төҫөнә буятҡан сәстәрен елләтеп, башын ҡапыл ғына күтәрҙе лә Сәлимйәнгә тура ҡарап, ҡыуанып: — Ярай килгән ең әле, атай! Бигерәк йәтеш тура килде! Беҙ бөгөн Ғәлим менән ЗАГС-ҡа барабыҙ! Шампанский табыу бурысы иңә тапшырыла бы-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 175



лай булғас.

— инең аҡылың бармы, юҡмы, ҡыҙыҡай?— тип әйтеүҙән башҡа Сәлимйән үҙ ҙә тапманы.

— Бар, атай,— тип яуапланы Сәлимә, күҙ ҙә йоммайынса.— ин үҙең бит йыш ҡына “аҡыллы ул минең ҡыҙым” тип маҡтай торғайның.

— Эйе, шул. Маҡтай инем шул...— тип мығырҙанды Сәлимйән.

Ул арала кейәү була ы егет тә килеп етте. Такси яллаған. Машина тулы дуҫтарын тейәгән. Алсаҡ, бик яғымлы сырайлы егет икән. Сәлимәнән 4-5 йәшкә оло күренә. Бик йыуаштыр, шикелле. Оялып ҡына тора. Ауыл хужалығы институтының уңғы курсында агрономлыҡҡа уҡый, ти. Хәйерле бул ын!

Ҡыҙы менән яйлап, яҡшылап өйләшергә форсат та теймәне Сәлимйәнгә. Йәштәрҙә бөгөн уның ҡайғы ы юҡ ине. Ҡайнашып сыҡтылар. Кис, ҡайтып китергә йыйынып вокзалға төшкәс кенә, бер аҙ аулаҡ булып ҡалды-ҡалыуын, әммә хәҙер ни, эш уҙғас, нимә тура ында ғына өйләшә ең инде!

— Шулай ҙа, Сәлимәнең уҡып бөткәнен көтөргә кәрәк ине еҙгә,— тип кенә ул үҙенең бөтөнләй үк ҡәнәғәт түгеллеген аңлатып маташты.

Кейәү менән ҡыҙ бер-бере енә ҡарап йылмайыштылар ғына был үҙгә.

***

Ҡатыны уны бик борсолоп көтөп торған. Төнөн дә йоҡламаған, күрә ең, күҙ төптәре шешенгән, йөҙөнә ары ҡойолған.

— Йә, нисек?— тип борсолоп ораны ул, иренә ишек асҡас та.— Яман да ҡыҙып киткәйнең... Бик ҡаты бәрелмәнеңме балаға?

Сәлимйәндең кәйефе бик төшөнкө булмағанды күргәс, Бибинурҙың эсенә йылы инде.

— Йә, өйлә инде тиҙерәк, ниндәй хәбәр алып ҡайттың?— тип ашыҡтырҙы ирен.—Ысынды яҙғанмы шул ташбаш ҡыҙыҡай?

— Хәбәр шул: ҡыҙыңды кейәүгә биреп ҡайттым! Законлы рәүештә. Үәт! Урыҫтар уны “Законный брак” тиҙәр. Студенттар беҙҙең ҡыҙҙы ла шул “брак” менән ҡотлап, ҙур плакат яҙып элделәр. Ҡыҫҡа ы, ҡыҙың бракка сыҡты ла ҡуйҙы.

Бибинур балауыҙ ығырға тотондо.

— Ә... кейәү бала тигәнебеҙ ниндәйерәк кеше уң? Күрҙеңме үҙен, исмаам? Үҙебеҙҙең мосолманмы?

— Килә е ялға ҡайталар. Шунда үҙең күрер ең. Кейәү балаңды ыйларға әҙерләнеп тор. Бына шул.

— Былай ни, әллә нисек бит әле,— тип зал урта ында аптырап баҫып торҙо Бибинур, ҡыуанырға ла, ҡайғырырға ла белмәйенсә.— Кешенекесә булманы, тип әйтмәксе инем. Үҙ белдеге менән... Ҡапыл ғына... Ташбаш!

— Ни эшләй ең бит, ҡарсыҡ,— тине Сәлимйән, ҡатынын йыуатмаҡсы, үҙен-үҙе аҡламаҡсы булыпмы.— Ни әйт әң дә, замана балалары.

**А. ТУХТАРОВА әҙерләне.**

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 176



# МИЛЛИ АЗАТЛЫҠ – МӘҢГЕЛЕК ХЫЯЛ

“– Әсәй, атайым ҡайтып килә! – тип яҙғы ҡояшҡа ирей башлаған бөләкәс кенә тәҙрәнән тышҡа ҡарап ултырған Сәмсекамал иҙәнгә икереп төштө. Шул арала иҫке кейеҙ ярпылары менән ала-сула итеп көпләгән ишекте шағырлатып, Байдәүләт килеп инде. Ул башына меҫкен бүрек кейгән, ҡыптыр тунын йүкә бау менән быуған, күк ямаулы киндер тоғонон ауыҙын ҡулына урап тотҡан ине. Түрбаш яҡта йөрөгән Миңнекамал, ҡулын алама сепрәккә өртә- өртә, иренә ҡаршы килде. Байдәүләт ҡулындағы тоғон ҡатынына бирҙе, туны менән бүркен сисеп, ағас сөйгә элде, кәштәнән алып таҡыр башына таҡыя ын кейҙе лә, ишек төбөндәге бүкәнгә ултырып, ҡатҡан итеген сисә башланы. Миңнекамал тоҡто тотҡан көйө иренә ҡарап бер аҙ торғас:

– ата алдыңмы?– тип өндәште.

– Дүртәү ен аттым да ул, берәү ен, ана, кире апҡайттым,– тип Байдәүләт ишек яғына ымланы. – Ун ҡаҙаҡ он алдым.

– Ярай инде, – тине Миңнекамал. Ул түрбаш яҡҡа үтеп, тоҡ ауыҙын систе, тоҡ төбөндәге ондо семтеп алып, бармаҡ осо менән ыуғылап, ауыҙына алып сәйнәп ҡараны ла:

– Әсе е юҡ, былай,– тине.

– Бул а ла нишәй ала ың...”

Телсе-ғалим Әкрәм Бейештең 2007 йыл аҙағында “Китап” нәшриәтендә сыҡҡан “Ил аҙабы” исемле тарихи романы шулай башлана. Роман дүрт бүлектән тороп, тәүге е 1914 йылғы донъя уғышы, икенсе е 1917 йылғы ике инҡилап, өсөнсө ө милли автономия иғлан итеү, уңғы ы Советтарҙың башҡорт крәҫтиәнен талау сәйәсәтенә ҡаршы хәрәкәт менән бәйле ваҡиғаларға бағышланған. Китаптың исеменә еseme тап килеп, башҡорт халҡына төшкән михнәттәрҙе үрәтләүгә ҡарамаҫтан, сюжет ебен туплаусы – ярлы Байдәүләт образы. “Байдәүләт ер еҙ ине, – ти автор. – Уның ата ы Дәүләтбай малы бөтөп, шыпа сара ыҙ ҡалғас, ауыл еренән үҙ өлөшөн бүлеп алып, шуны алым түләп, тамаҡ аҫрап торорлоҡ ҡына хаҡ өсөн йыл айын ҡуртымға биреп йәшәгән. Бара-бара ҡуртымсы урыҫ, әллә ниндәй ҡағыҙҙар йүнәтеп, ул ерҙе үҙенеке итеп нығытып алған. Дәүләтбай күтәрелеп-бәрел ә лә, был ялғандың осона сыға алмаған, еренән ҡолаҡ ҡаҡҡан. Ауыл ерендә лә уның өлөшө ҡалмаған”. Дәүләтбайҙың әсе яҙмышында батша хакимиәтенең башҡорт ерҙәрен күпләп баҫып алыу сәйәсәте үткәреүе арҡа ында фәҡирлеккә төшкән тиҫтәләрсә мең милләттәшебеҙҙең яҙмышы сағыла.

Дәүләтбай Ҡарғалы руднигында эшләп, ваҡ-төйәк башҡа кәсептәр менән ғаилә ен туйҙырырлыҡ аҡса табырға ынтылып ҡарай, әммә йәлсей алмай. Байдәүләткә унан иҫке өй ҙә шыйыҡ талдан ҡош-ҡорт оя ы үреп атыу кеүек өнәр генә тороп ҡала. Бәхетенә күрә, ҡатынынан уңа Байдәүләт, уның Миңнекамалы бик бөтмөр, донъя көтөр өсөн генә яратылған ҡатын, иренә ышанысла терәк икәне күренә. Бик ауыр мәлдәрҙә ғорур тәбиғәтле Байдәүләт, ҡатынының

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 177



кәңәшен тотоп, ауылда бай иҫәпләнгән Йәнтүрәгә төрлө эштәрҙә ярҙамлашып, был йомарт, кешегә ярҙамсыл, күңелен аңлай белгән байҙан ризыҡланырлыҡ аҙыҡ-түлек алып ҡайта.

Романдағы ваҡиғалар Көньяҡ Башҡортостан ауылдарында, Ырымбурҙа .б. урындарҙа барып, ул 1914 йылдың иртә яҙынан башланып, 1922 йылдың яҙына тиклемгә осорҙо үҙ эсенә ала. Беренсе герман уғышы, Февраль буржуаз әм Октябрь социалистик инҡилаптары, башҡорт милли автономия ы өсөн көрәш башҡорт халҡының тормош-кисерештәре аша бирелә.

Был михнәт-аҙаптар башҡортто борон-борондан ыҙалаған ер арҡа ында килеп сыға. Әүәле Йәйләү юлынан ошо Бай ары менән уның күрше ендәге Ян ары, Монаш ауылдары Серәкәйле, Ҡамышлы йылғалары буйына йәйләүгә сыға торған булған, тип бәйән итә автор. Уларҙың ере аҡмар йылға ына етә яҙып ятҡан. Иркен ерҙәрендә улар йәй көндәрендә өйөр-өйөр мал көткән, ҡышҡылыҡҡа бесән сабып, йөҙәрләгән кәбән ҡойған. Әле санала шоҡорайып ҡына ултырып бесәнгә китеп барған Йәнтүрә байҙың ҡартата ы Янбай биш йөҙ баштан артыҡ йылҡы, утыҙлап ыйыр тотҡан. Йәйләүгә сыҡҡанда үҙенә өс-дүрт баш ыйыр ҡалдырып, ҡалғанын ул, көҙөнә бер аҙ майын бирер егеҙ тип, йәй буйы ауып эсергә кешеләргә таратыр булған. Был ауылдарҙың ерен, бер яҡтан, урыҫ баярҙары талап, икенсе яҡтан, әллә ҡайҙарҙан килгән урыҫ ауылдары баҫып алып, бөтөнләй наҡыҫҡа ҡалдырған. Етмә ә, батша сығарған закон буйынса йән башына ун биш дисәтинәгә генә иҫәпләп, ауылдың ерен сик менән кәртәләп ҡуйғандар. Йәйләүгә сығыр, мал йөрөтөр ер ҡалмаған.

— Беҙҙең иң ыҙланған урын — ер мәсьәлә е,— ти Бай арының уҡымышлы кешеләренең бере е алдат Шәрәфетдин. — Талап-тартып алып бөткән башҡорт ерҙәрен урыҫлар кире ҡайтарырға тейеш.

Төбөнә төшөп ҡарағанда, ғәҙел яңғыраған ошо ҡараш-фекер арҡа ында ваҡиғалар хәтәр ҡуйырып, милләт-ара ыҙғыш- уғыш әм бихисап ҡорбандарға килтерә.

Ша исолтан мулла әйткән яңы урыҫ ауылы Аҡсалдың Эйек аръяғындағы иркен сабынлыҡты биләп, таҙа тәнгә сыҡҡан сиҡан кеүек, матур тәбиғәт ҡосағына килеп ултырғайны, тиелә роман персонаждарының бере е Хәбирҙең кисерештәре аша. Урыҫтар Ҡырсынлы урманынан теләгәнсә ағас ҡырҡып, тулыр-тулмаҫ өс ай эсендә утыҙ-ҡырҡ өй ултыртып та ҡуйған. Сиҙәм асып, игенен дә сәскәндәр. Бай урыҫ инде былар. Шул хәтле эште башҡарыр өсөн ни ҡәҙәр ат көсө, кеше көсө кәрәк. Ат,күрә ең, үҙҙәрендә етерлек. Кеше көсөн улар арзан ғына хаҡҡа яллап, тирә-яҡтағы башҡорт ауылдарынан йыйған. Иң әсе е шул уның: аты-ние булмағанға үҙ эшен эшләй алмаған башҡорттар баҫҡынсы урыҫтарға төпләнеп, нығынып ултырырға сара ыҙҙан үҙҙәре ярҙам итә, ә уларҙың үҙ өйө, үҙ хужалығы барған айын нығыраҡ ҡыйрай, нығыраҡ бөлә.

Бай арыларҙың иген сәсерлек ере бул а, Ҡолдәүләт ауылыныҡыларҙың ундай ҙа мөмкинлеге юҡ. Йөҙ йыл элгәре ауылдың иң уңайлы ерҙәренә әллә ҡайҙан килгән татарҙар баҫып инеп, Әберсен тигән ауыл алып ултырған. Губернаторға ҡабат-ҡабат яҙып та, судҡа биреп тә, Ҡолдәүләт халҡы ул татарҙарҙы үҙ еренән ҡыуа алмаған. Тәүҙә килеп ултырған унлап өйҙән үрсеп, Әберсен хәҙер ҙур ауылға әйләнгән. Ер еҙ башҡорттарға тамаҡ байына бул а ла башҡа кәсеп эҙләргә тура килә. Фәҡирлектән нисек тә арыныу өсөн Байдәүләт яҙ көнө Ағиҙел үренән ал ағыҙырға ялланған ҡыуғынсылар эшенә лә сығып ҡарай, әммә мең аҙаптар күреп, боҙло ыу кисеп, ағас аҫтында ҡалыу ҡурҡынысында йөрөп алған аҡса ы бер ҡат кейем, аҙ-маҙ ризыҡ атып алырға ғына етә. Аптырағас, йәш ир ата ының ерен ҡуртымға алып үҙләштергән Фролға барып, ураҡҡа ялланырға мәжбүр була.

Егерме йылдар элек киң сабата, бер ҡат киндер ыштан кейеп, арыҡ атына

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 178



яшыҡ мәрйә ен ултыртып килгән был ерән Фрол яман йылғырлығы, мутлығы арҡа ында йөҙ дисәтинәләп ергә хужа булып, эс үҫтереп, йылтыр итек кейеп алған, тип уҡыйбыҙ был урыҫ крәҫтиәне тура ында. Ул хәҙер яҡшы ат егеп кенә йөрөй, Ырымбурға ғына түгел, Быҙаулыҡ, амар яҡтарына ла ылау ҡыуып, иген менән атыу итә.

Байдәүләт Герман уғышына киткәс, унын эш хаҡын юллап килгән ауылдашы Фрол хужалығында түбәндәгеләрҙе күрә: келәт эсенә күҙ ташлап, Йәнтүрә бай шаҡ ҡата: арғы осо ла күренмәгән келәттең уртанан ғына ара ҡалдырып, ике яҡлап бураған бейек буралары туп-тулы иген.

Беренсе империалистик уғыш ҡырына Байдәүләт ауылдаштары Хәйретдин, Йәнтүрә байҙың ике улы Йәнгилде әм Йәнғәле менән тәүгеләр рәтендә китә. Ярлы крәҫтиән михнәттәре алдат күргән-күрәсәктәр алдында бер ни булмаған икән, ысын-ысындан нужа күреү, кәм енеү-кәм етелеү ауылдан киткәс башлана. Иҫерек урыҫтарҙың ылау-ылау булып гармун аҡыртып барыуы, офицерҙарҙың башҡорт алдаттарын “аллаяр”, “таҡыр баштар” тип мыҫҡыллауы, ерле юҡ өсөн дә сикәләүе, арпа бутҡа ы, әсе кәбеҫтә ыуы менән көнөнә бер-ике туҡланыуҙы бер урыҫ кесе командирының Йәнғәленең арыу кейемдәрен алдырып алып, алмашҡа йыртыҡ мәрйә кофта ы менән табан ыҙ ботинка биреүе тулыландыра. “Словесное занятие”ла алдаттарға батшаның, генералдарҙың төрлө дәрәжәисемдәрен ятларға ҡушып йөҙәтәләр, белмәгәндәргә яза бирелә. Ахыр сиктә ҡайҙандыр килтерелгән мулла мосолман алдаттарын: “Олуғ Руссия патшасының көллө әмеренә буйсынып, тугры хезмәт итәргә ант итәм!” – тип Ҡөрьән үптереп фронтҡа оҙата.

Поезда Байдәүләтте ауыр уйҙар баҫа: ни әйт әң дә, ни уйла аң да, бер нәмә лә үҙгәрәсәк тә, еңеләйәсәк тә түгел. алдат юлдары уларҙы алыҫ-алыҫтарға, билдә еҙ уғыш ҡырҙарына алып китте. Кире ҡайтырға яҙғанмы-юҡмы – уны ы ла ҡараңғы. Кеше үҙ ихтыярына ғына йәшәп, үҙе теләгән юлдарҙан ғына йөрөй алмай. Әллә ниндәй яман көстәр юғарынан тороп, хужа булып, ябай кешене бер өргән тыны менән теләгән бер ергә сүп урынына осора. Фронтҡа барып етмәҫ элек үк йәш ир “данлы, еңелмәҫ урыҫ ғәскәре” алдаттарының тыныс халыҡтан ашапэсергә таптырып ҡорал күтәреүен күреп, хайран ҡала. Сусликов тигән бер алдат үҙҙәре фатирға ингән өй хужа ын уғып йыға ла:

– Хәҙер үк тап, атып үлтерәм! – тип ҡысҡырғас, хужаның ҡатыны илай-илай сығып йүгерә әм бер ҡартты (моғайын, ата ылыр) эйәртеп ҡайта. Көмөшкә әм бер аҙ картуф алып килгән был оло кеше бик ныҡ рәнйеп өйләнеп ултыра әм аҙаҡтан: “Ниместән бигерәк еҙҙең москалдәр яман”, – тип ҡуя.

уғыш... Янып ҡыйралған, ҡот осҡос кисерештәргә дусар ителгән ауылдар. Туптар тауышы, бер туҡтау ыҙ ауаға немец сөйгән ракеталар, шрапнель ямғыры... Байдәүләткә бөтә донъя харап булған, юҡҡа сыҡҡан кеүек тойола.

Роман башында Байдәүләт сабыр холҡло, эшсән, әммә ғаилә ен дә тейешле дәрәжәлә тәрбиә итә алмағанға әр саҡ ҡыйын ынған йәш ир булып күҙ алдына баҫа. Ул бер кем менән дә тауыш күтәреп өйләшмәй, сығырынан сығып китмәй. Алдын-артын уйлап эш итә торған кеше. Әммә ул Герман уғышынан ике тапҡыр лазаретта ятып, бихисап ғибрәт күреп, оло тәжрибә туплап, донъяға ҡарашы үҙгәреп ҡайта. Тәүҙә большевиктар фәлсәфә ен тыңлап, уларҙың ғәҙел юлда булыуына ышана башла а ла, ауылға ҡайтҡас, ҡыҙыл гвардиясыларҙың кешене кейемалымына тиклем талап, үлтереп йөрөгәндәрен күргәс, ҡарашы үҙгәрә. “Большевик тигәндәре ошо икән: өйләгән үҙҙәре – яҡшы, ҡылған эштәре – шаҡшы”, – тигән ығымта я ай.

Хәбир образы ҡаршылыҡлы. Ул ата ының берҙән-бер әм күптән көткән бала ы

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 179



булғанлыҡтан, интекмәй үҫә. Герман уғышына алынғансы гармун уйнап, йәштәр ара ында күңел асып йөрөүҙән башҡаны белмәй. Ләкин уғышта әм унан ҡайтҡас күргән-кисергәндәр егеттең холҡон үҙгәртә:

—Мин элекке Хәбир түгел хәҙер, – тине ул. – Хеҙмәттә күп нәмә күрҙем. Төрлө кешеләр үҙен ишеттем. Донъяны тотош үҙгәртер кәрәк икәнен белдем.

Донъяны үҙгәртеү Хәбиргә тәүҙә большевиктар яғына баҫып, “байларҙы бөтөрөү” кеүек аңлашыл а, алдат Шәрәфетдиндең байҙарҙы бөтөрөү беҙҙең башҡорт йәмғиәтенә тап килмәй, сөнки беҙҙә урыҫтағы кеүек ҡан эскес байҙар юҡ, беҙгә милли азатлыҡ кәрәк, тигән үҙҙәренән, ҡыҙыл гвардиясыларҙың ауылда ҡылған ҡан ыҙлыҡтарынан уң кисәге алдаттың ҡарашы үҙгәрә. Андреевка ауылы крәҫтиәндәренең бай арылар ерен өрөүенә үс итеп, ул урыҫ ауылына үрт ала. Икенсе юлы Хәбир башлыса урыҫтарҙан торған ҡырғын отрядтарының башҡорт ауылдарын талауына үсе ҡайнап, үҙе кеүек ҡыҙыу утыҙлап егет менән үс алырға китә әм осраған бер ирҙе ҡылыстан үткәреп, талап алған аҙыҡ-түлек әм башҡа мөлкәтте хужаларына ҡайтарып бирә. Быndай баш-баштаҡлыҡ өсөн отряд командиры Сәлтәшев уларҙы ҡыуырға ит ә лә, иптәштәре ныҡ яҡлағас, батыр уғышсы булғандары өсөн генә сафта ҡалдырыла.

Шәрәфетдин – ауылдың уҡымышлы әм хәлле кешеләренең бере е. Ул Урыҫ-япон уғышында булып, артабан да бер аҙ хеҙмәт итеп, донъя күреп ҡайтҡан. Бай-арыла Ырымбур татарҙары нәшер иткән “Вакыт” гәзитен уҡып, бар донъя хәлдәрен белеп тороусы ла ул. Батша төшөрөлгәнен дә Шәрәфетдин беренсе булып ишетә әм, Ваҡытлы хөкүмәткә үҙ талаптарыбыҙҙы еткерергә кәрәк, тигән тәкдим индерә. Аҫаба башҡорттар менән урыҫтар ара ында килеп сыҡҡан оло ыҙғыштың сәбәптәре тура ында Шәрәфетдин былай ти:

– Башҡорттоң “ер хужа ы” тигән даны бар. Килмешәктәр ерҙе алып алғанда ла, ҡуртымға алғанда ла шул хужаға бара. Шуға уларҙың арыуҙары ҡайнай.

Милли мөхтәриәт өсөн хәрәкәт башланғас, Шәрәфетдин уға ҡушылып китә әм, бер нисә тапҡыр Ырымбурға барып ҡайтып, ауылдаштары ара ында ҙур аңлатыу эше алып бара. Әммә унең милли автономия яҡлы икәнлеген белеп ҡалып, ҡыҙыл гвардиясылар атып үлтерә.

Бай ары ауылының ғәҙеллекте теше-тырнағы менән яҡларға әҙер, ҡыйыу кешеләренең бере е – Сәлихйән. Ул бер саҡта ла юғалып ҡалмауы, тәүәккәллеге менән айырылып тора. Был ғорур, ғәҙел еҙлекте бер кемгә лә ғәфү итмәгән ир уғыш ваҡытында эш хеҙмәтенә алынғас, ундағы кәм еtелеүҙәргә протест йөҙөнән Мөхәмәтғәле тигән иптәше менән ҡасып китә. Ошоноң өсөн эштә ҡалған иптәштәренең казак яҫауылы тарафынан йыртҡыстарса язаға дусар ителеүен, ә ауылдашы Ғизетдиндең төрмәгә ябылыуын ишеткәс, Сәлихйән менән Мөхәмәтғәле йәшеренеп кенә Белоретка килә әм алдан ҡоролған план буйынса теге ҡан ыҙ яҫауылды тотоп алып, урманға килтерә лә сыбыртҡы менән үлтергәнсе туҡмай. Ауылда оло абруй менән ҡаҙанған Собханғол ҡартты ғәйепеҙгә атып киткән Андреевка кеше е Иванды ла Сәлихйән урманда аңдып тороп, хәнйәр менән үҙ хөкөмөн еткерә.

Ҡыҙылдарҙың башҡорт ярлыларына байҙарға ҡаршы күтәрелергә өндәп яҙған ҡағыҙына яуапты авторҙың Сәлихйән ауыҙынан әйттереүе лә осраҡлы түгелдер:

– Азатлыҡ бирә торған Совет власы мына ошо ҡыҙыллар, автономия иғлан итеп, хөкүмәт айлаған өсөн беҙгә күҫәк күтәрҙе, ауыл халҡын ата, талай башланы. Беҙ башлап күҫәк күтәргәнме ни? Собханғол ағайҙы, башҡа кешеләрҙе беҙҙең ауылда кем өйрәп сығарып атты, ни өсөн аттылар? Беҙҙең ауыл менән Бай арыла ғына ни хәтле кешене үлтерҙе ҡыҙылларҙың Совет власы?! Бер ғәйеп еҙҙән бит! Бер ғәйеп еҙҙән! Кем яҙған был ялғанды? Нисек оялмай яҙған?

Романда башҡорт милли хәрәкәтенең иң аңлы әм иң әүҙем ҡатнашыусылары-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 180



ның бере е – Әхмәҙулла мулланың Ырымбурҙағы “Хөсәйениә” мәҙрәсә ендә уҡып йөрөгән улы Әхмәтғәле. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, ул Байдәүләттең аҡлыҡ отрядына ҡушылып, ҡораллы алыш ваҡытында үлеп ҡала. Ата ының, тупраҡлы мөхтәриәттең хикмәте нимәлә, тигән орауына биргән яуабында Әхмәтғәленең сәйәси мәсьәләләрҙең айышын яҡшы белеүе күҙәтелә.

– Ә хикмәте аның бик тәрәндә, атай. Татарҙың бит үҙемдеке тип әйтерлек ере лә, иле лә юҡ. Алар боронғо Алтын Урҙанан бөтә ергә, Рәсәйҙең көнсығышынан көнбайышына тиклем таралған. Мына шул татарлар мосолман исеменән әр ергә татар мәҙәниәтен, татар халҡын алға сығарып, башҡа халыҡты, иң тәүлә, әлбиттә, башҡортто йотоп бөтөрмәксе була. Башҡортҡа килгәндә, беҙҙең борон-борондан йәшәгән, Алтын Урҙаға хәтле күп быуатлар элек биләгән үҙ еребеҙ, тыуған илебеҙ бар. Беҙгә ошо илебеҙҙә, үҙ тупрағыбыҙҙа әҙ генә үҙебеҙсә йәшәрлек ирек кәрәк. Аны бойомға ашырыу өсөн үҙ хөкүмәтебеҙ, үҙ идарабыҙ булыуы мотлаҡ. Мына шул була инде тупраҡлы мөхтәриәт.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең Каруан арайҙағы башҡорт ҡоролтайында үҙ алып:

– Әүәле тарихын уҡып ҡына башҡорттоң ниндәй халыҡ икәнен белә инем, хәҙер бер яғымда Мөхәммәт ғәләй иссәләмдең күләгә ен, икенсе яғымда Сыңғыҙ хандың күләгә ен күргәндәй булып торам, – тигән үҙҙәренә Хәбирҙең:

– Мин шунда бер нәмәне аңнамай ҡалдым. Нишәп Әхмәтзәки Вәлидов башҡорттоң ниндәй халыҡ икәнен бығаса белмәгән ымаҡ итеп әйтте. Әллә ул башҡорт түгелме? – тигән орауына Әхмәтғәле:

– ин дөрөҫ аңнамаған ың... Ул, башҡорт халҡының тамырын, сығышын белмәгәнем, тигән мәғәнәлә әйтте бит. Хәҙер ул башҡорттоң Мөхәммәт пәйғәмбәр белән Сыңғыҙ хандан тамыр алғанын күрә, – тип яуаплай.

– Барыбер аңнамайым, – тине Хәбир. – Сыңғыҙ ханға башҡорттоң ни ҡатнашы бар? Ярар, рухи тамыры Мөхәммәт ғәләй иссәләмгә бәйле, тип әйтеп була. Ә Сыңғыҙ ханға ниндәй тамыры тоташҡан?

– Белә еңме, эш нимәлә? Әхмәтзәки Вәлидов үҙен, Сыңғыҙ хан нәҫеленән сыҡҡаным, тип иҫәпләй. Шуның өсөн ул, күрә ең, бөтә башҡортто шулай икән тип уйлай. Был урында ул, әлбиттә, яңылыша, – тип яуаплай мәғзүм.

Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби шөғбә е рәйесе Ә. Вәлидов романда ике тапҡыр ғына күренеп ҡала. Уның Ырымбурға башҡорт ғәскәре алдында сығыш я арға килеүен Ә. Бейеш түбәндәгесә үрәтләй:

“Ул тыштан алынған ҙур-ҙур дүрт кеҫәле ғәскәри куртка, галифе салбар, хром итек кейгән, наган таҡҡан, яурынына йәшел шинель алған ине... Вәлидов үҙгәргән, хәрби кейем кейгәс олпатланып киткән. Ләкин барыбер Хәбир бәләкәй буйлы, күҙлекле был кешене бер ҙә ғәскәр башлығына оҡшатманы. Вәлидов өҙәңгегә саҡ ынтылып баҫып, эргә енә килтергән атҡа икереп менде лә өйләй башланы...”

Икенсе тапҡыр беҙ Хәрби шөғбә рәйесен башҡорт алдаттарының аҡ казактар менән бергә ҡаҙаҡтар йәшәгән Аҡтүбә яғында ҡыҙыл гвардиясыларға ҡаршы уғышып йөрөгән сағында осратабыҙ. Автономия өсөн тип алданып, ят тарафтарҙа уғышырға мәжбүр ителгән алдаттарҙың позиция тотоуҙан баш тартыуын көйләргә килгән Вәлидовты яр ыған алдаттар уратып ала.

– ин ғәйепле! уғышмайбыҙ бында! Бөтөрөгөҙ Вәлидовты! – тип өрәнләп штыкка сәнсеп күтәрә яҙған ерҙән Вәлидиҙе эргә ендәге аҡсылары ҡотҡарып ҡалды, тиелә романда. Йөҙө ап-аҡ булған Вәлиди атын бороп, полктың штабы урынлашҡан землянкаға инә лә полк командиры Сөләймән Ишмурзинға, полк бола сығарҙы, башлап йөрөүселәрҙе атырға кәрәк, тигән әмер бирә. Командир ҡаршы төшөп ҡара а ла, хөкүмәт ағза ын ниәтенән дүндерә алмай.

– Подпоручик Ишмурзин! – тип киҫкен үҙ менән Вәлиди уны бүлде. – Мин –

хөкүмәт ағза ы, Хәрби шөғбә рәйесе. Хөкүмәт үҙ үҙенән ҡайта торған бул а, хөкүмәт булмай, боламыҡ була. Минең үҙемдең дә әйткән үҙемдән ҡайта торған ғәҙәтем юҡ. Йый полкты! – тип бойора.

Кистән аҡ аҫтына алынған Дәүләтша менән Тан ыҡбайҙы Вәлидиҙең аҡсылары полк алдында атып йыға.

Башҡорт хөкүмәте рәйесе Шәриф Манатовты уҡыусы үрҙә телгә алынған ҡоролтайҙа ғына күрә. Делегаттарҙы таратырға килгән Ваҡытлы хөкүмәт комиссары Архангельскийҙы ул:

–Беҙ үҙебеҙҙең илдә, үҙебеҙҙең Каруан арайҙа, үҙебеҙҙең ҡоролтайҙы үткәрер өсөн кемдән рөхсәт алырға тейеш? Беҙгә Рәсәйҙең бөгөнгө Үҙәк хөкүмәте рөхсәт бирҙе. Үҙәк хөкүмәттең декларация ы нигеҙендә беҙ Башҡортостанды автономиялы ил тип иғлан иттек. Хәҙер автономиялы Башҡортостан дәүләте ҡорорға йыйылғанбыҙ. Шулай булғас, хөрмәтле Архангельский әфәнде, мынан сығыуығыҙҙы орайбыҙ, – тигән тапҡыр сәйәси яуабы менән комиссарҙың ауыҙын ябып ҡуя.

Тарихи шәхестәрҙән романда Сәғит Мерәҫов, Сөләймән Мырҙабулатов, Хажиәхмәт Унасовтар ҙа бар. Башревком ағзаларының эш ташлап Башҡортостандан сығып китеүенә ҡарамаҫтан, Мырҙабулатов бер ҡайҙа ла ҡуҙғалмай, Урал аръяғындағы ауылда йәшәгән бер фронтташ дуҫына барып йәшенә. Башҡорттар ҡырғын, аҙыҡ-түлек отрядтарына ҡаршы көрәшкә ҡуҙғалғас, ул тырым-тырағай уғышыусы отрядтарҙы туплап, ҡыҙыл башҡорт ғәскәре ойоштororға тотоноп китә. “Беҙ Шәмиғоловтың (яңы Башревком рәйесе – **М.Х.**) ҡанлы золомона, анын артындағы Мәскәү шовинисларына ҡаршы бул аҡ та, Совет власына ҡаршы булырға тейеш түгел, – ти Мырҙабулатов. – Башҡорт халҡын әләкәттән ҡотҡарыу өсөн беҙгә Мәскәү менән килешеүҙән башҡа сара юҡ. Быны өсөн үҙебеҙ башлап өжүм итеүҙе туҡтатырға кәрәк”. Мырҙабулатов маҡсатына ирешә, Мәскәү Башҡортостанға өйләшеүҙәр алып барыу өсөн Мостовенконы ебәрә, Шәмиғолов эшенән алына, башҡорттарҙы ҡорал алырға өндәйҙәр. Әммә ҡорал алғанда яман ниәт менән отряд башлыҡтарынан ун ете кеше ҡулға алынып, йыртҡыстарса атып үлтерелә. Мырҙабулатов, тырыш а ла, уларға бер нисек тә ярҙам итә алмай.

Насретдин Сәлтәшев та Мырҙабулатов кеүегерәк фекер йөрөтә. Ҡыҙыл отрядтарҙың башҡорт ауылдарын аяу ыҙ талауына, халҡын йыртҡыстарса ҡырыуына ҡаршы көрәшкә отряд туплап сыҡҡан Сәлтәшев Башҡортостан автономия ы өсөн ғүмерен бирергә лә әҙер.

–Большевиклар ысын коммунист түгел, алар коммунист битлеге кейеп алған залим, шовинист, империалист, – ти ул. – Коммунизм идея ын большевиклар уйлап сығармаған. Ул бик боронғо изге идея. Аның нигеҙендә “азатлыҡ, тигеҙлек, туғанлыҡ” шиғары ята... Большевиклар Совет власын халыҡты быуыу, ҡурҡытыу, ҡырыу ҡоралына әйләндерҙе.

Совет етәкселәренә әр саҡ шикләнеп ҡараған Хажиәхмәт Унасов та Сөләймән Мырҙабулатов кеүектәрҙең бер ҡатлы сәйәсәтенә ышанып ҡорал тапшырғас, үҙ башҡорто тарафынан атып үлтерелә.

Романда Бай ары ауылының абруйлы кешеләренән Собханғол ҡарт, Әхмәҙулла мулла, Йәнтүрә бай, оло ихтирам менән телгә алынған Абдрахман мулла, Барлыбай, Ҡотләхмәт, Йәнтеүәл, Мырҙагилде, Саяптан Мөхәмәтғәле, Байназар .б. образдар үҙҙәренең әхлаҡи сафлығы, кешелеклелеге менән йылы тойғолар ҡалдыра. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан Миңнекамал, Сафура, Әскәпъямал әбей, Гөлйы ан, Кинйә олтан, Аҙнабикә әбей кеүек персонаждар аша башҡорт тормошо тулыраҡ сағылдырыла.

Башҡорт автономия ын ҡорорға ынтылыштың урыҫ әм татарҙар ара ында оло риза ыҙлыҡ, ҡаты ҡаршылыҡ тыуҙырасағын тәүҙә күптәр иҙемләмәй. Автономия

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 182



ҡорабыҙ ҙа элекке ерҙәрҙе кире ҡайтарабыҙ, тип ябай ғына хыял йөрөтә улар. Башҡорт автономия ы ғәмәлгә ашып, ер еҙ ҡалыуҙан ҡото осҡан урыҫ крәҫтиәндәре үҙ хакимлығын нығытыу өсөн башҡорт ерҙәрен баҫып алырға тотона, тел менән бының закон боҙоу икәнен аңлатырға тырышҡан хужаларына ҡаршы көс ҡулланыуҙан да баш тартмайҙар. Уларҙың тәүге ҡорбаны – Зөлҡәрнәй. Байдәүләт отрядында йөрөгән был егетте дүрт ыбайлы урыҫ:

– Автономия кәрәкме еҙгә! Бына еҙгә автономия! Ер кәрәкме еҙгә? Бына еҙгә ер! Мә иңә автономия! – тип күҫәк менән туҡмап үлтерә.

Үҫмер ҡыҙы ҡыҙыл баҫҡынсылар тарафынан мәсхәрәләнгән Зәйнулланы волость идара ында, ерҙе урыҫҡа биреп китәбеҙме ни, тип ҡысҡырған өсөн башкиҫәр комиссар нагандан атып үлтерә. Аяғындағы быйма ын бирергә теләмәгән өсөн Нурлығаян ҡартты халыҡ алдында үлтереп китәләр. Ғизетдин ҡартты, беҙҙә андай аҡса ҡайҙан бул ын, тигән өсөн барлыҡ ауыл халҡы ҡаршы ында атып йығалар. Йәнтүрә бай, Оҙон Фәтхулла, Шәрәфетдин дә большевиктарҙың ҡан ыҙ баш-баштаҡлығы ҡорбанына әүерелә.

– Бөгөн-иртәгә донъя революция ы башланырға тора, – тип сығыш я ай кеше үлтереүсе комиссар. – Бөтә ер йөҙөнөң иҙелгән пролетариаты яҡты киләсәк өсөн коммунизм байрағы аҫтында революцион маршҡа баҫып, ҡан эскес капиталға ҡаршы аяу ыҙ көрәшкә ҡалҡа. Башҡорттар – күп ер биләгән паразит халыҡ. Улар йылы оя ҡороп, коммунизм дошмандарын үрсетә. Кисә мин ҡалтырамаҫ ҡулым менән еҙҙә оялаған дошмандарҙың бере ен дөмөктөрҙөм. Беҙҙең бурыс – паразит халыҡты бөтөрөп, уның ерен эшсән урыҫ халҡына алып биреү. Коммунизм дошмандарын үрсетеп ятҡан өсөн яза итеп мин еҙгә революцион отряд алып килдем. Ошо отряд ике аҙна буйы ауылға тулы ынса хужа була. еҙ уны ашатырға, бөтә теләген үтәргә тейеш.

Ошоноң кеүек баш-баштаҡлыҡтар аҡтар яғынан ҡыҙылдарға сыҡҡан башҡорт милли частәрен ҡорал ыҙландырғандан уң хәтәрерәк күренеш ала.

әр урыҫ ауылын үткәндә, крәҫтиәндәр бөтә өй эсе менән урамға сығып, башҡорттарҙы таяҡ менән туҡмап, бәргеләп оҙата торҙо, тип үрәтләй быны Ә. Бейеш. Урамдан барғанда бер ерән аҡаллы ҡарт урыҫ: “Автономия кәрәкме еҙгә? Бөтөрәбеҙ башҡортто!” – тип ҡулындағы күҫәк менән Хәбиргә елтәнә.

Ауылдарҙы талап йөрөгән Сукин отрядын Байдәүләт етәкселегендәге аҡлыҡ отряды Саяп ауылынан Байназар төркөмө ярҙамында оҫта ҡыйрата. Бер казак папаха ын ташлап киткәс, бөтә шик аҡ казактарға төшә. Әммә, оҙаҡ та үтмәй, Бай - арыға Кулаков отряды килеп ауылды талай әм Хәбирҙең ата ы Оҙон Фәтхулланы атып китә. Икенсе бер ҡыҙыл отряд башлығы Хәбирҙең, балалар астан үл енме ни, тигән йән әсеүе ҡатыш биргән орауына:

– ин, аҡ бандит, ишет! Башҡорттоң бере е ҡалмай үл ә үлеп бөт өн, ә Мәскәүҙең әр кеше енә беҙ көн айын өс ҡаҙаҡ икмәк бирергә тейеш! – тип екереп, алтатарын ҡулына алды.

Быныдай хәлдәр башҡорт ауылдарында йыш ҡабатлана. Баҫҡынсылар халыҡтың мөлкәтен тартып алып ҡына ҡалмай, меңәр умлыҡ түләүҙәр ала. Ҡаршы әйткәндәрҙе урынында атып йығалар. Смоленск губерна ы крәҫтиәндәренән торған ҡыҙыл полктың йыртҡыслыҡтары тарихта теркәлеп ҡалған.

Бына уның бер бите...

“Смоленск полкы Аллабирҙе яғынан Ташлыға, Троицкиға килеп, төп көсөн Алмалы, Ҡыҙыл Мәсет, Нуғай аша Кананикольскиға табан йүнәлт ә лә, юл ыңғайы яҡын башҡорт ауылдарын талай барҙы. Февралдең тәүге көнөндә полктың унлаған башкиҫәре, ыбай саптырып, Бай ары ауылына килеп инде. Килеп инеү менән улар күҙгә күренгән бөтә халыҡты урамға сығарып бер урынға өйөрҙө лә, ат өҫтөндә ҡайҡайып ултырған башлыҡ ымағыраҡ берәү е:

– еҙҙең ауылға ун ете мең ум түләү алына! – тип тамаҡ ярып ҡысҡырҙы.

Был үҙгә халыҡ шаҡ ҡатты. Башлыҡ ымаҡтың алдында торған Йәнтүрә ҡарт

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 183



аҙыраҡ иҫенә килгәс:

— Тауариш камандир, — тип ниҙер әйтмәк булғайны, теге башлыҡ:

— Мин иңә “товарищ” түгел, аллаяр! — тип аҡырып ебәрҙе. — Хәҙер үк йыйып бирегеҙ ун ете мең ум!

Ололоҡлап, ихтирам күр әтеп, “командир”ҙың күңелен йомшартырға уйлаған Йәнтүрә ҡарт, “товарищ” тиергә ярамағас, кем тиергә белмәй:

— Гаспадин әфисәр, — тип тегенең күҙенә ҡараны.

Армейсы ҡорт саҡҡан кеүек икереп китте лә:

— А-а, иңә господин кәрәкме? Офицер кәрәкме? Мә иңә господин! — тип аҡырып, Йәнтүрә ҡартты атып та йыҡты.

Шул ыңғайы башҡа армейсылар ҙа, бер кемгә тоҫҡамай-нитмәй, эркелеп торған халыҡ төркөмөнә ата башланы. Ҡото осҡан ауыл халҡы ҡысҡырышып, сарылдашып, тырым-тырағай төрлө яҡҡа ирпелде. Армейсылар аман туҡтамай, ҡасҡан кешеләр артынан атып ҡалды.

Халыҡты атып тараттҡас, үлеп, яраланып урамда ятып ҡалған кешеләргә иғтибар ҙа итмәй, армейсылар өй айын йөрөп таларға тотондо...”

Романдың кире образдары — башлыса урыҫ әм башҡа халыҡ вәкилдәренән. Улар исемлегенә урыҫ крәҫтиәндәре Мәтрәй, Фрол, ҡыҙыл отряд башлыҡтары Сукин, Таранов, Кулаков, волость милиция ы башлығы Петров .б. индерергә мөмкин. Петров үҙ ерен ҡурсырға барған Әбдрәхим ҡартты мылтыҡ төйҙә е менән төртөп йығып, уңынан күкрәгенән төйгәндә батыр ҡылан а ла, үҙен ошо ҡан ыҙлығы өсөн язалаған башҡорттар алдында ҡалтырап төшә.

Бай ары ауылы кеше е Талип, унның улы Халиҡ та ошо исемлеккә индереүгә лайыҡ. Талип ауылды ынйыҡҡан уҫал әҙәм ине, тиелә романда. Кешене ерле юҡҡа йыға уғыу, ишек алдына килеп ингән кеше малының аяғын уғып ындырыу унның өсөн бер ни тормай. Малайына яңылыш тейгән өсөн Талип Зәбир тигән малайҙы ике ҡолағынан тотоп күтәрә. Быңдай ҡылыҡтары, ә иң мө име, урыҫ ауылдарынан ат урлаған өсөн Талипты Себергә өрәләр. Халиҡ та, ата ына оҡшап, уҫал булып үҫә. Егет булып еткәс, Йәнтүрә байҙың ихата ына көпә-көндөҙ килеп инеп, этен уғып йыға ла, атын егеп, батман менән бал-майҙарын тейәп сығып юғала. Артабан беҙ Халиҡты ҡыҙылдар яғында күрәбеҙ. Тик иптәштәре Ирәндек яғына киткәс, Халиҡ ауылға ҡайта әм, ҡотороп, кеше ҡурҡытып йөрөй. Аҡ казактарҙы ауыл башында пулемет менән ҡаршы алып, артабан ҡасып ҡотолорға маташҡан Халиҡты барыбер дошман пуля ы тотоп ала.

Романдың аҙаҡҡы биттәре 1921 йылғы аслыҡта ауыл халҡы күргән михнәттәр тура ында бәйән итә. Хәбир, тағы ла бер нисә кеше ат егеп икмәкле Себер яҡтарына китә. Кемдәрҙер балаларын махсус йорттарға оҙатырға мәжбүр була, байтаҡ кеше үҙ өйөндә ятып үлә. Берәү бесәйен, икенсе е этен уйып ашарға мәжбүр бул а ла, аслыҡтан ҡотола алмай. Ашарға эҙләп урыҫ ауылына килеп ингән үҫмер Сәлмәнде асыҡ ишектән инеп, орамайынса икмәк алып ашап торғанда бер мәрйә әнәк менән сәнсеп үлтерә. Юлда аслыҡтан туңып үлгән башҡорттарҙың мәйеттәрен кемдәрҙер, мыҫҡыл итеп, саҡрым бағаналары кеүек ҡаҙап китә.

Шундай көндәрҙең бере ендә ауылда аяғына баҫып йөрөрлөк Байдәүләт менән Йәнгилдене олоҫ үҙәгенә мәйеттәрҙе күмергә ебәрәләр. “Ҡаҡ иҙәндә туҡырлап төн ҡунған Байдәүләт менән Йәнгилдене таң менән торғоҙоп сығарҙылар, тип үрәтләй автор был ваҡиғаны. Милиция идара ының алдына утыҙҙан артыҡ эшсе башҡорт йыйылған ине. Милицияның бер бүлмә енә индереп, уларға шыйыҡ боламыҡ эсерҙеләр ҙә, көрәк-кәйлә тоттороп, ауыл ситенә алып киттеләр. Ундағы өйөлөп ятҡан мәйеттәрҙе күреп, бары ы ла шаҡ ҡатты.

Мәйеттәр эргә енән ҙур ғына майҙан билдәләп, ҡарҙан әрсеттеләр, киң итеп ут яҡтырҙылар. Төшкә ҡәҙәр ут яғып, туң ерҙе иреткәс, бик ҙур итеп соҡор ҡаҙырға ҡуштылар. Хәл еҙ ирҙәр, әйләнгән айын бер-бере ен алмаштыра-алмаштыра,

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 184



кискә ҡәҙәр соҡор ҡаҙҙы. Иртәгә енә өйөлөп ятҡан мәйеттәрҙе берәм-берәм алып, соҡор төбөнә йышлап алырға тотондолар. Бер ҡат алып сыҡҡас, шуның өҫтөнә тағы ла ҡатлап алдырҙылар. Мәйеттәрҙең бөтә е лә бер ҡабым аҙыҡ эстәп килеп, үлеп ҡалған башҡорттар ине".

Артабан уҡыйыҡ.

"Ҡайтҡан саҡта Байдәүләт менән Йәнгилде саҡ аяҡ шылдырып бик яй ҡайтты. Ауыр эштән бигерәк, ҡара таш булып йөрәктәрен баҫып ятҡан ҡайғы уларҙың унғы хәлен алды.

– Өйҙә саҡта ауыл хәсрәте генә күренә ине, мында ил хәсрәте күренде, – тине Йәнгилде.

– Ил хәсрәтен күп күрҙем инде мин, – тип Байдәүләт ауыр итеп көр өндө. – Яу белән йөрөгәндә, күп ерҙә булдым. Башҡорттоң хәле бөтә ерҙә лә бер.

– Беҙҙең бөтөүебеҙ ошолор инде, былай булғас.

– Бәлки, тотош бөтмәбеҙ, ҡалырбыҙ әҙерәк. Әммә ил күрке булған, иң аҫыл, иң шәп ирләрҙе бөтөрҙөләр. Беҙ соҡорға күмгәннәр ара ында ла, моғайын, булған алар. Башҡорттоң билен ындырҙылар. Биле ынғас, ул зәғиф хәҙер. Аяғына баҫып, ҡалҡып тора алмаҫ инде мынан уң.

– еҙ, мына, яуҙа йөрөнөгөҙ. Шул саҡта урыҫты талап, башҡорттоң хәлен нығытып йөрөмәгән егеҙ. Алар беҙҙе талап нығыны бит.

–Беҙ талар өсөн йөрөмәнек. Азатлыҡ өсөн көрәштек.

– А-ай, азатлыҡ! Мәңгелек хыял! Нисәмә быуын башҡорт ирләре аның өсөн баш алған!"

Артабан Ә. Бейеш ҡот осҡос аслыҡтың эҙемтәләрен йомғаҡлай. Ун өсөнсө йылда биш йөҙҙән артыҡ йән булған Бай ары ауылында егерме икенсе йылдың яҙ-ында йөҙ етмеш ике генә иҫән кеше ҡалды, йәғни ауыл халҡының аны, бөтә башҡорт халҡының аны ымаҡ, өс тапҡырға кәмене. уғышҡа ҡәҙәре көтөү-көтөү малдан ун бер ат, ун дүрт ыйыр яҙға сыҡты...

Шулай ҙа романдың аҙағы күңел төшөнкөлөгөнән азат. Ҡасандыр ауыл йәштәре уйнаған, уңынан "партизан" урыҫтар ҡыуыш ҡороп яндырған Оҙон тирәк янына барып сыҡҡан Байдәүләт, инде ҡороған тигән ағастың төбөндә бер йәшел үҫенте күреп, шатланып ҡарап тора. Быны ы инде – артабан тормоштоң көйләнәсәгенә ишара.

Халҡыбыҙҙың 1917 йылғы ике инҡилап, Граждандар уғышындағы михнәт-аҙабы тура ында яҙылған әҫәрҙәр байтаҡ. Тик, Ғәйнан Хәйриҙең "Боролош", Имай Насыриҙың "Күҙәй", Фәрит Иҫәнғоловтың "Арыш башағы", әҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романдарынан айырмалы, Әкрәм Бейеш ваҡиғаларҙы социалистик реализм прициптары күҙлегенән түгел, ә тарихи ысынбарлыҡ юҫығында ынландырған. Ул йылдарҙа автор әле тыумаған бул а ла, шул дәүер ке-шеләре менән аралашып йәшәгән, тимәк, ишетеп бул а ла белгән. Уның "Башҡ-орт халҡының үткәне әм азатлыҡ өсөн көрәше" тигән үҙе иҫән саҡта нәшер ителгән китабы – быға асыҡ дәлил.

Был тарихи роман әр башҡорт кеше енең иғтибарына лайыҡ. Уны уҡып сығыу – зарурлыҡ. Әлбиттә, шул заманда тиңдәш еҙ яуызлыҡ ҡылған әҙәмдәрҙең ва-риҫтарына ҡарата дошманлыҡ тойғолары тергеҙеү, аҡлау өсөн түгел, ә тарихи ысынбарлыҡты белеү өсөн. Сөнки беҙ быға тиклем уны бер яҡлы ғына белә, шул арҡала күп имməттәрҙе яңылыш ҡабул итә килдек.

**Мәхмүт ХУЖИН**.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 185



# ЗАТ-АРАЛА ҒӘМ ТАРАЛА

Уҙған йылдың республикала “шәжәрә йылы” тип иғлан ителеүе халыҡты оҙайлы йоҡо онан уятып ебәргәндәй булды. Күптәр үҙенең онотола барған ата-баба ы, яҡын әм алыҫ туған-тыумаса ы менән ҡыҙыҡ ына башланы, ырыу ағасын – шәжәрә ен тергеҙергә тотондо, әр ауылда тиерлек ойошторолған осрашыуҙар, байрамдар ағай-эне, апай- еңлеләрҙе ҡайтанан таныштырҙы, ҡан-ҡәрҙәштәрҙе иҫкә төшөрҙө, туғанлыҡ ептәрен нығытты. Ошоларҙы уйлағанда республикабыҙ етәкселегенең ҡарар-иғланы ни тиклем дөрөҫ әм ваҡытлы булғанына инана ың. Юғи ә, арабыҙҙа башҡорттан манҡортҡа әүерелгәндәр аны ишәйгәндән-ишәйә бара ине бит.

Атай-олатайҙарын, инәй-өләсәйҙәрен, туғандарын онотҡан әҙәмдән ниндәйҙер изгелек, мәрхәмәтлек, ми ырбанлыҡ көтөүе ҡыйын. Был хаҡта бөйөк аҡыл эйәләре яҙмаларында ла, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадында ла күп әйтелгән. Үҙ шәжәрәңде, нәҫел-нәсәбеңде белеү башҡортта элек-электән мөҡәддәс бурыс аналған. Күренекле мәғрифәтсе-ғалим әм әҙип Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев та, ошо турала үҙ йөрөтөп, аҫаба башҡорт өсөн үҙенең сығышын, йәғни ырыуын белеү – иң мө им сифаттарҙың бере е, тип яҙып ҡалдырған.

Зат-ара ын, ырыуын яҡшы белгән кеше ис ҡасан да үҙен яңғыҙ, көс өҙ тойоп йәшәмәй, ергә ышаныслы баҫып, ғорурланып, ил амланып донъя көтә. Сөнки ауыр мәлдәрҙә унын таяныр таянысы, ҡайғы-хәстәрен уртаҡлашыр, ярҙамлашыр терәге була. Нәҫел-нәсәпте белеү олоно оло итеп, кесене кесе итеп күрергә, бер-береңә иғтибарлы, ихтирамлы булырға ла өйрәтә. Шәжәрәле кеше күптән инде гүр эйә е булған атай-олатайҙарын, инәй-өләсәйҙәрен әр саҡ хәтерендә аҡлаясаҡ, уларҙан ҡалған изге ҡомартҡыларҙы, мәңгелек йорттары булып ҡалған ҡәберҙәрен ҡәҙерләп, тәрбиәләп тотасаҡ. Үҙ затыңды, ырыуыңды өйөү тойғо онан туған халҡыңды, илеңде өйөү тойғо о ярала...

Яҙыусы әм публицист Зөфәр Толомғужиндың “Шәжәрә тәрбиәгә эйә” тигән китабын (“Ғилем”, 2007) уҡығанда тағы бер килеп шундайыраҡ уйхистәргә талып ултырҙым әле. Был китап – авторҙың оло маҡсатҡа ярашлы ғәжәйеп бер дәрт, ынтылыш менән башҡарған күп йыллыҡ хеҙмәт емеше. Уға мәғлүмәт, материал туплау ниәте менән автор республикабыҙҙың йөҙәрләгән ауылдарында булып, атлы-йәйәүле меңәр саҡрымдар юл үтеп, туҡ анға яҡын нәҫел-нәсәп, зат-араны асыҡлаған, уларҙың нәҫел сылбырын, шәжәрә ен төҙөгән.

Әлеге көндә Мәләүез, Ишембай, Бөрйән, Баймаҡ, Ғафури, Федоровка, Әбйәлил районларының күп кенә ауылдарында йәшәүселәр был китаптан үҙҙәренең зат-ырыуын, унын атама ы тарихын, яҡын туған-тыумаса ының исемдәрен генә түгел, борондан ҡулланылып килгән байтаҡ ырыу әм ара там-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 186



ғаларын да асыҡлай ала. Әлбиттә, автор быуаттар төпкөлөнә барып тоташыр тулы шәжәрәләр төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуймаған. Инеш үҙҙә үҙе әйтеүенсә, төп теләге – үҙ шәжәрә ен өйрәнә башлаусыларға йүнәлтмә биреү, мая алыу. Эште артабан дауам итеү өсөн архивтарҙа эҙләнергә, тарихи документтарҙы өйрәнергә кәрәк. Был и ә – әр зат-ара зыялыларының мөҡәддәс бурысы.

Башлаған оло изге эшен атҡарыуҙа ярҙам ҡулы уҙыусыларға ҙур рәхмәттәр уҡый автор. “Сәйәхәт юлында халҡым яҙмышы, унын бөгөнгө ө әм киләсәге өсөн борсолғандарҙың күп булыуы миңә дәрт, ил ам өҫтәне, – тип яҙа ул. – Йәш быуындың киләсәге өсөн янып-көйөп йәшәгәндәр, фатирға индереп, ихлас күңелдән әңгәмәләштеләр, файҙалы кәңәш бирҙеләр, ата-бабаларыбыҙҙың урындағы халыҡты зат-араларға бүлеп ғәйәт ҙур тәрбиәүи эш башҡарыуҙары менән тулы ынса килештеләр. Әллә нисә төрлө ә әмиәте булыуын әйтеп, бары ын да ентекләп, аңлайышлы итеп яҙыуҙы үтенделәр...”

Халыҡтың был үтенесен З.Толомғужин еренә еткереп, ихлас башҡарып сыҡҡан. Үҙ затының, нәҫеленең тарихын өйрәнергә теләүселәр өсөн бына тигән башланғыс алынған. Шуны ла әйтергә кәрәк: китап бары тик нәҫелнәсәп сылбырҙарынан ғына тормай, унда ҡай ы бер шәхестәр тура ында киң мәғлүмәт бирелгән, теге йәки был зат-араға бәйле ҡыҙыҡлы ваҡиғалар тасуир ителгән.

Төп өлөштө оҙата килгән “Исемдәр тарих өйләй” бүлегендә автор, боронғо әм хәҙерге башҡорт исемдәрен сағыштырып ҡарап, унғы йылдарҙа киң таралған я алма исемдәргә ҡарата үҙ ҡарашын белдерә, борсолоуҙарын әйтә. Был бүлек бигерәк тә яңы ғына ғаилә ҡорған йәштәр өсөн фә емле. Сөнки балаға исем ҡушыу – үтә лә яуаплы эш. Исем кешенең яҙмышына тәьҫир итә, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит.

Китап аҙағындағы “Туған тел – ҡиммәтле хазина” бүлеген дә автор, нигеҙҙә, йәштәргә төбәп яҙған. Туған телде юғалтыу халыҡтың ниндәй әләкәткә килтереүен конкрет миҫалдарҙа күр әтеп, ул көслө лә, бай ҙа, яғымлы ла булған телебеҙҙе күҙ ая ындай ҡәҙерләп аҡлау, үҫтереү, саф килеш киләсәк быуындарға тапшырыу мәсьәлә ен күтәрә.

Шулай итеп, Зөфәр Ғәли улы шаҡтай бай мәғлүмәтле, ғибрәтле хеҙмәт яҙып, спонсорҙар иҫәбенә донъяға сығарҙы. Унын был изге эше артабан да дауам итер, тулыландырылып, байытылып, ҙур тираж менән “Китап” нәшриәтендә лә баҫылыр, тигән өмөттә ҡалайыҡ.

**Миңлеғәли НӘҘЕРҒОЛОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 187



# Белем нуры сәскән йорт

Профессор Жәлил Кейекбаевтың музейы йүгерек  ыулы Йәнекәй  әм Мәндем буйындағы Ҡаранйылға ауылына олпатлыҡ, күркәмлек биреп ултыра. Йорттоң тирә-яғында уңған ҡуллы кеше хәстәрлеген тойоп үҫкән ағастар ҙа музей алдына килеп баҫыу менән тиҙерәк эскә инергә әйҙәй  ымаҡ. Тулҡынланып буҫағаны үтә ең дә документтар, китаптар, ҡулъяҙмалар  әм төрлө ҡомартҡылар донъя ына сума ың.



*Жәлил Кейекбаев музейы.*

Музей дүрт бүлмәнән (бүлектән) тора. Беренсе ендә профессор Жәлил Кейекбаевтың (Ғәбделжәлил Ғиниәтулла улы Кейекбаев) хронологик тәртиптә бала  әм үҫмер сағы, йәшлек йылдары сағыла. Бындағы документтарҙан  күренеүенсә, буласаҡ ғалим 1911 йылдың 25 октябрендә әкиәт донъя ылай матур тәбиғәтле Ҡаранйылға ауылында тыуған. Ата ы Ғиниәтулла За иҙулла улы заманының уҡымышлы ғына кешеләренең бере е була. Оло Үтәш мәҙрәсә ендә буласаҡ халыҡ шағиры Мәжит Ғафури менән бергә  абаҡ ала. Унан  уң Әрмет (хәҙерге Ишембай районы) мәҙрәсә енә юллана. Егерменсе йылдарҙа унын хужалығында ике ат, өс  ыйыр, бүтән ваҡ малдар булыуы билдәле. Әсә е – күрше Сәйетбаба ауылынан – Ғәрифә Мырҙаҡай ҡыҙы.

Буласаҡ профессорҙың белем алыу мәле революция, Граждандар  уғышы йылдарына тура килә. Ул ата ы ярҙамында аҙмы-күпме уҡыу-яҙыуға өйрәнгәс, бер ҡыш Сәйетбаба мәҙрәсә енә йөрөй. Аслыҡ йылдарынан (1921 – 1922)  уң, башланғыс класҡа уҡ-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 188





*Директор Ғ. Шәйәхмәтов өйләй...*

ырға бара. 1924 – 1925 уҡыу йылында Ташлы урыҫ мәктәбендә белем ала. Унан уң Маҡар (хәҙерге Ишембай районы) крәҫтиән йәштәре мәктәбен тамамлай. Ошо уҡыу йорто тура ында үҙ сыҡҡанда, профессор Жәлил Кейекбаевтың тормошон әм ижадын өйрәнеүсе ғалимдарҙың бәғзеләре “колхозсы йәштәре мәктәбе” тип яҙалар. 1925 йылда, колхоздар ойоштороу тура ында үҙ ҙә сыҡмаған мәлдә, ниндәй “колхозсы йәштәре мәктәбе” бул ын, ти. Бәләкәй генә ошо хата ғалимдарҙың бүтән яҙмаларының дөрөҫлөгөнә шик тыуҙыра, ышандырмай. Был бүлектә шулай уҡ Жәлил Ғиниәтулла улының туғандары тура ында ла материалдар бар.

Икенсе бүлмә профессорҙың әҙәби әм ғилми эштәренә арналған. Музейҙағы күргәҙмәләргә ҡуйылған документтарҙан күренеүенсә, Жәлил Кейекбаев Өфө педагогия техникумында (1929 – 1932), Морис Торез исемендәге Мәскәү Сит ил телдәре институтында (1933 – 1937) белем алғас, Рошаль (Мәскәү өлкә е) урта мәктәбендә немец теле уҡытыусы ы була. Өфөгә ҡайтып, Авиация институтында (1938 – 1941), Климент Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтында (1941 – 1942) немец әм инглиз телдәрен уҡыта. Бөйөк Ватан уғышы мәлендә, юғары уҡыу йорттарында белем биреү процесы туҡталыу сәбәпле, тыуған яҡтарына ҡайта, Ғафури районы Сәйетбаба урта мәктәбе директоры була.

Жәлил Кейекбаев педагогия техникумында уҡыған осорҙа ижади эш менән шөғөлләнә башлай. “Ж. Табын”, “Кәлсер Табын” имзалары менән уның республика гәзит әм журналдарында шиғырҙары, әкиәттәре, ҡобайырҙары баҫылып сыға. Был тәңгәлдә шуны әйтеү кәрәктер: уның ҡобайырҙары үҙенсәлекле, халыҡсан, әр фекере бөйөк Аҡмулланың әйтер үҙҙәренең дауамы булып ҡабул ителә. Мәскәүҙә Сит ил телдәре институтында алған белемен камиллаштырыу йә әтенән ул тәржемәгә тотона. Бөйөк немец шағирҙары Иоганн Вольфганг Гете (1749 – 1832), Генрих Гейне (1797 – 1856) шиғырҙарын, Якоб Гримм (1785 – 1863), Вильгельм Гримм (1786 –1859) әкиәттәрен, Эрих Вайнерт, Вилли Бредел хикәйәләрен әм шиғырҙарын, атаҡлы антифашист Фридрих Вольфтың “Профессор Мамлок” драма ын, венгр халыҡ әкиәттәрен башҡорт теленә тәржемә итә. Бөйөк Ватан уғышы йылдарында патриотик темаға очерктар, повесть әм хикәйәләр яҙа, ҡобайырҙары менән төрлө аудиторияларҙа сығыш я ай. “Туғандар әм таныштар” романына тотона. Мәскәүҙә СССР Фәндәр академия ының Тел белеме институтында аспирантураны тамамлай әм 1948 йылда "Башҡорт теленең дөрөҫ әйтелеше" тигән темаға филология фәндәре кандидаты дәрәжә енә диссертация яҡлай.

Буласаҡ профессор Жәлил Кейекбаевтың ғилми эшмәкәрлеге Морис Торез исемендәге Мәскәү Сит ил телдәре институтында уҡыған осорҙа башлана. Уның зи ененә тәүге фәнни ойотҡоно атаҡлы төрки телдәр белгесе, башҡорт лингвистика ына ҙур өлөш индергән СССР Фәндәр академия ы ағза-корреспонденты, профессор Николай Дмитриев (1898 – 1954) ала. Башҡорт дәүләт педагогия институтында (1957 йылдан Башҡорт дәүләт университеты) уҡытыу менән бергә, ул ең ыҙғанып ғилми эштәр алып бара. 1960 йылда Мәскәүҙә яҡлаған “Башҡорт теленең фонетика ы” исемле бай йөкмәткеле докторлыҡ диссертация ы элекке СССР-ҙың милли телдәр ғилеменә ҙур өлөш индерә. Профессор Жәлил Кейекбаевтың төрлө йылдарҙа яҙған “Башҡорт әм татар телдәренең грамматика ы”, “Төрки телдәрҙең сағыштырма грамматика ы”, “Урал-Алтай тел белеменә инеш”, “Хәҙерге башҡорт теленең лексика ы әм фразеоло-

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 189



гия ы” әм башҡа фәнни эштәре әлеге көндә лә бик актуаль. әр йыл айын ғалимдар әм аспиранттар үрҙә әйтеп үтелгән әҫәрҙәр буйынса ғилми-практик конференциялар, симпозиумдар үткәрә, фәнни докладтар менән сығыш я ай, диссертациялар яҡлай.

Музейҙың өсөнсө әм дүртенсе бүлмәләрендә профессор Жәлил Кейекбаевтың Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республика ы Верховный Советы депутаты, Азия әм Африка илдәре теләктәшлегенең Совет комитеты ағза ы, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре (1967), СССР-ҙың Ленин ордены (1967), “Почет Билдә е” ордены (1961) әм башҡа наградалар менән бүләкләнеүе тура ында документтар, танытмалар, ҡотлау телеграммалары ҡуйылған. Иң түрҙә, әр кемде оҡландырып, атаҡлы ғалим әм яҙыусының мандолина ы урын алған. Музейҙың этнографик мөйөшө лә зауыҡ менән эшләнелгән, хәҙерге быуын вәкилдәрен ҡомартҡылар менән таныштыра-таныштыра, XX быуаттың тәүге ярты ына алып керә. Ә Ғафури районынан сыҡҡан күренекле яҙыусыларҙың портреттар галерея ы музейға үҙенсәлек өҫтәй. Башҡортостандың халыҡ рәссамы Рәшит Зәйнетдиновтың был эштәренән музейға ингән әр кем теге йәки был яҙыусының йөҙөнән әҫәрҙәренең сағылышын эҙләй. Таба әм шатлана.

Уҡытыусы ының, яҡташының фәнни хеҙмәттәрен билдәләп, яҙыусы әм ғалим Әнүр Вахитов бына нимә тигән: “Жәлил Кейекбаев башҡорт халҡына ҡағылышлы бөтә нәмәне: сәнғәтте, әҙәбиәтте, фәнде яҡшы белгән кеүек, фольклорҙы ла, үҙе әйтмешләй, “ ыу кеүек эскән” әм яратҡан кеше ине. Уның халыҡ көйҙәрен йырлағаны, мандолинала сирткәне йә пианинола уйнағаны әле лә ҡолаҡта яңғырай кеүек. Шуға ла уның фәнни хеҙмәттәрендә ғилми фекерҙе раҫлаусы күренеш итеп фольклор материалдары киң ҡулланыла, был бай сығанаҡ художестволы әҫәрҙәренә бер йәм, үҙенсәлекле стиль ыҙаты өҫтәй. Шуға ла уның әҫәрҙәренә үрәтлелек, төҫтәр муллығы әм музыкаллек, бай ритмик интонацион яңғыраш хас”.



*Музейҙың этнографик мөйөшө.*

Профессор Жәлил Ғиниәтулла улы Кейекбаевтың Ҡаранйылға ауылындағы музейы тура ында үҙ сыҡҡанда уны ойоштороуҙа ҙур көс алған Ғиндулла Шириəздан улы Шәйәхмәтов хаҡында әйтеп үтмәү яҙыҡ булыр. Ул – атаҡлы ғалимдың уҡыусы ы, 1957 – 1961 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетында белем алғанда Жәлил Кейекбаевтың лекцияларын тыңлаған.

Профессорҙың ғилми эштәренең асылын яңы быуын вәкилдәренә аңлатыу кеүек мө им бурысты үҙ иңенә алып, ул тәүҙә Сәйетбаба урта мәктәбендә музей ойоштора. Материалдар, ҡомартҡылар йыя әм профессор Жәлил Кейекбаевтың тыуған төйәгендә 140 м² күләмендәге ҙур музей асыуға бөтә көсөн, белемен ала. Бөгөн “Рәсәйҙең атҡаҙанған уҡытыусы ы”, “Почет Билдә е” ордены кавалеры Ғиндулла Шәйәхмәтов етәкселек иткән музейҙа 432 берәмек төп, 400-ҙән артыҡ ярҙамсы фонды бар. Бында әҙәбиәткә арналған кисәләр, осрашыуҙар үткәрелә. Данлыҡлы Ғафури районы Йәнекәй тау битләүендәге Ҡаранйылғаны данлап ултырған ыҡсым, матур йорт арҙаҡлы ғалимға, үҙенсәлекле яҙыусыға әйкәл булып, белем нуры сәсеп ултыра.

**Фәнис ЯНЫШЕВ.**

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 190



***

Республикабыҙ йәмәғәтселеге Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты алдындағы күркәм майҙанда мәш үр шағир-мәғрифәтсе Аҡмуллаға әйкәл асылыу уңайынан оло ғорурлыҡ кисерҙе.

Тантананы Өфө ҡала ы хакимиәте башлығы Павел Качкаев асты. Йыйындағы халыҡты Республика көнө менән ҡотлағандан уң, Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов түбәндәгеләрҙе ыҙыҡ өҫтөнә алды:

– Мифтахетдин Аҡмулланың тормошо әм ижады йәш быуынды тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай, шиғырҙарының бәҫе аман да кәмемәй. Ошо юғары уҡыу йортонда М. Аҡмулла исемендәге премияға лайыҡ булған уҡытыусылар эшләй. Университет – иң яҡшы вуздарҙың бере е, сөнки бында белгестәр республиканың төрлө тармаҡтары өсөн әҙерләнә. Ышанам: мө абәт әйкәл өфөләрҙең генә түгел, баш ҡала ҡунаҡтарының да ятраҡан урынына әйләнәсәк.

Мәғрифәтселек даны байтаҡ ҡәрҙәш илдәргә танылған М. Аҡмуллаға әйкәл асыуҙа Ҡаҙағстан Республика ының Баишев исемендәге Аҡтүбә университеты профессоры Бекежан Ахан да ил амланып сығыш я аны. Унын әйтеүенсә, ҡаҙаҡтар ҙа башҡорт шағирын яҡшы белә, ике халыҡтың туғандарса мөнәсәбәтендә, ике вуздың дуҫтарса бәйләнешендә Аҡмулланың яҡты мираҫы оло ә әмиәткә эйә. Баҡ аң, Аҡмуллаға арналған шиғриәт кисәләрендә ҡаҙаҡ студенттары унын шиғырҙарын башҡортса ятлап ишеттерә икән. Артабан БДПУ ректоры Раил Әсәҙуллин, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев өйләне.

Ҡурай моңо аҫтында әйкәлде БР Президенты М.Рәхимов, Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе К.Толкачев, Хөкүмәт Премьер-министры Р.Сарбаев асты. Күренекле әҙиптәр, ғалимдар, башҡа ҡунаҡтар Аҡмулла әйкәленә сәскәләр алды.

... әйкәл-композиция конкурс нигеҙендә 16 проект ара ынан айлап алынған. Скульпторы – Владимир Дворник, архитекторы – Дамир Мәғәфүров. Уйсан Аҡмулла йәш дуҫтары – шәкерттәр ара ында ултыра, ҡараштары алыҫҡа төбәлгән.

***

Өфө дәүләт опера әм балет театры эргә ендә мәш үр композиторыбыҙ, СССР-ҙың, РСФСР-ҙың, БАССР-ҙың халыҡ артисы әм РСФСР-ҙың М.И. Глинка исемендәге дәүләт премия ы, Салауат Юлаев исемендәге республика премия ы лауреаты За ир Исмәғилевҡа әйкәл асылды. Тантанала Башҡортостан Республика ы Президенты Мортаза Рәхимов, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев, БР Президенты Хакимиәте етәксе е Азамат Сәғитов, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев, РФ Композиторҙар союзы секретары, РФ-ның халыҡ артисы, профессор Ширвани Чалаев әм башҡа рәсми вәкилдәр ҡатнашты.

Сараға йыйылған халыҡты ҡотлап, Башҡортостан Республика ы Президенты былай тине:

– Бөгөн Башҡортостан мәҙәниәте тарихында иҫтәлекле ваҡиға – бөйөк композитор За ир Исмәғилевҡа әйкәл асабыҙ. Белорет районының Үрге Сермән ауылында тыуып үҫкән ябай егет ижадтың юғары үрҙәрен яулауға өлгәште.

За ир Исмәғилев исемен йөрөтөүсе Өфө дәүләт сәнғәт академия ы был арала 40 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Шул айҡанлы уҡыу йорто ректоры Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов академия тарихы халҡыбыҙҙың бөйөк улы За ир Ғариф улының яҙмышынан айырылғы ыҙ булыуын ыҙыҡ өҫтөнә алды. Ул композиторға әйкәл ҡуйыуҙа ярҙам күр әтеүселәргә оло рәхмәтен белдерҙе.

***

Башҡорт дәүләт филармония ында Республика көнөнә арналған шиғыр әм йыр байрамы үткәрелде. Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе Рауил Бикбаевтың инеш үҙенән уң сәхнә әҙиптәргә әм артистарға бирелде. Тамашасылар алдында Абдулхаҡ Игебаев, Марат Кәримов, Рәшит Шәкүр, Ирек Кинйәбулатов, Әнисә Та ирова, Хәсән Назар, Риф Мифтахов, Ҡәҙим Аралбай, Гөлфиә Юнысова, Ғәзим Шафиҡов, Риф Тойғон, Фәниә Чанышева, Рәдиф Тимершин, Николай Грахов, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Мөхәммәт Закиров, Зөфәр Вәлит, Лариса Абдуллина әм башҡалар сығыш я аны.

Башҡорт, рус, татар телдәрендә яңғыраған шиғырҙар әм йырҙар халыҡ тарафынан ихлас ҡабул ителде. Кисәне шағирҙар Тәнзилә Дәүләтбирҙина менән Рәмил Йәнбәк алып барҙы.

***

Дыуан районы үҙәге Мәсәғүт мәҙәниәт арайында Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Тимер Йосоповҡа 70 йәш тулыу айҡанлы тантана үтте. Яҙыусыны тәбрикләргә дыуандар ғына түгел, күршеләре – Мәсетле, Салауат, Ҡыйғы районы вәкилдәре лә килгәйне.

Юбилярҙы Дыуан халҡы исеменән район хакимиәте башлығы Владимир Солин ҡотланы, мәсетлеләр исеменән район хакимиәте башлығы Юнир Солтанов үҙ алды, Салауат районы хакимиәтенең кадрҙар бүлеге начальнигы Рәмис Урманшин йырлымоңло сәләмен еткерҙе. "Урал-тау" ауыл хужалығы предприятие ы рәйесе Та ир Зарипов халыҡ шағирына ат бүләк итте.

Кисәлә ҡәләмдәшен күркәм байрамы менән ҡотлау өсөн Өфөнән – Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары Риф Тойғонов, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Ирек Кинйәбулатов, шағир Салауат Әбүзәр ҙә үҙ алды. Ҡотлауҙар, бүләкләүҙәр әм теләктәр Мәсәғүт педагогия колледжының ҡурайсылар, "Янғантау" санаторийының бейеүселәр ансамбленең дәртле-моңло сығыштары менән аралашып барҙы.

Иртәгә ен Өфөнән килгән яҙыусылар Дыуан республика лицей-интернаты уҡыусылары алдында ла сығыш я аны.

***

Ғафури районында танылған шағирә, прозаик Гөлнур Яҡупованың ижадына арналған саралар булып үтте. Тәүге осрашыу халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуған ауылы Еҙем-Ҡаранда уҙҙы: шағирә бөйөк ҡәләмдәшенең әйкәленә сәскәләр алды, мемориаль музейына китаптарын бүләк итте, мәҙәниәт йортонда ауыл халҡы алдында сығыш я аны. Мәктәп уҡыусылары концерт күр әтте.

Артабан Гөлнур Яҡупованы республика тарихи-мәҙәни үҙәге Сәйетбабаның мәҙәниәт арайында яҡташтары, ҡәләмдәш дуҫтары ҡаршы алды. Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлнур Сәфәрғәлиева, район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Ғәлинур Ҡалмурзин әм башҡа ойошмалар вәкилдәре, Өфөнән, Стәрлетамаҡтан килгән яҙыусылар Әмир Әминев, Марс Әхмәтшин, Гөлфиә Юнысова, Ғиниәт Ҡунафин, Кәбир Аҡбашев, Мөнир Ҡунафин, Башҡортостан радио ы әм телевидение ының күренекле хеҙмәткәрҙәре Лира Фәйзуллина менән Шәүрә Ғилманова әм башҡалар шағирәне юбилейы әм “Әҙәм вә ауа” тип аталған яңы китабы менән тәбрикләне.

***

Гөлфиә Юнысованың 60 йәшлек юбилейы айҡанлы Әлшәй районының Себенле мәктәбендә, М. Буранғолов исемендәге башҡорт лицейында, үҙәк китапханала әм район мәҙәниәт арайында әҙәби кисәләр үткәрелде.

Район китапхана ында шағирәнең ижады тура ында ҡыҙыҡлы әңгәмә барҙы, бында уның "Ғүмер юлы" тип аталған яңы китабы түргә ҡуйылып, юбилярға арналған китап күргәҙмә е лә ойошторолғайны.

Гөлфиә Юнысова – "Почет Билдә е" ордены кавалеры, . Дәүләтшина, М. Аҡмулла исемендәге премиялар лауреаты, Рәсәйҙең әм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Ошо маҡтаулы исемдәргә "Әлшәй районының почетлы гражданины" тигән исем дә өҫтәлде.

уңынан шағирәнең "Ғүмер юлы" тигән йыйынтығы тәҡдим ителде. Автор орауҙарға яуап бирҙе, китабы тура ында өйләне. Шағирәнең ҡәләмдәш дуҫтары: Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе урынбаҫары Риф Тойғонов, прозаик Фәрзәнә Аҡбулатова, шағирә Дилә Булгакова сығыш я аны.

Артабан Гөлфиә Юнысова әм Өфөнән килгән ҡунаҡтар район мәҙәниәт арайына барҙы. Район уҡыусыларының "Каурый ҡәләм" ижади берекмә е ағзалары үҙҙәренең шиғри күстәнәстәрен уҡып ишеттерҙе.

Agidel 11:Agidel 11.qxd 14.04.2009 0:25 Page 192



Шағирә райондың иң талантлы йәш әҙәбиәтселәре өсөн үҙ премия ын булдырғайны. Кисәлә сираттағы лауреаттарға китаптарын әм аҡсалата премиялар бүләк итте.

Башҡортостандың халыҡ артистка ы Светлана Хәкимова Гөлфиә Юнысова шиғырҙарына яҙылған популяр йырҙарҙы башҡарҙы. Гөлфиә Аҙнағол ҡыҙының ире – яҙыусы әм ғалим, филология фәндәре докторы Мирас Иҙелбаев та сығыш я аны.

Юбилярҙы район Советы рәйесе А. Ш. Тереғолов әм район хакимиәте башлығы урынбаҫары З. З. Әхмәтов ҡотланы.

***

Баш ҡалабыҙҙың Мостай Кәрим исемен йөрөткән 158-се гимназия ында йыл айын халыҡ шағирының тыуған көнөндә “Мостай Кәрим уҡыуҙары” уҙғарыла. Быйыл бындай саралар бүтән мәктәптәрҙә лә үтте. Ә 158-се гимназияға 20 октябрҙә Өфөнөң төрлө лицей, гимназияларынан, Келәш мәктәбенән дә уҡыусылар килгәйне. Үҙ мәктәптәрендә уҙғарылған конкурстарҙың еңеүселәре 158-се гимназия сәхнә ендә өнәрҙәрен күр әтте. Шиғырҙар, йырҙар яңғыраны, сәхнәләштерелгән әҫәрҙәр күр әтелде.

Байрамда рәсми вәкилдәр ҙә ҡатнашты. Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов, Киров районы хакимиәте башлығы Юлай Ильясов, РФ Дәүләт Дума ы депутаты Рима Үтәшева әм башҡалар Мостай Кәримдең Башҡортостан мәҙәниәтендәге урыны әм роле, уның әҙәби мираҫының ҡиммәте хаҡында өйләне, уның васыяттарына тоғролоҡ аҡлағандары өсөн балаларға рәхмәт белдерҙе.

“Мостай Кәрим уҡыуҙары” конкурсында еңеүселәргә бүләктәр, Маҡтау грамоталары тапшырылды.

Шағирҙың улы Илгиз Кәримов менән ҡыҙы Әлфиә Кәримова уҡыусыларға матур байрам ойоштorғандары өсөн рәхмәт әйтте.

***

Өфөнөң 91-се лицейында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнәләр. Башҡорт теле әм әҙәбиәте уҡытыусы ы Зәкинә Хисамова, телгә ихтирам уятыу сараларының бере е – башҡорт телен яҡшы белеүсе әҙиптәр менән осрашыуҙар ойоштороу, тип иҫәпләй. Октябрь айында өлкән класс уҡыусылары шағирә Тамара Ғәниева менән осрашты. Әҙибә уҡыусыларға башҡорт әҙәбиәтен ижад итеүсе шағирҙар, прозаиктар, “Ағиҙел” журналының эшмәкәрлеге, Мостай Кәрим ижадының үҙенсәлектәре хаҡында өйләне. Рус әм башҡорт телендә шиғырҙар уҡыны, уҡыусылар әм уҡытыусыларҙың күп анлы орауҙарына яуап бирҙе. Уҡыусылар ҙа әҙибәнең шиғырҙарын ике телдә уҡып ишеттерҙе. Башҡорт телен яратып өйрәнеүҙәре, башҡорт әҙәбиәтенә оҡланыуҙары хаҡында белдерҙе.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзында ике шағирә – Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премия ы лауреаты, "Башҡортостан" гәзите хәбәрсе е Лариса Абдуллина менән "Бельские просторы" журналының баш мөхәррир урынбаҫары Светлана Чураеваның ижад кисә е булды.

Лариса менән Светлана – әҙәбиәткә ныҡлы аяҡ баҫҡан шағирәләр. Шиғриәт өйөүселәр Ларисаны " ине күргән яҙым", "Наҙлы мәлем ҡабатланыр ымаҡ", "Уйыларҙы уйландырып", "Еләк тәме" исемле китаптары аша бел ә, Светлана "Если бы судьбой была я" романы, "Ниже неба" повесы, шиғырҙары аша таныш.

Кисәгә шағирәләрҙең ҡәләмдәштәре, студенттар, Башҡортостандың төрлө райондарынан килгән уҡытыусылар йыйылды. Улар ике шағирә менән бер юлы осрашып өйләшеүгә бик ҡәнәғәт булып, бер-бер артлы орауҙарын яуҙырҙы. уңынан ошондай ил амлы мәл өсөн шиғриәт али әләренә рәхмәт әйтеп, сәскәләр бүләк итте.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Башҡортостан мәғариф үҫтереү институты хеҙмәткәрҙәрен 75 йыллыҡ күркәм юбилейҙары менән ихлас ҡотлайбыҙ. Республика мәғариф система ында институттың башҡа бер ниндәй ойошма ла алыштыра алмаҫлыҡ үҙ урыны бар. Уҡытыусылар уҡытыусы ын туплаған коллективҡа иң изге иҫәпләнгән аң-белем таратыу эштәрендә артабан да ижади уңыштар, фәнни асыштар, рәхмәтле тыңлаусылар насип ит ен.

Мәғрифәтселек эшмәкәрлегендә маҡсатыбыҙ уртаҡ, юлыбыҙ уң булыуын теләп:

**“АҒИҘЕЛ”селәр.**